**Камил Йыһаншин**

**Росомаха тайганы һайлай**

**Камил Йыһаншиндың прозаһы**

Камил Йыһаншин бик етди, тәбиғи һәм юғары рухлы прозаик. Уның әҫәрҙәрендәге йәнлектәр, ҡош-ҡорт,ағастар, ҡаялар,йылғалар сюжет ҡоролошона ярҙамсы фон булып ҡына ҡатнашмай, һүҙ оҫтаһының күңел йомартлығына һуғарылып йәшәй, аралаша, әйтерһең дә кешеләргә ябай төшөнсәләрҙе аңлатырға теләй улар: әҙәм Тәбиғәт батшаһы түгел, ни бары уның бер өлөшсәһе генә, хатта ки, иң шәп өлөшсәһе лә түгел әле.

Уның “ Йомарт Буге”, “Маха, йәки һыуһар тарихы”, “Боцман” тигән тайга йәнлектәре хаҡындағы повестары һутлы тел, тәбиғәт буяуҙары менән һуғарылған, ҡыҙыҡлы сюжеттары йәнлек, хайуандарҙың холоҡ- фиғелен яҡшы белеүе хаҡында һөйләй.

Бер осор Уссурия шырлыҡтары араһында йәшәп алыуы Камилды йәнлектәр, йыртҡыстарса тойомларға һәм уйларға, әйләнә-тирәгә әҫәрҙәрендәге геройҙар күҙе менән ҡарарға өйрәткәндер.Шул арҡала яҙыусының геройҙарына беҙ , Есенин әйтмешләй, “кесе туғандарыбыҙға” хөрмәт менән ҡарай башлайбыҙ.

“Росомаханың кире ҡайтыуы” повесына эпиграф итеп яҙыусы В.К. Арсеньевтың Дерсу Узалаһының һүҙҙәрен ала: “Йыртҡыстар ҙа кеше ул, тик телдәре генә башҡа һәм дүрт аяҡлап йөрөйҙәр”. Камил Йыһаншин да ана шундай уҡ фекерҙә.

Кешелек йәмғиәте йәнлектәрҙе ябайлаштырып ҡабул итә. Уларҙың холоҡ-фиғелен рефлекс һәм инстинкттар менән аңлата. Имештер ҙә, йәнлектәр фекерләүҙән азат, фекерләү, йәнәһе лә, кешеләргә генә хас.Ә ентекләп күҙәтеүҙәр , йорт хайуандарын ғына булһын, уларҙың фекерләү һәләте барлығын күрһәтә бит! Эйе, кеше кеүек түгел, әлбиттә, бер ҡатлыраҡ, әммә уларҙың да, кешеләрҙеке кеүек үҙ характеры, ғәҙәттәре, маҡсаттары бар. Ҡайһы берҙәренең камил ойошҡан берләшмәһенә кешеләр көнләшерлек тә әле.

Камил Йыһаншиндың яңы повесы тайганың иң серле, һирәк осрай торған йәнлектәренең береһе – росомаха хаҡында.

Уҡысыларҙы ғәҙәти булмаған тулҡынландырғыс Тәбиғәт донъяһына саҡырам.

**Николай Николаевич Дроздов,** М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты профессоры, “ В мире животных” телетапшырыуҙарының авторы һәм алып барыусыһы.

**Росомаха тайганы һайлай**

повесть

**Беренсе бүлек**

**Ҡупырыҡ**

*Йыртҡыстар ҙа кеше ул, тик телдәре генә башҡа һәм дүрт аяҡлап йөрөй!*

*Дерсу Узала*

Беренсе глава

**Ҡар күскене**

Ҡойон армыттарҙың боҙло ҡуйынынан үҙәнгә табан йүгерә ине. Ағастар, иҫерек кеше кеүек, тегеләй ҙә, былай ҙа сайҡалыша. Ел ҡарағайҙарҙың итәктәрен күтәреп-күтәреп, ас януар кеүек олой... Тайга ҡурҡыныс итеп ыңғыраша. Киң яурынлы ҡарт кедр ағасының да быуындары шытырлап ҡуя. Елдең сираттағы ҡарлы ҡатыш ажарынан ул ергә эйелде. Аумаҫ өсөн тирәһендә уралған ыбыр-сыбыр ағастарға йәбешмәксе булды, тик анауындай мәғрур ағасты кем ҡурсалай алһын, ҡартлас уларҙың һәммәһен дә имгәтә-имгәтә йомшаҡ ҡар өҫтөнә ауып китте һәм яртылаш шул ҡар эсенә сумды.

Байтаҡ күрҙе ул быndай бурандарҙы, бирешкәне юҡ ине, быna бит, был юлы сыҙаманы, йәшерәк үҫентеләрҙең аяғы аҫтына ауып төштө. Борхоп киткән ҡар туҙандары ултырып та бөтмәне, әрәмәлек араһынан айыу балаһына оҡшаған ялбыр ҡупырыҡ шар килеп сыҡты һәм ҡаялар яғына табан шыуышып китте. Росомаха. Төнгө һунарҙан уңманы ул. Таңға тиклем йүгерекләне, бер генә яңы эҙ, берәр төрлө еҫ-оҫ тап булһасы! Ә көндөң бынаулайтып боҙолоп китеүе – һунарҙың уңышлы булырынан бөтөнләй төңөлдөрә.

Росомаха тау шишмәһе янында урынлашҡан ике яҫы таш араһындағы өңөнә табан ыңғайланы.Балаларҙы тамаҡландырырға кәрәк бит. Шишмәнең һайыраҡ тирәһендә танауына сел еҫе килеп бәрелде.(Тайга йәнлектәре әйләнә-тирәне, кешеләр кеүек күҙ менән түгел, еҫ аша таный).

Йыртҡыс аҙымдарын һағайтты һәм ҡар аҫтынан аңҡыған еҫте тоҫмаллап, ҡоштоң йоҡлап ятҡан урынына  һикерҙе. Ҡанаты ҡыҫылған сел ҡағынырға ла өлгөрмәне. Ул арала яҡын тирәлә йоҡлап ятҡан селдәрҙең ҡағыныуынан бер нисә аҡ фонтан хасил булды.

Бер нисә минуттан ҡоштан бер өйөм ҡаурыйҙар ғына тороп ҡалды.Көтөлмәгән ризыҡ росомаханың кәйефен күтәреп ебәрҙе һәм ул, йүгере п барған ыңғай, башы аша тәкмәс атып  ҡуйҙы.

Тау ярығына килеп тә етте. Был тирә һил, аҫылынып торған ҡаялар уны ҡар өйөрмәләренән  ышыҡлай. Ҡупырыҡ ,көрт  ҡаплап киткән өңөрҙө яҫы табандары менән таҙартып, оҙон коридор  аша эскәрәк үтте һәм мөңгөрләп  ҡуйҙы, шунан ваҡ ботаҡтар, үләндәр түшәлгән урынына барып ятты.Арыған.Уны асыҡҡан бала-сағаһы һырып алды һәм имсәктәренә килеп  ҡаҙалды. Тәне буйлап рәхәт кенә тулҡындар йүгереште һәм Ҡупырыҡ ойоп та китте.

Уянғас,  Ҡупырыҡ  ҡуйы йөнлө  туны эсенә  инеп сумған балаларынан һаҡ ҡына арынды ла тышҡа сығып китте. Тәбиғәттә һиллек урынлашҡан, был уның кәйефен күтәреп ебәрҙе.Сағыу ҡояштың нурҙарынан  сағылып күҙе ҡыҫылды. Тирә-яғын байҡап алды.Шишмәнең аҡ таҫмаһы өҫтөндә ваҡ ҡына алмастар ялтыраша. Бурандан һуңғы тайғаны танырлыҡ та түгел.Ағастарҙан һынып төшкән ботаҡтар, ҡайҙандыр осоп килгән япраҡтар туҙышып ята.

Баш осонда, сәләм биргән кеүек, суҡтурғай сырылдап ҡуйҙы.Бормалы һарҡыуҙа ошо тирәлә йәшәп ятҡан һеләүһендең эҙҙәре күренә.Росомаха быуаҙ  сағында үҙенең ялбыр арланы менән шул бесәйҙең тырнағынан ҡуянын тартып алғандарын иҫенә төшөрҙө. Сыбар төҫтәге һеләүһен башта уҫал  итеп ыҫылдап маташты, ләкин арландың әсе  еҫтәр сығарып, тик росомахаларҙа  ғына  була  торған мускус  биҙҙәренең  шыйыҡсаһы менән сәптереп ебәреүе булды, һаҫыҡ еҫтән тыны быуылып, ситкә һикерҙе һәм табышын ташларға  мәжбүр булды.

Бөгөн иһә хәл икенсерәк. Ялбырҙың күҙҙән юғалыуына  аҙна тирәһе барҙыр.Хәҙер Ҡупырыҡ яңғыҙы һунар итә һәм балаларын ҡарай.Күңеле һиҙә: арланды Ҙур йылға буйынан ишетелгән шартлау харап итеүе ихтимал. Росомаха ана шул шартлауҙың ярайһы ҙур мышыны йығып һалғанын күргәйне.

Бәлки теге сыбар һеләүһен артынан юлланырғалыр? Тамаҡ яллыҡ бирәр йәнлек тап булмаҫмы?

Ҡаяларҙың ярығы тирәһендә  һеләүһендең эҙе түбәнгә табан, соҡор эсенә  тартылған. Ҡупырыҡ та эҙ артынан ыңғайламаҡсы булғайны ла ҡолағына ярайһы көслө геүелдәү тауышы килеп яғылды. Ул туҡтап ҡалды. Геүелдәү көсәйә төштө. Соҡорҙан ырғып килеп сыҡһа, тауҙың яланғас

түбәһенән ҡар өйөрмәһе ябырылып төшөп килә. Урманға тиклем шыуып килеп төшкән өйөрмә ағастарҙы шырпы һымаҡ ҡына һындырып үтте.

“Балалар!”

Росомаха, осаһын юғары күтәреп, өңөнә табан йүгерҙе. Ә өйөрмә үҙәнде күп метрлы ҡар ҡатламы менән һырығайны инде.Тирә-яҡты танырлыҡ та түгел. Росамаха сурайып күренгән таштарҙан тоҫмаллап ҡына өңө урынын шәйләй алды. Ҡар тулҡын-тулҡын булып өйөлөп ята. ул тегеләй ҙә былай ҙа йүгереклəп балаларының еҫен йә булмаһа тауышын аңғарырға тырышты.Ҡарҙы табаны, тештәре менән ҡаҙып маташты. Хитлана торғас ҡанһыраған ағунаны соҡоп сығарҙы.

Таңға тиклем ул ҡаты ҡарҙы ҡаҙа торғас, ботаҡтар, таштарға юлығып бер нисә тырнағын һындырҙы, тәпәйҙәрен ҡанатты. Ҡанға мансылған ҡуян менән йәнә бер нисә селдән башҡа бер нәмәгә лә юлыҡманы. Арып-талып соҡоған соҡорҙарының береһендә йоҡоға талды.

Күҙенә ҡояш нурҙары төшөүҙән уянып китте. Үҙе ҡаҙған соҡорҙарға, ҡалын ҡар ҡатламына күҙ йүгертте. Уның балалары ошо ҡар ҡатламдары аҫтында бит! Күҙҙәре дымҡылланып китте Ҡупырыҡтың. Уларҙы хәҙер ҡотҡарып алыу мөмкин түгеллеген төшөнгәйне инде.Шулай ҙа таш араларын йәнә бер нисә рәт урап сыҡты. Еҫкәнде. Юҡ, бер нәмә лә һиҙелмәй. Ҡар өҫтөндә алһыу ҡан эҙҙәре ҡалдырып башы һуҡҡан яҡҡа ыңғайлауҙан башҡа сараһы ҡалманы.

Тетрәндергес кисерештәре ҡайҙалыр әйҙәне лә әйҙәне.Ул, ҡайҙалыр барып етергә яҫҡынған кеүек, хәрәкәтен тиҙләтә-тиҙләтә атланы ла атланы. Шырт йөнлө яҫы табандары ҡар өҫтөнән еңел бара. Һөт төшкән имсәктәре генә һыҙларға тотондо. Еленендәге һөтө ойоғансыға тиклем бер нисә көн ыҙалар әле ул.

Текә ҡаялар аратаһы тарайғкандай тарая барып, росомаха ағым бүленгән ергә, түбәгә килеп менде. Елдәр өҫтөндәге ҡарҙарҙы елгәреп китте. Ҡар туҙандары ҡояш яҡтыһында нурланып ялтыраған кеүек..Был ерҙән ҡаяларға килеп терәлгән урманлы үҙән асыҡ күренә.

Был тирә уға таныш түгел, ләкин ҡар яғылып ҡалған көрәнһыу-йәшел ҡаялар, тар ғына йылғасыҡтар, суҡайышҡан таштар уның элек көн күргән төйәгенә оҡшап тора. Ҡупырыҡтың күңеле күтәрелә биреп ҡуйҙы һәм ҡарҙарҙы борхотоп , тау аръяғына ,түбәнгә табан ябырылды.

Ҡапыл алдараҡ торған ағастың ҡар кәпәсе ишелеп килеп төштө. Росомаха туҡтап ҡалды. Тәне зымырлап китте, ҡарашы ағас ботаҡтарына текәлде. Ә-ә-ә...Ағас ботаҡтары буйлап ҡара-һоро тунлы, ҡап-ҡара йомшаҡ ҡойроҡло тейендәр һикерешә икән дә! Йыртҡыс быларҙы ентекләп күҙәтеп торҙо: берәрһе ҡапылдан түбәнгә килеп төшмәҫме?Ә тегеләр кедр ағасының ботаҡтары буйлап һикерешеүен, уйнауын белә.Ана, уйындан

туҡтанылар ҙа өҫкәрәк, тубырсыҡтар күберәк эленеп торған ергә үрмәләй башланыр һәм тубырсыҡтарҙы әрсей-әрсей кинәнеп емен ашарға тотондолар. Берәүһен ентекле әрсеп бөтәләр ҙә икенсеһенә үреләләр. Түбәнләргә иҫәптәре юҡ. Ара-тирә бер-береһенә боролоп ултырып нимәлер тураһында “фекерләшәләр”, тауыш сығарып тел шартлаталар.

Ҡупырыҡтың өмөтө аҡланманы, ул йылға яғына табан йүгерҙе. Текә яр аҫтында ағып ятҡан йылғала йылым һикергеләй. Росомаха йәтеш урын, яй эҙләп йылғаға текләберәк торҙо. Бәрҙе балығының ҡарағусҡыл арҡаһы күҙенә салынғас, стартҡа баҫҡан спринтер һымаҡ, алға һонолдо. Оҙон тырнаҡлы ҡулы менән бәрҙенең ҡолаҡсынынан эләктереп алды ла ҡар өҫтөнә ташланы. Балыҡ ҡойроғо менән ҡаға-ҡаға йылғаға табан тартылып маташты, росомаха саҡ-саҡ бәрҙе өҫтөнә баҫып өлгөрҙө.

Тамаҡ ялғап алды ла балыҡ тотоуын дауам итергә булды.Әммә балыҡ көтөүе һағайғайны инде. Росомахаға йәнә бер аңышыраҡ балыҡты эләктереү менән сикләнергә тура килде.Уны кимергән ыңғай күҙенең ҡырыйы менән аҡ ҡар өҫтөндәге оҙон кәүҙәле йән эйәһен шәйләп алды. Башын бороп ҡараһа – ҡама. “Ә ул икән дә! Ҡама росомаханы ҡыҙыҡтырмай!”

“Туғандаш” йәнлек һыуға сумғандағы кеүек хәрәкәттәр яһап йылға ярына табан йүгерҙе һәм һыу эсенә инеп тә сумды. Ә Ҡупырыҡ яңы төйәге менән танышыуын дауам итте. Тау һөҙәгендә ул ике пар ыҙан күреп ҡалды. Быдай ыҙандың кешнеке икәнен росамаха белә. Бәләһенән баш-аяҡ. Кешеләрҙән арыраҡ булыуың хәйерле, шуға ла ҡарҙың нығынған ерен һайлап, һыпыртыу яғын ҡараны.

Икенсе глава

## Ермил

Ермил ҡарт окамус саңғыһын кейеп путик- арбауыслы һунарсы һуҡмағы тирәһен ҡарап урарға тип сыҡҡайны.Уға ерән төҫләрәк эте Динка ла эйәрҙе.

Һунарсыларҙың һәммәһе кеүек еңелсәрәк кейенеп алғайны Ермил ҡарт. Кейеме тар ҙа, киң дә түгел, йәтеш кенә. Аяғында болан тиреһенән тегелгән олоча.Салбары ике ҡатлы. Тыштан кейеп алғаны таҫмалап ҡырҡылған болан тиреһенә , ә уныһы билендәге ҡайышҡа беркетелгән. Курткаһы – итәге ҡырҡылған һалдат шинеле. Һунарсы тырпайып торған сал ҡаштары аҫтынан ҡояш нурында иркәләнгән үркәстәргә, тау түбәләренә күҙ һирпә-һирпә атлай. Йәй көнө лә ҡарҙан арынмаған тау башын ауылда Башлы Шәкәр тип йөрөтәләр. Бер аҙнанан һунар сезоны ябыла, ул был тирәгә көҙгә саҡлым килеп йөрөмәйәсәк. Бәлки бүтән бер тапҡыр ҙа килә алмаҫ әле, һикһән өҫтөнә баҫҡан бит.

Арҡаһы ауыртыу, һулаҡай аяғының сәнсеп-сәнсеп һыҙлауы арҡаһында ул быйыл  ҡышты ла күберәк ҡышлауҙа уҙғарҙы. Сире аҙып киткеләгән сағында тыштағы утынын алып инеү өсөн дә имгәкләп тигәндәй сыҡҡаны булды. Шуға күрә алған табышы ла  ташҡа үлсәйем: дүрт кеш тә ике шәшке. Тамаҡ яллыҡ та түгел. Ярай әле, лапаҫ аҫтында йөҙгә яҡын ҡуяны эленеп тора. Йәй арыу булды, өс тапҡыр бәрәсләп өлгөргән ҡуяндарҙың балалары бирешмәй  үҫеп  етте. Ҡайһы бер  ауып  ятҡан ағастар тирәһендәге ҡар ныҡлап тапалған, батмай ғына атларлыҡ. Ҡарт һуҡмаҡтарға  ау, ҡапҡан ҡороп, көн һайын ике-дүрт ҡуян алыр булды. Мылтығын алдына йүгереп сыҡҡандарын атып алыуға  ғына тотондо.

Атаһы мәрхүмдән ҡалған илленән ашыу гектар ерҙе ул арҡыры-буй әллә нисә тапҡыр урап сыҡҡан инде. Бында уға һәр ағас, һәр бер таш таныш. Атаһына эйәреп бәләкәйҙән йөрөнө ул  был биләмәлә. Холҡо шундай. Ә холҡоңдан ҡайҙа ҡасаһың, ти. Һунарҙа йөрөгәндә ул бер ваҡытта ла йылы өй, тормош уңайлыҡтары, ғаиләһе  хаҡында  уйлап та бирмәне.

- Эх! Бар ине бит заманалар! Көнөнә ҡырҡар саҡрым юл йөрөп, ҡапҡандар ҡуйып өлгөрөп була ине! Бынау тауҙарҙы күрмәйенсә нисек йәшәлер?- тип эсе бошто Ермил Федоровичтың.

Бер сәпсек уны ауыр уйҙарынан арындырып ебәрҙе. Йылынан ләззәт кисергән ҡошсоҡ көмөш ҡыңғрау кеүек зырылдығын сыға. Тик тауышын аҡ ҡабырғалы ҡарғаның  ҡарҡылдауы  ғына  күмеп  әрәм  итә.

- Нимә тип әйтмәксе булыуы икән был  хәбәр  тоғо  ҡарға?

Әһә, аңлашылды, саңғы табаны аҫтында яңы ғына һалынған кеш эҙҙәре күренде.

Динка эҙҙәрҙе тапамаһын өсөн, Ермил этен бәйҙән ысҡындырып ебәрҙе. “Хәйләкәр булһа кәрәк был  кеш, эҙҙәрен аҙаштырып атлай!”- тип уйланы үҙе.

Анау тирәлә  шыршынан һикереп төшкән дә әрәмә буйлап йөрөштөргән, эҙе икәү. Шунан метр ярымлыҡ төпһәгә һикереп менгән, төпһәнән  өйөлөп ятҡан сытырға һикергән, унан ҡайын ботағына  һикереп менеп, артабан ағастан-ағасҡа  ырғып  юлын дауам иткән. Уның хәрәкәт йүнәлешен тик ҡойолоп ҡалған ва-ваҡ ағас киҫәктәре, ылыҫ энәләре аша ғына тоҫмаллап буласаҡ. Был сүп-сар йәш ҡар өҫтөндә айырымасыҡ күренеп тора ул. Тора –бара кештең эҙе йәнә саңғы юлына килеп төшкән. Шул  саҡ  ботаҡтар араһынан көрәнһыу тап күренеп ҡалды. Һунарсы тотошлай күҙ ҙә ҡолаҡ сүрәтенә инде. “ Ысынлап та ҡыуып еттем буғай, ҙур ғына булһа кәрәк!”- тип уйлап алды үҙе.

Ҡалҡыулыҡ артынан үрле-ҡырлы һикерәңләгән йәнлектең ҡарағусҡыл-күк  һырты шәйләнде. Ҙур  күренә  лә  баһа. Ялбыр йөнлө эт ҙурлығы булыр. Һунарсы аптырай төштө.

- Бәрәкәт! Росомаха бит!

Тыштан ҡарағанда росомаха айыу балаһына оҡшаған. Тумалаҡ ҡына кәүҙәле.Муйыны ҡыҫҡа, аяҡтары йыуан, яҫы табанлы. Айыу балаһынан айырмалы - йөнө оҙон, ҡабырғаһында алтынһыу шлеяһы бар, икенсе шундай уҡ һыҙыҡ ҡарағусҡыл арҡаһын буйлатып ятҡан.

- Бына был исмаһам табыш!- тип ҡыуанды кеш тураһында онотоп өлгөргән ҡарт һунарсы. Шулай булмай ни! Тайгала йәшәүселәр росомаханың тиреһен яҡшы баһалай, сөнки хатта бик һалҡын көндә тын алғанда ла был йыртҡыс тиреһенә бәҫ ултырмай. Һуңғы тапҡыр Ермил Федоровичтың росомаханы осратҡанына биш йылдар тирәһе барҙыр. Элегерәк был тирәлә уны йыш осратыусылар бар ине. Йылына өс тирәһе росомаха алыусы һунарсылар булды. Ә Ермил ҡарт йышыраҡ эҙҙәрен генә күрә торғайны. Ә бөгөн! Ана ул, теп-тере! Ул уны быға са яҡындан күргәне лә булманы тиерлек.

Һунарсы өсөн быndай осрашыу ысынлап та ыңғай ваҡиға ине, сөнки еҫкә, ҡолаҡҡа һиҙгер был йыртҡыс кешеләр менән осрашыуҙан тайпылып ҡалыуға бик оҫта ул.

* * *

Росомаха ҡабырғаһы менәнерәк боролоп һикерәңләберәк йүгерҙе. Ыҫпай ҡышҡы туны уны ҙурайтып , артҡы аяҡтары оҙонораҡ булыуҙан бөкөрәйтеберәк күрһәтә ине. Бер аҙ иләмһеҙ кәүҙәле йәнлектең көсө лә, таҫыллығы ла етерлек.

Ел ҡабырғанан иҫкәнгә күрә, росомаха әсе тәмәке еҫен һиҙемләмәйерәк ҡалды. Танауына килеп бәрелеү менән башын күтәреп ҡарай һалды.Ҡаршыһына килә ятҡан ике аяҡлы йән эйәһен һәм ерән этте күреү менән ҡарҙан эйешкән шыршы ботағы аҫтына инеп сумды.

Ермил этен бәйҙән ысҡындырып ебәрҙе. Унылы уҫал итеп өрә башланы һәм росомаха ағас башына менеп китергә мәжбүр булды. Яҡынлашып килгән кешене күреп, росомаха борсолоуға төштө, бер этке, бер кешегә ҡарап алды. Кешенең ҡулындағы ялтыр таяҡ эттән былайыраҡ ҡурҡыныс булыуын ул аңлай.Росомаха ағас башынан йомшаҡ ҡар өҫтөнә шыуып төштө. Шул арала Динка, һикереп килеп, уның ботона йәбеште һәм ырылдай-ырылдай ҡар өҫтөндә борхаларға кереште. Росомаха, нисек кәрәк шулай ысҡына һалып, артабан елдерҙе. Ара-тирә боролоп ҡарап та алғыланы. Ермилға ул көлә-көлә ҡасҡан кеүек тойолдо.

Йышлап теҙелешкән ағастар төҙәп кенә атыу мөмкинлеген бирмәне. Кәйефе киткән һунарсының этенә һуҡраныуҙан башҡа сараһы ҡалманы.

- Шөрләнеңме ни! Ҡыуалап тот, ана!

Тегеһе ҡойроғон ҡыҫып  йәнлекте ҡыуаларға төштө. Росомаха иһә тиҙлеген арттырыр урынға, туҡтаны ла, этҡә арт яғы менән боролоп баҫып, ҡойроғон күтәрҙе. Эт шатлығынан быныҡ өҫтөнә һикереүе булды, шунда уҡ мәтәлләп тә китте һәм, башын сайҡай-сайҡай, шыңшырға тотондо. Уҡшытырлыҡ әсе сәпрек тап  моронона  ғына килеп сәсрәне. Бисара эт күпмелер ваҡытҡа  күреүҙән һәм еҫ  һиҙеүҙән яҙҙы. Росомаха ул арала ҡуйы шырлыҡтар эсенә инеп юғалғайны инде.

- Вәт ен ботағы! – тип ыуаланды Ермил. – Үҙен яҡлай белә бит,ә!

Динка әллә нисә көн рәттән ҡарҙа аунап, ағасҡа  ышҡынып ауыр еҫтән арынырға маташты. Ә һаҫығы оҙаҡ юғалманы. Ермил уны өйөнә индермәне. Тоғро ярҙамсыһы өшөмәһен тип, тыштағы өңөнөң иҙәненә болан тиреһе түшәне. Эсенән бик йәлләне. Ә бит Динка, ул ауырыған саҡта , аша, тип,эргәһенә һөйәктәрен килтереп һала, янында шыңшып ята торғайны.

* * *

Ҡарт ҡапҡандарын, кулемкаларҙы, пас  һәм бүтән ҡоролмаларын, йәнлек тиреләрен, биш  туң ҡуян түшкәһен (ҡалғандарын улы килеп алыр) һөйрәлтмә ҡапсыҡҡа тултырҙы. Ауылға тиклемге юл 32 саҡрым.Ермил, сатанлаһа ла, унда ҡараңғыға тиклем ҡайтып етеренә өмөтләнде.

Йылға  боҙона  баҫҡас та ул артына боролоп  ҡараны. Тимер мөрйә тирәһендә ирегән ҡар, ярылған утын өйөмө, тырпайышып торған кәртәләү бында кеше йәшәүе хаҡында һөйләп тора. Бер-ике аҙнанан  ҡышлау өйө ҡар аҫтына сумыр.

Иртәнге һалҡын, ел  менән туңдырылған юл  ҡартты ла, һөйрәлтмә тоғон да еңел  күтәрә. Аяҡ аҫтындағы ҡар күңелле итеп шығырлай. Еле лә ыңғай, атлауға ҡамасау түгел. Атлауы еңел булғас, Ермил  төшлөк тирәһендә йәшен һуғып йыҡҡан һәм янғындан күмерләнгән йыуан ҡарағай ағасы тирәһенә лә килеп етте. Ошо тирәнән ҡырҡын һуҡмағына боролаһы бар. Ул һуҡмаҡты бик күптән инде, ауылға  етер юл  яҡынайһын өсөн ,атаһы һалғайны. Сөнки йылға ике километрҙан  итәге  һыуҙан ашалған  ҡаяларға барып төртөлә лә армыттың арьяғынан урап, ҡирегә борола. Ә атай һуҡмағы ауылға  туп-тура алып бара ла сығара.

Үрҙе артылып йылға ярына яҡынлашҡас, Ермил  һыуҙың туңмаған урынындығы ҡара нөктәгә  иғтибар итте. Текләберәк ҡараһа –йәнә росомаха!

Ермил  уны үтә лә ҡуйы йөнлө ҡойроғонан таныны. “Һин инде, күгәрсенкәй, үҙең килеп осрағас, ғәйеп итмә! Кәпәскә китерһең!”- тип мыйыҡ аҫтынан йылмайҙы Ермил  һәм этенә ятырға бойороп, яурынындағы мылтығын һыпырып алды.

Алыҫырыҡ, бынан тороп тейҙерп булырмы икән? Яҡынырaҡ барһаң, өркөр инде”,- тип уйланы ул. Картечь менән патронын кейҙерҙе, йәнлекте сәпкә алды һәм мөшкәһен тигеҙләп ырғаҡҡа баҫты.

Зыңлап киткән атыу тауышынан һәм ҡойроғо аҫтына нимәлер килеп һуғылыуҙан росомаха юғарыға һикереп китте һәм саҡ һыуға барып төшмәне. Һауала зырлап әйләнә башланы һәм йән көскә атылып ағас шырлығына инеп һыпыртты. Ә һунарсы уның артынан йәнә берҙе атып ҡалырға ғына өлгөрҙө.

Күтәрелгән ҡар өйөрмәһенең баҫылыуын да көтөп торманы Ермил, йыртҡысты ҡыуалай төштө. Ашыҡһаң шулай була бит ул, бер саңғыһының осо һынып сыҡты. Сәмләнгән ҡарт салғыларын сисеп ташлай һалып, артабан йәйәүләп эҙәрлекләүен дауам итте.Йылға боҙоноң өҫтөнән йүгереүе еңел ине лә, урман араһындағы ҡарҙа бот төбөнән бата башланы. Утыҙлап метр йүгергәндер, артабан был көрттәрҙе йырырлыҡ көсө ҡалманы.

Ул ҡасаҡтың эҙҙәренә күҙ һалды. Оҙон-оҙон һикереүенә, ҡарҙағы ҡан тамсыларына ҡарағанда, яраһы тәрән булмаҫҡа тейеш.

- Саңғыһыҙ ҡыуалап етеп булмаясаҡ. Йыртҡыс та йән бирмәҫ, терелер... Их, ояты ни тора. Элегерәк булһа, бер атыуҙан йығып һалмай ҡуйыр инеме ни? – Ҡарт эсенән генә шулай мығырланы. Ҡайын ағасын ярып, ҡаҙау менән һынған саңғыһының моронона беркетте һәм ауылы яғына ыңғайлауын дауам итте. Үҙе оҙаҡ тыныслана алмай бер булды.

- Ағас сөрөгө! Сәйнәп ҡаптырғанды йота алмай йөрө инде! Ҡулға төшөргә генә тора ине бит. Гел осраймы әле ул росомахаһы ла! Мейес башына менеп ятырға ваҡыт һиңә!- тип әрләне лә әрләне үҙен.

Ҡупырыҡ ул саҡта, армыт түбәләренең береһенә барып менеп , хәл алырға ятҡайны. Ҡолағын ҡарпайтып тирә-яҡты тыңлап алды. Артынан ҡыуалаусы барлығы һиҙелмәне. Ҡойроҡ аҫтындағы яранан ҡотолоу сараһын күрергә кәрәк, ҡуҙғалған һайын әсетеп һыҙлай.

Ул йомарланып ятты һәм һыҙырылған тиреһен, онталған һеңерен тешләп өҙҙө. Аяғына баҫҡанда ғорурлығы булған матур ҡойроғо ерҙә ята ине инде. Йыртҡыс кәүҙәһенән айырылған ҡойроғона ғәжәпләнеп ҡарап торҙо.

Ҡытыршы теле менән ялап яраһын таҙартырға тотондо.Тәпәйе менән моронон йыуып алды. Тунын да рәткә килтерҙе һәм тайга төпкөлөнә инеп китте. Росомаха таяғын шартлатыусы һаҡалтайҙы ла, уның ауыҙын ҙур асып өргән иптәшен дә хәтеренә һалып ҡуйҙы.

Бер нисә көндән росомаха был ике аяҡлы йән эйәһенең эҙенән барып уның һаман да шундамы-юҡмы икәнен тикшерергә булды. Ағастан

буралған, өҫтөн ҡар ҡаплаған өңө тирәһенә лә барып етте. Теге һаҡалтай бында бүтән килмәгән.

Ҡупырыҡ тынысланып үҙ биләмәһе яғына ыңғайланы. Тау ярығында тейен эҙҙәре сыбарланып ята. Эҙҙәр яңы, еҫе лә таралып бөтмәгән. Ана ап-аҡ ҡына фонтан күтәрелә, тейен ҡар аҫтындағы тубырсыҡтарҙы соҡой. Тимәк, ҡапыл ғына өҫтөнә һикерһәң, тамаҡ ялғап алырға ла була.

Тамағын туйҙырғас ул ҡарҙы соҡоп ял итергә ятты. Моронон ғәҙәтенсә ҡойроғо менән ҡапларға булғайны ла, яралы урыны ныҡ итеп ауыртып ҡуйҙы һәм ҡойроғоноң юҡлығын иҫенә төшөрҙө.

Өсөнсө глава

**Яҙ**

Бөтә нәмәнең дә башы һәм аҙағы була. Ҡышҡы һалҡындарҙа бөрөшкән, өшөгән тайга эсенә ҡояш нурҙары үтеп инә башланы.Ҡарағай тубырсыҡтары тәңкәләрен тырпайтып асып ебәрҙе һәм эстәге ем ергә һибелде. Улар, ел ыңғайына өйөрөлә-өйөрөлә инәләре күүсәһенән айырылып, алыҫтарға осто.

Ҡарҙар иреп, тамсылар тамырға тотондо. Кискеһен, һыуытып ебәргәс, тамсылар оҙон-оҙон боҙбармаҡтар булып һуҙылды. Ҡар ҡарайып, нығынып китте, тырпайышып ятҡан көрттәр шиңеп ҡалды. Һауа күтәрелә-күтәрелә барып тап-таҙа, саф төҫ алды.

Тиҙҙән уларға иғтибар итерҙәрен көткән һуйырҙар йәшкелт-күк күкрәктәрен кирә биреп, тулҡынланырға тотондо.Көрән-һоро ҡанаттары менән ҡар өҫтөнә ниҙер һыҙа-һыҙа , оялсан кавалерҙарына мөхәббәт хаттары яҙа.

Тауҙарҙың көньяҡ һөҙәктәре тиҙ йылынды һәм унда йәш үләндәр баш ҡалҡытты. Йығылған ағастар аҫтындағы күләгәлә бәшмәктәр күтәрелде. Яланғасланған ҡырмыҫҡа иләүенең осонда тәүге разведчик ҡырмыҫҡалар йыбырлаша. Улар эшсе ҡырмыҫҡаларға эште нимәнән башларға кәрәклеген барлай.

Ҡупырыҡ көндөҙҙәрен үрҙәрәкке кипкән ергә ятып йоҡлап ала ла кискә табан төнъяҡтағы ҡар иремәгән яҡҡа юл тота. Ул яҡта һунары уңышлыраҡ була, ә бында көньяҡ битләүҙә уға ни бары терпеләр генә осрай. Улары росомаханы күреү менән сәнскеле күләпәрәләрен башына тиклем тарта ла росомаханың нишләрен күҙҙәрен зыйылдатып күҙәтә. Яҡынлашыуы була энәләре менән кәзәлә башлай. Бер шулай танауын нык ҡына сыйып ебәргәйнеләр, росомаха, бик нык асыҡҡанда ла, терпегә ҡағылмаҫҡа тырыша.

Ҡырмыҫҡа иләүҙәренең уяныуы росомаха өсөн байрам, ул тәпәйен иләү өҫтөнә һала һәм эскелтем тәмде ялай.Ҡыйыу ҡырмыҫҡалар йылдам

йүгерешә, тәненә үрмәләй һәм әсе шыйыҡсаһын һиптерә. Уларға дошмандың уларҙан мең-мең тапҡырға көслөрәк булыуы ҡурҡыныс түгел. Росомаха усы тулыу менән уларҙы ауыҙына ебәрә. Туймайынса иләү янынан китергә ашыҡмай. Ул киткәс, ҡырмыҫҡалар ҡыйралған иләүен рәтләргә, ремонтларға тотона.

* * *

Йәнә бер йыл артта ҡалды. Йәнә тау йырғанаҡтары сылтырай башланы. Йылға шәмәреп китте һәм боҙ ҡоршауын сайралдырып, иркенләп ағырға тотондо. Тау баштарындағы боҙло ҡарҙар осҡондар сәсрәтеп түбәнгә тәгәрәй. Тайгала әллә ҡалай йөнтәҫ эре-эре серекәйҙәр барлыҡҡа килде. Улар росомаханы уратып оса, танауына ултырырға тырыша.Япраҡ аҫтындағы ҡышҡы ояларынан һағыҙаҡтар осоп сыға. Геүелдеген сығып йәш сәскәләрҙең баллы һутын һемерергә ашыға.

Көнсығыштан яҡтылыҡ төшә башлау менән ҡорҙар уянышты һәм ҡыҙыл ҡаштарын һелкетә-һелкетә мүкле һаҙлыҡтар тирәһен ҡамап алды. Тиҙҙән уларҙың ҡауышыу сәғәттәре етәсәк. Ҡар һыуҙары тирәһендә ҡара фрактарының ҡанатын һәлендергән оҙандар, ата ҡорҙар йыйылыша, фырылдығын сығып нимәлер мығырлаша.

Әтәстәр шул рәүешле көндәштәрен турнирға саҡыра буғай. Берәр ҡыйыуыраҡ оҙан әтәсләнә башлаһа, былар, уларҙы ағас башына ултырышып күҙәткән тауыҡтар алдында ҡыйыулығын күрһәтергә тотона, мөңгөрләшеп сәкәләшә.Ҡайһы берҙәре ҡыҙып китеп, осоп-ҡуныһ һауалап ала. Һәр береһе инә ҡорҙарға үҙенең мәртәбәһен белдерергә тырыша.

Ритуал тамамланғас, тауыҡтар үҙҙәре һайлаған парын алдан уҡ әҙерләп ҡуйған ояларына эйәртеп алып китә. Ана шунда аулаҡта уларҙың мөхәббәт байрамы башлана ла инде.

Ҡупырыҡ яңы биләмәһен хәҙер яҡшы белә.Уға бындағы тынıслыҡ оҡшай. Ике аяҡлыларҙың эҙен ул биләмәһенән ситтәрәк, ҡойроғо йәрәхәтләнгән тирәлә генә осратҡылай. Көҙгөһөн ҡар ятыр алдынан шул яҡта шартлау тауыштары ишетелеп-ишетелеп ҡалды. Ҡупырыҡ ул яҡҡа бармаҫҡа тырыша. Тик бер заман боландар көтөүен ҡыуалап барғанында ике аяҡлыларҙың эҙенә осрағайны. Инә боланды йыҡҡайны, аҙна тирәһе янынан китә алманы. Шул ваҡыт эсендә уға бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамағас, ул был тирәгә йәнә килгеләй башланы.

Бер саҡ шулай, ҡояш байыр алдынан тау армыттары яғына ыңғайланы. Көндөҙ шунда атыу тауыштарын ишеткәйне. Танауына ҡан еҫе килеп бәрелде.

Ҡан еҫе яҡынайғандан яҡыная, росомаха еҫкә табан атлай бирҙе һәм тапалған яланға барып сыҡты. Ялан ҡып-ҡыҙыл ҡанға буялған, боландың эсәктәре, тояҡтары һәм башы туҙышып ята. Росомаха шул ҡалдыҡты

ашарға ғына тотонғайны, ҡыуаҡ араһынан ҡан еҫен шәйләгән разведчик бүреләр килеп сыҡты.

Улары ни булырын боҫоп күҙәтеп торған өйөргә ишара яһаны һәм тегеләре ярым түңәрәк яһап, тештәрен шығырлата-шығырлата росомаханы уратып алды. Росомаха белә: быңдай саҡта ҡурҡҡаныңды күрһәтрергә ярамай, иң мөһиме, күҙеңде лә алмай теклэп тик торорға.Ана өйөр юлбашсыһы ла күренде.Асылда ҡойроҡтарын һәлендереп йөрөүсе бүреләр ҡойроҡтарын арҡаларына саҡлым күтәреп алған. Юлбашсының бер аҙ кәйефе төштө. Теге һаҫыҡ йән икән дә. Ул росомаханың уҙған көҙҙә генә, уның табышына дәғүә иткән өсөн, өҫтөнә һаҫыҡ шыйыҡсаһын һиптергәнде онотмағайны әле. Бүре ҡурҡыныс итеп олоп ебәрҙе, ләкин росомаха уның һәленеп төшкән ҡойроғон күреп, алышҡа ташланмаясағын аңғарғайны инде.Ул бүрегә мығырлап ҡына яуап бирҙе. Тегеһе яуап итеп йылмайып ҡуйҙы һәм дуҫтарса шыңшып алды. Бүреләрҙең эске кисереше тышҡы ҡейәфәтенән асыҡ беленә ул.

Күпмелер ваҡыт бөрәү ҙә ҡыбырламаны. Теклэшеп тороу ҙа оҙаҡҡа барманы, йыртҡыстар ҡарашын йәшерә башланы. Юлбашсы һеләгәйен йотоп, кипкән япраҡтар өҫтөнә һуҙылып ятты. Бүтәндәре лә уға эйәрҙе. Ҡупырыҡ туйғансы тамаҡланды ла, бүреләрҙән бер нәмә лә артмаҫын белгәнгә күрә, боландың бауырын теш араһына ҡыҫтырып алып үҙ юлы менән китеп барҙы. Һәммәһе лә бер-береһенән разый ҡалды. Был йәнлектәрҙең тышҡы ҡиәфәтенән, хәрәкәтенән һиҙелеп тора ине. Арҡаның бөкөрәйә биреүе, ҡойроҡтоң ҡыҫылыуы дошмандың көслөрәк булыуын таныу ғәләмәте ул. Йыртҡыстар йәнә бер-береһен күҙ ҡарашы аша аңлаусан. Ҡараштан күп нәмә уҡыла. Күҙ ҡарашында мәкер шәйләнһә, ҡойроҡ болғауға ғына ышанырға ярамай. Төрлө-төрлө йәнлектәргә урман эсендә үҙ-ара компромисҡа инергә лә тура килә шул.

Росомаха – күп төрлө ризыҡ менән туҡлана торған йыртҡыс. Ҡышҡыһын улар башлыса йәнлек аулай, үләкһә менән дә туҡлана. Йышыраҡ ҡош-ҡортҡа һунар итә. Ҡупырыҡ та ҡош итен ярата, бигерәк тә ҡар аҫтынан соҡоп алып булғанын.

Бөгөн уның һөҙәктәге татырлауыҡтағы тоҙло ярҙа һунар иткеһе килде. Ул тирәләге һары йырғанаҡ аҡһыл тоҙ өҫтөнә ағып төшә,тирә яғы тапалған, болан тояҡтарының эҙе ярылып ята, боландарҙың тоҙҙо ялағаны ла беленә. Тайга өҫтөнә ҡояштың һуңғы нурҙары һуҙылғас, росомаха тоҙло табаҡ яғына ыңғайланы. Ҡоралайҙар, боландар һалған һуҡмаҡты ул яҡшы белә. Оҙаҡ көтөргә лә тура килмәне уға.Эңер төшөү менән тояҡ тауыштары ишетелде.

Ҡорбаны өҫтөнә һикерер алдынан, мызлағаны беленмәһен өсөн, ул күҙен йомдо. Ҡышҡы һорғолт тунын йәйге ерән тунға алыштырып өлгөрмәгән ҡоралай өҫтөнә ташланам ғына тигәндә, росомаха уның яңғыҙ түгеллеген, янында нәҙек кенә аяҡлы бәрәсе барлығын шәйләп алды.

Йөрәге жыу итеп ҡалды.Йәл булып китте уға ҡоралайҙың бәрәсе. Барлығын белдереп тауыш сығарҙы һәм кире боролдо. Ҡоралай, тауыштан һиҫкәнеп, бәрәсен ышыҡлап ҡына росомаха янынан үтеп китә һалды...

* * *

Һуңғы көрттәр ҙә иреп бөттө. Күләгәләгеләре генә бирешмәй әле.Ел былтырғы япраҡтарҙы осороп, күгәргән еҫ тарата. Беҙҙең героиня, йәйгә әҙерләнеп, ҡышҡы тунын йәйгегә алмаштырҙы.Унда-һанда һерәйешкән оҙон йөндәре арҡаһында ул үтә һәпрә төҫ алды.Ҡупырыҡ үҙәндең күләүектәрен барлап йөрөнө. Балыҡ осрамаҫмы? Ыбыр-сыбыр балыҡты тәпәйҙәре менән эләктереп ярға теҙеп һалды, ләкин был ваҡ-төйәк ни, ас ҡарынын уятып ҡына ебәрҙе.

Йылға ярының ҡомло урынында ябыҡ ҡына инә айыу пәйҙә булды. Уға ярайһы туҡ өс айыу балаһы эйәргән. Инәләре әйләнә-тирәне байҡап торҙо ла ҡарғалар ҡарҡылдашҡан ергә табан ыңғайланы. Ҡарғалар юҡҡа ҡарҡылдамаҫ, шул тирәлә тамаҡ туйҙырырлыҡ берәр нәмә барҙыр, моғайын. Яр буйына еткәс, айыу йылға ташҡанда ауған ағасты тәгәрләтеп ебәрҙе, аҫтында төлкө ята икән. Балаларын саҡырҙы. Улары табышты бер-береһе менән бүлешергә теләмәй, ырылдаша, этешә-төртөшә башланы. Береһе-бер төлкөгә яҡын килә алманы.

Икәүһе һуғышҡан арала өсөнсө айыу балаһы әсәһе күрһәткән ризыҡты шым ғына кимерергә тотондо. Теге ике һуғыш суҡмары аңына килгәндә, төлкөнөң яртыһы ғына ҡалғайны инде. Инә айыу иһә шунда ятҡан мышы мөгөҙөн кимерҙе. Мөгөҙҙә минерал матдәләр, тоҙ булыуын айыу яҡшы белә. Балаларының тамағы туйғас , инәләре уларҙы эйәртеп тайга яғына ыңғайланы.

Былар күҙҙән юғалғас, Ҡупырыҡ айыуҙарҙың тамаҡланған урынына яҡын килде. Һаҫыған ит еҫе, нәжестән башҡа бер нәмә лә тороп ҡалмаған.

Росомаха һикерәңләп ары китте. Берәр нәмә осрамай булмаҫ. Ана бит, аҡ ҡуян йәш үләнде семсеп ултыра. Ҡупырыҡ уның янына ауған ағастарға ышыҡланып яҡын уҡ килеп терәлде. Ҡылый күҙ дошманынан ҡасып ҡотола алмаҫын төшөнгәйне инде. Ул ҡапыл һыртына ауып китте һәм тәпәйҙәрен юғарры күтәреп һелкергә тотондо. Аусы сигенә бирҙе, танауына типтергеһе килеп тормай әле! Ҡуян шул арала һикереп тора һалып, һыпыртыу яғын ҡараны. Эх, уңмаһаң уңмайһың икән шул!

Росомаханың танауы күҙенә ҡарағанда ла сосораҡ, шуға ла ул һауаны еҫкәй-еҫкәй, бында алдараҡ булып үткән ваҡиғаларҙы барлап сыҡты һәм тәмле генә еҫ килеүенә иғтибар итте.

Был тирәнән бер нисә ҡоралай йүгереп үткән, шишмә һыуын кисеп сыҡҡандар, уларҙы бүре ҡыуалап барған. Бүре уларҙың береһен оҙаҡ эҙәрлекләгән. Анау ҡыуаҡтар артынан ҡан еҫе килә. Әһә! Бүре табышын

ошонда йыҡҡан да икән. Көслө бүре булғандыр, табышын ерҙән һөйрәмәгән, елкәһенә һалып алған. Ҡайһы яҡҡа алып китте икән һуң? Ҡупырыҡ еҫкәнеп алды. Еҫ кедр ағасы тирәһенән килә.

Росомаха үләндәр араһына йәшенә-йәшенә , һаҡ ҡына шул тирәгә ыңғайланы. Бүре,бәлки, һаман да шундалыр.”Нисаҡлым ит! Нисаҡлым ит!”- тип сәбәләнде ағас башына ҡунаҡлаған ҡарға. Бүренең ҡыуаҡ араһынан сыҡҡан юлы күренде. Ашығырға кәрәк. Бүренең, туйынып алғас, һыу эсергә генә киткән булыуы ихтимал.

Уның ризығына ҡаҙалған росомаханы тап иткән бүренең асыуы ҡабарҙы һәм ул ҡараҡтың өҫтөнә ташланмаҡсы булды. Тегеһе лә ҡурҡып ҡалманы.Һарғылт тештәрен ыржайтып бүрегә ҡаршы килә башланы. Бындай ҡыйыулыҡ һәм әрһеҙлекте көтмәгән бүре дошманының осло тырнаҡтарынан саҡ ялтанып ҡалды. Росомаха һауала сальто яһап әйләнеп төштө лә бүренең ҡорһағына тырнаҡтарын батырырға өлгөрҙө. Былярҙың янына бүренең олоуын ишеткән ике иптәше килә һалып етте. Улары росомаханың кәрәген бирергә ташланды. Берәм-берәм булған саҡтарында улар рсосмахаға бәйләнмәҫкә тырыша, сөнки уның ауыртыу тойғоһо бик түбән, ажар алыша, бирешмәй. Был һаҫыҡ кейекте күмәк саҡта еңеп алмаҡсы булдылар. Тик бер ни ҙә килеп сыҡманы.Росомаха ағасҡа үрмәләне һәм тегеләр көтөп арығанса шунда ултырыуын белде.

Дүртенсе глава

## Верхи ауылы. Сергий атаҡай

Верхи ауылы тауҙар араһындағы уйһыуҙағы күл буйында өс урам булып һуҙылып ултыра. Ауыл уртаһында майҙан бар. Уның бер яғына бүрәнәнән буралған ике ҡатлы элекке урман хужалығы конторaһы, икенсе яғына мәктәп, мәктәп биләмәһе урынлашҡан.Верхиға Ектерина 11 заманында Пугачев восстаниеһында ҡатнашҡан һәм был яҡтарға ҡасып килгән казактар һәм крәҫтиәндәр нигеҙ һалған. Һаҙлыҡтар, ҡалын урмандар менән уратып алынған был урын ҡасҡындарҙы батша власы ярандарынан йәшереп тота. Әле ауылды донъя менән ағас ташыусыларҙың етмеш саҡрымлыҡ юлы бәйләп тора.XX быуаттың туҡһанынсы йылдарының урталарына тиклем бында дәүләт промхозы ла, урман промхозы ла эшләп килде. Көслө Уралдар, КрАздар ҡышҡы юлдан йылына миллионлаған кубометр беренсе сортлы ағас сығара ине.

Ул осор ҡасабала ун йыллыҡ мәктәп, клуб, инстументтар ансамбле һәм үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәге, почта, ике магазин булды.Заманалар үҙгәреп китте. Урман хужалығы юҡҡа сыҡты.Мачталыҡ оҙон ағастарҙы тейәп ташыуҙың файҙаһы аҙ, йылға буйлатып ағыҙыу ҙа мөмкин түгел,

сөнки йылға һалҡын диңгеҙгә барып ҡоя. Клуб ябылды. Өс йөҙләгән йорт-ҡура урынында йөҙ иллеләбе генә тороп ҡалды. Ярай ҙа мәктәпте һаҡлап ҡалдылар.Хәҙер ул һигеҙ йыллыҡ. Дәүләт промхозы әлегә эшләп маташа. Ир-ат борондан ғәҙәтләнгәндәренсә ҡимmәтле тиреләр етештереү, ит өсөн ҡыр йәнлектәрен аулау, балыҡ тотоу, ыҫмала ағыҙып пихта майын йыйыу менән булаша.

Ҙур донъя менән автолавка бәйләй. Айына ике тапҡыр ҡаланан ГАЗ-66 машинаһына тейәп тауар килтереүсе пеләш экспедитор Семен Львович йөҙөнән йылмайыу китмәгән алсаҡ кеше. Уны ауыл кешеләре һығылып-бөгөлөп ярарға тырышыуы арҡаһында Даға тип йөрөтә.

Автолавка килеүен бигерәк тә бала-саға көтөп ала. Төшкә табанырак ике ҡатлы бина тирәһендә йыйылышып көтәләр.

Тауарҙан тыш Семен Львович почта, гәзит- журналдар, пенсия, электр станцияһы өсөн солярка тейәп килә.Ә ҡалаға еләк-емеш, кедр сәтләүеге, киптерелгән бәшмәк, пихта майы алып китә. Ҡышҡыһын туңған ит, башлыса урман ҡошоноҡо,май, эремсек йыя.

Эшһеҙ ҡалған халыҡ үҙен-үҙе хеҙмәтләндереүгә күсергә мәжбүр булды. Күпләп кәртүф сәсә башланылар, кәбеҫтә үҫтерәләр, мал, дебет кәзәләре тоталар, көҙ буйы тайганы ҡыҙырып, урман байлығын туплайҙар.Йыбанмаған кешеләр бирешмәй, етешлектә йәшәй.Мүк еләге, ҡыҙыл көрмәле үтемле.Хаҡы ла сыға, боҙола һалып та бармай. Ҡайһы бер ғаиләләр сезонында тонна ярымға тиклем еләк йыйып тапшыра.

Тәүге осорҙа Даға араҡы ла килтереп һата ине. Ауыл йыйынында араҡы һатыуҙы тыйырға ҡарар иттеләр. Юғиһә, элекке урман ҡырҡыусылар бригадирҙары Игнаттың илле йәшен туйлағанда иҫерешеп, ғауғалашыуға барып еткән. Герасим исемлеһе “Дружба” бысҡыһын ватҡаны өсөн Игнаттың уны премияһыҙ ҡалдырыуын иҫенә төшөргән. Һүҙҙән-һүҙ, һуғышҡандар ҙа киткәндәр. Ҡыҙып алған Герасим мейес буйына һөйәлгән балтаны эләктереп алған да, урман ауҙарғандағы таҫыллыҡ менән Игнаттың башын яра тондорған да ҡуйған. Өйөнә ҡайтҡас төнө буйы эсеп сыҡҡан,аҡырынған, екеренгән, ҡатыны ҡурҡышынан балаларын эйәртеп, ҡайныларына сығып ҡасҡан.Әллә тәмәке төпсөгөнән, әллә шәмдән ут сығып китеп, Герасимдың яҡшы кедрҙан буралған өйө янып киткән. Мәйетенең һөйәктәре лә ҡалмағайны, кәүҙәһе көл булған да ҡуйған. Ауыл халҡы гөж килеште. Нимә ерләргә лә белмәнеләр. Ярай ҙа елһеҙ тыныс төн ине, тотош ауылдың көлөн күккә күтәрә ине был янғын.

Ваҡиға ауыл халҡын нык тетрәндерҙе . “Килеп еттек! Ҡайҙа табан тәгәрәйбеҙ ул!? Көлгә ҡалған өй янына йыйылышҡан бисәләр сыр-сыу килеште:

- Нидәй шәп ирҙәрҙе юғалтып ҡуйҙыҡ! Ике ғаилә етем ҡалды!

- Байрам итә берәүҙәр!

Сабып үлтерелгән Игнаттың ҡатыны Валентина һәр бер ирҙең ҡаршына баҫып:

- Малайҙарымды хәҙер кем үҫтерешә инде? Һинме? Һинме? Йыйын эскесе!- тип илауланы.

Ана шул ваҡытта ауылға бүтән араҡы килтетмәҫкә, тигән ҡарарға килделәр.

Аҙна үтеүгә автолавкаһы менән килеп еткән Дағаның йәшереп кенә араҡы осороуын күреп ҡалған Валентина, өҫтөнә ҡарсыға кеүек ташланды:

- Араҡы ташығаныңды йәнә бер күрһәмме, машинаңа бензин һибәм дә ут төртәм!

Дағa ҡурҡыуға төштө һәм ҡатындың күҙ алдында ике шешә араҡыны ергә түкте.

"Кәрәкмәй! Бүтән араҡы тейәп килһәмме!"- тигән ҡарарға килде Дағa. Уның килеме былай ҙа етерлек. Ауылдан йыйған аҙыҡ-түлпекте рестораңдарға өс хаҡына тапшырып йөрөй бит ул.

Ауыл айыҡ тормош юлын һайлағандан һуң, Дағa, икенсе йыл инде дәүләт промхозы директоры вазифаһын башҡарған Степан Ермиловичтан Верхи ауылына килтергән юл ыңғайындағы бер һунар биләмәһен үҙенә беркетеүҙе һораны. Биләмә өс йөҙ квадрат метрҙай булыр. Урындағы һунарсылар ул тирәгә йөрөмәй.Алыҫ. Ә Дағa өсөн яйлы, янынан үтеп йөрөй.Тауҙары ла һөҙәк.

* * *

Ауылдың үрерәк бер ерендә X1X быуат урталарында һалынған иҫке сиркәү бар. Урман хужалығы эшләгән осорҙа уны склад итеп файҙаландылар. Ҡараштырып торҙолар. Хужалыҡ эшләүҙән туҡтағас, бина бөтөнләй етемһерәне.

Яҙыраҡ, страстная аҙнаһы башланыр алдынан Екатерина ҡарсыҡтың янып мәрхүм булған улы Герасим төшөнә инде. Төҫ-ҡиәфәте ҡап-ҡара, ҡымшаныуһыҙ баҫып тора. " Миңә, әсәй, бында бик шөкәтһеҙ, минең хаҡыма доға ҡылһаңсы. Раббыбыҙҙан минең гонаһтарымды ярлыҡауын үтенһәңсе!"- ти. Ҡарсыҡ уянып китте. Таң атҡансы илай-илай тубыҡланып тороп белгән доғаларын уҡыны. Һыйырын һауып көтөүгә ҡыуғас, әхирәттәренә китте. Төшөн һөйләне, шунан улар христиан динендәге Пасха, Таҙа кесаҙна алдынан сиркәүгә барып, уны йыйыштырырға, шунда доғалар уҡырға кәрәк, тигән фекергә илде.

Ике көн буйы ҡараңғынан-ҡараңғыға хәтлем ҡорамды рәткә килтереү менән булдылар.Сүп-сарҙан таҙарттылар, иҙәнен йыуҙылар, стенала һаҡланып ҡалған һүрттәрҙең саңын һөрттөләр. Шәмбе көн Пасхаға әҙерләнделәр. Кемдер псалтырь, кемдер Раббы Анаһының Ҡазан иконаһын, Тәүрат алып килде. Сигелгән ашъяулыҡ йәйеп йомортҡа, кулич теҙеп ҡуйҙылар, сигелгән таҫтамалдар элделәр.

Иҫке славян телен береһе лә белеп етмәй ине, әммә китапта яҙылғанса көйләп уҡынылар, доғаларҙың көйө күңелдәренә ятышлы ине. Шул көндән башлап юҡ-юҡта сиркәүгә ингеләй башланылар.

Көндәрҙең береһендә Екатеринаның ҡоҙағыйы Люба ҡарсыҡ шулай тип әйтеп ҡуйҙы:

- Их ҡыҙҙар! Бында шул тиклем рәхәт. Өйҙә уҡынаһың-уҡынаһың, күңелгә бындағы кеүек тынғылыҡ урынлашмай.Бында күңел ултырып, тынысланып китәһең. Балаларҙы Катя менән икәүләп кеше итеп ебәрербеҙ әле, тигән өмөт тә уяна..

- Миңә лә шулай ул.

- Йәкшәмбе һайын килеп йөрөйөк беҙ бында. Бүтәндәр ҙә ҡыҙығып китер, бәлки.

Улар байтаҡ ваҡын сиркәүгә йә өсәүләп, йә бишәүләп барып йөрөнө. Ауыл халҡы уларҙы “сиркәүселәр” тип йөрөттө.

Бер саҡ ауылға Дағa менән рухани килеп төштө һәм теләүселәрҙе суҡындырырға тәҡдим итте. Ундайҙар байтаҡ булып сыҡты. Шунан бирле ир-аттарҙың да ҡайһы береһе сиркәү яғына тартылып китте. Тарих уҡытыусыһы уландарын эйәртеп килер булды. Аҙ һүҙле, нескә күңелле, һүрәттәр төшөрөргә һәләтле Сергей иһә, атаһынан башҡа ла инеп йөрөй. Иконаларға текләп-текләп ҡарап тора. Мәктәпте тамамлағас, фельдшерлыҡҡа уҡырға тип, медучилищеға инде.

Каникулға ҡайтҡан ваҡытында Сергей иртәнән кискә тиклем сиркәүҙә була ине. Ишек алдына ике эскәмйә яһап ҡуйҙы, һүрәтһеҙ стеналарҙы аҡланы,иптәштәре менән бергәләп сиркәүҙең ҡыйығын һипләнеләр. Медучилищены тамамлағас “Тиҙ ярҙам”да эшләне һәм семинарияға уҡырға инде. Ауыл халҡы быға ғәжәпләнмәне.

Уҡыуын тамамлар алдынан сиркәү старостаһы ролен башҡарыусы Екатерина ҡарсыҡ епархияға барып, егетте Верхи ауылы сиркәүенә ебәреүҙәрен һораны. Епископ Филарет быны хупланы. Ауылда шул рәүешле медпункт та, приход та барлыҡҡа килде.

Йыл үтеүгә Сергий атаҡай йыуаш холҡло, егәрле класташы Ирина менән ғаилә ҡорҙо.

Раббы ярҙамы, хәйер-саҙаҡа биреүселәр, ҡалала йәшәгән ауылдаштарының матди ярҙамы менән бер нисә икона, өс ҡыңғырау алдылар. Оҫта ҡуллы Николай Пуля, нык ыҙалаған һуҡыр эсәгенән ҡотолдорғаны өсөн, Сергий атаҡайға рәхмәт йөҙөнән Батша ҡапҡаһы һәм иконастас яһап ҡуйҙы. Ҡатын-ҡыҙ клироста йырларға өйрәнде. Матур хор барлыҡҡа килде. Батша ҡапҡаһы менән иконастасты сафландырырға килгән епархия вәкилдәре уларҙың көйлө доғаларына һоҡланыуын белдермәй ҡала алманы.

Йәкшәмбеләге рухи хеҙмәтен башҡарғандан һуң Сергий атаҡай вәғәз уҡыр булды. Һөйләгәндәре аҡыллы һәм күңелгә ятышлы ине. Халыҡ уның янына һүҙен тыңлар өсөн дә, сирҙәрен һөйләр өсөн дә эркелеп торҙо.

* * *

Петр ураҙаһынан һуң Сергий атаҡай Ворчалка йылғаһы буйына балыҡҡа китте. Иртәгә Ирина инәкәйҙең тыуған көнө, ә ул балыҡ ярата.

Көн сыуаҡ. Үләне күтәрелгән сәскәле ялан сиңерткәләр тауышынан зыңлап тора. Һауала сәйер бөркөт осоп йөрөй.Ул берсә үргә атыла, берсә ҡапыл түбәнләй.

- Һунар итә, -тип уйланы Сергий һәм аҙымдарын йышайта бирҙе. Убаға күтәрелгәйне, ялан буйлап елдергән ҡуянға күҙе төштө. Ҡуян йә уңға, йә һулға һикереп, эҙәрлекләүсенән ҡасып ҡотолорға маташа. Табышын эләктерә алмаған бөркөт күккә атыла, ә ҡуян тиҙлеген арттыра-арттыра елдереүен белә.Бөркөт йәнә түбәнгә уктала, тиҙлеге аҡрынайған ҡуян саҡ тайпылып ҡала.

- Эләктерә бит хәҙер! Арыта ла эләктерә! – тип уфтанып ҡуйҙы Сергий атаҡай.

Ул арала ҡуян пихта урманына барып етеп, ағаслыҡ араһына йомолоп та өлгөрҙө.

- Вөт маладис! - тип шатланып ҡуйҙы рухани.

Йылға үрендәге тупһаларға ыңғайланы. Ул шул тирәлә ялтырап торған бәрҙеләр тотҡаны бар.Бөгөн нишләптер балыҡ һис кенә лә ҡабырға теләмәне. Сергий атаҡайҙың кәйефе ҡырылды. Иринаһын шатландырғыһы килгәйне бит әле.

Йылғаның йәнә лә үренәрәк ыңғайларға булды. Унда ла рәт сыҡманы. Йылға үлгәнме ни, исмаһам бер түңгәләк сағылһа! Бурһыҡ буръяҡландырған урын ғына тонмаған әле. Уныһы баҡаларға һунар иткән буғай. Еүеш ҡом өҫтөндә эҙҙәр күренә. Айыуҙыҡы микән? Улай тиһәң, вағыраҡ. Биш бармағының осло тырнаҡтарын тырпайтып атлаған.

Сергий атаҡай ҡармағын бер бер урынға, бер икенсе ергә ташлай-ташлай ике саҡрым тирәһе юл үтте. Ҡапмай! Эңергә тартты. Ҡояш түбәнләүгә тәгәрәне. Ҡараңғынан алда ҡайтып етә алмаҫын төшөнөп, Сергий атаҡай яр буйында ҡунырға булды. Бер-ике һыныҡ киптерелгән икмәге, кәртүфе, сало киҫәге, ҡарағат япрағы төнәтелгән сәйе бар, шулар менән туҡланыр ҙа ҡуйыр.

Батюшка ауыр ҡанаттарҙың елпенеүен ишетеп уянды. Күҙен асһа ҡайын башы тулы ҡор көтөүе. Бер ботаҡтан икенсеһенә күсеп япраҡ кимерәләр. Рухани ҡыҙыл ҡашлы, йәйғор ҡанатлы ҡоштарҙы һоҡланып күҙәтте. Кипкән үлән, сытыр яғып сәй ҡайнатып эсте һәм ҡайтырға булды. Юлды ҡыҫҡартыу ниәтенән туранан китте.

Ағастар араһында кедр сәпсеге үрһәләнеп ҡысҡыра: “ Хәүеф бар! Хәүеф бар!” Ҡоштоң ана шулай урман йәнлектәрен иҫкәртеүе. Һаҡ булырға саҡырыуы ул. Ике аяҡлы йәнлек ҡурҡыныс тыуҙырыусан.Ҡош был әҙәмдең ғүмерендә лә бер нәмә лә атып алмауын ҡайҙан белһен, ти.

Етенсе класта уҡып йөрөгәндә әле, дуҫы Сережаны һунарға сығырға өгөтләгәйне. Шул һунарҙа дуҫының атаһы ҡоралай атып алды. Ергә ауып киткән ҡоралайҙың күҙҙәренән йәш ағып сығыуын күргән Сережа ул саҡ ныҡ тетрәнгәйне. Ҡурғаш пуля ҡоралайға түгел, уның йөрәгенә тейҙеме ни. Шунан бирле ул һунар яратмай. Ә тайга буйлап йөрөүҙе ярата барыбер. Тайгала башҡа яҡты уйҙар килә, күңел дә, зиһен дә яҙылып, таҙарғандай була. Кәйефләнеп ҡайта ул тайганан.

Сергий атаҡайҙың ҡолағына аҡһыл һөҙәк яғынан ниндәйҙер аңлайышһыҙ өндәр килеп яғылды.Кемдер мискә эсенә инеп ултырған да ыңғраша кеүек. Ҡыр кейектәре һуҡмағы буйлап барған еренән, ул ҡарт кедрҙарҙың ҡалын тамырҙары бүлтәйгән яҡҡа ыңғайланы. Эстәрәк күҙенә соҡор өңөрө ташланды. Яҡыныраҡ килһә, эсендә ниндәйҙер йәнлек тулғана. Йәш айыуға тартым.Артҡы аяғына баҫып алған да, бәләкәй генә күҙҙәрен мөлдөрәтеп, ярҙам һорап ялбарған кеүек.

Эй, бисара, хәлең хөрт икән дә! Хәҙер берәр юлын табырбыҙ!”- тип һөйләнде батюшка. Яҡында ятҡан ҡоро ағасты һөйрәп килтереп, уның йыуан яғын соҡорға төшөрҙө. Әсиргә был оҡшаманы. Ул ағасҡа йән асыуы менән ташланды ла ҡайырын кимерергә тотондо. Рухани аптырай төштө. Бындай уҫал йырҡысты ҡотҡарып маташыу ҙа ҡурҡыныс, тик уны соҡоронда ҡалдырып булмай бит инде.

Ағасҡа ҡат-ҡат һөжүм иткәндән һуң йыртҡыс уның зыянһыҙ икәненә төшөндө булһа кәрәк. Уның тирә яғын бер нисә тапҡыр әйләнеп сыҡты ла ағасты алғы тәпәйҙәре менән ҡосаҡлап алды һәм үрмәләй башланы.

Соҡорҙан килеп сыҡҡан Ҡуҡырыҡ, ә йәнлек тап ул ине, һыпыртыу яғын ҡараны, әммә бер аҙыраҡ барғас, кеше яғына боролоп ҡарап, рәхмәт белдергәндәй ырылдап ҡуйҙы һәм артабан елдерҙе. Арҡаһындағы ерән

һыҙатынан уның айыу түгеллеген, ә росомаха икәнлеген танҡыны Сергий атаҡай. Ә нишләп ҡойроҡһоҙ һуң ул?

Халыҡ росомаханы яратмай. Ә Сергий атаҡай,барыбер, бәләгә тарыған йыртҡысҡа ярҙам итә алыуынан ҡәнәғәт ине.

Матушка Иринаға һөйләрмен әле, ул да шатланыр, тип уйланы рухани. Йыртҡыстың артынан суҡындырып ҡуйҙы.

Бишенсе глава

**Ҡoролоҡ. Ризыҡ ҡытлығы**

Ҡояш ике ай буйы өҙлөкһөҙ ҡыҙҙырҙы ла ҡуйҙы. Үләндәр көйрәшеп бөттө. Ҡайһы бер урындарҙа үләндең әҫәре лә юҡ, ҡояштан ҡасып йәшеренгәндәрме ни. Күк көмбәҙендә исмаһам бер болот ишараты килеп күренһә. Унда-һанда иҫеп киткән ел дә эҫенән ҡотҡармай. Йылға ҡыҙырым ҡырсынға әүерелгән, һай ғына булып субырлап аға.

Ҡоштар ҙа тынып ҡалған. Энәғараҡ кипкән япраҡтар өҫтөнән һуҙылып төшөп тынып ҡалған. Сиңерткәләр генә бирешеп бармай, сурылдыҡын сыға. Ҡыҙып киткән кедрҙарҙан ҡуйы ыҫмала еҫе аңҡый. Һаҙ тирәһендә үҫкән һаҙанаҡтарҙан да аңды томалағыс еҫ килә. Был яланда бер-ике сәғәт йөрөһәң, әйләнеп сығырың да икеле.

Уның ҡарауы ләпәкәй менән серекәйҙәрҙең әҫәре лә юҡ. Ә күгәүендәр, кireһенсә, көтөүе менән геүедәшеп йөрөй. Улар, ярай ҙа, көндөҙ генә ыҙалай, төнгөлөккә тынысланалар.

Ҡупырыҡ эҫенән ҡубарылып төшкән таш өйөмдәренән хасил ышыҡҡа йәшенеп ҡотолорға маташа. Унда бер ни тиклем еүеш һәм һалҡынса. Быйыл йәй росомаха өңөнән асыҡһа ғына килеп сыға. Тик һунары ла һирәк уңа. Ҡош-ҡорт, йәнлек-фәләндең күбеһе эҫелек арҡаһында һәләк булып ҡуйҙы. Яҙғы шәп яуындар ҙа ҡазалап китте. Ҡышы ла бит әллә ҡалай килде, һыуыҡ көндәре лә, бурандары ла йонсотто, йәнлектәр ана шул тәбиғәт шарттарында ла биреште. Ҡышты ауырлыҡ менән сыҡҡан боландар көнсығышҡараҡ юлланды, йылғалар һайығырын һиҙенгән балыҡтар алдан уҡ мулыраҡ һыуҙарға күсенде.

Ҡупырыҡ икерәт бик шәп байрам итеп алды алыуын. Тәүгеһе ҡар ирей башлағас булды. Росомахалар – урман санитары, үләкһәнән дә, еҫләнгән табышынан да ерәнмәй. Ҡышҡы аслыҡтан һәләк булған боландарҙың, бүтән йәнлектәрҙең түшкәләре асылғас, Ҡупырыҡтың тамағы туҡ булды. Ул быңдай муллыҡтың оҙаҡҡа бармаҫын да самалай ине, шуға ла ҡайһы бер табышын күләгәлерәк урындарға ташып йәшерҙе.

Икенсе тапҡыр көнъяктан өйрәктәр ҡайтып төшкәс һыйлана алғайны. Улар шау-гөр килеп һайыҡҡан йылғалар ярына килеп ултырыр булды. Ана шул осор рәхәтлӘнде лә инде росомаха. Төнөн йылғаға ҡороған ағас киҫәген төртөп төшөрә лә, шуның артына йәшеренеп көтөү янына яҡынлай, ярға яҡыныраҡ ятып төнәгән өйрәкте эләктереп тә ала. Тик ҡыр өйрәктәре лә оҙаҡ торламаны шул. Ҡоролоҡ киләһен һиҙеп, уңайлыраҡ урын эҙләп китеп барҙылар. Йәшереп ҡуйған запасы ла бөттө. Өс көн тирәһе йылғаның соҡорло еренә төшөп, сыға алмай ҡалған балыҡтар менән туҡлана алды. Улары ла юҡ хәҙер.

Был тирәнән тайырға кәрәклекте төшөндө Ҡупырыҡ. Көн һайын артына ҡояш тәгәрәп төшөп киткән күк ҡаялар артында арыуыраҡ түгел микән?

Тау башына ике көн буйы үрләне ул. Артылышҡа етеп, аръяғындағы тигеҙлеккә килеп төшһә, үҙ күҙенә үҙе ышанмай торҙо. Яландар йәп-йәшел, сәскәләр йылмайыша.Шишмә, йылғалар ағымы тауышына ҡоштар һайрашыуы ҡушыла. Был яҡтарҙы ямғыр урап үтмәгән икән.

У саф шишмә һыуын һемерергә тотондо. Шундай һыуһаған, хәҙер эсеп ҡалмаһаң, шишмә тиҙҙән ҡорор кеүек күренде росомахаға. Ятып ял итте, йәнә һыуға ҡапланды һәм шунан ғына тирә-яғын күҙәтә башланы. Йылға ағымының бер урынында ағастан ҡомороҡ өйөлгән. Тирәһендә балыҡ ҡанатсыҡтары күренеп ҡалды. Таймeньмы икән ни? Шул-шул. Килеп тороп ҙур!

“Төнъяҡ крокодилы” яй ғына ҡуҙғалып йылғаға аҡҡан шишмә һыуының һалҡынында рәхәт сигә. Аҙаҡ беленде, таймень унда юҡҡа ғына килеп ятмаған икән.

Ярға бер көтөү селдәр килеп төштө һәм ҡырсын сүпләргә тотондо. Шул арала һыу эсенән ыржайған тешле ауыҙ күренде һәм ҡоштарҙың береһен эләктереп һыу эсенә кире сумды. Селдәр бөтәһе бер юлы күтәрелеп осто ла, арыраҡ ярға барып ҡунаҡланы һәм, бер ни булмағандай, семсенеүҙәрен дауам итте. Тиҙҙән селдәрҙең береһе росомаханың ҡорһағында ине инде.

Тамағы туҡлыҡтан кәйефе күтәрелгән росомаха һикерәңләй-һикерәңләй яр буйлап китте. Кискә табаныраҡ ул күл буйына килеп сыҡты.Күлдең бер яры текә ҡаяларға барып терәлгән, икенсе ярында ҡараңғы ҡарағай урманы.

Күл өҫтө шундай тыныс, көҙгөһөн тау,урман һүрәттәре биҙәгән. Һауаһы саф. Ҡояштың нуры күлде икегә бүлгән кеүек. Унда-һанда һикерешеп уйнаған балыҡтарҙың арҡаһы ялтырашып ҡала. Ленка балыҡтары ла күренеп-күренеп китә. Росомаха аңлай, уларҙы эләктерермен тимә.

Күлдең арғы яғында дауыл һындырған яланғас ағастар кеүек өйөмдәр ағарышып күренгән кеүек. Ә улар уны ҡойроҡтан яҙҙырған ике аяҡлы йәндәрҙең торлағына оҡшаған бит! Ҡолағына ҡош-ҡорт тауыштары, кәзәләрҙең баҡырыуы, мышы бышҡырғаны сағылып китте.

“Бына ҡайҙа ул хөрриәт”” – тип шатланды росомаха һәм разведка яһарға ашыҡты. Урман төпкөлөндәрәк туғандаш йыртҡыстың еҫен абайлап алды. Арлан. “Танышҡанда шәп булыр ине,” – тигән уй үтте Ҡупырыҡтың башынан. Ул, һәр хәлдә, баш тартмаҫ ине. Июль аталаныу өсөн иң ҡулай ваҡыт та баһа. Шулай уйлаһа ла юлын артабан дауам итте росомаха.

Ике аяҡлыларҙың торағы ап-асыҡ күренгән уңайлы урынға урынлашып алды.Өңдәренең бер рәте йылға яры буйлап һуҙылған, икенсеһе арыраҡ. Һуҡмаҡтары киң. Ҙур-ҙур өңдәре тирәһендә вағыраҡ һуҡмаҡтар ҙа бар. Өңдәре ситән менән кәртәләнгән. Росомаха киң ботаҡлы ҡарағай башына менеп ултырып, уға яҡыныраҡ өй тирәһен күҙәтергә тотондо.

Бәләкәйерәк ҡуралар тирәһендә өйрәктәр йөрөй, кәртәләү артында кәзәләр семсенә.

“Бына ҡайҙа ул ризыҡ!”- тип шатланды Ҡупырыҡ. Шуныһы ғына ҡурҡыта, ишек алдында ике аяҡлылар үҙҙәре лә күренеп-күренеп ҡала.

Ҡояш һуңғы нурҙарын ергә йомарт бүләк итеп, тауҙың суҡайышҡан таш ҡаялары артына инеп сумды. Ҡараңғы төшөү менән көслө геүелдәү тауышы ишетелә башланы. Берәр ҙур януар микән ни?Торлаҡтарҙың һәр береһе янында бәләкәйерәк ҡояштар хасил булды.Бына ғәжәп! Геүләү тауышы тынғас, уттар юҡҡа сыҡты, бөтә ерҙә лә тынлыҡ урынлашты. Росомаха ашыҡманы. Әйләнә-тирә тотош һиллеккә сумғас ҡына ҡомалаҡ еҫе аңҡыған кәртәләү янына яҡынлашты. Кәртәләү аръяғынан бесән, тиҙәк, эт еҫе килә. Еҫтәрҙең береһе Ҡупырыҡҡа таныш кеүек. Уны ҡойроғонан яҙҙырған ике аяҡлынан шундай еҫ килә ине бит. Ҡупырыҡ уны онотҡаны юҡ әле. Ҡойроғо менән танауын ҡаплағыһы килгән һайын иҫенә төшөрә.

Росомаханы был еҫ һағайта төштө.Туҡталып торҙо. Ләкин ризыҡтың яҡында ғына булыуын тойоу ҡурҡыуҙан көслөрәк ине. Ул кәртәләү янында уңайлы ҡапҡа тапҡан кеүек булды. Башын тыҡһа – эт ояһы! Йоҡоһо һаҡ Динка башын күтәрҙе. Росомахаға теклэп ҡарап торҙо һәм уның һаҫыҡ еҫен иҫенә төшөрөп, өҫтөнә ташланыуҙан тыйылды. Ләүкелдәп өрөп ебәрҙе. Уға ҡушылып күрше эттәре өрөргә тотондо. Тотош ауылды эт өргән тауыштар солғап алды. Росомаха ла Динканы танығайны инде.

Кешенең ояһында яҡтылыҡ күренде. Ҡупырыҡҡа кәртәләү аша һикереп төшөп, урман яғына һыпыртыуҙан башҡа сара ҡалманы. Ҡурҡыуын ҡурҡманы ла ул, һунары уңмауҙан кәйефе ҡырылды. Торараҡ асыуы килә башланы: ҡойроҡтан яҙҙырғандары аҙ ине, хәҙер ана һунарына ла арҡыры төштөләр.Ҡалған төнөн ул моронон һыуға терәп, йылға ҡултығында ятып

уҙғарҙы. Көндөҙгө йылыһы һыуынып бөтмәгән яҫы таш өҫтөнә ятып, һаман булһа ләүкелдәшкән эттәрҙең өрөүен тыңлап ятты. Их, үс алырға ине шуларҙан!

Иртәнсәген ҡояш нурҙары кедрҙарҙың бөҙрә сәстәрен тарап, ҡайындарҙы аҡ шәм төҫөнә буяғас, росомаха күҙәтеү урынына ыңғайланы. Көнө буйы күҙәтте ул ауыл тормошон. Ир-ат күберәген ҡойма буйында ултыра, инә йәнлектәр һыу буйында төрлө төҫтәге тиреләрҙе йыуа, таяҡ алып йәшел үҫентеләр тирәһен туҡмай. Ергә һуҡкан һайын саң-туҙан күтәрелә.Бала-сағалары ҡомда ҡаҙына, ҡайһы берҙәре ҡыуышып уйнай.Ана теге ике аяҡлы аҡбаш та ояһынан килеп сыҡты. Тәпәш кенә үлән үҫкән уба янына барып, ҡулына ҡыҙғылт төҫтәге әйбер тотоп килеп сыҡты. Нимә икән? Яуапты елдәр килтереп еткерә һалды: “Уһу! Ит!” Ҡупырыҡ һеләгәйен йотоп ҡуйҙы. Баҡһаң, ике аяҡлыларҙың да итте йәшереп ҡуя торған ғәҙәте бар икән. Төндә барып сығыр әле. Аҡ башлы кәртәләү буйындағы бүрәнәгә ҡунаҡланы һәм ауыҙына таяҡ тығып төтөн сығара башланы. “Ҡара-сәле, был ике аяҡлы ҡыҫҡа ғына таяҡтан да ут сығара белә. Унан һаҡ булыуың хәйерле!”- тигән һығымтаға килде Ҡупырыҡ.

Кеше кире үҙенең ояһына инеп китте һәм унан һауыт тотоп сығып, этенең ояһы ауыҙына ҡуйҙы. Ә теге ерәне һоғаланып ашарға тотондо.

Төнөн һирәк-мирәк эт өрөүе туҡталып, һиллек урынлашҡас, росомаха күҙәтеү урынынан шыуып төшөп, кешенең ояһы янында көндөҙ күргән убаға табан ыңғайланы.Аҡ башлы итте ана шунан тотоп алып сыҡты бит.Уның да ит янына барғыһы килә. Болан тиреһе менән көпләнгән ишектән тәмле еҫ килә. Ҡупырыҡтың эсе көтөрләп китте. Ит һаҡланған складҡа нисек тә үтеп ингеһе килде. Өс баҫҡыс аҫҡараҡ төшөп, ишекте төрткөләп ҡараны, асылмай. Яурыны менән төртөлдө, бирешмәй! Нишләргә һуң?

Таҡта ишектең ярығына ҡулын тығып, үҙенә тартып ҡараны, ҡуҙғалғандай булды, тик арҡыры тимер ебәрмәй. Тимерҙе һәрмәп ҡараны. Ҡурҡыныс һиҙелмәй. Этте уятмаҫ өсөн ул тимерҙе тегеләй ҙә былай ҙа борғослап ҡайыра башланы һәм тимер ысҡынып китте.

Ишек ярығы киңәйҙе. Ярыҡтан танауына тәмле ҡуян еҫе килеп бәрелде. Ас йыртҡыстың шатлығының сиге юҡ ине. Ит шул тиклем күп,тимәк, ул бынан кире асыҡмаясаҡ...

## Алтынсы глава.

## Ҡараҡлыҡ

Көндөң иң эҫе ваҡыты ине. Нәжәғәй уйнаған урманға текләп тәмәкеһен көйрәткән Ермил ҡарт бүрәнә өҫтөндә ултыра. Эҫенән тирләгән битен ара-тирә еңенә һөртөп ала, ләпәкәйе лә көн күрһәтмәй, һырып алып бара.

Ул бер аҙыраҡ туҙанда ҡойонған тауыҡтарға, ҡуҡырайып йөрөгән әтәскә күҙ һалып ултырҙы. Ана ҡаҙҙар йәшел үләнде семсей. Гөр-шау килеп урам буйлап йүгерешеп уйнаған малай-шалай ҙа күҙ уңынан ҡалманы. Бөтә был күренештәр Ермил Федоровичтың йәненә яҡын. Был күңел күтәренкелеген илаулаған тауыш һиҫкәндерҙе:

- Ни саҡлым ҡаза! Был нидәй гонаһ шомлоғо! – Шулай һуҡрана-һуҡрана ҡапҡанан ҡарсығы килеп сыҡты.

- Төтөн быҫҡытыуҙан башҡаны белмәйһең, боҙ баҙының ишеген япмағанһың, бөтөн ризыҡ эшлектән сығып бара!

- Нишләп туҙынаһың? Мин бөгөн баҙ янына барманым. Үҙе япмаған да...Хәҙер тартып ҡына бөтәм дә, барып ҡарармын...

Ермил ҡар баҙының баҫҡысы буйлап төшкәс тә баҙҙың йылынғанын шәйләне. Шәм ҡабыҙҙы. Күҙе өйрәнгәс, ризыҡ запасына күҙ төшөрҙө. Таҡта стена тирәһендә улы биргән болан ите боҙ араһында ята ине. Ишеккә яҡын урында ҡыш көнө үҙе аулаған ҡуян итен өйөп ҡуйғайны.Түшкәләр өҫтөнә һыуыҡ яҡшыраҡ һаҡланһын өсөн ябылған брезент һыпырылған .Ҡуян башы ята, ә түшкәһен кемдер кимергән.

- Бына һиңә! Кем хужа булып йөрөгән һуң бында?- Ҡарт баҙҙан һүгенә-һүгенә кире килеп сыҡты, ишекте нығытып элде лә, тыш яҡтан лом терәтте.

Иртәнсәк һыйырын көтөүгә ҡыуғас, баҙын йәнә барып тикшерҙе, бикле көйө.

Артабанғы ике көн буйы ҡарт өйөнән дә сыға алманы. Аяҡтары йөрөмәй. Боҙ баҙын ҡарарға ҡарсығын ебәрҙе. Шөкөр, тейелмәгән. Өсөнсө көнөнә, аяғы бер аҙыраҡ баҫырлыҡ булғас, склад янына үҙе китте. Ни күрһен, ишек ҡапҡаһы аҫтан кимерелгән, таптары туҙғышып ята, ҡуян түшкәләре йәнә кәмегән. Һаҫыҡ һейҙек еҫе килә.Шаҡ ҡатты Ермил ҡарт. Ниндәй хәйләкәр һәм оҫта ҡараҡ был? Росомаханың ғына эше!

- Вәт хәшәрәт!- тип геүелдәне Ермил Федорович.- Ярар, беҙ ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел! Күрһәтермен әле мин һиңә!

Ана шулай әрләнә-әрләнә, ул һарйынан сынйырлы ҡапҡан килтереп сығарҙы. Уны мөгәрәбенең ауыҙына урынлаштырҙы һәм өҫтөн бесән менән ҡапланы.

Росомаха йәнә дүрт көндән генә килде. Был юлы ул үтә лә ҙур зыян ҡылып китте. Ишектең икенсе осон кимереп тишек яһаған, баҙ ауыҙынан уҡ һаҫыҡ еҫ аңҡып тора. Ермил Федорович һүле ағып ятҡан ҡуян түшкәләрен күреп, асыуынан шартлар сиккә етте.

- Нишләп ҡанıҡты был  миңә? Теге саҡ мин яралаған росомаха мы икән ни? Динканы яҡын ғына бәйләп ҡуйыр кәрәк. Ҡарт ахмаҡ! Күптән шулай итергә булған.

Этен мөгәрәп янына килтереүе булды, тегеһе, шыңшый-шыңшый ҡарышып алды ла китте. Ысҡынып ҡасты. Икенсе көнгә саҡлым өй тирәһенә килеп тә күренмәне.

Ермил  ҡарт госпомхозда һунарсы булып йөрөгән улы Степандарға китте.Саҡ барып өлгөрөп ҡалды.Улы өй тупһаһына ултырып кирза итеген кейеп маташа ине.Янында ҡара тәпәйле эте һырпалана, хужаһының битен яларға маташа. Степан уны ҡыуып та ҡарай, тегеһе  шаярыуын белә.

Степан эте Маврҙың елкәһенән  ыуалап, дуҫлыҡтарын аңлатырға тырыша. Ҡарсыға танаулы, бер аҙ сал төшкән ҡуйы һаҡал-мыйыҡлы, үтәнән-үтә ҡарай торған йәшел  күҙле, атаһынıҡы күек һәлбер ҡашлы Степан буйға ла бик оҙон, ҡайһы бер өйҙәрҙең ишегенән  эйелмәйенсә инә лә алмай.

- Нихәл, улым! Йомош бар ине!- Ермил ҡарт хәбәрен бер тынала һөйләп бөтөрөргә теләгәндәй, һүҙен туранан-тура башлап ебәрҙе. – Эш былай: минең боҙ баҙына росомаха эйәләп алды. Ит урлай. Бөгөн тотош запасты эшлектән сығарып киткән, тын алырлыҡ та түгел. Итһеҙ ҡалдырҙы. Ҡапҡан ҡуйып ҡарағайным  да- ҡапмаған, ишекте кимереп тишкән.Шуны тоторға йә атып алырға булышмаçһыңмы?

-  Ҡаныҡҡан икән шул!. Берәр ерҙә юлығыҙ киçешкәйнеме әллә?

- Булды ундай хәл. Яҙыраҡ берәүһен яралағайным.

- Үсләшә, тимәк.

- Ауларға кәрәк бит!

- Ярар, эләктерербеҙ. Былтыр уҡ тере росомахаға заявка алғайным. Семинарға  ғына барып ҡайтам да эшләрбеҙ...

Атаһы улының яуабынан риза булманы.

- Һин әйләнеп ҡайтҡанса ул хәшәрәт тотош запасты ғына түгел, тауыҡтарҙы ла ҡырып бөтәсәк. Ә ҡарсыҡ  мине  өтөп  алып  бара. Росомахаларға ышаныс  юҡ. Улар айыуҙан да яман. Динка менән бер саҡ росомаханың складына  юлыҡтыҡ. Сел, ҡорҙарҙың иçәбе юҡ. Ташып тултырған ғына. Минең баҙҙы ла ташып  алып таҙартып ҡуясаҡ ул.

- Һин, атай, ғәфү ит, ә семинарҙы ҡалдыра алмайым, яңы ҡағиҙәләр хаҡында һөйләйәсәктәр. Тауыҡтарға теймәһен, тиһәң, баҙыңды бүтән бикләмә. Итеңде эшлектән сығарған бит инде  барыбер.

Ермил тәмәкеһенең төпсөгөн ергә ташлап, йән асыуы менән тапап ҡуйҙы.

## Етенсе глава

## **Һунар**

Ҡыр кейектәренең иҫәбен алыуҙы ике аҙнаға кисектерҙеләр. Степан, ғаиләһен уятмаҫ өсөн һаҡ ҡына баҫып, аш бүлмәһенә инде һәм икмәк ҡушып әсеткән һөт эсеп алды. Стенала торған мылтығын алып яурынына элде. Алдан әҙерләнгән рюкзагын эләктерҙе лә тышҡа сыҡты. Этен саҡырҙы:

- Эй,дуҫ, күпме йоҡларға була, һунарға сығабыҙ бит!

Осло моронло эте ышаныр-ышанмаҫ ҡына башын күтәрҙе. Хужаһының яурынындағы мылтыҡты күреп, күҙе ялтырап китте, ҡойроғон борғоларға тотондо. Хәҙер инде Мавр Степанды үҙе ашыҡтыра башланы, ҡабалан-ҡабалан ҡапҡаға табан ынғайланы.

Таң һыҙылғайны ғына, ә һунарсылар госпромхоздың ағастан буралған конторaһы тирәһенә йыйылышҡайны инде. Урман йәнлектәрен иҫәпкә алыуҙы иртә таңдан башлау хәйерле, көн күтәрелеп ысыҡ һирпелһә, үләндәге эҙҙәрҙе табырмын тимә.

Ир-ат, тәмәкеһен көйрәтә-көйрәтә, ямғыр яуырмы-юҡмы, тип әңгәмәләшә. Кисә кистән болот ҡуйырып маташа ине былай, өмөт юҡ түгел.

Хужаларының оҙаҡ ҡыймылдағанынан риза булмаған эттәр үҙ-ара мөнәсәбәт ҡороша. Бигерәк тә иң өлкән һунарсыларҙың береһе Михаил Макаровичтың ҡара арланы тынғыһыҙлана. Эттең урталай ярылып киткән уң ҡолағы ҡашы тирәһендә һәленеп тора, һулаҡайы юғары күтәрелгән. Был уның ҡиәфәтенә алдатҡыс бер ҡатлылыҡ сифатын биргән кеүек. Тыштан ғына шулай күренә ул. Михаил Макарович айҡашырға әҙер генә торған этен тыйып-тыйып ала: “Тайфун! Тыныслан! Йә, кемгә әйтәм!?” Тегеһе, ғәйепле кешеләй, хужаһының янына йүгереп килә һала ла итегенә һырпалана башлай. Макарычтың икенсе этенең холҡо башҡараҡ, айҡашыуҙарҙа ҡатнашмай, ғорур ҡиәфәт менән ситтән күҙәтә.

Һунарсының үҙен ауылдаштары Поддубный тип йөрөтә. Киң күкрәкле, мыҡты кәүҙәле, үгеҙ елкәле, ҙур ҡуллы кеше ул.

Иҫәп алыуға ете бригада сыҡты Һәр береһе өс маршрут үтергә, осратҡан йәнлек, ҡош эҙҙәрен билдәләп барырға тейеш. Степан үҙенең бригадаһына Макарычтан тыш, практикаға килгән зәңгәр күҙле , ҡыҙғылт-ерән сәсле малайлыҡтан сығып бөтмәгән Васяны ла алды.

* * *

Арҡаһы көмөрәйгән айыу балаһына оҡшаған росомахалар, һыуға сумғандағы кеүек хәрәкәттәр яһап йылға үренә табан йүгерә. Ҡиәфәттәренә ҡарағанда , береһе – инә, береһе - арлан.

Кешеләр күренеү менән был икәү күҙҙән юғала һалдылар.

- Ашыҡмайыҡ. Ҡыуалай башлаһаң, туҡтамай көнө буйы йүгерәсәктәр, - тип тыйҙы һунарсыларҙы Степан.

- Икәүҙәр бит. Һин берәү генә тигәйнең дә, - тип боролоп ҡараны Макарыч.

- Аталанышыр ваҡыттары еткән саҡ. Парлашҡандар. Парлы саҡта улар әллә ни сос булмай ҙа ул.Тау аръяғынан төшкәндәрҙер. Ул яҡта быйыл ҡоролоҡ.

- Шулайҙыр шул, - тип ҡуйҙы Макарыч. – Степан, һин күрҙеңме, береһенең ҡойроғо юҡ.

- Эйе шул. Ҡойроғон ҡыҫты микән, тип уйлаһам...

- Ҡойроҡһоҙ росомаха буламы ни? – тип ғәжәпләнде студент.

- Булмай ни! Аяҡ-ҡулһыҙ кешеләр ҙә бар бит, - тип яуапланы охотовед.- Алышта юғалтыуы ихтимал. Берәүҙән дә ҡурҡмай торған йыртҡыс. Танк кеүек алышҡа ташлана ла ҡуя. Йә еңелә, йә еңә.Бер үҙе айҡашып, бүре өйөрөнөң табышын тартып алыуға һәләтле.

- Беҙгә лекцияларҙа унын үтә ашамһаҡ булыуы хаҡында һөйләгәйнеләр. Росомаха латын теленән ашамһаҡ тип тәржемә ителә.

- Улай тигәс тә...- тип ҡуйҙы Степан, - был бик дөрөҫ түгел. Ашҡаҙанына ҡарағанда, бер ашауҙа дүрт килограмдан да арттыра алмай. Табышының бер өлөшөн һәр саҡ йәшерен урынға ташып ҡуйғаны өсөн убыр тип уйлайҙар. Исеме күп унын. Норвеждар “тау бесәйе”, финдар “тау йәнлеге”, шведтар “ҡыйыу” тип йөрөтә. Ысын исеме кем икәнен уйла шунан.

Степан Маврҙы эҙҙәр янына етәкләп китерҙе һәм :

- Эҙлә! – тип бойороҡ бирҙе.

Эт эҙҙе ентекле еҫкәне лә ағастар яғына тартылды. Макарычтың эттәре лә унын артынан эйәрҙе.

- Ишетәһеңме, студент, - тип иҫкәртте Степан Васяны. – Эттең өрөүе күп нәмәне аңлата ул .Аҡыллы эт, йыртҡысты ҡыуалап етһә, шым ғына һәм һирәк кенә өрә. Йыртҡысты ла ҡурҡытмаҫҡа, хужаһына ла ишара бирергә тырыша. Хужаһы яҡынлашҡас уҫал итеп, лауылдап өрөргә тотона.

Тиҙҙән эттәрҙең сәмгә бирелеп лауылдап өрөүе яңғрап китте. Һунарсылар шырлыҡ араларын йыра-йыра тауыш килгән яҡҡа табан

йүгерҙе. Эттәр һаҫыҡ еҫ сәсрәү арҡаһында шыңшышып, танауҙарын үләнгә һөртөп маташа. Бигерәк тә Мавр ныҕыраҡ ризаһыҙ. Шыйыҡса уның танауына ғына эләккәйне.

Ә теге икәү, һаҫыҡтарын һирпә һалып, эттәр ыуаланған арала һыпыртып өлгөргәйне инде. Эттәр, ғәйептәрен тойоп, хужаларына тоғролоҡло ҡараштары менән текләргә маташты. Тик улары эттәргә эҙҙәр буйлап йыртҡыстарҙы артабан эҙәрлекләргә ҡушҡас, ары йүгерҙе.

Улар һунарсыларҙы көнө буйы тиерлек әрәмә араһынан йүгертеп, хәлдән тайҙырҙы. Росомахаларҙың эҙенә төшәләр ҙә юғалталар, төшәләр ҙә юғалталар.

- Бүре алғырҙары! – тип әрләп алды Макарыч эттәрҙе.

- Росомахалар еҫ һиҙеүҙәрен томалағас, нишләһендәр, - тип эттәрҙе яҡланы Степан.

Һунарсылар төп эштәрен дә онотманы. Юлда осраған йәнлек эҙҙәрен билдәләп барҙы.Бәғзе йәнлектәр күҙҙәренә лә ташланды, ҡайһы берҙәренең эҙе, нәжесе осраны. Күберәген сел, ҡуян эҙҙәрен тап иттеләр.

- Айыу тамғалары! Степан Ермилович, ҡарағыҙ әле, айыу тамғалары! – тип һөрәнләне Вася. Ысынлап та, айыуҙың пихта ағасын тырнаған эҙҙәре ярылып ята. Һыҙырылған урындан ыҫмала аға.

- Маладис! Иғтибарлыһың!- тип маҡтаны Степан Васяны. – Тик улай бик һөрәнләмәҫкә тырыш. Йәнлектәрҙе ҡурҡытырһың. Ниндәйерәк мөһабәт йыртҡыс үткән бынан. Юғарылағы тамғаларға ҡара! Хәйер, улар араһында ла хәйләкәрҙәр етерлек. Бәләкәйерәк буйлылары таяҡ менән тырнап, өҫтәгерәк урынды тамғалай, биләмә хужаһын был тирәнән ҡыуа, йәнәһе. Әммә биләмәгә хужа айыуҙар ҙа асыҡ ауыҙ түгел, тамғаның тәрәнлегенә ҡарап, дәғүәсенең көсөн тиҙ баһалай.

Көн ауышыуға йөндәренә дегәнәк һырыған эттәр һунарсыларҙы ҡырсынлы яр буйына килтереп сығарҙы.Әммә росомаха эҙҙәренең әҫәре лә юҡ булып сыҡты. Эттәр көндөҙ йылынған ҡырсын өҫтөндә тегеләй ҙә, былай ҙа йүгергеләп йөрөп алды һәм телдәрен һәлендереп шымып ҡалды. Һаҫыҡ еҫтән алйыған Маврҙың бөтөнләй кәйефе ҡырылғайны. Макарычтың эттәренә лә бөтә ерҙән дә росомаханың һаҫығы сығып торған кеүек.

- Эх уңмағандар! Росомахалар төп башына улттыртты бит үҙегеҙҙе! – тип шелтәләне эттәрен Степан.

- Йылғаның арғы яғындағы күлдә утрау бар. Йәшеренер урын етерлек. Шунда һыпырҡандарҙыр,- тип һығымта яһаны Макарыч.

- Иртәнсәк күҙ күрер, ә хәҙергә төнөн ҡуныр ер әҙерләргә кәрәк.

- Степан, бәлки минең торлаҡҡа барып ҡунырбыҙ. Бынан бик алыҫ түгел, ике саҡрым тирәһе,- тип тәҡдим итте Макарыч.

- Ә ниңә? Була ул! Киттек!

Һигеҙенсе глава

**Әңгәмәләр**

Нигеҙе бер ни тилем ергә һеңгән, бәләкәй тәҙрәле, киң ҡыйыҡы алғараҡ сығып торған бәләкәй өй тау менән шишмә араһына урынлашҡайны. Стенаһының бер ҡабырғаһына ярылған утын өйөлгән. Шишмә яғына табан нәҙек кенә һуҡмаҡ һалынған. Ҡышлау өйө янына етәрәк ағас башынан ике сел күтәрелде. Кәйелештеләр ҙә һыҙғыра башланылар.

- Таныны, хәйерһеҙҙәр, - тип һөйләнде Макарыч. –Мин уларҙы ҡыш буйы ашатам. Йырлашҡан булалар!

Өйҙөң ишегенә тыштан бүрәнә терәтелгән, елләп торһон өсөн ярым асыҡ ҡалдырылған. Эсе ҡараңғы, һалҡынса. Бәләкәй тәҙрәнән өҫтәл өҫтөнә һәм йылдар буйы саң ултырған түбәгә генә яҡтылыҡ төшә. Өҫтәл янында болан тиреһе ябылған таҡта ширлектәр бар. Стенаға һауыт-һаба, бау, бүтән кәрәк-яраҡ һалынған кәштә эленгән. Түшәм тирәһендә кейем киптерә торҙан урҙа бар.Тимер мейес ишек төбөндәрәк урынлашҡан.

Ризыҡты усаҡ тергеҙеп тышта йүнәттеләр. Усаҡ төтөнө яҡындағы ағастарҙың япраҡтарын һелкетә. Арыған эттәр тәпәйҙәрен һуҙып ергә ятты. Ойоп киткән Мавр төшөндә лә һунарын дауам итә ине булһа кәрәк. Ара-тирә ҡойроғон болғап, шыңшып ҡуя.

Тамаҡ ялғап, шишмә һыуында һауыт-һабаларын йыуып ҡуйҙылар. Мәтрүшкә, ҡарағат япрағынан бешерелгән сәйҙе, серекәйҙәрҙән ҡасып өй эсендә эсергә булдылар. Макарыч ишек ярығынан саҡ һыйып барып инде.

- Был өйҙө һалғанда ябыҡ инем, - тип аҡланды үҙе.

- Ҡасан һалып ингәйнегеҙ һуң?- тип ҡыҙыҡһынды практикант.

- Һин тыумаған булғанһыңдыр әле.

Ҡараңғыланғайны. Шәм ҡабыҙҙылар.Стенаға бысаҡ менән беркетелгән яҙыуға күҙҙәре төштө.

- Кемдер ҡунып сыҡкан, - Макарыч яҙыуҙы практикантҡа һондо.-Уҡы әле, мин күҙлегемде алмағанмын.

- “Күрше, ҡышалағың өсөн рәхмәт! Был бысаҡты ҡор өсөн бүләккә ҡалдырам. Ғәйеп миндә. Һинең биләмәнән атып алдым. Үпкәләмә. Ҡосаҡлайым. Лукьян.”

- Атып алыуы хөрт. Йәшермәүе – яҡшы, - тип ҡуйҙы охотовед.

- Шулай булмай ни! Алдаштыңмы – фарттан ҡолаҡ ҡаҡтың тигән һүҙ! Гонаһыңды танмаһаң, күңелеңә лә тыныс.

- Ысыны шул. Намыҫлы йәшәүгә етә буламы! – тип ризалашты Степан һәм усы менән ҡуйы бөҙрә сәстәрен артҡа һыпырып ҡуйҙы. Сәсе араһынан сүп-сар ҡойолоп китте.

Электән шулай ҡабул ителгән инде, һәр һунарсының үҙ биләмәһе бар. Бер-береһенең ерҙәренә инеп һунар итеүҙән тыйылалар. Ә урмандағы ҡышлау өйҙәренә, лапаҫҡа йоҙаҡ элеүсе юҡ. Йола шундай.Кеше табышына ҡул һуҙып оятҡа ҡалғыһы килмәй берәүҙең дә.

- Михаил Макарович, һорау бирергә мөмкинме?- тип өндәште Вася.

- Әйҙә, һорап ебәр, булмаһа!

- Муйынығыҙҙағы яраны айыу һалдымы әллә?

- Бынауыны әйтәһеңме? Был ярамы ни ул? Яра бына ҡайҙа ул! – Макарыч еңен төрөп, беләгендәге ярҡаланып ятҡан күкһел ыҙандарын асып күрһәтте. – Дөрөҫөн әйткәндә,бындай хәлгә тарыуымдың ғәйебе – миндә.Хәл былай булды... Айыу бит, ғәҙәттә, өңөндә башын көньяҡҡа һалып ята. Лукъян менән беҙ һайғау тығып тиҫкәре яҡтан көргөй башланыҡ. Ҡараһам, алдымда ғына ҡар күтәрелә башланы һәм олоғара ҡара болот хәтлем януар ажғырып килеп тормаһынмы! Һайғауҙы тешенә эләктерҙе был. Әйҙә һелкетә, әйҙә һелкетә, тегеләй ҡайыра, былай ҡайыра. Ике яҡтан ике эт ләүкелдәшә башланы. Айыу бер заман былар яғына табан йомолорға итте. Ярай ҙа Лукъян сос булып сыҡты. Тоҫҡай һалып атып ебәрҙе. Бер атыуҙа йығып та һалды.

- Эттәрегеҙ шәп һеҙҙең!

- Этең арыу булһын шул ул.Насар эт ни...Унан ниндәй файҙа, - тип ғорурланып ҡуйҙы Макарыч.

Сәйен эсеп бөткән Макарыч өҫтәлдәге ризыҡ валсыҡтарын усы менән һыпырып йыйҙы ла ауыҙына оҙатты.Ә Васяның ҡыҙыҡһыныуы артҡандан-арта ғына бирҙе.

- Ҡышҡыһын өңөндә ятҡан айыу табанын ялай, тиҙәр. Шул ысынмы ул?

- Алдаҡ! Ете айыу алдым, һәммәһенең дә табаны ҡоп-ҡоро ине. Йәнә шуны ла иҫеңдә тот: айыу, китаптарҙа яҙылғанса, бер ҡатлы һәм ауыр ҡуҙғалыусын йыртҡыс түгел. Йылғыр, шәп йүгереүсән ул, шайтан алғыры. Ә башының йоморолоғон белһәң! Былтырғы көҙ берәүһе менән байтаҡ айҡашырға тура килде. Һунар һуҡмағыма һуҙған бау буйлап йөрөп ҡапҡандарҙы барламасы булдым. Ҡайһы береһен яңырта барам, ҡайһы

береһен рәтләйем, яңыларын ҡорам. Күрәм, минең элекке эҙҙәр эреләнә бара. Ике йөҙ метр тирәһе араға һуҙылған был ҙур-ҙур табан эҙҙәре. Артабан – үҙемдең эҙҙәрем.Танылып тора.Кире боролоп юлды яңынан үтәм. Айыу нәҡ минең эҙҙәргә баҫып атлаған икән.

Киренән алға табан атлап барам. Эҙҙәрем үҙемдеке булған ергә еткәс, шул тирәне әйләнеп сыҡтым. Ҡараһам, алты метрҙар тирәһе ситтәрәк ҡар соҡоро күренә.Шәйләйһеңме, айыу , эҙ яҙлыҡтырыу өсөн ниндәй оҙонлоҡҡа һикергән?! Арыраҡ йәнә шул самалы уҡ оҙонлоҡтағы соҡорланған урын бар, икерәт оҙон-оҙон һикереп, эҙҙәрен йәнәһе аймылыштырған да артабан ҡәҙимге аҙымдар менән атлап китеп барған был. Тау яғына һыпыртҡан. Ярар, мин әйтәм, иртәгә эттәрҙе эйәртеп килермен дә ҡарарбыҙ, кемебеҙ хәйләкәрерәк һуң? Һине генә аңдып ауларлыҡ һәләт беҙҙә лә бар ул! Ә иртәгәһен...- Макарыч пауза яһап алды. – Иртәгәһен ишеп ҡар яуап ебәрҙе. Ҡар өҫтөндәге барлыҡ эҙҙәр ҙә юҡ булды ла ҡуйҙы. Башы эшләй, ҡасан өңгә сумырға кәрәклеген яҡшы белгән бит.Өңөнә сумыр алдынан һуңғы сәйәхәтен ҡылып, эҙҙәрен ҡар ҡапларын,таба алмаясаҡтарын белеп, эшен бөтөрөп, ятып киткән булып сыға.

- Бер китаптан уҡығайным. Росомаха лилипут айыу икән ул.

Степан көлөп ебәрҙе:

- Шаштырғандар! Росомаха айыуға оҡшаш ул, әммә сығышы – һуҫарҙарҙан. Айырым росомаха группаһына ҡарай. Һуҫарлылар араһындағы иң эре йыртҡыс. Зоологтар уны гигант һуҫар тип тә йөрөтә. Уны лилипут айыу тип түгел, Гулливер һуҫар тип атау хәйерлерәк.

Бер ни тиклем ваҡыт сәйҙе һөйләшмәй генә һемерҙеләр.

- Һеҙ, Михаил Макрович, күберәген нисек һунар итәһегеҙ икән, - тип өҙмәне лә ҡуйманы студент. –Ҡапҡан һалаһығыҙмы, йәнлекте ҡыуалап, эҙәрлекләп тотаһығыҙмы?

- Январҙы ҡапҡан менән аулау еңелерәк, әлбиттә. Ә эҙәрлекләү... Ул һунарсының күп көсөн ала, тик табышыңды ҡыуып етеп әләктереү - ҡыҙығыраҡ. Һунар ҙа итәһең, дәртең , ҡомарың да ҡана.

- Ә минең, Степан Ермилович, шуға иғтибар иткәнем бар: йәнлектәрҙең күҙе һағышлы була...Нишләп икән?- студент Вася охотоведҡа текәлде.

- Хоҙай белһен. Бәлки, йәшәү шарттары ауыр булғанғалыр, бәлки, ғүмерҙәре ҡыҫҡа булырын аңлауҙандыр, ә,бәлки, беҙҙән, кешеләрҙән, уларҙы ауларға яҫҡыныусы һунарсыларҙан ҡурҡыуҙандыр.

Арығайнылар ҙа. Әммә һөйләшеүҙән туктай алманы Һунарсылар. Ятып китергә ашыкманы. Сәйҙәрен яңырта-яңырта, тәжрибәләре, күргән-белгәндәре менән уртаклаша-уртаклаша ултыра бирҙеләр.

- Вася, һин дә беҙгә берәр нәмә һөйләр инең. Һорашаһың да һорашаһың...Укып йөрөйһөң, бәлки һин беҙ белмәгән нәмәләр хакында хәбәрҙарһыңдыр? Һөйләп ебәр үҙең белгәндәрҙе. Ә, Вася?..-

Тәжрибәле һунарсыларҙың һөйләгәндәрен хайран калып тыңлап ултырған һәм үҙе өсөн күп асыштар, мәғлүмәт туплаған Вася быңдай һорауҙы көтмәгәйне, юғалып калғандай булды.

- Әлләсе...Мин нимә һөйләй белермен икән...

- Киләһе йыл диплом алаһың. Дипломыңдың темеһын һайланыңмы?

- Һайланым.Етәксем Уссурий янутының, дөрөҫөрәге янут этенең беҙҙең Киров өлкәһе климатына яраклашыуы хакында материал тупларға кушты.

- Кыҙык тема. Теге йәки был януарҙың яңы шарттарға яраклашыуын күҙәтеү һәйбәт эш. Яңы ергә һәм яңы шарттарға кулалаша , яраклаша алмағандары ла етерлек уларҙың, араларында кулайлашып үтә үрсеп киткәндәре лә бар.Иҫегеҙҙәме, илленсе йылдарҙа Утлы Ергә кырк Канада кондоҙон килтереп ебәрәләр. Хәҙер уларҙың һаны дүрт йөҙ меңдән ашып киткән. Нисек котолорға белмәйҙәр.Турай былар күҙенә осраған һәр ағас, бүрәнәне. Үҙҙәренең кылығы, йәшәү формаһы менән йәшәй бирә. Үрсей.

Ә януттар хакында бер кыҙык вакиға һөйләй алам.Өсөнсө курстан һуң Алыҫ Көнсығыштағы Имән йылғаһы буйында практика үткәйнем. Ул якта август айындағы муссон ямғырҙарынан һуң йылғалар яҙғынықына карағанда ла ғәләмәтерәк булып таша.

Мин практикаға барған йылды һыуҙар иҫ киткес нык ташып ята ине. Беҙ, егерь менән икәүләп, убаларға касып өлгөрмәгән януарҙарҙы коткарыу максатынан,кәмә менән утрауҙарҙы барлап йөрөнөк.

Бер утрауҙа янут эттәрен тап иттек. Аяктары һыуҙа. Үҙҙәре һыу аҫтында калған өңдәре тирәһенә өймәкләшеп, өшөүҙән һәм куркыштан дер калтырашып ярҙа ултыралар. Якынланык. Коткарасактарын аңлап микән, шатлыктарынан яр буйлап йүгереклэп маташалар, ә кәмәгә ултырырға куркыша, бисаралар. Тештәрен ыржайтып ,ырылдап маташкан булалар. Йәнәһе лә карағыҙ уны, беҙ ҙә төшөп калғандарҙан түгел. Егерь, януттарҙың янап маташыуына карап торманы, тып-тыныс кына ярға сыкты ла быларға шундай итеп екереп ебәрҙе, тегеләр, куркышынан, йығылдылар ҙа киттеләр. Йығылмағандарын егерь типкесләп йыкты ла һалды. Күрһәгеҙ шуларҙың киәфәтен! Былар һәммәһе лә ,үлгән кеүек, һуҙылышты ла ятты. Кыҙык!

Алтауһын тоҡҡа тултырып алдыҡ, етенсеhе һыйманы. Унаһын кәмәнең төбөнә һалып алырға тура килде. Кәмәбеҙ йөҙә, ишкәктәр шығырлай. Януттарыбыҙ ҡурҡышынан ҡыбырлмай ҙа ята бирә.Берәре ҡуҙғалһа егерь "Йә! Тик ят!" тип аяғын тыпырлатып ҡына ҡуя. Ә иҙәндә ятҡаны башын егерьҙың кәмә төбөндә ятҡан курткаһы эсенә тығырға маташа. Йәшенә йәнәһе лә. Ярҙың бейегерәк урынын һайлап, быларҙы ергә төшөрҙөк. Киттеләр кемеһе-ҡайҙа сабышып. Беҙ иһә яңы утрауҙарға табан юл алдыҡ.

Эңер төшөүгәрәк бер ярайһы ҙур янутҡа юлыҡтыҡ. Был кәмәгә үҙе һикерҙе.Йәшәргә теләү тойғоһо ҡурҡышынан көслөрәк булған, күрәһең. Бынаһын егерь иркенгә ебәрмәҫкә булды. Тоғона һалып алып өйөнә алып ҡайтырға, ҡатынын шаяртырға ниәтләне. Өйөнә инеп тоғоноң ауыҙын ысҡындырыуы була, ҡатыны дыу итеп ҡала:

- Хыялландыңмы әллә? Шул лысма еүеш этең генә етмәгәйне өйҙә!

Ҡатындың тауышланыуынан янут һушһыҙ йығыла ла китә.

- Күрәһеңме, - ти егерь ҡатынына,- һинең тауышыңдан хатта ҡыр януары йәнен бирҙе. Ә мин нисәмә йылдар һиңә ҡабырға терәп йоҡлайым.Баһала!

Дәррәү көлөп ебәрҙеләр:

- Шәп иткән! Минең ҡарсыҡҡа ла берәр һабаҡ уҡытып алаһы бар әле ул. Юғиһә, артығын сөңкөлдәп ташлай, - тип һөйләнеп ҡуйҙы Макарыч. Васяны маҡтап алды. Уйланып ултыра торғас, йәнә телгә килде. Башта охотоведҡа һынап ҡарай биреп торҙо.

- Арыу кеше һин, Степа. Һүҙгә лә оҫтаһың. Хөрмәт итәм мин һине. Уҡыуыңды тамамлағас, ауылға ҡайттың. Минеке,ана, "урбанизация" менән ауырый. Ҡалалағы таштар араһында ниндәй йәм табалыр?Ул ҡаланың бит килеп тороп һыуы тәмһеҙ, һауаһы тын алғыһыҙ, урам тулы тауыш, этеш-төртөш. Миңә ҡалһа,тайга күгенән дә яҡшыраҡ ҡыйыҡ, ыршы ботаҡтарыры аҫтынан да арыуыраҡ өй юҡ ул. Бөгөн бер ерҙә ҡунаһың, иртәгә – икенсе урында. Матурлыҡ! Тын алыуы рәхәт!

- Дөрөҫө шул. Тайга – ирекелек, ҡала- төрмә!- тип ризалашты уның менән Степан.

- Беҙҙә бит халыҡ та арыу. Боҙоҡ түгел!

- Ысынлап та, халыҡ намыҫтың ни икәнен белә. Ә ҡалала ни!? Начальник беҙгә берәүҙәрҙе эйәртеп алып килгәйне. Ҡоралланып алған былар. Карабиндары оптикалы, төндә яҡтырта торған приборҙар алғандар. Һунарға килгән берәүҙәр.Ниндәй һунар булһын ул, януарҙы ҡырыу, шул ғына!

- Бәй, һеҙ ҙә януар-йөнлек аулайһығыҙ бит, - тип ҡуйҙы Вася.

- Э-э-э...студент, айырмаһы бар.Улар ләззәт өсөн йыға, ә беҙ ғаиләбеҙҙе туйындырыр өсөн. Ләззәт өсөн үлтереү – гонаһ!

- Ә улайһа, нишләп росомаханы эҙәрлекләйбеҙ? Уның ите ашауға яраҡһыҙ ҙа баһа.

- Беҙ уны үлтерергә йыйынмайбыҙ. Зоопаркка тапшырырға итәбеҙ. Ҡаланыҡылар беҙҙең тайгала һирәк осрай торған ниндәй сәйер януар йәшәгәнен белһен.

- Минеңсә, ул йыртҡысытың булғанынан булмағаны артыҡ. Бигерәк мәкерле, этлекле мәхлүк. Ашауынан бигерәк ҡараҡлығы, ризыҡты һаҫыҡ сәсрәтеп тәләфләүе күберәк, - тип йәне көйөп әйтеп ҡуйҙы Макарыч.

Степан йылмайып ултырҙы.

- Эх, Макарыч! Ғүмерең буйы тайга ҡыҙыраһың, ә төшөнмәгәнһең, тайгала файҙаһыҙ януар булмай. Һәммәһенең дә үҙ бурысы, үҙ урыны бар. Росомаха иң кәрәкле йәнлектәрҙең береһе ул. Ул бит һәләк булған йәнлектәр емтеге менән туҡлана, тимәк, урман - санитары.Ә кешеләрҙән ул һунар иткәндәре, тайга йөнлектәрен аулағаны өсөн үс ала.Беҙ, һанап ҡара, йыл әйләнәһенә нисәмә-нисә йәнлектең башына етәбеҙ? Минеңсә, росомаха, ғәҙеллек көрәшсеһе. Минең атай-ҡарттың баҙына эйәләшеүе лә юҡтан түгел. Ҡышҡыһын атып яралаған бит ул уны. Росомаха, үҙенә күрә – Робин Гуд.

Туғыҙынсы глава

## Утрау

Төн ҡараңғыһы саҡ-саҡ тартылып, таң һарыһы һиҙелеү менән, Степан иртәнге аш әҙерләргә лә тотондо. Һунарсылар ҙа уянышты, ҡабалан-кабалан ҡапҡылап алдылар ҙа росомаханы эҙләргә тип сығып киттеләр.

Йылға һайыҡҡан, шулай ҙа уның эсенә инеп кисеп торманылар,аръяҡҡа арҡыры ауған ағас баҫманан сыҡтылыр. Эттәр ҙур шатлыҡ менән йылғаны йөҙөп сыҡты. Ярға сыҡҡас та һелкенешеп һыуҙарын сәсрәттеләр ҙә урман шырлығына инеп тә киттеләр.Росомахының эҙен тиҙ тапты эттәр. Эҙе ысынлап та күл янына алып килде. Дөрөҫөрәге, йылғаның иҫке быуынына. Күлдең яры тотош ылымыҡ менән ҡапланған. Һыуҙың эсендәрәк тә ваҡ ҡына үҫентеләр үҫеп ултыра. Алдараҡ барған Мавр, ҡыҙыулыҡ менән һыу эсенә инеп киткәйне, аяғына ылымыҡ уралыуҙан кире боролдо.Бүтән эттәр ҙә ҡыймайыраҡ яр буйында тапанды.

- Беҙҙең эттәрҙең тәпәйҙәре тар шул! Росомаханыҡы ни, саңғы һымаҡ бит, яҫы. Ҡышҡыһын йөнө ҡуйырғас йәнә лә киңәйеберәк китә, инәһенә балалар тәрбиәләргә ярҙам иткән айыу балаһы-пестундыҡынан кәм түгел, - тип аңлатты Степан студентҡа.

- Бынан алыҫ түгел урында иҫке дин тотоусы скитниктарҙың кисеүе бар ине. Миңә уны ағайым күрһәткәйне. Шул яҡҡа барып ҡарайыҡ.Яр буйында кисеүгә ишаралаған тамғалы ағас булырға тейеш. Шул ағасты табырға кәрәк.

Михаил Макаровичтың хәтере яңғылышмаған икән. Ыҫмалаһы ағып торған тамғалы ҡарағай тирәһендә һыуға таяҡ тығып, йылға төбөнә түшәлгән ағастар буйлап утрауҙың ҡултығына килеп сыҡтылар.

- Ошонда булығыҙ. Эттәр ҙә йөрөмәһен. Тартмағыҙ, еҫе өркөтөр, - тине Степан. – Мин разведкаға барып киләйем.

Степан китте лә юғалды. Бер сәғәтһеҙ әйләнеп килмәне.

- Һыу өҫтөндәге тәлмәрйен тәңкәләре үҫеп ултырған урынға ылымыҡ йыйылған, росомахалар шул тирәнән йөҙөп сығып, ярҙа тәнендәге һыуын ҡаҡҡандар. Эҙҙәре убаға табан киткән. Утрауҙы урап сыҡтым, улар өсөн бынан ҡасыр урын юҡ. Бында улар. Ҡайҙалыр ошонда боҫоп ята. План былайыраҡ: мин арғы яҡҡа барып яр буйлатып ау һуҙам, ә һеҙ берәр сәғәттән ҡысҡырышып, шаҡылдап уларҙы минең яҡҡа ҡыуаларға тырышығыҙ.

Сәғәт тигәндә Макарыч менән Вася ағас туҡылдата-туҡылдата ҡысҡырынып, яр буйлап китте. Бәйле эттәр баштараҡ шым ғына килә ине, кешеләрҙең ғәҙәти булмаған ҡылығы ыңғайына улар ҙа лауылдап өрөргә тотондо.

Росомахалар иҫке дин тотоусылар скиты хәрәбәләренән өҫтәрәк, яланғас таш өҫтөндә ята ине. Ҡысҡырышҡан, эт өргән тауыштарҙы ишетеп,утрауҙың ситенә табан йүгерҙеләр. Тартылған ауға барып төртөлгәс, уны буйлатып ҡотолоу юлын эҙләп киттеләр. Степан һауаға атып ебәрҙе. Йыртҡыстар ҡурҡышынан икеһе ике яҡҡа ташланды һәм ҡарағай ағасы башына һикереп менеп, ботаҡтар араһына йәшеренде. Утрауға дарының серек йомортҡа кеүек һаҫыҡ еҫе таралды.

Эттәр бейек булмаған ағасҡа менеп ҡунаҡлаған арланды уратып алып абаларға тотондо. Макарыч эттәр абалауынан тоҫмаллап, эҙәрлекләнгән януарҙарҙың ошо тирәлә булыуын аңғарҙы һәм яурынынан мылтығын һыпырып алды.

- Тереләй алабыҙ! – тип ҡысҡырҙы Степан. Рюкзагынан йыш үрелгән ауын килтереп сығарҙы һәм ағасты уратып элеп ҡуйҙы. Ҡайын ботағын ҡырҡып алып осланы һәм уға капрон бауҙы ырғаҡлап бәйләне.Шунан арлан росомаха менеп киткән ағас янына барып,таяғындағы ырғаҡты

ырылдап ултырған януарға ташланы һәм уның тәпәйенән эләктереп, башта аҫҡы ботаҡҡа, аҙаҡ ергә һөйрәп төшөрҙө. Макарыч ул арала росомаханы һалдат одеалы менән ҡаплап өлгөрҙө. Шунан уның тәпәйҙәрен "букет" итеп тышаулай һалдылар, башына ҡапсыҡ кейҙерҙеләр. Эттәр абалап өргән икенсе ҡарағай янына киттеләр. Росомаханың бынаһы бейегерәк үрләгәйне. Оҙонораҡ таяҡ ҡырҡып алырға тура килде. Степан уны юғарыға ырғытып ебәрҙе, ләкин тегеләй ҙә былай ҙа елберләгән таяҡ осондағы ырғаҡты януарҙың тәпәйенә кейҙерә алмай ыҙаланды. Биш минут тирәһе шулай хитланғандан һуң ергә ултырҙы, ырғаҡты киңәйтергә булды.

- Ҡаса! Ҡаса!- тип ҡысҡырып ебәрҙе Макарыч.

Мылтыҡ атылып китте. Степан шыршылар араһына инеп һыпыртҡан йәнлектең күләгәһен генә күреп ҡала алды.

- Япон городовойы! Өҫтән китте! Кәүҙәһе лә ауыр бит, ә тейен кеүек еңел һикерә!Атып өлгөрҙөм дә бит, тейҙерҙемме икән?

- Тереләй алырға тип әйттем дә баһа!- охотовед шулай һөйләнде.

Кәйефе ҡырылған һунарсылар утрауҙы арҡыры-буй айҡап сыҡты. Яр буйын да ҡыҙырып ҡаранылар. Эҙ-фәлән күренмәне. Эттәр ҙә тауыш бирмәне. Телдәре булһа, ҡуян, сел, һуйыр еҫтәре барлығын, ә росомаха еҫе килмәүен һөйләрҙәр ине.

- Вәт шайтан алғыры, -тип ыуаланды Макарыч,- һис нәмә аңларлыҡ түгел, ер аҫтына ингән кеүек булды ла ҡуйҙы.

## Унынсы глава

## **Йоҡо урыны**

Эңерҙең ҡуйыра барыуы төнгөләккә ҡуныу урыны хаҡында хәстәрлек күрергә ваҡыт икәнлеген иҫтәренә төшөрҙө.

Йыуан кедр ағасы янына еткәс Степан туҡтап ҡалды:

- Иҫәп алыусы иптәштәр! Туҡтарға ваҡыт!- тине һәм арҡаһындағы рюкзагын һыпырып төшөрҙө.

Вася усаҡ ҡабыҙҙы һәм кәкере таяҡҡа ҡараһына ҡатҡан сәйнүк элде.

Һунарсылар ергә ҡойолған шыршы энәләре өҫтөнә ятты.Эңер ҡуйыра төштө. Таҙа күк йөҙө башта ҡыҙғылтланып торҙо, артабан ҡарағусҡыл көмбәҙгә йондоҙҙар һибелде. Тау башына эленгән Етегән йондоҙҙоң сүмесенән, тау үркәстәренә ҡап-ҡара буяу түгелеп төштө.

Усаҡ ялҡыны өҙөк-йыртыҡ ҡына ағас баштарын яҡтыртып ялпылдай.Энәләрҙән түшәлгән түшәк йомшаҡ, арыған тәнгә ял бирә. Арығанлыҡ ер эсенә ағып төшкән кеүек, ә юғарынан көс иңгәндәй. Ләкин ҡуҙғалырға кәрәк. Үҙҙәренә бутҡа, эттәренә лә ризыҡ бешерәһе бар.

Мәшҡәттәр тамамланғас, һунарсылар йәнә усаҡ тирәһенә йыйылышты. Степан йыртҡыстың башын ысҡындырҙы. Ул ҡурҡыныс итеп ырылдап ҡуйҙы. Арлан. Ҡап-ҡара мәрйен кеүек күҙҙәре уҫал ялтырай. Тәпәйҙәре ныҡлап сорналмаған булһа, һуғып та, тырнап та ебәрер ине лә.

Охотовед Васяны саҡырып алды:

- Бына, студент, таныш бул: росомаха. Күрәһеңме, башы ысынлап та айыуҙыҡына оҡшаған. Тик мороно ла, ҡолаҡтары ла ҡыҫҡараҡ. Ә йөнө оҙон. Шул арҡала ҡиәфәте шөкәтһеҙ һәм ҡупырыҡ булып күренә.- Степан әсир януарҙың арҡаһынан һыпырып ҡуйҙы.- Һин дә һыпырып ҡара, йөнө ебәк кеүек. Ана шундай шыма йөнлө булғаны өсөн дә өҫтөнә бәҫ ултырмай, шыуып төшөп тик тора. Ҡабырғаһында аҡһыл ышлыяны күрәһеңме? Ул һәр ваҡыт яурынынан ҡойроғона саҡлым һуҙыла. Маңлайында ла һыҙаты бар. Шул арҡала күҙҙәренең тирәһе ҡап-ҡара булып күренә.

- Матур януар. Ә беҙҙең китапханала уның хаҡында бер генә китап та юҡ.

- Ғәжәп түгел. Росомахалар хаҡында, ғөмүмән, аҙ яҙалар. Ә ул матур булыуҙан тыш ҡыҙыҡ та йәнлек әле. Уның күп сифаттары ихтирам уята. Арымай, хәрәкәтсән, йылғыр, ҡурҡыуһыҙ януар.Бер кем алдында ла юғалып ҡалмай. Айыу алдында ла, бүреләр алдында. Бүреләр кеүек, тик-томалдан ҡан ҡойоуға ла бармай. Росомаха - йыртҡыс, тик бик тотанаҡлы. Эһей, Макарыч, быларҙы һинең өсөн дә һөйләйем!

- Тотанаҡлы, имеш! Этлек эшләргә, урлашырға әҙер генә торалар, шул ғына. Ҡараҡ бит улар килеп тороп.

- Нишләп ҡаҙалдың шуларға? Ниндәй насарлығын күрҙең?

- Миңә эшләмәнеләр, ә халыҡ һөйләй.

- Кеше нимә генә һөйләмәҫ. Йыртҡысҡа үҙең ҡағылмаһаң, ул һиңә ҡағылмай. Хәйер. росомаханан башҡалары ла шундай ул януарҙарҙың. Минең класташым Антипты иҫләйһеңме? Ул йәнлекте тереләй аулау һунарында йөрөнө.

- Иҫләмәй ни, иҫләйемсе. Ялҡау булды. Һин уның инә айыу менән булған хәлен иҫеңә төшөргәнһеңдер.

- Шул иҫкә төштө шул.

- Ә ниндәйерәк ваҡиға ул? – студент ҡыҙыҡһынып китте.

- Әллә ни шәп ваҡиға түгел, - тип мығырланы Макарыч,- ана Степан һөйләһен.

- Ысынында фәһемле ваҡиға ине ул... Бер айыу балаһы ау соҡорона эләккән була. Ә һунарсы Антип, уларҙы һирәк тикшереүе арҡаһында, януар астан үлеп ятҡан. Инә айыу соҡорға яҡын ғына ергә йәшеренеп , һунарсының килерен көтөп ята. Тегенең үҙе ҡаҙған соҡоға яҡынлауы була, айыу быға ташлана һәм иҙеп кенә һала. Айыуҙарҙы яуыз хайуан тиерһеңме шунан? Үс арҡаһында кешеләр ҙә бит бер-береһен үлтереп ҡуя.

Һунарсылар әңгәмәләшкән арала эттәр таҙарынырға тотондо. Бигерәк тә Маврҙың ныҡлап таҙарынғыһы килә. Тик нисек кенә тырышмаһын, теге әсе һаҫыҡ еҫ таралмай, эт хатта быуылып йүткерергә тотона.

- Йә, нисек һаҫыҡ хайуанҡай? Йылғырыраҡ булһаң, һаҫыҡҡа ҡойонмаҫ инең, - тип арҡаһынан һыпыра Степан. Эт хужаһының ҡулы аҫтында бөгөлөп китә, ә күҙҙәрендә- шатлыҡ һәм тоғролоҡ атҡылары уйнай. Хужаһының теләһә ниндәй бойороғон үтәргә әҙер булыуын белдерергә итә.

Төнгө һиллекте көслө бүре олоуы телеп ебәрҙе. Бүре шымыраҡ ҡына шыңшып тора ла тауышын йәнде тертләтерлек итеп күтәрергә тотона.Уныҡына нәҙегерәк, әммә уҫал йәнә бер тауыш ҡушыла.

- Студент, һинең практикаң һәйбәт үтә. Тыңла! Йәш бүре үҙенең барлығын белдермәксе. Тормошонан ҡәнәғәт икәнлеге хаҡында яу һала, - тип шыбырлай һалды Макарыч.

Ике бүренең олоуы бергә ҡушылып, елле дуэт ойошорға ла өлгөрмәне, быларына өсөнсө олоу тауышы ҡушылып китте. Әллә ҡайҙан тәрәндән сыҡҡан тауыштарҙан хәҙер инде хор барлыҡҡа килде.

- Эсте өҙөрлөк итеп, йәлләүес тауыштар сығара бүреләр.Олоуҙарында хәсрәт, һағыш бар, - тип ҡуйҙы Степан.

- Минең хатта арҡа зымбырлап китте, - тип һүҙгә ҡушылды Вася.

- Ә мин уларҙың арияларын яратам. Бигерәк тә бер нисәүһе бергә олоғанды. Тауышты әллә ҡайһы ерҙәренән, эстәренән сығаралар кеүек. Һәр береһенең тауышы ла бит үҙенсәлекле. Бергәләп тотонһалар, оркестр кеүек килә лә сыға. Иң ғәйрәтлеләренең тауышы ла ғәйрәтле.

Бүреләрҙең олоуына эттәрҙеке кеүек нәҙегерәк тауыштар килеп ҡушылды.Вася Макарычҡа һораулы ҡарап ҡуйҙы.

- Былары – балалары. Тауыш нығыталар. Бүреләрҙең хорына ҡолаҡ һалып, уларҙың нисәү, ҡайһыһы нисә йәштә икәнен дә билдәләп була.

- Шулай, бүреләр бик үҙенсәлекле хайуан. Аҡыллылар, ойошҡанлыҡ менән йәшәйҙәр. Өйөрҙә  иерархия һәм тәртип хөкөм һөрә. Һунар иткәндә һәр кем үҙ бурысын башҡара. Улар ҙа, кешеләр кеүек, төрлөсә холоҡло. Кемеһелер- ялҡау, нимә тәтеһә, шуның менән туҡлана, икенселәре самаһыҙ нәфселе. Кемеһелер өйөр ҡағиҙәһенә тоғро, ҡайһы берҙәре хыянат итергә генә тора. Ә иң ғәжәп яҡтары шунда, улар ғүмер буйы ғаилә тоғролоғон һаҡлай. Балалары хаҡында хәстәрлек күрә. Инә бүре вафат булһа, ата бүре балаларын тәрбиәләүҙе, туйындырыу хәстәрен бер үҙе башҡарыуын дауам итә. Тол көйө йәшәй, бүтән инәгә  ылыҡмай, - тип аңлатыу һүҙҙәре һөйләне Степан.

- Кешеләр бүре балаларын ояһынан алғанда инә бүре алышҡа ташланмай, тиҙәр. Ситтән күҙәтә икән. Әсәлек инстинкты насар булғанғамы икән?- тип ҡыҙыҡһына бирҙе Вася.

- Ҡатмарлы һорау.Бәлки ул  үҙен киләһе йылда тыуасаҡ балалары өсөн һаҡлайҙыр.Бәлки ҡараҡ артынан эйәреп барып, төндә ҡотҡарып алырға ниәтләйҙер. Дөрөҫөрәге – ҡурҡыуҙандыр. Кешенән ҡурҡыуҙан.Ул ҡан хәтерендә булыуы ихтимал. Сөнки бүреләр кешеләрҙең ғүмер буйы уларға һунар итеүен белә.Балаларын яҡларға маташыусыларҙың  һәләк булыуын  да күргәндәре бар.Ҡыҫылмағандары ғына тере ҡала, - тип фекер йөрөттө Степан. – Әйткәндәй, тәжрибәле бүре аулаусылар уларҙың өңөн бер ваҡытта ла тотош етемһерәтмәй. Берәр балаһын булһа ла мотлаҡ ҡалдырып китә. Тотош бушатһаң, бүреләр ул өңгә бүтән яҡын да килмәй.Ә тотош туҙҙырмаһаң, йыл  һайын уңыш йыйып алып була.

- Йоморо баш инде ул  бүреләр, - тип дауам итте Макарыч. – Степан хаҡлы. Бүреләр нисек тә инә бүрене һаҡлап ҡалыу хәстәрен күрә ул. Ата бүре үҙен ҡорбан итһә-итә, инә бүрене яҡларға тырыша. Бер шулай парлы бүреләрҙе ҡыуалайым. Саңғы кейеп алғанмын. Инә бүре алдан йүгерә, атаһы – уның артынан. Ауып ятҡан ағас тирәһенә барып еткәйнеләр, ата бүре инә бүрене тәпәйе менән һуғып йыҡты, тегеһе бүрәнә аҫтына инеп тә китте. Ата бүре бының өҫтөнә ҡар һыпырып өйә һалды. Кешеләрҙең башына ла килмәгән сослоҡтары бар бүреләрҙең.

Макрарыч ултырған урынынан тороп, ойой төшкән аяҡтарын яҙыр өсөн арлы-бирле йөрөштөрөп алды. Шунан  Васяға хәйләкәр ҡарап торҙо.

- Иң уҫал бүренең тауышын ишеткең киләме?

- Әлбиттә!

- Сабыр ит, - һунарсы яуабына серлелек һалып шыбырлабыраҡ өндәште. Тамағын ҡырып ҡуйҙы. Усынан торба яһап ауыҙына терәне, баш бармаҡтары менән ғорлаһының ике яғына баҫты, һуҡ бармағын танауының ике күҙ араһындағы еренә терәне, башын артҡа ташлай биреп ҡалын тауыш менән олоп ебәрҙе. Шунан устарын аса биреп, юғарыраҡ ноталарҙы алды.

Торараҡ һағышлы минор ноталарға көсте, уның был тауышын ишеткән эттәр шыңшып ебәрҙе.

- Бик үк шәп килеп сыҡманы, -тип хафаланып ҡуйҙы һунарсы. – Көс юғыраҡ. Хәсрәт етешмәне.

Шул саҡ Мавр олоп ебәрҙе. Ҡапыл башланы ул олоуын, һунарсылар аңғармай ҙа ҡалды. Кәнтәй башын юғары күтәрҙе лә шундай тәрән кисерешле һыҙланыу, һағыш өндәрен сығара, Макарычтың Тайфуны, ҡойроғон бот араһына ҡыҫтырып шымып китте. Ә Мавр йәнгә үтерлек, һунарсыларҙың тәне сымбырларлыҡ итеп һуҙа ла һуҙа.

Эте олоуын тамамлағас, күңеле тетрәнгән Макарыч, уны ҡосаҡлап алды.

- Һин, дуҫҡай, бигерәк шәп йырсы икәнһең дә! Бүре ҡаны бар,күрәһең, һиндә!

- Ҡайҙан!- тип шик белдерҙе Степан. – Ҡойроғона ҡара, торғаны сәүек.

Ул арала май ҡушылған тары буҡкаһы бешеп сыҡты. Вася сеүәтәһендәген ашап бөткәс, ҡырын күҙ менән генә котелокка күҙ төшөрөп ҡуйҙы.

- Оялма, Вася, ҡыр котелоктың төбөн. Бигерәк ябыҡһың, һиңә батыр ул.

Вася һүрелеп барған усаҡты яңыртты, котелок төбөн ҡырып алды.

Усаҡ ялҡыны юғарыраҡ үрләгән һайын баштарын сайҡаған кедрҙар асығырыҡ күренә. Егет шул картинаны күҙәтә торғас, йоҡлап китте. Степан оҙағыраҡ ултырҙы. Торомбаштар ялҡынының бейегәнен күҙәтте. Уны ла йоҡо ялмай башланы. Макарыч иптәштәренең өҫтөнә плащ-палатка япты һәм эргәләренә һуҙылып ятты.

Вася төшөндә үҙенең күп кешеләр йыйылған ерҙә торғанын күрҙе. Уларға табан ҙур Үрмәксе шыуышып килә, имеш. Ул юлында осраған бер кешене йота килә, бына-бына Вася янына килеп етәсәк.Вася йүгереп ҡаса башлай һәм ҡалын ҡара урманға килеп инә. Теге үрмәксе Васяны ҡыуып етте генә тигәндә, туҡтап ҡала. Ул урманға инеүҙән ҡурҡҡан кеүек. Василий иһә, шунан файҙаланып, урман эсендәге бер өйгә йүгереп барып инә. Өй әллә ниндәй сәйер. Стеналары ла, түбәһе лә үтә күренмәле. Өй янына ҡайҙандыр каска кейгән кешеләр килеп тулып, өйгә мылтыҡ менән атырға тотона.Вася бүлмәләр буйлап йүгерә, имеш, тик йәшеренер урын табылмай ҙа табылмай. Бүре олоған тауыш ишетелә, тик бүре түгел, росомаха пәйҙә була һәм каскалы кешеләрҙе тотоп йота башлай...

Төнөн охотовед та сәйер төштәр күрҙе. Ниндәйҙер бик боронғо бронтозаврҙарға оҡшаған ғәрип януарҙар, уның бәшмәк йыйып йөрөгән ҡатыны менән ҡыҙына ташланалар, имеш. Степан иһә уларҙың тауыштарын ғына ишетә: “Атай, һин ҡайҙа? Степа, ярҙам ит!” Степан уларға ярҙам итер өсөн йүгермәксе була, тик аяҡтары күтәрелмәй, гер тағып ҡуйғандармы ни!

Охотовед ҡурҡышынан уянып китте. Арҡаһы ла, маңлайы ла шыбыр тир.Охотовед ҡалтыранып ҡуйҙы. Ҡарағай ботаҡтарын, ағас япраҡтарын, янында йоҡлап ятҡан иптәштәрен күреп, был мәхшәрҙәрҙең төш кенә булғанына инанды. Шулай ҙа тиҙ генә тыныслана алманы. Торҙо ла йыуынып алырға тип шишмә яғына йүнәлде. Уны Вася ҡыуалап етте.

- Степан Ермилович, мин,беләһегеҙме, ниндәй фекергә килдем. Росомаха арыу януар булып сыға. Бәлки инәһен ауламабыҙ. Заявка бирәүгә генә, тигәйнегеҙ бит.

Охотоведтың йөҙө яҡтырып китте, йылмайып ебәрҙе һәм егеттең яурынынан ҡосаҡланы.

- Һин хаҡлы, егет кеше! Йөрөй бирһен, әйҙә!

Шул замандан һуң росомаха ауылға юлын һыуытты. Әйтерһең дә уның менән кешеләр араһында килешеү төҙөлгәйне.

Ун беренсе глава

**Яңғыҙлыҡ**

Ҡупырыҡ дуҫы Тумҫыҡты таяҡ менән ергә һөйрәп төшөргәндәрен, эттәрҙең уға ташланғанын да күрҙе, тик ике аяҡлылар уларҙы ҡыуып ебәрҙе. Шунан эттәр уның яғына ташланды.Лаулап өрөүҙәренә ҡарағанда, уларҙан яҡшылыҡ көтөрлөк түгел ине. Уның башы өҫтөндә элмәк уйнарға тотонғас, ағасын алыштырып өлгөрмәһә, уны ла Тумҫыҡтың яҙмышы көткәнен аңлап ҡалды.

Ул уҡ кеүек икенсе ағасҡа һикерҙе, унда бәүелә биреп торҙо ла өсөнсөһөнә ырғый һалды.Атҡан тауыш ишетелде.Аяғын ауыртыу яндырып алды, ләкин росомахаға ашығырға кәрәк ине. Ул йән көсөнә ағастан-ағасҡа һикерҙе лә һикерҙе. Ура! Булдыра бит!

Эсендәге, ата-бабалары ҡомартҡыһы булған генетик хәтере уянғайны буғай. Бирешмәҫкә кәрәк! Әммә яралы бото, һикерәңнәүҙән арыуы үҙенекен итте, йәнә бер һикергән еренән ул ергә табан шыуып төшә башланы,ләкин көс-хәл менән иң аҫтағы ботаҡҡа йәбешеп ҡала алды һәм кире үргә үрләне. Ағас ҡайырыһына башын терәп тирә яғына ҡолаҡ һалды. Эт өрөүе яҡынлаша бара, ә артабан һикерергә көсө юҡ. Ергә төшөү ҡурҡыныс. Росомаха үргәрәк үрләргә маташты. Көтмәгәндә алғы тәпәйе

бушлыҡҡа барып инде. Ағас өңөрө! Башын тыҡҡайны, ағастың эсендә бушлыҡ. Бына һиңә уңыш! Бынан да яҡшы йәшеренеү урынын табыу мөмкинме һуң?! Ул тиҙ генә шул бушлыҡҡа инеп сума һалды. Эстә ағас сөрөгөнөң еҫе сыға. Серек сөрөк өҫтө шундай йомшаҡ. Ҡасаҡ йомарланып ятты ла ойоп та китте. Иҫ киткес көсөргәнеш үҙенекен иткән. Росомаха тәүлек буйы йоҡланы ла ҡуйҙы.

Асығыуҙан уянып китте. Тороп китәйем генә тиһә, уң яҡ янбашы нык итеп ауырта. Аяғын ҡыбырлатып яралы урынын яҙырға маташты. Үҙе тыштағы өндәргә ҡолаҡ һала торҙо. Тыныс! Ел ыңғайына шыбырлашҡан япраҡ тауыштары ғына ишетелә. Ҡыйыуланып өңөрҙән башын тығып ҡараны. Ентекле еҫкәнде, башын борғосланы. Хәүеф барлығы һиҙелмәй. Урман ғәҙәти тормошо менән йәшәй бирә.Ҡоштар оса,төрлө тауыштар сығарып һайраша, тумыртҡа туҡылдай, сәтләүек йыйып алған егәрле әлғәнйәк ҡайҙалыр йүгереп китеп бара. Бүтән төрлө ят тауыш та, еҫ тә һиҙелмәй. Кеше тиренең әскелтем еҫе генә осоп бөтмәгән әле. Росомаха был утрауҙа артабан да ҡалырға ярамағанын яҡшы төшөндө.Ике аяҡлылар был урынға юл тапҡан икән, уны тыныс ҡалдырмаясаҡ.

Ул өңөрҙән баш яғы менән шыуып төштө. Яралы аяғына сатанлай-сатанлай яр буйына табан китте һәм кәүсәләре мүк менән ҡапланған пихта урманы яғына йөҙөп сыҡты. Ҡара урман эсенә ҡояш нурҙары төшөп етмәү сәбәпле, бында үлән-маҙарҙың әҫәре лә юҡ.Ағас аҫтары тулы шыршы, пихта энәләре. Йомшаҡ. Тауыш сығармай ғына атларға була.

Кисәге ҡурҡыуы бөтмәгән әле. Росомаха һәр ҡыштырлауҙан тертләп китә. Урман төпкөлөнән күҙен дә алмай, еҫкәнә-еҫкәнә алға атлай. Тейен еҫе сыға. Ана һикрәңнәшәләр. Берәү, икәү... Күптәр икән дә! Ҡайһыһы шым ғына һикерә, бәғзеләренең тауышы ишетелеп ҡала. Ҡупырыҡҡа әйләнеп тә ҡарамайҙар, уның сараһыҙ икәнлеген һиҙәләр, күрәһең.

Росомаха шырлыҡтан сығып, йылға яғына ыңғайланы. Унда тамаҡ туйҙырыу еңелерәк булмаҫмы? Юлда барғанда файҙалы үләндәрҙе табып, бутҡа кеүек итеп сәйнәне лә яраһына һыланы.

Ағас ботағы һынған тауыш ишетелде. Росомаха ергә һуҙылып ятты. Ҡыуаҡтар һелкенешеп ҡуйҙы. Япраҡтар араһынан йәш кенә болан балаһы күренде. Росомаханы күреү менән торған еренән һикереп китте һәм, эт өргән тауыш сығарып, һыпыртыу яғын ҡараны.

Яралы росомаха уны ҡыуалап етә алмаҫын белә, артынан йүгерергә йөрьәт итмәне. Яр буйлап йөрөштөрҙө. Ҡырсында өйрәк сепейҙәре йылынныша. Ҡупырыҡ һаҡ ҡына былар янына табан шыуыша башланы, әммә ата өйрәк сос булып сыҡты һәм баҡылдай һалып, себештәрен һыуға әйҙәп тә төшөрҙө һәм аталы-әсәле өйрәктәр баҡылдаша-баҡылдаша йылғаның шәп аҡҡан тирәһенә табан йөҙөп китте.

Ҡупырыҡтың ниәте уңманы. Артабан ҡуҙғалырға мәжбүр булды. Һәр ҡыуаҡ аҫтын, һәр ҡомороҡ араһын тикшерә барҙы ул. Ите мөнтәлгән ҡабарға һөйәгенә тап булып, уны кимерҙе.Түбәнгә һарыған һағыҙаҡтарҙы һоғоноп ҡуйҙы, тик һағыҙаҡ ризыҡмы инде, аппетитен асып ҡына ебәрҙе. Аҙаҡ килеп, бәшмәкле яланға барып юлыҡты. Туйғанса бәшмәк ашағас, яраһына йәбешеп ыҙалаған серекәйҙәрҙән ҡасып, еләҫ тау үренә күтәрелде һәм яланғас таш өҫтөнә һуҙылып ятты. Күҙҙәрен йомдо. Оҙаҡ ҡына ҡуҙғалмай ятҡан росомаханы ҡарға үләкһә тип уйланы буғай, ағас ботағына ултырып ҡарҡылдарға тотондо. Янына әхирәттәре йыйылышты, һикерә-һикерә росомаханың кәүҙәһе тирәһенә ыңғайланылар. Росомахаға шул ғына кәрәк ине, ул, йәшен тиҙлеге менән һикереп тороп, ҡарғаны үткер тырнаҡтарына эләктереп тә алды.

Йыртҡыстарҙың яраһы тиҙ уңала. Сәләмәтләнә төшкән росомаха үҙенең биләмәһендәге тауҙар яғына барып әйләнергә булды. Алыҫ китерлек үк көсө юҡ әле, яҡындағыһына барыр, бәлки теге Аҡбаш ике аяҡлының ҡуян түшкәләрен йәшергән еренә лә һуғылыр.

Ул тирәгә етәрәк кеше тиренең еҫе танауына бәрелде. Яҡында икәндәр ҙә. Эт өргән тауыш та ишетелә. “Йәнә мине ҡарауылайҙар!” - тип уйланы Ҡупырыҡ һәм юлын икенсе бер үҙе ризыҡ йәшергән урынға борорға мәжбүр булды. Ул арала яҡында ғына фырлашып һуйырҙар һауаға күтәрелде, тик Ҡупырыҡтың уларҙа ҡайғыһы юҡ ине, кешеләрҙән ҡурҡып ҡалғайны.

Йәшерен складтарының береһен росомаха бик күптән, яҙ уҡ тултырып ҡуйғайны, шулай булһа ла тиҙ тапты, хәтере яҡшы.Убаның төньяғында соҡоп эшләнгән һәм мүк менән ҡаплап ҡуйылған склад болан итен яҡшы һаҡлаған. Росомаханың танауына таныш үләкһә еҫе бәрелде. Ул шунда уҡ ризығына ташланды, тамағы туясағынан кинәнеп, иткә сикәһен терәп ышҡып алды.

Иттең бер өлөшө менән туйынғас, ҡалғанын кире күмеп ҡуйҙы. Был запасы уға бер нисә көнгә етеп ҡалды. Йәнә бер аҙнаһын Ҡупырыҡ кедр ағастары араһына йәшергән тәғәме тирәһендә уҙғарҙы. Был кедр урманындағы ағастар тәпәйҙәрен тирә яҡҡа тырпайтҡан оло-ғара үрмәкселәргә оҡшаған.Улар бер-береһе менән етәкләшепме, ҡосаҡлашыпмы алғанлыҡтан, араларынан кеше түгел, януарҙар ҙа үтеп йөрөрлөк түгел. Көҙҙөң һуңғы айҙарында был ағастар олондарын ергә һәлендерә һәм өҫтәренә яуған ҡар аҫтында ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла бирештермәй.

Тарамағанлыҡтан лаулайған сәс кеүек ойошҡан ағастарҙың иң башына тубырсыҡтар эленгән. Уларҙың эсендәге ем шул тиклем туҡлыҡлы һәм тәмле ул. Ҡояшта йылынған ылыҫ урманынан сайыр еҫе аңҡый. Был урман ҡаялы тауҙарға барып терелә. Ҡупырыҡ, һәр бер росомаха кеүек, ҡыҙырынып йөрөргә ярата. Суҡайышҡан ташлы тау артында ниҙәр

барлығын күргеһе килде. Иң үргә етеп, тау артында йәйрәп ятҡан иркен үҙәндәрҙе күҙәтеп торҙо. Түбәндә йылға аға, уның аръяғында йәнә тауҙар. Ҡаяға ҡунаҡлап саңҡылдаған бөркөттөң тауышы ғына хәүефләндерә.

Төшлөктәге ҡояш шундай ҡыҙыу, турараҡ ҡараһаң, күҙҙәреңде алырын көт тә тор. Ҡупырыҡ түбәнгә төштө һәм төлкөгә осраны. Алан-йолан ҡаранып ялан аша йүгереп сығып бара. Ана, ҡапыл үргә һикереп китте, ҡойроғо ярҙамында ҡырт ҡына боролош яһап сысҡан тотоп алды һәм шуның менән тамаҡланғас, һунарын артабан дауам итте.

Ҡупырыҡ, шәмгә оҡшап йылтырап уйнаҡлаған төлкөнө күҙәтеп торҙо-торҙо ла, үҙ юлы менән китте. Тау башынан тупһалар аша һикереп аҡҡан йылға буйлап үргәрәк күтәрелде һәм эңер төшөү менән ризыҡ эҙләп сығасаҡ йәнлектәрҙе көтөр өсөн таш өҫтөнә һуҙылып ятты. Янында күбәләктәр ҡағына, сиңерткәләр сырылдаша. Парлап-парлап осошҡан бөжәктәр, ҡояш нурҙарында наҙланып,берсә юғары һауалап, берсә түбәнләп уйнай. Ҡайҙандыр әлгәнйәк килеп сыҡты, росомахаға мәрйен күҙҙәре менән теклəп торҙо ла, Ҡупырыҡтың аҙ ғына ҡыбырлауы булды, ялт итеп юғалып та ҡуйҙы.

Ун икенсе глава

**Парлашыу**

Бөтә нәмә лә ыңғай ғына тора кеүек, әммә Ҡупырыҡтың эсе бошто. Аталаныу осоро уҙып бара, ә уның һаман да пары юҡ. Йәнлектәр тик ашау-эсеү мәшәҡәте менән генә көн күрмәй ул, уларҙың да тоҡом ҡалдырыу талабы бар. Парлы булыуға етәме ни? Икәү булһаң, табышыңды эҙәрлекләү ҙә еңелерәк, һыйынышып иркәләнергә мөмкин, балаларҙы ла бергәләп туҡландырып була. Ялбыр менән улар бер йылдан кәмерәк бергә була алды, ә Тумҫыҡты ай күрҙе, ҡояш алды, уларҙы ике аяҡлылар айырып та ҡуйҙы.

Урманда ниндәй генә еҫтәр юҡ, ә арлан росомаханың еҫе тойолмай. Ҡама йүгереп үтте, ағас олонона ултырып, теле менән тунын таҙартырға кереште. Янына ата ҡама килә ята. Инәһе уны күрмәмешкә һалыша. Яҡын килеп еткән арлан, инә ҡаманың өҫтөнә һикерҙе, тегеһе быны ҡосағынан шыуып килеп сыҡты ла, үҙе быны башын ҡултығы аҫтына ҡыҫтыра һалды. Арлан әй борғоланды, әй туланы һәм ҡыҫымдан ысҡынып, инә ҡаманың биленән ҡосаҡлап алды. Әхирәте киң итеп ауыҙын асып ебәрҙе, росомахаға ҡама көлгән кеүек күренде. Уйнанылыр-уйнанылар ҙа, парлашып күләгәгә барып яттылар. Тиҙҙән инә ҡама, ҡойроғон болғай-болғай ағас тамырҙары аҫтындағы ояһына табан юлланды, ә дуҫы артынан эйәрҙе.

Ҡупырыҡтың кәйефе ҡырылды:”Парлы булһаң рәхәт инде ул!..”

Ул һыуға сумған хәрәкәттәр менән һикерәңләп артабан елдерҙе. Ел көтмәгәндә танауына арлан росомаха еҫен бәрелдерҙе. Алыҫта түгел шикелле. Ана, эҙҙәре лә күренә. Мөһабәт булһа кәрәк!

Эңер төштө. Ҡупырыҡ эңерҙән ҡурҡмай ул. Танауы күҙенән дә һиҙгерерәк. Арландың эҙҙәре тайга буйлап һуҙылған да һуҙылған. Росомаха еҫен мышы еҫе һүрелдерҙе. Ҡаны урғылырға торған уҫлаптай мышы. Росомаха, түҙмәне, мышы еҫе яғына боролдо.

Йөҙ метрҙар тирәһе арыраҡ үлән араһынан мышының аҡ мөгөҙҙәренең осо күренә. Росомаха, шатлығынан, һауаға һикереп, башы аша әйләнеп ҡуйҙы. Тау хәтлек ит бит! Күп итеп запаслап ҡуйырға мөмкин.

Болан тиреһен ауырлыҡ менән йырта-йырта, Ҡупырыҡ киҫәкләп-киҫәкләп ит һоғонорға тотондо. Тамағы туйғас ял итеп алды һәм табышының ҡалғанын, киҫәктәргә өҙгөләп, төрлө ергә йәшереү сараһын күрҙе. Был ярайһы ауыр шөғөл. Ерҙе соҡорға таштар, эре ағастарҙың тамырҙары ҡамасау итә.Ләкин януарҙың көслө тырнаҡтары менән ныҡлы теште̣ре үҙ эшен башҡара. Склад күҙгә ташланмаһын өсөн Ҡупырыҡ уның өҫтөнә тупраҡ, япраҡтар, сыбыҡ-сабыҡ өйөп ҡуйҙы, таштар ҙа ташлаштырҙы.

Мөһабәт арлан росомаха Ҡупырыҡ ата боландың ғорлаһындағы “алҡаһын” кимергән саҡта ҡыуаҡ араһынан килеп сыҡты.Ҡупырыҡ уға һоҡланыулы күҙҙәрен төбәне.” Шәп! Бындай матурҙы тәүләп күрәм!” – тигәнде аңлата ине уның ҡарашы.

Тәне буйлап йылы тулҡындар йүгереп үтте.

Арландың еҫен хәтеренә ҡалдырыу өсөн, ул уны әйләнеп йөрөп еҫкәп сыҡты. Тегеһе яуап итеп ап-аҡ ҡаҙыҡ тештәрен ялтыратып алды. Ул да Ҡупырыҡҡа ҡыҙыҡһынып ҡарай ине. Росомаха арланды арбау ниәтенән уйнаҡлап алды ла тынып ҡалды. Уларҙың араһында осҡондар ҡабынғандай булды. Әммә улар байтаҡ ваҡыт бер-береһен һынап күҙәтә бирҙе. Ҡупырыҡ ҠаҙыҡТешкә яҡынларға иткәйне, тегеһе сәйер ҡылана башланы -

- Был минең биләмә! Бында мин хужа, - тип мығырланы арлан.

Ҡупырыҡ тирә яғына күҙ һалып алды.

- Һинеке икән, һинеке! Ә миңә бында оҡшай, - тигән кеүек булды һәм янына яҡын барып, муйынына ышҡынды, тамаҡ өндәре сығарып ғырылданы, Ҡаҙыҡ Тештең ҡаты бәғере иреп китте. Шул осрашыуҙан һуң улар айырылмаҫ булдылар. Бер нисә көн көрмәкләшеп уйнанылар.Шаярҙылар, бер-береһенә эҫенә барҙылар.

Биләмәһе буйлап йөрөгән саҡта Ҡаҙыҡ Теш тамғалар һалырға онотманы: йә сәптереп китә, йә мускус биҙенән тамсы тамыҙа. Үрҙән төшкәндә арт яғы менән шыуып төшә. Уның биләмәһенә хатта бүтән росомахалар ҙа инергә тейеш түгел. Ингеләүен былай килеп ингеләйҙәр ҙә

дошманлашмай ғына ары китәләр. Ә инде бөтөнләй ят януар килеп инһә, уны йәлләп тормайҙар, ҡурҡытып ҡыуалайҙар.

Росомахалар остарын ваҡыт ашаған тау түбәләрендә ҡуныр булды. Тайга өҫтөнә эңер төшөү менән һунарға сыҡтылар. Улар көн яҡтыһын бик үк яратмай, айлы төн, эңер улар өсөн уңайлыраҡ. Эңер төшөүгә байтаҡ йәнлектәр хәрәкәткә килә, тимәк, һунар ҙа уңа.

* * *

Сентябрь йылы һәм ҡоро килде. Һалҡындар башланырын һағышлы тауыштар сығарып көньяҡҡа табан осҡан ҡаҙҙар көтөүе генә иҫкә төшөрә ине. Ҡаҙыҡ Теш менән Ҡупырыҡ йәнлек аулап интекмәй, еләк-емеш менән туҡлана. Ҡыҙыл көртмәле, мүк еләгенә ҡытлыҡ юҡ.Көртмәлегә Ҡупырыҡ элегерәк иғтибар ҙа итмәй ине. Ҡаҙыҡ Тештең уны кинәнеп ашағанын күреп, үҙе лә ҡыҙығып китте. Тәмле икән дә!

Тәүге һалҡындар төшөү менән емештәр тирәһенә өйөрө менән ағуналар килеп тула башланы.Улар емештәрҙе шул тиклем күпләп ашай, һауаға ауырлыҡ менән генә күтәреләләр. Уларҙың әтәстәрен дә, тауыҡтарын да эләктереү ҡыйынлыҡ тыуҙырмай.

Эре таштар араһында йоҡлап йөрөй башланылар. Ҡаҙыҡ Тештең йоҡоһо һаҡ. Ятыр алдынан артҡы аяҡтарына ултырып әйләнә-тирәне байҡап сыға, шунан ғына һөйгәне янына йомарланып барып ята. Саҡ ҡына хәүефле тауыш ишетелеп ҡалһа, башын ҡалҡыта һала.

Шытырлаған тауыш ишетелде. Ҡаҙыҡ Теш һағая төштө. Ҡурҡыныс юҡ икән, ҡабарға үтеп бара. Ҡәләм кеүек төҙ, нәҙек аяҡлы болан балаһы мүк ҡаплаған ҡарағай урманы ситенән китеп бара. Ҡабарғаның мөгөҙө юҡ. Өҫкө ирене эсенән, ҡыр сусҡаһыныҡы кеүек, ике осло аҙау тештәре һәленеп тора. Тамағы туҡ булыу сәбәпле Ҡаҙыҡ Теш урынынан ҡуҙғалырға ынтылманы. Уянып киткән Ҡупырыҡ ҡабарға еҫен шунда уҡ шәйләне һәм дуҫына шелтәле ҡарап ҡуйҙы: “ Нишләп ысҡындырҙың инде?”

Асылда, Ҡупырыҡҡа Ҡаҙыҡ Тешкә үпкәләү яҙыҡ булыр ине. Уның менән ҡауышҡаны бирле ас йөрөгәне юҡ.

Октябрь айында яланғас урманда оҙайлы ямғырҙар башланды. Түбән генә йөҙгән ҡара болоттар бер туҡтауһыҙ үҙе ваҡ, үҙе һалҡын яуынын һибәләй ҙә һибәләй. Көндәр күңелһеҙләнде.

Ярай әле, тиҙҙән ҡар яуып ебәрҙе һәм донъялар яҡтырып китте. Тауҙар яҡынайған, йылғалар киңәйгән кеүек күренә.Ағас баштарына ултырған ҡарҙар нығынды. Ҡупырыҡ уларға ҡарап-ҡарап йөрөй, тубырсыҡтарҙы ҡойоп төшөрмәҫтәрме? Ҡары ла туҡтамаҫтай булды, аҡ себендәр кеүек өйөрөлә лә өйөрөлә.

Һуйыр ғорлаһына ҡарағай тубырсыҡтарын тултырып алған да ҡар эйештергән олонда ултыра. Ҡоштоң ауырлығынан ҡарағай олоно һелкенеп, ҡарҙан әрселеп китте.

Ҡупырыҡ ерҙең аҡ төҫкә ингән сығын ярата. Аҡ ҡар өҫтөндәге эҙҙәрҙе күрмәү мөмкин түгел. Әле улар Ҡаҙыҡ Теш менән икәүләшеп ҡарҙа ҡалған эҙҙәрен күҙәтә. Һуйыр эҙҙәре тырнаҡтары тарбайған тамсыға оҡшаған икән.

Бер нисә көндән йылғаларҙың өҫтө ялтыр боҙ менән ҡапланды. Тайга ла тынып, һағайып ҡалғандай. Аҫ йәнлегенең кәкерсәкләп һалған эҙҙәре генә тормоштоң дауам итеүен аңғартҡандай. Ана, аҫ үҙе лә күренеп ҡалды, тик оҙаҡҡа түгел, йәһәт кенә ҡар эсенә сумып та китте.

Һалҡындар бик ныҡ көсәйеп киткәндә, һыуыҡҡа түҙмәй шартлап киткән ағастарҙың атышҡа оҡшаған тауыштары тайга эсендә өҙләкһеҙ яңғрап тора. Росомахалар һыуыҡҡа бирешеп бармай. Улар көҙҙән үк ҡышҡы тундарын кейеп алғайны инде. Ҡаҙыҡ Teштән күҙҙе лә алырлыҡ түгел, матурланды, йөндәре йылҡылдап тора.

Туның арыу булыу ғына, әлбиттә, ҡотҡармай, өшөмәҫ өсөн тамағыңдың туҡ булыуы ла зарур. Һыуытҡан һайын нығыраҡ асыҡтыра. Ҡаҙыҡ Теш болан эҙенә төштө. Арҡаһы көмөрө, башы түбән эйелгән болан ярайһы оло йәштә булһа кәрәк. Ҡыуаҡтар араһына баҫып уйға ҡалған малҡай сит аяҡ тауыштарын ишетмәй ҙә ҡалды. Өҫтөнә ырғыған росомаханы күргәндә, ҡасырға һуң ине инде. Етмәһә, икенсе берәүһе алдына төшөп алды. Ҡотолоу юлы берәү генә: йылғаға һикерергә тура килер. Әммә боҙға төшөү менән аяҡтары тайып ҡоланы ла ҡуйҙы, бисара.

Росомахалар өсөн боҙ ҡурҡыныс түгел. Ҡаҙыҡ Теш һә тигәнсә боланға ташланып, боғаҙын сәйнәп өҙөп тә алды.

Мөгөҙлө малҡай тәҡдиренә буйһоноп тынып ҡалғас, бәхетле парҙар күҙҙәре майланғанса киҫәкләп-киҫәкләп ит һоғондо.

Ҡан еҫен тойомлап ҡарғалар йыйылышып китте. Йылға өҫтөнә эйелгән ағасҡа ултырып, түҙемһеҙлек менән быларҙың табышты ҡалдырып китерен көтәләр. Ә улары ит тирәһенән шылырға уйламай ҙа. Туйындылар ҙа боҙ өҫтөнә һуҙылышып яттылар. Яҡынлап маташҡан ҡарғаларҙы Ҡаҙыҡ Теш ырылдап өркөтөп тора.

Болан да кимерелеп бөттө. Артабан нисек көн итергә? Артабанғы көндәрҙә һунар уңмаҫ булды. Ниндәй генә йәнлекте ҡыуаламаһындар, уңышҡа өлгәшә алманылар. Етмәһә, ныҡлап ҡар яуып ебәрҙе. Урман йәнлектәре өңдәренә ҡасышып бөттө. Өс көн буйы исмаһам бер эҙ, берәр еҫ осратһаларсы.

Дүртенсе көнөндә генә ҡуян йәшеренгән урынға юлыҡтылар. Ҡолағы ғына һерәйеп күренеп тора. Төпкәрәк ҡаҙып ингән булһа, уны ла күрмәҫтәр

ине. Ҡаҙыҡ Теш ҡуян өҫтөнә ырғыны, тик...тегенең йөндәре генә тырнағына йәбешеп ҡалды.

Үлем тырнағына эләгеүҙән ҡурҡҡан ҡуян аяҡтарын шул тиклем оҙон итеп һуҙып йүгерә, хатта кәүҙәһе ер менән тип-тигеҙ булып китә. Тәгәрәп китмәҫ өсөн ул башын аҫҡа эйергә тырыша.

Ҡуштан парҙар уны ҡыуа төштө. Ултырып бөтмәгән йәш ҡар өҫтөнән яҫы тәпәйле росомахаларға ла йүгереүе еңел түгел. Шуға ла улар ҡуяндың йүгергәндә түңәрәк яһай торған ғәҙәтенән файҙаланырға булды.

Ҡаҙыҡ Теш ҡуянды артабан да ҡыуалап китте, ә Ҡупырыҡ һуҡмаҡ ситенә барып ятты, теге боролоп килеп быны менән тиңләшкәйне генә, Ҡупырыҡ уның елкәһенән элктереп тә алды.

Артабанғы көндәр насар булманы. Росомахалар биләмәһенә төньяҡ боландары көтөүе килеп инде. Нишләп ҡар ҡаплаған тауҙар яғына юлланырға булғандарҙыр, уныһы росомахаларға ҡараңғы ине. Был тирәләге ҡар аҫтындағы тайга мүген тибенеп семсеү бик ауыр. Бигерәк тә йәш малдар өсөн ҡыйын. Аслыҡтандыр инде, йыш ҡына улар йоҡлаған урындарҙа туңып үлгән йәш боландар ятып ҡала. Росомахалар өсөн иһә ҡар ҡурҡыныс түгел. Ашамлыҡ эҙләү мәшәҡәтен булғанды ентекле йәшереп урынлаштырыу маҙаһы алмаштырҙы. Февраль айы торғаны бер һыйлы байрамға әүерелде. Икәүһенең дә туны аҫтында май ҡатламы барлыҡҡа килде. Ҡупырыҡ иһә өҫтәүенә ылыҫлыларҙың энәләрен, ағас ҡайырыларын да ҡуллана башланы. Уға витаминдар кәрәк. Тиҙҙән көсөкләйәсәк.

Ун өсөнсө глава

## Көсөктәр

Төнөн һыуыҡ һындырмаһа ла ҡояш ҡар ҡатламдарын йоҡарта башланы. Олондарын йәйеп ултырған ылыҫлы ағастарҙың ботаҡтарынан шауҙырлап ҡар ишелеп төшкөләй. Ағас төбөндәге ҡар ҡарайып, соҡорҙар барлыҡҡа килә. Көн йылы торһа ҡар ярайһы ныҡлы ирей ҙә таң атыуға йәнә боҙ менән ҡаплана. Бындай һауа шарттары бүреләр өсөн бик ҡулай. Улар туң ҡар өҫтөнән еңел йүгерә. Көн дә тиерлек берәр йәнлектең башына етеп кенә тора. Бөгөн береһен, иртәгәһен икенсене йыға. Бүреләрҙең бындай һаҡһыҙлығын росомахалар аңламай. Ашап бөтә алмаған табышын нишләп йәшермәҫкә инде? Ярар, уныһы уларҙың эше, уның ҡарауы, росомахаларға ла ризыҡ эләгеп кенә тора.

Ҡараңғы сырайлы көн ине. Ҡупырыҡты борсолоуҙар солғап алды. Эсендәге йән эйәләре тулашып алды ла китте. Уға ятырға тура килде. Ергә һәленеп төшкән кедр олондары аҫтына барып сумды. Эсе тулғана ла тулғана. Сабырһыҙ Ҡаҙыҡ Теш әхирәтен һунарға әйҙәп маташҡайны,

Ҡупырыҡ уға шелтәле күҙҙәрен төбәне. Тегеһе ашығып-ашығып ҡарҙы соҡорға, өң әтмәләргә тотондо. Эстәге көсөктәр тынысланғандай булды. Ҡупырыҡ урынынан торҙо һәм туп-тура ағаслы тау битләүенә табан ыңғайланы. Ҡаҙыҡ Тешкә уның артынан эйәреүҙән башҡа сара ҡалманы.

Өс яҡтан да ҡамаулы ышыҡ өңөргә еткәс Ҡупырыҡ туҡтаны. Арлан хәлде аңғарҙы һәм көсөкләй торған урынды тырнаҡтары менән тырнап йяйларға кереште. Бер нисә сәғәт эсендә ул ун метр самаһы оҙонлоҡтағы өңдө әҙерләп бөттө, түшәмендә һауа инерлек тишектәр ҡалдырҙы. Төптәрәк өс бүлмә яһаны. Береһе оя өсөн, икенсеһе аҙыҡ-түлеккә, өсөнсөһө – бәҙрәф.

Иң ҙуры – балалар ятырлыҡ оя. Бәҙрәф менән келәт ҡайтышыраҡ.Өңдөң ауыҙындағы суҡайған таштарҙы һейҙек менән тамғалап ҡуйҙылар.

Таң атыуға еп-еүеш өс йомғаҡ донъяға килде. Йөндәре һирәк кенә, төтөн төҫөндәләр. Бәрәстәр бөтөнләй һуҡыр һәм сараһыҙ. Ни бары һөт еҫе килгән урынға ғына шыуышып барырға һәләтлеләр. Имеп туялар ҙа әсәләренең күкрәгендәге йөн араһына сумып ойойҙар. Улар йоҡлаған арала Ҡупырыҡ көсөктәрен ялай-ялай таҙарта.

Ҡаҙыҡ Теш иһә һунарға ашыҡты. Төн эсендә ҡар йәнә йоҡара төшкән. Ҡояштың нурҙары сағыу булһа ла йылыһы самалы шул әле.

Росомаха ҡоралай эҙҙәрен тап итте. Ашығып сума-сума эҙҙәрҙе юллап китте. Ҡыуалап килеүсене күргән ҡоралайҙар төрлөһө төрлө яҡҡа ташланып ҡасыша башланы. Йәлпәк таштар һыу өҫтөнән һикергәндәге кеүек, һуҙылып-һуҙылып һикерәләр. Сәбәләнеберәк йүгергән берәүҙе тоҫмаллап алған арлан, шуның артынан ҡыуаларға булды. Бик үк ашығып та барманы Ҡаҙыҡ Теш, ҡоралай тиҙҙән үҙе туҡтаясаҡ.

Баштараҡ кәзә ҡар өҫтөнән еңел генә һикерәңләй ине, тора- бара ҡыҫҡараҡ та, түбәнерәк тә ырғыуға күсте. Ҡарҙың ҡатыһы алғы тояҡтарының тиреһен һыҙырҙы. Боҙ ярсыҡтарына ҡан тамып ҡалды. Тиҙҙән ул атлауға күсте.Тиргә батҡан ҡабырғалары тулҡынланды, әлһерәүҙән теле һәленеп төштө. Ҡоралай арыуҙың сигенә етте. Яҙмышына күнгәнгәндәй, туҡтап ҡалды һәм сараһыҙҙан башын эйеп, ни булырын көтә башланы. Росомаха уның өҫтөнә ырғыны һәм артҡы аяғын кимереп алып, кәүҙәһен өңөнә табан һөйрәп алып китте.

Әсәлек ләззәтен кисергән Ҡупырыҡ ойоп киткәйне. Имсәге янында балалары һыйынышып ята. Алһыу ғына ҡорһаҡтары кәпәйешкән. Ит еҫен шәйләп алған инә росомаха башын күтәрҙе. Бәрәстәренән һаҡ ҡына арынды ла әле һыуынып та бөтмәгән түшкәгә ҡомһоҙланып барып та йәбеште. Туйынып алғас арланына рәхмәтле ҡарашын ташланы.

Бер нисә көндән балаларының йөнө бөҙрәләнеп күрәнһыу төҫкә инде. Үҙҙәре әлегә аҙ хәрәкәт итә, көсһөҙҙәр. Күберәк ваҡыттарын ойоп үткәрә.Әсәләренең  имсәгенә барып ҡаҙалыр өсөн генә уяналар.

Ата-әсәһе  көсөктәренә спартан тәрбиәһе бирә.Ҡаҡ ерҙә яталар. Араларындағы алданыраҡ донъяға килгәне һәммәһенән дә эрерәк кәүҙәле. Маңлайы киң. Йәшкәҙәгән  күҙҙәре асылып та бөтмәгән, әммә тоноғораҡ булһа  ла күрә.Ҡалған ике туғаныны әлегә бөтөнләй һуҡыр, әсәләренең күкрәген еҫе буйынса ғына таба. Шуға ла сос Маңлайлы әсәһенең иң һөтлө имсәген эләктереп тә өлгөрә.

Тегеләренең дә күҙе асылып, дәғүәлеклерәк була башлағас, Маңлайлы уларҙы башы менән һөҙөп эткеләй, ул да ярҙам итмәһә, тәпәйҙәре менән тибешә. Артабан да ҡарышыусыны ул  саҡ-саҡ сыға башлаған тештәренә эләктереп тегеләй ҙә былай ҙа һелтәй, теш араһынан ырылдап ҡурҡыта.

Уртансыһы әллә ни ҡаршылыҡ  күрһәтмәй, сабыр түҙә, әммә үҙенекен итергә ынтылып ҡына тора. Ә иң бәләкәйгә йәбер нығыраҡ эләгә. Әсәләре йоҡлап китеү менән Маңлайлы бәләкәсте  ҡарлы стенаға илтеп һырындыра һала, туйғансы имергә бирмәй. Бер нисә көндән бәләкәс бөтөнләй хәлдән тайҙы һәм ҡыҫырыҡланған еренән ҡуҙғала  алманы.

Һунарҙан ҡайтҡан Ҡаҙыҡ Теш мөйөштә хәрәкәтһеҙ  ятҡан көсөккә иғтибар итте һәм уны әсәһенең янына һалмаҡсы булғайны, тере түгел икәнен шәйләп, тышҡа алып сығып китеп, ҡарға күмеп ҡуйҙы.

Балалары һәр саҡ ашау, йылылыҡ таптырыу сәбәпле Ҡупырыҡ өңөнән һирәк сыға. Быны әллә ни хәжәте лә юҡ, сөнки Ҡаҙыҡ Теш уны ашауҙан  өҙмәй. Әммә тиҙҙән ул юғалып йөрөй башланы. Бер заман өс көн буйы ҡайтып  та  күренмәне.Күҙгә  күренгс,  Ҡупырыҡ, асыуы  килеп, уның ҡолағын тешләп алды.Арланға  был  оҡшаманы, ырылдап ҡуйҙы һәм йәнә лә оҙаҡҡараҡ  китеп  юғалыр булып  китте. Ҡупырыҡҡа  аралары һыуыныуға күнергә тура килде. Ә балалар йәнә лә күберәк ашарға таптыра башланы.

Көндәрҙең  береһендә, һунарға  сығып китер алдынан, Ҡаҙыҡ Теш Ҡупырыҡҡа  һалҡын ғына  теклӛп торҙо. Ҡупырыҡ уның бүтән ҡайтмаясағына төшөндө. Һуңғы  тапҡыр  алып  ҡайтҡан ҡуяны оҙаҡҡа барманы, уның һөйәк-һаяҡтарына  саҡлым  ашап  бөттө.Һөтө  кәмене.

Балалары ла асығышты. Өсөһө лә тере булһа, бигерәк тә ауыр булыр ине. Росомаханың үҙенә һунарға сығыуҙан башҡа сара  ҡалманы. Яҡын тирәлә күҙ һалырлыҡ эҙҙәр шәйләнмәне. Ҡаҙыҡ Теш был тирәне ентекле таҙартҡан.Ҡар өҫтөнөн йүгереп китеп барған сысҡан менән генә хушланырға тура килде.

Табышты өңдән алыҫыраҡ урындан эҙләргә кәрәк ине. Тиҙҙән ике ҡуян эләктерҙе. Тамағы ялғанды, әммә балаларҙы аҫырау өсөн эрерәк

йәнлек осратыу яҡшыраҡ булыр  ине. Ҡаҙыҡ Теш менән икәүләп йәшергән аҙыҡ складтарын ҡарап сыҡты. Уларын Ҡаҙыҡ Теш бушатып сыҡҡан булып сыҡты. Өңөнә боролоп ҡайтырға тура килде, үҙе  аслы-туҡлы булһа ла балаларҙы туйындырырға  кәрәк. Өсөнсө көнөнә аслыҡ, көсөктәрҙең сыйылдашыуы уны йәнә һунарға сығырға мәжбүр итте. Был юлы ул күрше убалар яғына ыңғайланы. Ул яҡта тоҙло шишмә бар, боландар шунда һыулауға төшә торған.

Уба һыртынан төшөп барһа, танауына  ит еҫе бәрелде.  Еҫ тамыры-ние менән ауған шыршы яғынан килә. Юл ике бысылған бүрәнә менән ҡамаланған. Ҡыуыш эсендә бер киҫәк ит, сел  түшкәһе ята. Унда тик бүрәнәләр араһынан  ҡыҫылып сығып ҡына барып етергә мөмкин. Ҡарға осоп үтте.

“Сип-сип, чип-черек! Ҡурҡыныс бар!Ҡурҡыныс бар!” – тип сырылдай-сырылдай олондан олонға һикерергә тотондо урман  ғәйбәтсеһе.

Росомаха байтаҡ ваҡыт ҡыймайыраҡ торҙо.Ул  ит янына бүрәнәләрҙең ерле юҡтан терәтелмәүен ҡарғанан башҡа ла аңлағайны инде.Йәнә еҫкәнеп алды. Тимер еҫе һиҙелмәй. Танауға тик ит еҫе генә бәреләә.Юҡ, ярамай, бер хәйлә бар бында, тоҙло шишмә яғына ыңғайлау хәйерле булыр. Унда ла юлы уңманы, исмаһам, бер яңы тояҡ эҙе осраһа! Иҫке эҙҙәр бар, уларҙы юллау файҙаһыҙ. Нишләргә һуң?

Асығыуҙан хәлһеҙләнгән росомаха  ниндәйҙер табыш табырына ышанмай башлағайны инде. Күҙ алдына йәнә теге ҡыуыштағы  ит килеп баҫты. Балалар хаҡына ниәтләргәме? Улар ҙа бит ас!

Сәйер ҡоролма янына боролоп килгәс, Ҡупырыҡ һаҡлыҡ менән генә ярыҡтан шылып инде һәм селде үҙенә тартты.Шул  саҡ өҫтөнә ниндәйҙер ауыр әйбер килеп тә төштө.Шарт итеп ҡалған тауыш яңғраны. Ҡупырыҡ ысҡынырға тип талпынды һәм үҙәккә үткес ауыртыуҙан иҫен юғалтты.

Аңына килгәс росомаха бүрәнә аҫтынын ысҡынырға тырышты, тик артҡы аяҡтары уға буйһонманы. Ул ҡурҡышынан паникаға бирелә яҙып ҡуйҙы, әммә әсәлек инстинкты ҡурҡыуҙан көслөрәк ине. Алғы аяҡтарын яҡындағы ботаҡҡа терәп,  йән көскә алға ынтылды һәм аяғының тиреһен һыҙыра-һыҙыра саҡ ҡына булһа ла ҡуҙғала бирҙе. Йәнә лә! Йәнә! Тағын бер аҙ! Осаһының тиреһе айырылып сыҡты, ниһайәт – ҡотолдо!

Бер аҙ тын алғас, артҡы аяҡтарына баҫмаҡсы итте, тик улар тыңламаны.Аяҡтары бөтөнләй иҫ белмәй.Росомаха  селде  ашығыс-ашығыс һоғоноп ҡуйҙы, артынса уҡ туңған болан итенә сират етте һәм ул алғы аяҡтарында  шыуа-шыуа өңө яғына  ыңғайланы. Артҡы тәпәйҙәре  һуҙылып ҡына килә. Хәҙер бөтә маҡсаты – көсөктәре янына барып етеү.

Өң урынлашҡан үргә менгәндә уның артынан ҡып-ҡыҙыл  ыҙан һуҙылып ҡала ине, ә түбәнгә  табан  ул шыуып  ҡына төшөп китте.

Көсөктәре әсәһен сыйылдашып ҡаршы алды. Ҡупырыҡ һуңғы көсөн йыйып бәләкәстәре янына шыуышып барып ятты. Тегеләр әсәһенең йылыһы, имсәге янына йылышты, тамаҡтары туйғас, йылынышып йоҡоға талды.

Дүрт көндән росомаха йән бирҙе. Һуңғы һулышына саҡлым балаларын имеҙҙе. Улары әсәләреренең һалҡын тәненә һарылды ла һарылды, һыуыҡ имсәген һурып маташты.

ИКЕНСЕ БҮЛЕК

**Тып-тып**

*Януарға төбәп атҡанда беҙ йәнебеҙе үлтерәбеҙ.*

Ун дүртенсе глава

**Ермил. Росомаха көсөктәрен ҡотҡарыу**

Ермил ҡарт бүтән һунарға сыҡмаҫҡа тип үҙенә нисә тапҡыр һүҙ бирҙе инде, ә бына һунар сезоны еттеме, өйөндә сыҙап ултыра алмай, тегендә-бында һуғылғыларға тотона. Түҙмәй, ҡарсығына бер-ике аҙна ғына йөрөп, күңелемде баҫҡым килә, тип аңлата ла тайгаға сығып китә. Быйыл да шул хәл ҡабатланды. Туғыҙ кеш аулап алғайны ул, ауылға ҡайтып китһә лә була, быуындарының да рәте китеп бара, иртәнсәк торған һайын тубыҡтарын, билен ыуалаштырмай тороп та китә алмай, ә һунаға сыҡҡыһы килеп кенә тора, тиреләре һанын ун бишкә еткергеһе килә. Ермил бирешкән тип әйтерлек булмаҫ ул сағында.

Халыҡ дөрөҫ әйтә ул: кеше план ҡора, Раббы төҙәтмә индерә. Кистән эсе сәнсеп ауыртып алды ла китте. Ҡапҡылап алһа, хатта сәй генә эсһә лә ауыртыуы көсәйә лә китә. Күптәнге сей яраһы асылды булһа кәрәк. Ике көн тирәһе үләндәр менән дауаланып маташты, ебәрмәй. Ауылға ҡайтыуҙан башҡа сара юҡ.

Юлға еңел генә сыҡты. Тиреләрен, кипкән икмәк һалып алды.Ауылға төн уртаһында ғына барып инде. Ғәжәп, өйөндә ут һүнмәгәйне әле.

- Бәрәкәт, ҡарсыҡ ҡайтырымды һиҙенәме икән ни? – тип шатланды Ермил.

Ҡапҡаһын шығырлатып асыуы булды, иңенә йылдар ятыуҙан ҡаҡсаланған ҡарсығы тупһаға килеп тә сыҡты.

- Я Рабби! Тере икәнһең! Әллә нимәләр уйлап бөттөм. Төшөм буталып бер булдым.

- Юҡтан түгел, ҡарсыҡ. Хәл мөшкөл әле минең. Саҡ ҡайтып еттем.

- Степанды барып уятайыммы әллә?

- Ашыҡма. Иртәгә лә көн бар.Тамаҡҡа йүнәт.

Таңға табан ҡарт насарланды. Степан атаһын ҡалаға дауаханаға алып китте.

- Мин, улым, оҙаҡ ятып китермен кеүек, - тип хушлашты Ермил. – Һин минең ҡапҡандарҙы йыйып ал, тарттырған кулемкаларымды ла ысҡындыр.

- Борсолма, атай, йыйыштырырмын. Һин һауыҡ тиҙерәк!

* * *

Степан атаһының биләмәһенә ҡапыл ғына сығып китә алманы. Мәшәҡәт табылып торҙо. Мартта ғына юлға сыҡты.Уның тәүге путигынан үҡ өс кеш, бер шәшке алды. Дөрөҫөрәге ,яртыһын ғына. Ҡалғанын сысҡан кимергән. Икенсе кулемкаға ике ҡыҙыл-ерән шәшке эләккән Ермил ҡарттың иң оҙон путигы етмеш ауҙан тора һәм “сәй” шишмәһенә тиклем һуҙылған, әммә табыш юҡ тиерлек.

Бүрәнәгә һарылып ҡалған йөнөнә ҡарағанда ауға росомаха эләккән булһа кәрәк, әммә көслө йыртҡыс бүрәнә аҫтынан һурылып сығып, тау яғына табан шыуышып киткән.

Уның эҙенә ҡарап, януарҙың арт аяҡтары зәғифләнгән булыуын шәйләне Степан. Тимәк, өмөт бар, алыҫ китә алмағандыр. Әммә һунарсы эҙҙе берсә тап итеп, берсә юғалта-юғалта өс саҡрым тирәһе юл үтте һәм ҡар ҡаплаған өң янына барып сыҡты. Өңдөң ауыҙы инеп-сығып йөрөүҙән ялтырап бөткән.

- Ә-ә-ә...балалары янына табан шыуышҡан бит был.

Степан балтаһы менән өңөр ауыҙын киңәйтеп маташты, әммә эсенә инерлек түгел.Мавр иһә еҫкәнде-еҫкәнде лә ҡар өйөмөн тырнарға кереште, Степан уға ярҙамға ташланды. Ҡар ишелеп китте һәм охотоведтың күҙенә йөнтәҫ йомғаҡ салынды. Степан тайшана биреп ҡуйҙы, ә йомғаҡ ҡымшанманы.

“ Тере түгел. Ә балалары ҡайҙа икән?”- тигән уй үтте Степандың башынан.

Йөнтәҫ йомғаҡтың йөнө ҡыбырлай төштө һәм Степан үләкһәнең эсе тирәһенән ике көсөк тартып сығарҙы. Ябығышҡан көсөктәр нәҙек кенә тауыш менән сыйылдаша. Шул тиклем йонсоуҙар, баштарын күтәрмәксе булһалар, дер ҡалтыраша башлайҙар. Маңлайлы, үҙенә күрә түгел әле һаман, ауыҙын асып тешен ыржайтып маташа. Икенсеһе йыуаш, өмөтләнеп текләгән була.

Сибек кенәләр, бахырҡайҙар. Йоҡа ғына тундары аҫтынан ҡабырғалары беленеп тора, йөрәктәре типкәне беленә. Охотовед сабый йәнлектрҙе йәлләне. Бер-ике көндән һәләк булырҙар ине инде.

- Әнтәктәр, килегеҙ әле бында! Хәҙер мин һеҙҙе йылытам! – Степан көсөктәрҙе ҡуйынына тыҡты.

Росомаханы өңөнән тышҡа алып сыҡты. Ҡойроҡһоҙ!

- Бәй, боронғо таныш бит был!- тип уйлап ҡуйҙы Степан.

Ҡышлаҡтағы тимер мейескә яғып ебәрҙе. Киптерелгән һөттө көрөшкәлә иретте һәм пластик шешәгә ҡойҙо. Нимәнән имеҙлек яһарға һуң? Аптырай тоғас, күн бирсәткәнең сәтәкәй бармағын ҡырҡып алды ла, беҙ менән тишек яһап, шешәнең ауыҙына кейҙерҙе. Һөт имеп алғас көсөктәр баштарын күтәрҙе һәм өҫтәмә талап итеп сыйылдаша башланы.

- Нисә көн асыҡтығыҙ һуң, бисараҡайҙар?- тип һөйләнде Степан. Ә күңелендә мәхлүктәрҙе астан үлеүҙән ҡотҡарғаны өсөн ҡәнәғәтлек тойғоһо ялды.Көсөктәрҙе ауылға алып ҡайтып китте.

- Был арала кемдең эте көсөкләне икән, белмәйһеңме? – Степан өйгә килеп ингәс тә ҡатынына шулай тип өндәште.

- Нишләп һорайһың?

- Атайҙың биләмәһенән росомаха көсөктәрен табып алдым . Инәләре һәләк булған. Балаларын һаҡлап ҡалыр кәрәк, - тине Степан һәм ҡуйынынан табылдыҡтарҙы килтереп сығарҙы.

- Матурғыналар!- тип һоҡланды ҡатыны. – Натальяларҙың Аськаһы көсөкләне. Балалары тас һинең Маврың.

Степан еңел һулап ҡуйҙы. Унын ике туған һылыуы Наталья – изге күңелле кеше, росомахаларға үлергә бирмәҫ.

Ишекте Наталья һылыуының ире Николай асты. Николай кейәүе, йоҡа кәүҙәле булһа ла ярайһы көслө ир-егет, төрмә срогын тултырып сыҡҡандан һуң биш йылдар тирәһе элек Верхи ауылына килеп төпләнгәйне. Тол ҡалған Натальяға өйләнде. Шым ғына ғүмер итә, ҡулы балта эшенә оҫта, өй беренсә кешегә эшләшә, балыҡҡа йөрөй, Сергий атаҡайға булыша. Сиркәүгә Батша ҡапҡаларын, иконостасты ул яһап ҡуйҙы.Пуля тигән фамилияһына ярашлы эште бик етеҙ башҡара.

Степан уға кәрзингә һалып алып килгән көсөктәрҙе күрһәтте.

- Инәләре һәләк булып ҡуйған. Вера һеҙҙең Аська көсөкләгән, тигәйне. Алып ҡал әле, Аськаға ҡушырһың. Үҫтереп алырға ине.

- Ниндәй йәнлектең көсөктәре һуң?

- Росомаханыҡы.

Николай тынып ҡалды.

- Мин,әлбиттә, һунарсы түгел, росомахаларҙы бик яуыз януар тигәндәрен ишеткәнем бар.Ен-пәрейенең үҙе менән бер, өҙгөс хайуан, тиҙәр бит.

- Тыңлама һин кеше һүҙен! Белмәгәнеңде минән һора!- тип бүлдерҙе уны Степан. – Теләһә ниндәй януар хаҡында һөйләй алам. Росомахалар бик тә файҙалы йәнлек ул.Тайгаға улар бик тә кәрәк.

- Ҡалдыр һуң, улайһа. Оҙаҡ тоторғамы?

- Көҙгә саҡлым. Аҙаҡ зообазаға тапшырырбыҙ. Уларға һорау күп.

- Аськаны алдаштырып ҡарарға булыр.

Пуля росомаха көсөктәренең өҫтөнә бесән онтағы һипте лә этенең ҡуйынына һалды. Эт көсөктәрҙе еҫкәп алды. Сит еҫ килмәгән кеүек, әммә үҙенекеләр түгеллеген аңланы. Ырылдарға иткәйне, росомахалар быныың елененә барып йәбеште. Әсәлек инстинкты балаларҙы ризыҡһыҙ ҡалдырырға рөхсәт итмәне. Ә көсөктәр бик нәфселе булып сыҡты, ҡаҙалып ятып имәләр. Аська кинәнесенән күҙҙәрен йомдо.

Ҡайтыр алдынан Степан эттең башынан һыпырҙы:

- Аҡыллы эт! Рәхмәт һиңә!

Туйынып йоҡлап алғас, росомаха көсөктәре баштарын күтәреп тирә-яҡҡа күҙ ташланы: "Ҡайҙа килеп эләктеләр һуң?" Иркен, яҡты урын. Әсәләренең йөнлө ҡорһағынан айырмалы был имеҙеүсенең эсе шыма, аҡ. Әсәләренең еҫе сыҡмай. Уның ҡарауы йылы, тамаҡтары туҡ. Ә әсәләре ҡайҙа һуң?

Шул саҡ ниҙер шығырланы һәм йәнә лә яҡтыраҡ булып китте. Көсөктәр өҫтөнә ниндәйҙер ҙур йәнлек эйелде.

- Бисаралар! Бигерәк әнтәк, ябыҡ бит былар, - тип һөйләнде Наталья.-Туйындырып алырмын әле мин һеҙҙе.

Тауышы матур, наҙлы ине был таныш булмаған йәнлектең, ҡулы арҡаларына ҡағылғас, көсөктәрҙең тәненән йылы ғына рәхәт тулҡындар йүгерҙе.

Ай тигәндә росомаха балалары һәүетемсә ипкә инеп, яңы урындарына күнекте. Хәҙер улар көндәр буйы Аськаның ҡорһағы янында ятмай, ишек алды буйлап йүгерешә, шаяра. Маңлайлы уйнаған арала ҡыҙып китеп ырылдап ҡуя, уйын айҡашыуға әүерелә. Бәләкәйерәгенең

ағаһынан ҡасып тәпәйҙәрен тыпылдатып йүгереүен Наталья көлә-көлә күҙәтә. Шул тыпылдауы арҡаһында уға Тып-Тып тип исем ҡуштылар.

Был Тып-Тып күңелсәк, ирәбе йәнлек булып сыҡты, йылмайырға ғына тора. Кемдер берәү росомахалар йылмаямы ни инде, тиер. Нисегерәк йылмаялар әле! Ә Тып-Тып шундай ихлас йылмая, уға ҡараған кеше үҙе лә йылмаймай булдыра алмай.

Ишек алдында йүгерешеүсе мал-тыуар араһында Тып-Тып иң хәрәкәтсәне. Тиҙҙән ул ихаталағы өңдөң хужаларынан тыш күршеләрҙе лә таный башланы. Ул ни бары был йән эйәләренең туны булмауға ғәжәпләнә.Етмәһә, ике аяҡтарына баҫып ҡына хәрәкәт итәләр. Инә йәнлектәрҙең тауышы нәҙек, йомшаҡ һәм наҙлы. Ата йән эйәләре ҡалын тауышлы.Уларға ашарға биреүсе йыуантаҡ ҡатын бигерәк тә нык оҡшай Тып-Тыпҡа. Уның яғымлы тауышын ишетеү менән янында һырпалана башлай.

Еҫе лә ят түгел, тотош ҡиәфәте унан ҡурҡмаҫҡа, ышанырға саҡырып тора. Тып-Тып, хөрмәтен белдерергә теләүҙән, уның йомшаҡ ҡына бармаҡтарын тешләштерә. Ул ихатаға сыҡһа, аяғы араһында буталып шаяра. Уның тирәһендә Манька ла буталана. Ул кәзә ҡатындың итәген сәйнәргә генә тора. Тып-Тыптың кәзәне ҡатын тирәһенә килтергеһе килмәй, өҫтөнә ырғып арҡаһын тешләй һала.

Аськаның һөтө етмәй башланы һәм ҡатын росомахаларға бутҡа бешереп бирергә мәжбүр булды. Тып-Тыпҡа бутҡаны мулыраҡ һала. Уны икмәк ашарға ла өйрәтеп алды. “Аша, Тып-Тып, аша!”- ти ҙә йылы ғына икмәк һынығы һона. Көсөк икмәкте башта еҫкәп ҡараны, еҫе тәмле, ләкин ят. Ашарға ҡурҡты.

- Аша, Тып-Тып, тәмле ул!- ҡатын икмәкте үҙе тешләп алды һәм күҙ ҡыҙырлыҡ итеп сәйнәй башланы.- Әйҙә, һин дә тәмләп ҡара!

Тып-Тып икмәкте сәйнәп йотто ла йәнә һоранырға кереште.

Наталья уның ҡолаҡ артын тырнап алды. “ Аҡыллы көсөк!”- һәм йәнә бер һыныҡ икмәк һондо. Маңлайлыны ла һыйламаҡсы булғайны, тегеһе ырылдап баш тартты.

Шунан бирле Тып-Тып хужабикәнең икмәк бешергән сағын көтөп кенә йөрөй. Икмәк бешкән көндө ишек алдына тәмле еҫ тарала.

Тиҙҙән эт көсөктәренә лә, росомаханыҡыларға ла ит, балыҡ бирә башланылар. Ризыҡ “бүлешкәндә” иң мул киҫәкте Маңлайлы эләктерергә өлгөрә.

- Бик шәп табышсы булмаҡсы, - ти уның хаҡында хужабикә.

- Ҡаҙыҡ тештәре сыҡһын әле, күрербеҙ, - ти Николай.

Маңлайлы Тып-Тыпҡа оҡшамаған. Тегеһе йылмайыусан, дуҫтарса мөнәсәбәтле, ылығыусан булһа, был кешеләргә ҡарата һаҡ мөнәсәбәттә, йылышып бармай. Күҙенә тура ҡарау ҙа етә, ырылдай башлай.

Тып-Тып кеше тирәһендә һырпаланырға ярата. Наталья менән Николай икәү-ара һөйләшә башлаһа, башын эйеп тыңлай, әйтерһең дә низер аңларға маташа. Холоҡ-фиғеленә ҡарағанда аңлайҙыр ҙа кеүек. “Ҡоторонма!” тип янаһаң, ғәйепле кеше кеүек, башын эйеп ситкә китә, “Шәпһең!” тип маҡтаһаң, шатлығынан ҡойроғон болғарға тотона. Һәм уның аңлаған һүҙҙәре көндән-көн арта бара.

Тып-Тып яғымлы һәм башлы булғаны өсөн генә түгел, ә йыуантаҡ, ипһеҙерәк булыуына ҡарамаҫтан бик төплө булыуы менән дә һоҡландыра. Һәммә йән эйәһенә лә тигеҙ мөнәсәбәттә Тып-Тып, әммә Пуляны, Натальяны һәм ҡуйы бөҙрә сәсле ике аяҡлы Степанды ғына хужа тип таный.

Степан табылдыҡтары янына Тып-Тыптың иң яҡын дуҫы Амурға оҡшаған этен эйәртеп килә. Мавр ҙа ҡара тәпәйле аҡһыл эт. Амурҙың атаһы.

Бер килгәнендә Степан Пуляға һөйләп т торҙо:

- Сәйер,Тып-тып ҡулға эйәләшеп бара. Росомахаларҙа булмай торған характерлы. Уларҙы өйрәнеүсе биологтарҙың һәммәһе лә был януарҙарҙың агрессивлығын телгә алға. Бик бәләкәйҙән ҡулға эйәләштергәнгә алсаҡ микән? Ә ағаһы бит уҫал. Яҙылып китергә уйламай ҙа. Ағалы-ҡустылы йәнлектәр, ә икеһе ике холоҡло...Кешеләр кеүек.

- Һин дөрөҫ әйткәнһең икән, Степан, - тип һүҙгә ҡушылды Николай. – Росомахаларҙы кешеләр юҡҡа ғына яуызға һанай икән. Ҡасандан бирле күҙәтәм, таҙарынырға тиһәң, уларҙы ҡуш. Сәғәтттәр буйы яланып ултыралар, бер урында ғына ярау итәләр.

- Ә һин уларҙы пәрей ҙә пәрей, тигән булдың! Кешеләр уҫаллаштыра уларҙы. Иҫеңдәме, берәүһе минең атай ҡарттың ҡар баҙына эйәләп алғайны? Атайым үҙе ғәйепле! Атҡан бит! Ана шуның үсен алып йөрөгән.

Ирҙәр икеһе лә уйҙарына бирелеп шым торҙо.

- Һунарға тотоноpға дәртең юҡмы, Николай? – тынлыҡты Степан боҙҙо.- Буш биләмәләр бар.Әле генә икәү хужаһыҙ ҡалды.

- Юҡ. Күңелем ятмай ул эшкә. Тауыҡ та салғаным юҡ.

- Аңлашылды... Миңә таныш бындай хәл...

* * *

Тып-Тып ышаныусан, алсаҡ булған кеүек, Маңлайлының да үҙ холҡо бар. Ул һәр саҡ ниндәйҙер үҙе генә белгән пландар ҡорған кеүек. Хужаларҙың өйҙән сығып китеүе була, ул тырнаҡтарын ишек аҫтына тығып аса ла кухняла күҙенә нимә эләгә, шуны эләктерә һала һәм карауат аҫтынамы, мейес артынамы йәшереп ҡуя , аулаҡ саҡта йәшенеп ашай.Уның был ҡараҡлығын шәйләп алған хужалар уға яза бирмәксе булғайны, Маңлайлы башын эйеп шымтайҙы ла ҡуйҙы, хужаларға уның хәйләкәрлеген күреп йылмайышыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Был бәләкәй һунарсы хатта һыуытҡысты асырға ла өйрәнеп алды.

Бер саҡ ҙур ғына ҡаза ла килтереп ҡуйҙы. Һауыт шкафының ишеген көс менән тартып асҡан да, өҫкө кәштәләге һауыт-һаба тотош ҡойолған да төшкән. Тәрилкәләр, сынаяҡтар, рюмкалар сайралған тауышҡа хужабикә йүгереп килеп инһә, үҙ күҙенә ышанмай торҙо. Әсәһенән ҡалған, тиҫтәләгән йылдар үҙе туплаған һауыт-һабанан ярсыҡ өйөмө генә тороп ҡалған. Ситтәрәк Маңлайлы башын эйеп баҫып тора. Наталья түҙмәне, быны типкеләп тупһанан сығарып браҡтырҙы.Был ваҡиғанан һуң йәйге аласыҡтың ишеген дә, өй ишеген дә ике йоҙаҡҡа бикләп йөрөр булдылар. Ә ишек алдында уларға хөрриәт. Уйнайҙар, көрмәкләшәләр, үтә ҡыҙыу көндәрҙә ағас күләгәһендә Һуҙылып ятып рәхәтләнәләр.

Маңлайлы күмәк уйындарға бик ҡатнашып бармай. Йә яңғыҙы ғына йөрөй, йә тупһа аҫтынан күҙәтеп ята. Тып-Тып иһә үҫә төшкән эт көсөктәре менән туғанлашып бөттө тиерлек. Амур менән хатта төндә лә бер-береһенә һыйынышып йоҡлар булдылар.

Дүрт ай тигәндә росомаха балалары еткән януар хәтлем булмаһалар ҙа тундарының төҫө формалашты: һорғолт-көрән тундың өҫтөнә ҡойроҡтарынан алып яурындарына саҡлым һуҙылған аҡһыл шлея ятты. Аяҡ табанынан тубыҡтарына тиклем ерен ҡара йөн ҡапланы. Маңлайлының арҡаһындағы йөнө аҡһылыраҡ, шлеяһы менән бер тиерлек.

- Һағыраҡ бул, - тип тыя Николай Степанды ул килгәндә. – Тешләп алмаһын. Зообазаға уны тапшырырһың. Тып-Тыпты алып ҡалам, уға өйрәнгәнбеҙ. Бигерәк тә Наталья. Һырпаланып ҡына тора, башы йоморо!

- Януарҙар ҙа кешеләр кеүек шул, һәр береһенең үҙ холҡо.

## Ун бишенсе глава

## Балыҡсы

Пуля Тып-Тыптың тауышын, ырылдауының нимә аңлатҡанын төшөнә башланы. “Миңә бөгөн кем эйәрә?”- тиеүе була, Тып-тып көлкөлө итеп башын сайҡай-сайҡай ҡапҡа яғына табан йүгерә һәм сыйылдарға тотона. Белә, хужаһы хәҙер һарайҙан оҙон таяҡтар, балыҡ еҫе сыҡҡан сумкаһын

аласаҡ һәм улар күл йә йылға яғына юл тотасаҡ. Пуля бер көндө балыҡҡа үҙе генә киткәйне. Тып-Тып үпкәләп утындар араһына инеп ятты ла төнгә тиклем сыҡманы.

Балыҡ ҡармаҡларға яратыусы Сергий атаҡай ҙа балыҡтан ҡайтышлай Николайҙарға һуғыла, ыбыр-сыбыр балығы менән росомаха көсөктәрен һыйлай.Ҡайһы бер көндәрҙә балыҡҡа өсәүләшеп китәләр: Николай Николаевич, рухани, Тып-Тып. Николай берәр ерҙә ҡыйыҡ йүнәтеп, тәҙрә ҡапҡастарын яңыртып эш менән булған көндәрҙә Тып-Тып балыҡҡа Сергий атаҡай менн ҡушарлап йөрөй. Бөгөн ана шулай икәү-ара ғына китеп барыштары.

Йылға бөгөлөнөң тәрән бер еренә Сергий атаҡай бутҡа йомарламы һәм ҡармағын ташланы.Тып-Тып ҡалҡыуыстан күҙен дә алмай күҙәтә.Уның ҡыбырлап китеүе булды, алға тартыла. Батюшка бәрелеп-һуғылған балыҡты ярға һөйрәй башлағайны, түҙмәне, һыуға һикерҙе. Тәүгеһендә рухани быға шатланғайны, ә инде, росомаханың ҡурҡытыуы арҡаһында ҡармағынан ике ҡушбаш балығы ысҡынғас, ярҙамсыһын ҡыуырға мәжбүр булды. Тегеһе яҡындағы таллыҡҡа инеп ятты.

“Әллә сабаҡ һикерә инде?” –тип уйлап алды балыҡсы һыуҙағы сәпелдәү тауышын ишетеп. Ярҙың ҡомороҡлораҡ еренә барһа, Тып-Тып балыҡ кимереп ултыра.

“Нисек эләктерә икән?”- тип ҡыҙыҡһынды рухани һәм күҙәтергә булды.

Ярҙан алыҫ түгел генә ятҡан ағас тамыры тирәһендә икмәк киҫәге йөҙә, янына ыбыр-сыбыр балыҡтар йыйылышҡан, эрерәк балыҡ килеп күренеү менән Тып-Тып уны йәһәт кенә ҡулы менән эләктереп тә ала.

“ Вәт башлы был!”- тип уйланы рухани һәм ҡармаҡ һалған урынына ыңғайланы. Бер аҙҙан тешенә балыҡ ҡыҫтырған росомаха күренде һәм табышын Сергий атаҡайҙың аяҡ аҫтына килтереп һалды һәм оялып ситкәрәк барып ултырҙы.

- Бына һиңә кәрәкһә!- тип шатланды рухани.- Шәп балыҡсы булып сыҡтың бит!

“Нишләп ғалимдар януарҙарҙың уйлау һәләте, аҡылы юҡ, тип яҙа икән?- тигән уйҙарға бирелде.-Бар Ҡылыусы бер йән эйәһен дә зиһендән мәхрүм итмәгән. Тимәк, беҙ үҙебеҙ- үҙебеҙҙе януарҙарҙан өҫтөнөрәк ҡуябыҙ, уларҙы аңларға тырышмайбыҙ.”

Күптән түгел генә булып үткән бер ҡыҙыҡлы ваҡиға иҫенә төштө. Верхи аулының сиркәүе бик бейек түгел. Ә колокольняһын Пуля бейек итеп эшләне. Байрам алдынан йә литугиянан һуң ҡыңғырауҙар шылтырауына халыҡ бик шатланыр булды. Шулай бер заман һыйырҙарҙы һауып көтөүгә

ҡыуырға ла өлгөрмәнеләр, ҡыңғрау тауыштары яңғраны:”Бум, бум!” Ниндәй хәл был? Берәрһе шаярамы икән әллә?

Сергий атаҡай колокольня яғына ыңғайланы. Ҡараһа, ҡыңғырауҙар тирәһенә ҡарғалар йыйылышҡан, берeһе бар көсөнә бауҙы тартҡылай. Үргә үрмәләргә тура килде. Ҡарғаларҙы ҡыуып ебәрҙе. Ергә төшөүе булды, йәнә:”Бум!Бум!” Берәүһе генә түгел, ике ҡарға бер юлы бауҙы тартҡылай. Былары тартҡылап ситкәрәк китһә, икеселәре килеп ҡуна, сиратлап дыңғырлаталар. Ҡайҙан уйлап сығарғандар, ҡыҙыҡ күрәләрме икән? Шунан бирле ҡыңғырау ебен арҡыры ағасҡа бәйләп ҡуйыр булдылар.

* * *

Үтә һиҙгер, еҫ һиҙә, яҡшы күрә белеүе арҡаһында Тып-Тып бөтә көсөктәрҙең дә юлбашсыһы ролен үтәй башланы.

Тәбиғи һәләте арҡаһында ул ике аяғында йөрөүселәрҙең дә холоҡтары төрлө-төрлө булыуына төшөндө. Еҫтәре лә бер-береһенекенән айырыла. Иғтибарлап еҫкәнһәң, бөтә нәмәне лә аңлап була. Хужаһының еҫенә ҡарағанда, ул йомарт, яҡшы күңелле, ғәҙел. Ғәйебең булһа шелтәләй, яҡшылыҡ эшләһәң – берәр тәмле нәмә менән һыйлай.

Балыҡтан бер әйләнеп ҡайтҡанында Тып-Тып ағаһының юҡлығына иғтибар итте.Бик аптыраманы, Маңлайлы элек тә ихатанан сығып китеп, ҡайҙалыр юғалып йөрөп ҡайтҡылай ине. Тик көн артынан көн үтте. Маңлайлы күренмәне. Дуҫлыҡтары самалы ине лә ул,барыбер, юҡһынды, ағаһы бит. Тып-Тып уны һағына башланы. Яҡын тирәне йөрөп эҙләп тә ҡараны, Маңлайлы ғәйеп булды.Охотовед уны ҡалаға алып киткәйне инде.

Ун алтынсы глава

## Тәүге һунар

Тып-Тып үҙе йәшәгән донъяның уныҡы түгел икәнен аңғара башлағанда байтаҡ ғүмер үткәйне. Уның урыны- урманда булһа кәрәк. Ул ағаһының да шунда китеүенә икеләнмәй ине. Хәҙер ул, балыҡҡа эйәртеп алып китһәләр, элекке кеүек хужаһының янынан ғына атламай, һуҡмаҡ яҙҙырып урман шырлыҡтарына инеп әйләнеү яғын ҡарай.

Бер шулай, ағас араһын ҡыҙырып йөрөһә, алдына ҡуян балаһы килеп сыҡты. Ул ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына һикерәңләп, еҫкәнә-еҫкәнә йөрөй, ҡурҡышынан тәне ҡалтырап китә. Ҙур януарҙы күреп ҡалыу менән һыпыртыу яғын ҡараны, әммә Тып-Тып унан сосораҡ булып сыҡты.

Бәрхәт йомғаҡҡа оҡшаған йәнлекте Тып-Тып арҡаһынан әләктерҙе һәм тәүге табышы менән тукланып алды.Икенсе юлы әлғәнйәккә тап булды. Уныһы ҡап-ҡара ғына мәрйен кеүек күҙҙәре менән росомахаға теклəп тора ине.Тып-Тып уны әләктермәксе булғайны, тегеһе йылп итеп кенә юғалды ла ҡуйҙы.

Урман араһын ҡыҙырып туйғас, росомаха балыҡ ҡармаҡлаған урынға килә.

Көндәрҙең береһендә ул урман эсен үҙе генә ҡыҙырып сығырға йөрьәт итте. Уға тоғро дуҫы Амур ҙа эйәрҙе. Урман төбөнәрәк инеп йүгерекләнеләр, тау башына үрмәләнеләр. Йәш ҡарағайҙар араһында Тып-Тып ниндәйҙер арбағыс еҫ барлығын һиҙеп ҡалды. Эске аңы менән еҫтең ҙур ғына януарҙыҡы булыуына төшөндө. Еҫ килгән яҡҡа табан ыңғайланы һәм эсе күпкән, мөгөҙө ағарып күренгән  мышы үләкһәһенә барып юлыҡты.

Иҫе китте Тып-Тыптың, был  ҡәҙәрлем итте уның ғүмерендә лә күргәне юҡ ине. Был ит Амур менән икеһенеке генә буласаҡ. Тып-тып уны үҙе килеп тапты һәм бер кемгә лә бирмәйәсәк. Йәш росомаха эсе туптай булғанса һыйланды. Ә Амур иткә яҡын да килмәне, еҫкәнеп торҙо ла ситкәрәк барҙы ла ятты. Тып-Тып эттең бынауындай ҙа тәмле ризыҡтан баш тартыуына хайран итте.

Йәнә бер көндән тау хәтлем ит иҫенә төшөп, ул урманға үҙе генә инеп китте.Был  юлы һыйланыу тәтемәне, итте бүреләр өйөрө һырып алғайны. Бүреләрҙең береһе уны шәйләп алды һәм ҡанлы тештәрен ыржайтып уның яғына аҙым яһай бирҙе. Тып-Тыпҡа  ары һыпыртыуҙан башҡа сара ҡалманы. Шул  рәүешле ул урманда унан да көслөрәк януарҙар барлығына һәм уларҙан арыраҡ тороу хәйерле булыуына төшөндө. Ике аяҡлылар янына әйләнеп ҡайтҡыһы килмәне. Хужабикә  йомарт та ул, әммә ул бешереп биргән өйрә бүктергәйне. Йәш организмы ит һорай. Тып-тып ҡурай еләге ҡыуаҡлыҡтарына  барып сыҡты.Тәмле еҫ килә. Росомаха уны тәмләп ҡарарға булды. Ауыҙы тәмгә тулды, ул еләктәрҙе күңеленә тейгәнсе һоғондо ла һоғондо.

Был Тып-Тып өсөн өр яңы асыш булды. Баҡһаң, урманда иттән башҡа ла ашамлыҡ етерлек икән дә. Тамағы туйғас, иркенлектән хозурланып ҡурай еләге ҡыуаҡтарынан алыҫ булмаған таш өҫтөнә һуҙылып ятты.Күҙ ҡырыйы менән өңдән башын сығарған йәнлекте күреп ҡалды.

- Табыш бит был!

Абайлабыраҡ ҡараһа, йәнлек уның үҙенән ҙурыраҡ. Тып-Тып ырылдап ҡуйҙы. Икеләнә  биреп тә  торҙо: бәйләнергәме быға, юҡмы?Эске тойғоһо алға этәрҙе. Тәүәкәлләргә! Үҙе лә һиҙмәҫтән сырылдап ебәрҙе һәм үҙенең тауышы  эсендәге йыртҡыслыҡ асылын уятып ебәрҙе. Ул йыуантаҡ ҡиәфәтле һоро тунлы табышына текләберәк ҡарап торҙо.Әләктереп булырмы? Әммә һунар инстинкты үҙенекен итте һәм ул табышына ташланды. Әммә бурһыҡ ике-өс тапҡыр ғына һикереп өңөнә инеп тә юғалды.

Был да һабаҡ булды. Табышыңдың  өңөнә яҡын ерҙә һунар итергә ярамай. Йәнлектең ситкәрәк киткәнен  аңдырға, өңөр юлын ҡамарға  һәм шунан ғына атакаға ташланырға кәрәк икән.

Елдең ҡаһы яҡтан иҫеүен билдәләне һәм өң ауыҙын ҡарауылларға булды. Сәғәттәр үтте. Эңер ҡараңғыланды. Күк йөҙөн януар күҙҙәренә оҡшаған яҡты нөктәләр һырып алды. Ойоп китһәң, был утсыҡтар урынын алмаштыра икән.

“Теге тумалаҡ ҡасан килеп сығыр икән? Ашағы килә бит!- тип тынғыһыҙланды Тып-Тып һәм үҙен тынысландырҙы.- Сабыр итергә, түҙергә кәрәк!”

Ниһайәт, өң ауыҙынан морононоң ике яғында ла ҡара һыҙаты булған аҡ баш күренде. Тирә-яғын күҙәтеберәк торҙо ла бурһыҡ, хәүеф-хәтәр һиҙелмәгәс, тау һөҙәге тирәһендәге йылға яғына ыңғаланы. Ваҡыт!

Тып-Тып тумалаҡты ҡыуалап етте һәм сыйнай-сыйнай арҡаһына һикерҙе. Тырнағын бурһыҡтың муйынына батырҙы һәм ҡорбанының әлһерәп төшөүен самаланы. Ажарланыуы һәм көсөргәнешенән росомаханың сикәһе ҡарышып китте, уны саҡ-саҡ яҙып алды һәм тотош булмышын биләп алған шатлыҡтан бер нисә тапҡыр һикергеләп ҡуйҙы.

Тып-Тыпты һунар итергә өйрәтеүсе лә булманы бит, ә ул булдырҙы! Көрәш аша табылған ризыҡтың тәме лә икенсе икән шул. Ул ике аяҡлылар араһына кире ҡайтмаҫҡа ҡарар итте.

Иртәгәһенә хужаһының “Тып-Тып!”- тип ҡысҡырыуын ишетте һәм уны эҙләүҙәренә төшөндө.Ул униң ҡаршыһына йүгереп сығырға ла ашҡынғайны, кире уйланы. Униң урыны бында, урманда.

Яңы тормош шыма ғына барманы. Иртәгәһенә үк һеләүһен бурһыҡ ҡалдыҡтарын ауыҙынан тартып алды. Йәш Тып-Тыптың әсе еҫ сығара торған мускус биҙҙәре өлгөрөп етмәгәйне әле, көсө лә йылғыр бесәйҙекенән ҡайтышыраҡ. Асығыуын асыҡманы, асығауыҙ селдең ите бурһыҡтыҡынан тәмлерәк тә булып сыҡты.

Урман ҡыҙырып йөрөгәндә ул тауыш-өндәрҙе айыра башланы. Ҡоштарҙың сырылдашыуы ҡайҙа ризыҡ, ҡайҙа хәтәр барлығын аңғартып торҙо. Януарҙарҙың йүгереүенә ҡарап, униң табыш артынан ҡыуалаймы, үҙе ҡасып барамы икәнен абайланы. Әле бына яҡындан ғына мышылар сабышып үтте.Кемдер уларҙы эҙәрлекләй булһа кәрәк. Шулай булып сыҡты ла. Бүреләрҙән ҡасалар икән.

Һунар итеп, урман ҡыҙырып арығас, росомаха һыртҡараҡ күтәрелеп, еләҫ ерҙә ял итергә ярата. Ойоп китһә лә һәр тауышҡа һиҙгер. Бер шулай ойоп ҡына киткәйне, ағас ботаҡтары һынған тауышҡа һағайҙы. Урман араһынан айыуҙар килеп сыҡты. Өсәү. Инә айыу, тәрбиәсе (пестун) һәм айыу балаһы. Киң маңлайлы, киң арҡалы, һимеҙлектән ҡорһаҡтары һелкенеп торған инә айыу росомаханы үтә лә дәү булыуы менән хайран итте. Ергә төбәлеберәк атлаған айыу ара-тирә ян-яғына ла күҙ һалып ала.

Былар Тып-Тыптың янына яҡынлашҡас, росомаха инә айыуҙың таржайып торған һары ҡаҙыҡ тешенә иғтибар итте.

Атлаған ыңғайға башын сайҡай-сайҡай килеүсе айыу ғаиләһен юғары һәм түбәнге ятыуҙарҙы тоташтырған урынға алып килде. Бәләкәсенә ағаһы тәрбиәсе айыу ярҙам итеренә ышанған инә айыу йылға ағымы аша йөҙөп сығып китте һәм урман эсенә ыңғайланы. Ә тәрбиәсе уның артынан эйәрҙе. бәләкәс айыу яр башында шыңшып ултырып ҡалды.

Тып-Тып инә айыу уны ҡотҡарырға боролор тип уйлағайны, тегеһе тәпәйе менән тәрбиәсегә һелтәп ебәрҙе, уныһы мәтәлләп төштө һәм йылға ярына кире килде. Һабаҡ ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Ағаһы ҡустыһын эре таштар буйлатып арғы ярға алып сығып китте.

Тәүге уңыштарынан рухланған Тып-Тып әсәһе менән янғындан һуң күтәрелгән йәш урман араһында йәшәгән болан быҙауына һунар итергә ҡарар итте. Тик нисек итеп һуң? Ул һәр ваҡыт әсәһенә һыйынып ҡына йөрөй, ә Тып-Тыптың инә боландың тояғын татығыһы килеп тормай әле.

Күҙәтә торғас, шундай картинаға тап булды ул. Инә болан ярҙан һикерҙе лә һыулауға төштө, ә быҙауы яр башындағы үләнгә ятты. Йәш йыртҡыс бынан файҙаланмай ҡалмаҫҡа булды. Өҫтөнә торпедо кеүек атылған йыртҡыстан ҡотолоу өсөн, болан балаһы әсәһе яғына ҡасыр урынға, ергә нығыраҡ һыйынды ла, шымып ҡалды. Шул арҡала росомаханың ҡорбаны булды ла ҡуйҙы.

Тып-Тып табышын һоғоноуҙан тыйылып торҙо. Башта күкрәген ярып сығырҙай булып типкән йөрәген тынысландырырға, үҙенең ғәйрәтен баһаларға кәрәк ине. Яр аҫтындағы ҡырсындың шығырлауы ишетелде, инә болан ярға күтәрелеп килә. Шатлығынан башы әйләнгән Тып-Тып табышын өлкән боландан араламаҡсы булғайны, әммә эске интуицияһы уға әлегә боҫорға кәрәклеген аңғартты. Ул йылп итеп ағас башына менеп китте һәм йыуан олон өҫтөнә һуҙылып ятты.

Инә боландың балаһының мәйетен ташлап китеүен оҙаҡ көтөргә тура килде. Уның ҡарауы, өлкән болан яңғыҙы ғына ағастар араһына инеп киткәс, йәш разбойник кинәнеп һыйланырға тотондо. Ит эҫе ҡояш аҫтында боҙолмаһын өсөн, уны һалҡын шишмә һыуына төшөрөп һалды һәм өҫтөнә таш өйҙө.

Тамаҡ туҡ булғас, күңеле күтәренке ине. Рәхәтләнеп йоҡо туйҙырҙы, кирелеп алды, иҫнәне , шунан ауыш ағас буйлап үрмәләне һәм бер нисә һикереүҙә тау үрендәге ташҡа ҡунаҡланы. Был ерҙән тирә-йүнде күҙәтеү уңайлы.

Һырт артындағы күлдең осо күренә. Унда уны туйындырып үҫтереүселәр һәм дуҫы Амур йәшәй. Күҙҙәре һағышлана бирҙе, әммә

быndағы иркенлек, бөтә нәмәне лә үҙе генә хәл итә алыу мөмкинлеге, тау хәтлем ите булыу уны ҡылған ҡарарының дөрөҫлөгөнә инандырҙы.

Ун етенсе глава

**Фажиғәле яңлышлыҡ**

Бер йыл артта ҡалды. Еүеш көҙ яҡынлашты. Тып-Тып үҫте, еҫе менән тамғалаған биләмәһендә үҙен иркен тотто.Табыш ҡарауыллауҙа, эләктереп алып үлтереүҙә оҫтарҙы. Асыҡҡаны юҡ тиерлек.

Көндәр ныҡлы боҙолоуға тартылды. Һауала эсе лыҡа һыу менән тулышҡан ялбыр болоттар ялҡау ғына йөҙөп йөрөй. Йәнгә тейгес ваҡ ҡына һалҡын ямғырҙар һибәләп китә. Ундай саҡта Тып-Тып ҡарт ҡарағайҙарҙың ҡуйы энәле олоно аҫтына инеп йәшеренә, унда ҡоро.

Уйһыу ерҙәргә иртәнсәк ҡырау ултыра. Ағастар ерән кәпәстәрен ергә ташлай.Ҡырау һалҡыны көсәйгәндән көсәйә. Яланғас урман үтәләй эсе елдәр йүгерекләй. Йылғаларҙың өҫтөнә йоҡаҡ ҡына боҙ тартыла.

Урман араһынан йөрөү еңелерәк, үләндәр ҡырауҙан йығылышҡан, ағастар япраҡһыҙ. Ҡоштарҙың, йәнлектәрҙең һәр хәрәкәтен күҙәтеп була, Ты-Тып хәҙер үҙе лә йәшеренеп кенә һунар итә алмай.Өшөүен өшөмәй. Туны ҡуйы йөн менән ҡапланды.

Ҡай саҡта ул ике аяҡлылыр янындағы йылы ҡыуышын иҫенә төшөрә, әммә унда ҡайтҡыһы килмәй. Киреһенсә, биләмәһен йәнә лә киңәйтеү теләге бар.Арыраҡ ниндәй йәнлектәр бар икән һуң? Күп микән? Бигерәк тә теҙелешеп киткән тау армыттары тарта уны. Бер саҡ түҙмәне, шул яҡҡа ыңғайларға булды.

Тауға ул ашыҡмай ғына үрләне, әрәмәләрҙе тикшерә-тикшерә атланы. Ярты юл үткәс, таш козырек аҫтына инеп ял итеп алырға булды.

Уянып китһә, тышҡа ҡарарлыҡ та түгел, күҙ сағыла. Ер ап-аҡ юрған ябынған. Ҡояш нурҙары шул юрған өҫтөндә кинәнеп бейешә. Тайга ап-аҡ булып ҡуйырып киткән. Ҡар һарыған иң нәҙек ботаҡтар ҙа йыуан олон сүрәтенә ингән. Аҡ елән кейгән тәпәшәк шыршылар мөһабәт төҫкә ингән. Йомшаҡ ҡына йәш ҡарға Ты-Тып һоҡланып бер булды. Ҡышты ярата ул. Шулай булмай ни! Ҡар өҫтөндә ярылып ятҡан эҙҙәр һунар өсөн шундай уңайлы.

Ул ҡарҙы еҫкәп тә, тәпәйҙәренә услап та ҡараны. Ҡар эсенә башы менән сумып, яларға ла кереште. Шунан аунаҡларға тотондо. Бер арҡаһын ышҡып таҙартты, бер эсенә ятып таҙарынды. Ҡойоноп бөткәс, һелкенеп ҡарҙарҙан арынды, ә ҡарҙар, уның тирәләй ынйы кеүек ялтырашып,

юғарыға атылды. Таҙарынған йөндәре ялтырап тырпайышып китте. Хәҙер улар Тып-Тып һикергән һайын тулҡын-тулҡын тирбәлешә.

Ҡорҙар менән ҡуяндар йәйге кейемен алыштырып өлгөрмәгәндәр әле, шуға ла аҡ ҡар өҫтөндә ап-асыҡ булып күренеп тора. Был иһә һунарҙы бермә-бер еңелләштерә. Кедр тубырсыҡтары ла мул быйыл. Кедр сәпсектәре уларҙы өҙөп йыя ла ситкә алып китеп туҡлана. Ә шыйыҡ ҡына ағас ботаҡтары араһында сысҡандар йүгерешә. Тып-Тып уларҙың ҡар аҫтындағы эҙен еҫкәнеп юллай ҙа һис яңлышлыҡһыҙ эләктереп тә ала. Ваҡ-төйәк табыш, әлбиттә, тик ҡыш башында уларҙың иҫәбе-һаны юҡ. Бер осор Тып-Тып шулар менән генә туҡланып йөрөнө.

* * *

Госпромхоздың иң оҫта һунарсыларының береһе, Пуляның күршеһе илле ике йәшлек Карп Силыч һуҙған ауҙарын барлап сыҡты ла саңғыһында шыуа-шыуа урмандағы ҡышлағына ыңғайланы. Һыуыҡ ярайһы һиҙелерлек булһа ла кәйефе күтәренке. Шулай булмай ни, өс кеш эләккән бит. Икәүһе – арбауысҡа, береһе – ауға.

Өйөнә саҡлым бер саҡрым тирәһе ҡалғайны микән, күҙенә яҡындағы кедр ағасының башындағы һуйырҙың ҡарағайға һикергәне күренеп ҡалды. Һунарсының күҙе сос, ҡошто ул алыҫтан уҡ танып тора.

“Дағa бер һуйыр өсөн ун биш сел хаҡын түләй, быны файҙаланмау гонаһ булыр. Уң яҡтанырaҡ урап барып ағастар ышығынан төҙәгәндә, еңел генә атып алып булыр”,- тип уйланы Карп Силыч һәм әҙер саңғы юлынан ситкәрәк тайпылды.

Әтәсте сәпкә эләктерҙе лә атып ебәрҙе. Ҡыҙыл ҡашлы ҙур ҡош, ҡанаттарын елпей-елпей ағас башындағы ҡарҙарҙы туҙҙырып аҫҡа ҡолай башланы һәм ергә етер-етмәҫтән яңынан ҡанаттарын кирҙе һәм йәнәшәләге ҡарағайға барып ҡунаҡланы.

Һунарсы йәнә мылтығын төҙәп өлгөрҙө, ләкин яҙа атты. Кәйефе ҡырылды һәм ҡошто ҡыуалап китте. Әммә ҡар ҡаплағын эре таштар араһына килеп сыҡҡас, был тирәне саңғы менән үтеп булмаясағын аңланы. Саңғыларын сисеп ташлап, таштан-ташҡа һикергеләп артабан ҡыуаларға булды. Ә һуйыр ҡасыуын белде. Һунарсы ҡошто ла, үҙен дә әрләй-әрләй артынан ҡалмаҫҡа тырышты. Шул саҡ аяғы тайып китеп таш араһына барып ҡыҫылды. Һунарсы ҡыҙыулыҡ менән уны тартып алырға маташҡайны, ауртыныуҙан күҙ алды ҡараңғыланып китте.

“Һынған!” Һунарсының башынан шундай уй йүгерҙе.

“Бирешмәҫкә! Быңдай хәл була инде ул! Ҡышлаҡҡа алыҫ ҡалманы, нисек тә барып етермен, шина һалырға кәрәк, юҡһа ауыртыу хәрәкәт итергә бирмәҫ, һөйәк тә урынынан ҡуҙғалалыуы ихтимал”,- тип тынысландырырға тырышты үҙен.

Тешен ҡыҫып яҡындағы кедр ағасынан алты ботаҡ ҡырҡып алды, уларҙы ҡайырынан әрсеп унталарының эсенә тыҡты һәм тыштан ҡайыш менән уратып ҡуйҙы. Аяғын ҡыбырлатып ҡараны. Түҙерлек.

Ташлы урынға етәрәк ятып ҡалған саңғылары янына боролоп бараһы ғына ҡалды. Силыч ҡорһағына ятты һәм сәләмәт аяғы, ҡулдары менән этелә-этелә шыуышып китте. Таштар араһынан шыуыу еңел түгел шул. Йәтешерәк аралыҡтар эҙләй-эҙләй Силыч йүнәлешен үҙгәртә барҙы.Хәлдән тайғас, рюкзагын, мылтығын сисеп ырғытты. Шыуышыу еңелләште. Тигеҙгә сыҡҡас йылдамыраҡ шыуыша башланы. Саңғы юлына килеп еткәс, ергә ятып ял итте һәм үҙен рюкзагын ташлап киткән өсөн әрләргә тотондо. Ҡасан килеп ала ул уны хәҙер? Ул килгеләгәнсе затлы тиреләрҙе сысҡандар кимереп, өңдәрен йылытыр өсөн ташып алып ҡына ҡуйыр инде. Ә мылтығы? Мылтығы ла ябай түгел бит уның. Хәйер ябай ул, тик еңел, ҡапыл ата. Карп Силыч матурға ҡыҙмай, иң мөһиме уңайлы булһын . Мылтығының көбәген ул ялтыратҡансы таҙартып тота.

Һарҡыуға килеп етә алды. Тимәк, йылға яҡын, ә ҡышлау өйө йылға буйында. Һунарсы еңел һулап ҡуйҙы һәм һуҙылып ятып хәл йыйҙы, һуңғы ынтылышҡа әҙерләнде. Тын алышы тигеҙләнгәс һау аяғына тубыҡланды. Йылға өҫтөнә шәре сыҡҡан. Аҙна элек үк күтәрелгәйне лә, көндән-көн киңәйә бара. Иртәнсәк кенә лә ҡар ҡатыш һыу таҫмаһы был саҡлым уҡ түгел ине.

Был яҡ йылғалары өҫтөнә шәре күтәрелеү тәбиғи күренеш. Тау шишмәләре ғәҙәттә төбөнә саҡлым туңа һәм ер аҫты һыуҙары, эске баҫым арҡаһында, боҙ өҫтөнә күтәрелә һәм йоҡа ғына ҡатлам тора-бара ҡалынайғандан-ҡалыная. Ҡыш эсендә шәре ике метр, хатта унан да бейегерәк булып туңа.

Йылғаның арғы яғындағы яр буйлап һыу ағып ятыуы һунарсыны борсоуға һалды. Көслө шишмә йыртып килеп сыҡытымы икән?

“ Көнөн әйтер инем! Аяғы һыныу етмәгән, хәҙер шәреһе юлды быуып ята. Үрҙәрәк ҡорораҡ та, унда барып етергә кәрәк бит әле. Арыны.Ярар, ни булһа ла булыр, тәүәккәләргә кәрәк”,- тип уйланы Силыч. Уның тиҙерәк йылыға ингеһе килә ине. Ҡышлағы бынан күренеп тора ул, яр башында ғына.

Ярҙан саңғыһын сана итеп шыуып төштө. Йылға уртаһына ла еңел генә барып етте. Артабан алты метр тирәһе ҡар бутҡаһы йәйелеп ята.Ауыртыныуын еңә-еңә һыу аша имгәкләп китте. Ул һыуҙың ҡалын боҙҙо ашап соҡорҙар яһап өлгәрөүен белмәй ине әле. Боҙ кисә-кисә бер аҙыраҡ барғас, ҡулы терһәгенә тиклем һыу эсенә батып китте. Һул ҡулына көс төшөрмәксе булғайны, уныһы йәнә лә тәрәнгәрәк сумды. Кәүҙәһе тотош һыу эсенә инде. Осло боҙҙар ҡулын йырта башланы, тик уларҙан ҡан да сыҡмай, сөнки туңыр сиккә етеп иҫ тә белмәҫлек хәлгә килгән.

Тырмаша торғас, һунарсы ҡаты боҙға килеп сыҡты. Тәне өшөүҙән һәм көсөргәнештән дер ҡалтырай. Дүрт аяҡлап торған һунарсы өҫтөнән шыбырлап һыу аға. Ул унлап аҙым яһап маташты ла, ялға туҡтаны. Яҡындағы ғына өйөнә башын күтәреп күҙ ташланы. Хәҙер, тиҙҙән ул шунда барып инер, тимер мейесенә яғып ебәрер, тәнен тыштан йылытыр, эстән ҡайын бәшмәген ҡайнатып эсеп йылыныр. Тик уның күҙҙәре үҙенән-үҙе йомола башланы, һалҡын да көсәйә төштө.

Кемдер төрткөләгән кеүек булғандан уяныып китте. Атларға маташты, әммә ҡыбырлай ҙа алманы, аяҡ-ҡулдары боҙға ҡуша туңған, мускулдары ла буйһонмай. Ул күҙен яңы ғына йомған кеүек булғайны ла баһа, баҡһаң, ярты сәғәт йоҡлаған да ҡуйған. Күк йөҙөнә йондоҙҙар һибелешә башлаған.

Тотош тәне боҙ булып ҡатҡан һунарсы йән көсөнә ҡысҡырырға кереште, әммә тайгала уны ишетеүсе кеше юҡ ине шул...

Ун һигеҙенсе глава

## Ике аяҡлы сәйер йән эйәһе

Биләмәһендәге еҫ тамғаларын яңыртып сыҡҡан Тып-Тып ҡар ҡаплаған яланда ҡор өңдәрен тап итте. Һаҡ ҡына килде лә иң ситтәгеһенең өҫтөнә һикерҙе. Тик яңлышҡан икән, ҡор ятыуы икенсе баштараҡ булып сыҡты, ул һикергән ыңғайы ҡапыл ҡар фонтаны күтәрелде һәм ҡоштар фырылдашып һауаға осто. Ҡыуаҡ аҫтында ҡарайып күренгән төп, ағастыҡы булмаған икән, ҡуян булған, ҡорҙарҙың шау-шыуынан һиҫкәнгән ҡуяны ла һыпыртыу яғын ҡараны. Тып-Тыптың йылғыр ҡуянды ҡыуаларлыҡ та хәле юҡ ине. Асыҡҡан. Еңелерәк табыш эҙләргә тура килер.Шишмә яғынан ҡарғалар ҡарҡылдаған тауыш килә. Юҡҡа ҡарҡылдашмаҫ улар, бер-бер табышҡа юлыҡҡандарҙыр.

Шул тирәгә килһә, ҡарғалар алғы яҡ ярҙа тимер суҡыштары менән нимәлер суҡып маташа. Яр башындараҡ һунарсының өңө күренә. Ағас башында ултырған ҡарғалар ниҙер сөңкөлдәшә, урын бушағанды көтәләрҙерме, туйынып өлгөргәндәрмелер.

Ем суҡыусылар ҡурҡышмай ғына туйыныуын белә. Тып-Тып яҡынлашыу менән ризаһыҙ ғына осоп китергә мәжбүр булдылар. Яҡынраҡ килһә, ни күҙе менән күрһен, ике аяҡлы йән эйәһе дүрт аяҡлап боҙға ҡуша ҡатҡан. Осаһы һөйәгенә тиклем суҡылған. Яҡынраҡ килеп ҡараһа, кеше еҫе сыға. Ул бит уның хужаларына яҡын ғына йәшәй ине. Ул сирылып танауын борҙо. Кеше итен ашауҙан ҡурҡа ул.

Үргәрәк тартылды һәм өй янында яңы һалынған эҙҙәр юҡлығын тикшереп сыҡҡас, уның буш икәненә төшөндө. Соланында туналған кеш, тиҫтәләгән тейен түшкәләре эленеп тора.

“Ошонда йәшәргә кәрәк! Быndағы ит байтаҡка етәсәк!” ( Был ҡарары ниндәй хәлгә тарытырын алдан белһә, Тып-Тып был өйҙө әллә ҡайҙан урап үтер ине лә бит.)

Бер ултырыуҙа ике тейенде һоғоноп ҡуйғас, росомаха тышҡа сыҡты һәм ҡарға ятып аунап таҙарынды.

Бер аҙна буйы рәхәтләнде ул был өйҙә. Тамағы туҡ булды. Оҙағыраҡ та йәшәр ине, йылға яғынан саңғы табаны шығырлаған тауыш ишетелде. Артҡы аяғына баҫып күҙәткәйне, бер нәмә лә күренмәй.Кедр башына үрмәләне. Һуҡмаҡ буйлап ике аяҡлы килә ята. Тып-Тып кешенән ҡурҡмаҫҡа өйрәнгән ул, тик был килә ятыусы уның күңеленә шик һалды. Уҫалға оҡшаған. Ул ағас башынан шыуып төштө лә тау яғына һыпыртты.

* * *

Карп Силычтың Верхи ауылындағы дизель электр станцияһында моторист булып эшләгән улы Антон, атаһы Яңы йылға ла ауылға ҡайтмағас, алмашсыһы менән килеште лә ҡышлау өйөнә барып сығырға булды.Йылға өҫтөндәге шәүләне күреп, былай ҙа шөбһәләнгән йөрәге жыу итеп ҡалды.Туңып ҡатҡан да баһа ул!

Атаһының туң кәүҙәһен балта менән боҙҙо тунап ҡуптарып алғас, брезентҡа ураны һәм өй янында торған нартаға һалды. Ул арала ҡараңғылыҡ ҡуйырҙы. Ауыл яғына ҡайтырға сығыу ҡурҡыныс. Антон төнө буйы спирт эсеп, атаһын иҫләп иланы ла, иланы.Ойоп та киткеләй, йәнә уяна һәм йәнә спирт эсеп иларға керешә.Ни рәүешле тәжрибәле һунарсы ла ошондай хәлгә тарыһынсы әле!

Иртәнсәгенә Антон хәсрәтле йөк тейәлгән нартаға егелде һәм ауыл яғына ыңғайланы. Йәштән кипмәгән керпектәре аша тау һырты буйлап китеп барған ялбыр йыртҡысты шәйләп алды.”Росомаха! Мине күҙәтәме?” Антон мылтығын яйлабыраҡ элде лә ауылына табан юлын тиҙләтә төштө.

Йылы өйҙә Карп Силычтың мәйете ирене һәм ауылдаштары уның аяғын һындырыуына, өйөнә табан атлап түгел, имгәкләп килә ятыуына төшөндө. Һуңыраҡ ул һалған эҙ рюкзагы меән мылтығы янына алып килгәс, кешеләрҙең был уйы дөрөҫ булыуы асыҡланды. Хәлһеҙ һунарсыны росомаха кимергән тигән фекерҙә нығындылар. Ни өсөндөр мәйеттең тәнендә тырнаҡ әҙҙәренең юҡлығы, битенең шул көйө булыуына иғтибар итеүсе булманы.Ул йыртҡыстан булыр, бигерәк әшәке нәмәкәй, тип һөйләнде халыҡ. Икеләнеүселәр ҙә бар ине барлығын.

- Насар йыртҡыс, әлбиттә, - тип һөйләнде Макарыч.- Кешегә ташланғанын ишеткәнем булманы. Улмы икән?

- Һеҙҙе тыңлаһаң, росомаханан да арыу йәнлек юҡ,- тип екерҙе Антон. – Бүреләр ҙә кешенең дуҫы, тиерһең әле һин!

- Бүренең бында ни ҡыҫылышы? Росомаха көсөктәре Пуляла йәшәне, күрҙең бит, ни этлектәре тейҙе һуң?

Ун туғыҙынсы глава

**Үс алыу**

Росомаха кешегә ташланған һәм кимергән, тигән хәбәр аҙна эсендә ауылға ғына түгел тотош һунар биләмәләренә таралды. Кемдер ышанды, кемеһелер – юҡ. Ғаиләне йыл буйы туйындырырлыҡ табыш алырлыҡ сезон ваҡытында һунарсыларҙың уны аулауға ваҡыт әрәм иткеһе килмәй ине.Үс алыу теләге менән янған Антонға класташы Михаил ғына ярҙам итергә ризалашты.

Офоҡ артындағы ҡояштың арҡаһы ғына күтәрелеп килгәндә егеттәр урман һуҡмағына төшөп алғайны инде. Бер береһе, бер икенсеһе алдан төшөп юлды яңырта баралар. Һөйләшмәй генә барҙылар, өс саҡрым тирәһе ара үткәс кенә туҡтап, ауған ағас өҫтөнә ултырып ял итеп алырға булдылар.

Ҡайҙан эҙләргә һуң ул яуызды? Егеттәр ҡайын баштарынан ҡойолған ҡар шығырлауына ҡолаҡ һала-һала тауҙар яғына барырға ҡарар итте. Антон бит уны шул тирәлә шәйләгәйне лә. Тау башында йәнлектең иҫке эҙҙәрен тап иттеләр, йәнәшәләге шишмә яғындағы үҙәндә яңыраҡ һалынғандары ла бар.

- Туҡ, - тип әйтеп ҡуйҙы Антон.

- Ҡайҙан белдең?

- Атайым минең дә һунарсы булырымды теләгәйне. Январҙарҙың холоҡ-фиғеле хаҡында ла һөйләр булды. Ас йәнлек һәр ҡыуаҡ аҫтын тикшереп, еҫкәнә-еҫкәнә хәрәкәт итә, ти ине ул. Ә был бит туп-тура китеп барған.

Артабан юлларға ғына иткәйнеләр, алдарына мышы килеп сыҡты. Көтөлмәгән осрашыуҙан йәнлек баҙай биреп ҡалды һәм, аңына килә һалып, һыпыртыу яғын ҡарап боролоуы булды, ҡабырғаһына ике пуля килеп тә ҡаҙалды. Мышы шул көйө лә йөҙләп тирәһе метр йүгереүен дауам итте. Ҡалҡыулыҡ тирәһенә етәрәк көрт эсенә ауып китте.

Егеттәр түшкәне тураҡлап алды һәм мышы башын ҡарама ботағына элеп ҡуйҙы, тик элгән арала мөгөҙөнөң бер “көрәге” һынып төштө. Иттең бер өлөшөн нарталарға тейәнеләр, эс- ҡарынын, бер нисә бүтән өлөштәрен төрлөһөн төрлө ергә сәсеп тараттылар. Ризыҡ бар ергә килмәй ҡалмаҫ теге кеше ашаусы. Шунан йылға түбәненәрәк төшөп палаткаларын ҡорҙолар, бәләкәй мейестәренә ут яғып, мышы бауырын ҡыҙҙырып ашанылар, сәй һемерҙеләр.

Кискә табанырак йылы ғына кейенеп алдылар ҙа ит калдырып киткән ергә табан йүнәлделәр һәм росомахаға килерен карауыллай башланылар.Ағас башына урынлашып көтөп ултырҙылар.

Айҙың тулған вакыты. Мышы тиреһен дә, эс-карын яткан ерҙе лә яктырта. Сәғәт артынан сәғәт үтте.Төнгө һиллекте боҙоусы юк. Егеттәрҙе йоко баҫа башланы. Ойоған Антон капыл тертләп киткәндәй булды. Ағастар араһында кара күләгә хәрәкәт итә. Росомаха! Килгән бит!

Ысынында был бүреләр булып сыкты. Улар мышы тиреһен карҙан һөйрәлтеп һалған ит еҫе сыккан эҙҙән килә ята. Иң алда киң күкрәкле – баш бүре.

Ошо ук вакытта ит тирәһенә, тик икенсе яклап, росомаха ла якынлаша.Еҫтең көслө таралыуына карағанда, Тып-Тып һиҙә, ит күп булырға окшаған, ул һеләгәйен йота-йота атлай.Ә былары ниндәй күләгә һуң? Бәй! Бүреләр ҙә баһа! Алдан килгәнен ул таный. Юлбашсы.Тып-Тып йәшеренергә мәжбүр булды. Шул сак тимер шартлаған тауыш яңғрап китте. Йылғыр баш бүре тауыш килгән якка боролоп караны һәм тынып калды.

Уның ошо киәфәте росомахаға хәтеренә уйылды. Шартлау тауышы ишетелде. Бүре, көслө аяктарына аркаланып, ғәҙәтенсә, был тирәнән һыпыртмаксы булды, әммә тәне уға буйһонмай инде инде. Икенсе атыу тауышынан һуң ул кыбырлауҙан да туктаны.

Тып-Тып был тирәнән касыу яғын караны. Артынан атып калғандарын ишетте. Колағы янынан ғына ниҙер сыйлап үтте һәм алдындағы кайын ағасы шартлап китте. Росомаханы куркыу тойғоһо биләп алды. Байтак ара үткәс кенә ул үргәрәк менеп етте һәм ял итер өсөн һуҙылып ятты. Был тирәнән караһаң, бөтә тирә як ус төбөндәге кеүек, ә уның үҙенең янына килеп етерлек түгел. Тып-Тып шул тиклем тетрәнде: касандыр мәрхәмәт күрһәткән кешеләр бөгөн уға төбәп атты ла баһа!

* * *

Таң аткас тирә якты барлап сығырға булған йәш һунарсылар бүре мәйетенә тап булды. Табан эҙҙәренә карағанда, был тирәгә росомаха ла килгән булған, әммә оҙон-оҙон һикереп касып киткән. Уны эттәрһеҙ кыуалауҙан фәтеүә юк. Курккан януар бынан кире икеләтә-өсләтә һак буласак. Ауылға мул ғына ит тейәп кайтып ингән Антон үс алыу уйынан кайтманы. Аҙна үтеүгә ул Михаилды урманға эттәр менән кире барырға тәкдим итте.

- Ә һунар эттәрен кайҙан алабыҙ?- тип ғәжәпләнде Михаил.

- Николай Николаевич Пулянан алайык. Һаран кеше түгел, баш тартмаҫ...

* * *

- Коля ағай, йомошом бар ине, бер нисә көнгә эттәреңде биреп тора алмаҫһың микән?

-Ә нимәгә кәрәк улар һиңә?

- Теге росомаханы эттәрһеҙ алып булмаҫ ул.

Пуля егеткә йәлләберәк ҡарап торҙо.

- Ғәфү ит, Антон, бирә алмайым. Беренсенән, атайыңды росомаханың кимереүенә ышанмайым. Уйлап ҡара, өҫтөнә росомаха ташланған булһа, ул нисек дүрт аяҡлап баҫҡан килеш туңыр ине? Икенсенән, тәнендә теш эҙе лә, тырнаҡ эҙе лә юҡ. Мәйетен үҙем йыуҙым, тәне йәрәхәтләнмәгән. Осаһын ни, билдәле инде, ҡарғалар суҡыған булһа кәрәк. Әйҙә, улайһа, үс итеп урмандағы барса йәнлекте ҡырайыҡ та сығайыҡ! Йәнлекһеҙ урман – урман буламы? Үпкәләмә, эттәремде бирә алмайым. Росомаха уларҙың еҫ һиҙеү һәләтен боҙоуы ихтимал.

- Һеҙ ҙә инде, Коля ағай, урман һаҡсыһы берәү! Атайым һеҙҙе дуҫ күрә ине! – Егет үпкәләп боролдо ла сығыу яғына ыңғайланы.

Пуляға ҡыйын булып китте. “Теге росомха Тып-Тып булһа, Амурҙы йәберләмәҫ!”- тип уйлап алды.

- Антон, ҡыҙма әле һин! Амурҙы ал ана!

...Антон да, Михаил да һунарсылыҡта бик оҫта булмау сәбәпле, күрмәлекһеҙ генә, шыйыҡ һирәк һаҡаллы Лукъянды эйәртергә булды. Ул үҙенең биләмәһендә ике улын ҡалдырып, урмандан йәшереп кенә ике болан түшкәһе алып ҡайтып Дағаға тапшырҙы ла, өйөндә ял итеп ята ине.

Егеттәрҙең тәҡдименә Лукъян ризалашты, Антон, әгәр юлдары уңа ҡалһа, уға атаһының мылтығын вәғәҙә итте. Лукъяндың ике эте лә бар, дөрөҫ ҡартайып баралар инде.

Оҙаҡҡа һуҙманылар, иртәгәһенә үк юлға сығырға булдылыр.

Ҡарт һунарсы, тыңлаусылары булыуға шатланып, юл буйы ауыҙын да япманы, тиерлек.

- Төрлө йәнлек алдым мин ғүмерем эсендә. Ә бына росомаханы ала алғаным юҡ. Хәйләкәр бит, ҡәһәрең. Быйыл минең ауҙарға ике кеш, бер шәшке эләккән булған. Ә росомаханы кемдер етәкләп килтергәнме ни! Нәҡ ана шулар янына барып та сыҡҡан. Иллеләп ҡапҡан һалғанмын, исмаһам береһенә барып ҡапһа! Ашауын да ашамаған бит, тиреһен йыртҡыслап бөткән. Арыу иттегеҙ әле мине саҡырып, кәрәген бирәбеҙ беҙ уның хәҙер.

Егерменсе глава

**Уңыш**

Тайга, өҫтөнә ҡар юрғанын ябынып алған да серем итә. Тып-Тып һуңғы арала күҙен дә элгәне юҡ тиерлек. Ойоп китһә лә тиҙ генә уяна һала. Күңелендә тынғылыҡ юҡ. Урман донъяһында уның дошмандары бик күп түгел. Ә ул һәр ваҡыт һиҙгер, ҡолағын ҡарпайтып һәр тауышҡа ҡолаҡ һала.

Нимәлер ҡыштырлап ҡуйҙы. Тып-Тып башын ҡалҡыта һалып, леспромхоз ваҡытында уҡ туналған ҡырҡындыны байҡап алды. Йәш ағастар араһында йыбырлашҡан кешеләргә күҙе төштө. Улар шартлай торған таяҡтарын алға һуҙып йөрөп ята.Яндарында эттәре бар. Алдараҡ килгән икәүһен ул таныманы, арттараҡ килгәне Амур булһа кәрәк. Көсөргәнеше бер аҙ кәмегәндәй итте.

...Росомаханың эҙенә төшкән эттәр өрә-өрә алға ынтылды.Ҡыуаҡтар араһынан йүгерәләр. Амур еҫенән үк таныны, Тып-Тып ошо тирәлә булырға тейеш. Ул дуҫы менән осрашаһына өмөтләнеп ашыға төштө. Ул росомаханы эҙләп табып, өйҙәренә алып ҡайтырға хыяллана. Тик һунарсыларҙың уйы икенселә буғай, уларҙан уҫаллыҡ тойғоһо бәреп тора.

Эттәрҙең өрөүе Тып-Тыпҡа оҡшаманы. Улар ҡан көҫәгәнгә оҡшай. Кемде ҡыуалауҙары икән? Эт өрөүе яҡынайғандан яҡыная барҙы. Тып-Тып был ауыҙын киреп өрөүселәрҙең уның эҙҙәре буйлап килеүен төшөнөп алды.

Ысҡынырға кәрәк!

Һәм ул хата ебәрҙе.Ҡар ҡалын ятҡан ергә, тау түбәненә шыуып китәһе урынға, юғарыға үрләргә тотондо.Яланғас, ҡарҙарын ер осороп алып бөткән тау битендә ауыр һикерәңнәгән росомаханы эттәр ҡыуалап та етте. Үҙенә хыянат иткән дуҫына асыуы килеүҙән Тып-Тып киң олонло кедр ағасы яғына ташланды һәм, иблес кеүек итеп, тешен ыржайтты. Лукъяндың эттәре сигенә төштө һәм арыраҡ туҡтап һунарсыларҙы көтөргә ултырҙы. Дуҫы янына яҡыныраҡ барырға йөрьәт иткән Амур өҫтөнә сәсрәгән әсе сәпреккә ҡойондо һәм ҡарға аунап китте.Тып-Тып шунан файҙаланып ағас башына үрмәләй һалды. Йәһәтләп килеп еткән һунарсылар уны ҡараштары менән эҙләгән арала, ул ағастың икенсе яғынан шыуып төштө һәм башы менән ҡарға сумып, түбәнгә тәгәрәне. Лукъяндың эттәре һиҙеп ҡалып артынан ҡыуалай төшкәйне лә тәрән ҡарға батып, туҡтап ҡалдылар.

Тып-Тыптың артынан әллә нисә мылтыҡтан атып ҡалыуҙары ишетелде. Пуляларҙың береһе яп-яҡын ғына зыйлап үтте. Йыртҡыс ҡабырғаһына ятыбыраҡ һәм бөкөрәңләберәк һикереүен дауам итте. Көрттәре тәрәнерәк урндарҙан хәрәкәт итергә тырышты. Шишмә башына барып етеү менән йәнә тауға үрмәләне һәм ваҡ таштар өйөлгән ергә йәшеренде. Тып-Тып ваҡиғаның мәғәнәһен аңламай ине. Уны нишләп үлтерергә итәләр икән һуң?

* * *

- Был ҡалын ҡар буйлап барып, росомаханы эләктереп булмаясаҡ, - тине Лукъян. – Уға ҡар өҫтөнән барыу ҡыйын түгел, тәпәйҙәре яҫы. Ярар, ҡайғырма, Антон. Иртәгә берәр юлын табырбыҙ, - тип Антонды тынысландырырға ашыҡты.

- Тыныслан-тынысланма, Амур өсөн миңә Пулянан да эләгәсәк әле, - тип мығырланы Антон.

Ел йүнәлешен үҙгәртеп ебәрҙе һәм ярайһы ныҡ һыуыта башланы. Тын алғанда күтәрелгән пар бүрек, курткаларға ултырып, боҙлана , эттәрҙең йөнө лә ҡырауланды. Антон менән Михаилдың танауҙары ағарҙы.

Ҡыштың көнө ҡыҫҡа. Эңере бигерәк тә. Өшөгән һунарсылар ҡуныу сараһын эҙләргә булды. Яр буйындағы тау ”кеҫәһендә” туҡталырға ҡарар иттеләр.

-- Шабаш, егеттәр! Сәй эсеп алырға ваҡыт. Ҡар сәйе тәмһеҙ була, һыу алып килегеҙ, мин усаҡ тергеҙәм, - тип егеттәргә эш ҡушты Лукъян.

Сәтләүек таяғын ҡырын ҡаҙап ҡуйҙы ла усаҡ өҫтөнә шишмә һыуы һалынған котелок элде. Шунан йығылып ятҡан ағастағы ҡарҙы һыпырып төшөрөп, бейәләй түшәп, өҫтөнә ултырҙы.

Антон муҡсаһынан икмәк, сало, һуған сығарҙы. Уларҙы эре-эре итеп телгеләне һәм аҡ таҫтамал өҫтөнә теҙеп ҡуйҙы. Демъян иһә араҡы сығарып ултыртты.

Михаил уға аптырабыраҡ ҡарап ҡуйҙы.

- Даға йәшереп кенә биргеләй. Бөгөн миңә илле өс йәш тулып китте, шуны билдәләп ҡуяйыҡ.

Лукъян көрөшкәләргә араҡы ҡойоп сыҡты. Күтәреп ҡуйҙылар ҙа ашарға тотондолар.Лукъян туңдырылған болан итен сығарып, телеп һалды. Йәнә күтәреп ҡуйҙылар.

- Болан итенән етешегеҙ. Сей иттән дә яҡшыраҡ ризыҡ юҡ, әҙләп кенә ҡапһаң да көс-көүәт өҫтәй.

Йәнә берәрҙе һелтәп ҡуйғас, Лукъяндың теле асылды.

- Тайганан ҡайтып ятыуымдың сбәбе бар ул. Һуңғы осор түшкәләрҙе тунай алмай башланым. Ике-өс йәнлекте күтәреп ҡайтып инәм ҡышлаҡҡа, шатланырға кәрәк бит инде, аҡсаһы ла арыу, тунарға кәрәклек иҫемә төшһә, эсем боша ла китә. Ҡул күтәрелмәй.

- Лукъян ағай, ни сәбәптән иҫеңә төшөрҙөң быларҙы?

- Ә ярар, былай ғына. Күтәрәйек әле!

Икенсе шешәне лә бушатып ҡуйҙылар ҙа, ашығыс-бошоғос палатка ҡороп, йоҡо ҡапсығы эсенә инеп яттылар.Иртәнсәк баш төҙәтеп алдылар, көнө буйы сәй эсеү, йоҡо һимертеү менән булдылар.

- Егеттәр, - тине Лукъян сираттағы шешәнән көрөшкәләргә шыйыҡса ҡоя-ҡоя.- Ә бит росомаха ҡайһылыр яғы менән беҙ, һунарсылырға оҡшаған.Ул да тайганы бер остан икенсеһенә тиклем ҡыҙырып йөрөй. Берәр йәнлекте эҙәрлекләй башлаһа, арытып әлһерәтмәйенсә туҡтамай. Биләмәһе лә беҙҙекенән ҡайтыш түгел. Тик ул эңер төшкәс кенә һунарға сыға, ә беҙ таң атыу менән.

- Шулай, -тип мығырланы Антон. – Йөрөргә йыбанмай.

- Мин, Антоша, ул этлекле йыртҡысты өнәмәйем, әммә,дөрөҫөн генә әйткәндә, атайыңдың башына етеүенә ышанмайым. Мәйете янына барып китеүе ихтимал. Ә бына кешегә ташланмаҫ ул, хатта яраланған булһа ла.

- Әллә һөйләшеп ҡуйған былар, - тип ҡыҙып китте Антон. – Башта Пуля башты ҡатырҙы. Хәҙер быныһы. Ә мине аңларға ла теләүсе юҡ.

- Ҡыҙма, улым, тыныслан. Атайыңды юғалтыу ҡайғыһынан шулай уйлайһыңдыр. Улайға китһә, кеше тирәһендә эҙ ҡалдрған ҡуяндан да шикләнергә мөмкин.

-- Мин ханттарҙың росомахаға хөрмәт менән ҡарауы хаҡында ишеткәйнем. Улар уны ҡар кешеһе тип таный икән, - тип һүҙгә ҡушылды Михаил.

- Етте! Һүҙҙе тамамлайбыҙ! Ярҙам иткегеҙ килмәһә, кәрәкмәй! Һеҙҙән башҡа ла эҙенә төшөрмөн әле!- Антон шулай тиһә лә һөйләгәндәрҙе тыңлап, хаҡлы булыуында икеләнә башлағайны инде.

- Асыуланма! – Лукъян Антондың арҡаһынан ҡағып ҡуйҙы.- Йоҡлап алайыҡ!

Төнөн өрпәк кенә ҡар яуып үтте. Иртәнсәк тә әле тәпәшәк кенә болоттарҙан елбәҙәк ҡар һибеләй ине. Быңдай көндө эҙҙәр ярылып ята инде ул. Ун саҡрым тирәһе юл йөрөп, көн төшлөктән ауышҡас, яңы ғына һалынған эҙҙәрҙе тап иттеләр.

Тып-Тып был яланда төнө буйы ҡуян ҡыуалап йөрөп байтаҡ ҡына эҙ һалғайны.

- Росомаха эҙҙәре күп, бер үҙе генә түгелме икән әллә?- тип һөйләнде Михаил.

- Бер үҙе булған, - тип аңлатты Лукъян. –Росомаха бер һалған эҙенән йөрөмәй, яңы ерҙән йөрөй.

Һунарсылар тегеләй барып ҡараны, былай, януарҙың был яландан ҡайһы яҡҡа сығып киткәнен белә алманылар. Ҡараңғы төшә башланы. Йәнә төнгөлөккә ҡуныр урын рәтләргә тура килде.

Таңға табан яуын көсәйеп китте.Яҡтылыҡ кәмене, эҙҙәр юғалды. Палатка ишегенән башын тығып ҡараған ҡарт һунарсы һаҡалын һыйпап ҡуйҙы:

- Көндөң рәте юҡ. Нишләйбеҙ, егеттәр?

- Бәлки ҡайтып китербеҙ?- тип ҡуйҙы Михаил.

- Унығын Антон Карпыч хәл итә инде.

Тайга ҡыҙырып өйрәнмәгән Антон үҙе лә килеп тыуған хәлдән нисек сығыу юлы тураһында уйлана ине. Еүеш палатала йәнә бер төн уҙғарырлыҡ көсө ҡалмағайны тиерлек.

- Росомаханы ныҡ ҡына ҡурҡыттыҡ, хәҙер ул кешеләрҙе урап үтәсәк. Йыйынайыҡ.

- Дөрөҫ уйлайһың!- тип ҡеүәтләне уны Лукъян. Шатлығы йөҙөнә сыҡҡан Мхаилға ҡарап йылмайып ҡуйҙы.

Егерме беренсе глава

**Һунар**

Дағы бына нисә йылдар инде айҙың бишендә һәм егермеһендә Верхи ауылына килеп йөрөй. Бөгөн шундай көндәрҙең береһе. Почтаны, пенсияларҙы, кешеләрҙән алған заказдарҙы таратты ла таныштарында ҡунырға ҡалып торманы, үҙенең һунар биләмәһенә китте.

Килешләй инеп сыҡҡайны. Һалып киткән ҡапҡандарын, арбауыстарын барланы, яңыларын ҡорҙо. Ике кеш ҡапҡан. Асылда ул сезон башланғаны бирле биш кеш алғайны инде. Әле ул биләмәһенә ҡар яуыу сәбәпле барып етергә ҡарар итте. Ҡапҡандарҙы ҡар ҡаплағандыр.

Яй ғына барҙы. Юл көртлө. Барлығын ике яҡлап үҫеп ултырған ағастар арҡаһында ғына тоҫмаллап була.

Машинаһының баранкаһын бора-бора уйланып барҙы: үткән тәүлек эсендә берәр йәнлек ҡаптымы икән, юҡмы? Улай тиһәң, штаттағы һунарсылар быңдай көндө кеш тә, һары шәшке лә эләкмәй ул тигәне бар.

Шишмә янындағы ҡышлау өйөнә саҡлым үҙе рәтләп һалған һуҡмаҡҡа килеп еткәс, ул машинаһынан төшөп, майланған саңғыларын кейеп рюкзагын артмаҡлап алды һәм киң аҙымдар менән атлап китте. Бара биргәс ике һикрерәңләгән нөктәгә иғтибар итте. Кедрҙың ҡыҙғылт-һоро фонында уларҙың ҡуян икәнлеге асыҡ төҫмөрләнде. Уларҙы росомаха ҡыуалап бара.

Ҡуян ҡыуалаусы Тып-Тып ине. Кеше килгәнен күреп ҡалыу менән ул көтөлмәгәнлектән сүгәләй төштө һәм йомарлана биреп, һикерә-һикерә кире яҡҡа табан һыпыртты.Атыу тауышы яңғраны. Башы әрнеп ауырта башланы. Күҙенә ҡан һарҡып төштө. Уны йыуыр өсөн Тып-Тып башын ҡар эсенә тығып сайҡанды. Байтаҡ ара үткәс кенә ял итергә туҡтаны.Ауып ятҡан һәм ҡар ҡаплап киткән ағасҡа алғы тәпәйҙәре менән терәлеп тауыштарға ҡолаҡ һалды. Һил. Ул-был һиҙелмәй. Шунан ғына йомшаҡ ҡарҙы соҡоп, эсенә инеп ятты.

Һуңғы арала булып үткән ваҡиғаларҙан Тып-Тып кешеләрҙең уны үлтерергә яҫҡыныуына төшөндө. Ул үҙен яралаған түңәрәк битле кешенең йөҙөн хәтеренә һалып ҡуйҙы.

Ике аҙна самаһы ваҡыт үткәс Тып-Тып Түңәрәк йөҙлөнө үҙенең биләмәһендә йәнә осратты һәм уның бында ни эшләп йөрөгәнен күҙәтә башланы. Көнө буйы артынан йөрөп сыҡты. Теге ике аяҡлы ышыҡ ҡыуыштарға ит йәшерә һәм янына ниндәйҙер тимер урынлаштыра. Ҡараңғы төшкәс, ул ағас өңөнә инеп китте һәм иртәнсәк ҙур гөрөлдәп торған һәм төтөн сығарған ҡурҡыныс нәмәгә ултырып китеп барҙы.

Тып-Тып быға ҡыуанды. Һунары уңыуын уңмай, ә Түңәрәк йөҙлөнөң йәшерен урындарында ит етерлек. Шуның менән туҡланырға мөмкин буласаҡ.Ике аяҡлы ит янына ниндәйҙер тимерҙәр ҡуя ине, улары хәүефле булыуы ихтимал.

Ит һалынған урындарҙың береһе янына барып еткәс, Тып-Тып ҡарҙы ентекле еҫкәп торҙо. Ит,ыҫмала еҫе бар, тимер еҫе һиҙелмәй. Ул тынысланып ит тирәһенә табан ыңғайланы, тимәк, Түңәрәк йөҙлө был тирәгә тимер ҡалдырмаған. Уның иткә яҡынлауы булды, ҡар тулҡынып китте лә росмаханың алғы аяғын нығ ауырттырып, ниҙер ҡыҫып алды. Ул артҡа ташланмаҡсы иткәйне, тик ыржайған тимер теш уны ысҡындырырға йыйынманы. Тып-Тып аяғын бар көсөнә һурып алырға маташты һәм тиреһен һыҙырып булһа ла тәпәйен тартып сығарыуға өлгәште.

Ярай әле, ҡапҡандың ваҡ йәнлек аулай торғаны булып сыҡты. Алдараҡ йәшерелгән ит тирәһенә барған булһа, былай ҡотола алмай ине. Росомаханың тимер еҫен шәйләмәүенең үҙ ғилләһе бар ине шул. Даға, оҫта һунарсыларҙың кәңәше менән,тайгала ҡапҡандар һалыр алдынан уларҙы иретелгән ыҫмалаға манып сыҡҡайны. Шулай эшләһәң, ҡапҡандың тимер еҫе юғала.

Был ваҡиға Тып-Тыпты бик тетрәндерҙе. Ул Түңәрәк йөҙлөнөң арбауыстарын ары урап үтер булды. Ә был кешегә ҡарата булған мөнәсәбәте күрә алмаҫлыҡ дрәжәгә етте.

Егерме икенсе глава

**Юл ваҡиғаһы**

Һунар сезоны тамамланыуға яҡынлашты.Һунарсылар берәм-берәм өйҙәренә ҡайтыша башланы. Кемеһенеңдер табышы мул, кемеһенекелер ҡайтышыраҡ. Дөйөм алғанда, госпромхоздың планы үтәлгәйне. Дүрт ай буйы туплаған тиреләрен һунарсылар охотоведҡа тапшырҙылар һәм ҡулдарына бер аҙ аҡса алып, ҡыш буйы йыйылып киткән йорт эштәренә сумдылар. Ә Степан Ермилович өсөн иң ҡыҙыу эш башланды.Ул тиреләрҙе төҫө, сорты буйынса барларға тейеш. Шул рәүешле сортлап сыҡҡас, тиреләрҙең төрлөһөн төрлө тоҡтарға тултырып “Урал” мотоциклының коляскаһына тейәне һәм ҡала базаһына алып китте.

Юл насар. Ҡар һыуҙары йыуып соҡорлап бөткән. Степанға ҡайһы бер урындарҙы мотоциклынан төшөп, тәгәрмәс аҫтына ҡоро сытыр түшәп кенә үтергә тура килгеләне. Ҡалаға кисләтеп кенә килеп инә алды. Бергә уҡыған иптәшенә ҡунырға төштө һәм шишәмбенән кесаҙнаға тиклем тиреләрен тапшырыу мәшәҡәте менән булашты. Бәхәсләшә-бәхәсләшә ғәҙел хаҡ талап итте, тапшырыу акттарына ҡул ҡуйҙы, тауары өсөн хаҡ түләнеү графигын асыҡланы.Тире аукционы булып үткәс тә иҫәпләшергә килештеләр.

Йома көндө көнө буйы Өлкә һунар идаралығының кабинеттары буйлап йүгерекләне.Ҡышҡы-йәйге йәнлек иҫәбен алып барыу өсөн бланктар, көндәлек күҙәтеүҙәр журналы һәм, иң мөһиме, өс айлыҡ эш хаҡын алды. Мотоциклының арбаһына ҡала тәм-томон һатып алып тейәне, тиҙҙән ҡыҙының тыуған көнө бит. Эштәрен тамамлап, шатлана-шатлана Верхиға табан юлға сыҡты.

Степан тиҙлек ярата. Тик ундай мөмкинлек ҡаланан сығып күпергә барып еткәнсегә тиклемге аралыҡтан артмай. Ана шул уҡ кеүек тигеҙ юлдың яҡ-яғына ағастар теҙелешкән. Степан ул юлды газға баҫып елдереп үтергә булды.

Бына һиңә кәрәкһә! Юл аша быҙауын эйәрткән инә болан үтеп бара. Степан, уларға барып бәрлекмәҫ өсөн, рулен ҡырт ҡына һулға тартырға мәжбүр булды һәм коляскһына йөк тейәлгән “Урал” юлдың ситендәге ярға табан тәгәрләне һәм тәкмәсләй-тәкмәсләй һыуға төшөп китте. Ярай әле, Степан үҙе сос, һикереп төшөп ҡалып өлгөрҙө. Аяғына баҫты һәм яр башына табан үрмәләне.

Шәп ағым “тимер атты” ҡосағына ала һалды һәм таштарға бәрлектерә-һуғылдыра алға, үҙ юлы менән алып китте. Ҡумталар, ҡағыҙлы пакеттар йылғала мотоциклдан да шәберәк йөҙә. Степандың төҫө ағарып китте: аҡсалы сумкаһы ла шунда бит!

Ул ҡыуаҡтарға тотона-тотона йәнә түбәнгә табан шыуып төштө. Шул саҡ “Урал”лды көслө тулҡын өҫтәлгә оҡшағаныраҡ таш өҫтөнә килтереп һуҡты һәм мотоцикл, төпкөл таштарға төкәлгән карап һымаҡ ултырып ҡалды.

Степан яр буйлап ағым ыңғайна йүгерә башланы һәм ағып барған ҡумталарҙы ҡыуып етеп, тиҙ генә сисендe лә һыуға ташланды, ҡулына эләккән береһен ярға ташлап барҙы. Йәнә биш минут самаһы һыуға текләп торһа ла аҡса һалынған сумкаһы күҙенә ташланманы. Ағын ни бары

бер батон колбасаны ғына ташҡа килтереп терәтте.

“Сумка ауыр, әллә ҡайҙа китә алмағандыр, ҡайышынан берәр яр тамырына эләкмәнеме икән?”- тип өмөтләнде Степан һәм һәр сантиметр ерҙе ҡарашы менән ҡапшап, ағым үренә табан ыңғайланы. Бер нисә консерва килеп осраны, ә сумка күренмәне.

“Коляска эсендә ятмаймы икән?”

Уға ун ике йыл хеҙмәт иткән, әле килеп тулҡын ҡағыуҙан ҡалтырап ултырған мотоцикл коляскаһының алъпҡысы йыртылған. Ултырғысы ла ҡайырылған. Степан коляска эсен ҡат-ҡат һәрмәп сыҡты. Әйтерһең, ярайһы ҙур сумка берәр ерҙә боҫоп ята була!

“Бәлки сумка мотоцикл тәкмәсләп киткән ерҙә төшөп ҡалғандыр?” – тип уйланы Степан. Йәнә яр буйлап үргә табан атлап китте.Мотоцикл һыуға барып төшкән урындағы һыу төбөндә инструменттар йәшниге генә ята. Уны ярға сығарғас, Степан ҡырсынлы ағым тирәһенә юлланды. Юҡ! Ҡырсын өҫтөндә ебеп бөткән зефир ҡумтаһы ғына ята.

Степан яр буйын йәнә бер тегеләй, бер былай ҡат-ҡат йөрөп сыҡты. Һөҙөмтә булманы. Һалҡын һыу кисеп өшөгән аяғы һыҙлап алып китте. Яр буйынан кипкән үлән йолҡоп алып, өҫтөнә ҡоро ағастар ташланы һәм, ут ҡабыҙыр өсөн түш кеҫәһендәге зажигалкаһын һәрмәп ҡараһа, ҡулы үҙенең эш хаҡына барып төртөлдө. Ярай әле, исмаһам,былары тороп ҡалған!

Тиҙҙән усаҡ дөрләп янып китте. Степан уның тирә яғына таяҡтар сәнсеп сыҡты һәм еүеш итеген, ыштандарын элеп ҡуйҙы. Ярға ташлаған әйберҙәрен йыйып алды. Уларын йыйыштырғанда ла ике күҙе йылға өҫтөндә булды: килеп күренмәҫме шул сумка?

Йылынып алғас йәнә һыу эсенә инеп китте. Әммә байып барған ҡояш нурҙары йылға төбөн яҡтыртмай ине инде. Эҙләнеүҙе иртәгә ҡалдырырға тура киләсәге асыҡланды. Хәҙергә мотоциклды ҡарарға кәрәк, рәтләрлек түгелме икән?

Мотоциклы Степандың кәйефен йәнә лә нығыраҡ төшөрөп ебәрҙе. Тәгәрмәс энәләре һурылып төшөп бөткән тиерлек. Тутыҡҡан рамкаһы ике ерҙән өҙөлгән, руле кәкерәйгән, ә ҡабырға яғы, ауыр сүкеш менән туҡмалған кеүек, йәмшәйеп сыҡҡан.

“Запчастҡә лә ярарлыҡ түгел, - тип ыуаланды Степан. – “Уралы”- “Урал”, ә һунарсыларға аҡсаны ҡайҙан табып түләргә? Аҙ аҡса түгел бит... Бурысҡа алып торорғамы? Ә кемдән алырға? Юҡ, иртәгә иртәнсәк йәнә

эҙләп ҡарарға кәрәк. Энә түгел дә инде... Ә тапмаһа? Етмәһә, иртәнән һуңға Марусяның тыуған көнө...”

Степан яр буйлап ары-бире йөрөргә тотондо. Бөтөн туған-тыумасаһын, таныштарын барлап сыҡты, аҡса алып торорлоҡ кеше юҡ. Дағаға ғына мөрәжәғәт итмәгәндә... Уның кешеләргә процент иҫәбенә аҡса биргеләп торғанын ишеткәне бар. Тик Степанға бик ҙур сумма кәрәк бит әле. Бирерме икән?

Степан кипкән кейемен кейеп алды. Ҡайҙа төн сығырға һуң? Ҡала ун өс тирәһе саҡрым артта ҡалды. Шәп кенә атлағанда ла ике сәғәтлек юл. Юлайҡан машина осраһа ярар ине лә. Осрамаҫ та әле. Күпме ваҡыт эсендә бер-икәүһенең генә геүелдәп үткәне ишетелде.

Тегеләй уйланы, былай уйланы Степан һәм, шулай ҙа, ҡалаға китергә ҡарар итте. Начальствоға хәлде белдерергә кәрәк бит. Һыуҙан тотоп алған әйберҙәрен ҡыуаҡ аҫтына йәшерҙе лә юл өҫтөнә сыҡты.

* * *

Һунар идаралығы начальнигы Степандың аварияға осрауы, бланктарҙың һыуға төшөүе хаҡындағы хәбәрен нишләптер тыныс ҡына тыңлап ултырҙы.

- Бәлә-ҡазанан берәүҙә азат түгел. Ярай ҙа үҙең иҫән ҡалғанһың.Бланктар ҙа проблема түгел. Беҙ уларҙы типографияла өс йылға етерлек итеп баҫтырып алғайныҡ. Мотоциклыңды ла списать итергә ваҡыт, ике срок тиерлек хеҙмәт итте. Аңлатма яҙ, ҡалғанын үҙем хәл итермен. ГАИ начальнигы үҙ кеше, иҫәптән төшөрөү ҡыйын булмаҫ.Әлегә алмашҡа бирерлек мотоцикл ғына юҡ.

Степан үҙ ҡолағына үҙе ышанмай торҙо. Ике мәсьәлә, былай булғас, еңел хәл ителде. Ә иртәгәһенә аҡсаһын табырына ул ышана ине. Дағаға ла мөрәжәғәт итеп тормаҫ. Шайтанды иҫеңә төшөрһәң, яныңа килә тигәндәй, уны машина тауышы ҡыуып етте. Дағаның ГАЗ-66 машинаһы икән.

Семен Львович машинаһын туҡтатты.

- Һаумыһығыҙ, Семен Ермилович! Ниндәй елдәр ташланы?

- Тиреләрҙе тапшырҙым.

- Төҫөгөҙ ҡасҡан. Ауырып киттегеҙме әллә?

- Ауырымайым да ул...Кисә мотоциклды ваттым. Яр башынан һыуға ҡоланы. Запчастлек нәмәһә юҡмы икән тип, ҡарарға китеп барам.

- Күңелһеҙ хәл. Алыҫ барырғамы?

- Күпергә борола торған ергә.

- Илтеп ҡуям, ултырығыҙ!

Төн эсендә һыу күтәрелә төшкән. Бурьяҡланған. Юғарыраҡ ерендә яуын булып үткәнгә оҡшай. Быңдай бурьяҡта эҙләнеүҙең файҙаһы юҡ. Бер генә юл ҡалды: Дағанан аҡса һорарға кәрәк. Степан уратып-суратып торманы, бәләгә тарыуы ваҡиғаһын теҙеп һалды.

Кәрәкле сумманы әйтеүе булды, экспедитор һыҙғырып ҡуйҙы. Асылда ул ҡыуана ине, тик тыштан белдермәҫкә тырышты. Шатлығының сәбәбе ябай. Күптән инде Степандың этенә күҙе ҡыҙып йөрөй ине коммерсанттың. Мавр бигерәк шәп шул. Бер генә күргәҙмәнән дә миҙалһыҙ ҡайтҡаны юҡ. Степанға уны теге ҡалала ҡунып сыҡҡан группалашы бүләк иткәйне. Дуҫының атаһы илгә билдәле кинолог, ғүмере буйы көнбайыш себер лайкаларын селекциялау менән булашты.

Дағa Степан Ермиловичтың этен бер ваҡытта ла һатмаҫын аңлай ине, ә бына хәҙер бик уңайлы килеп сыҡты бит әле. Хәҙер эште яйлап ҡына үҙ файҙаңа төкәтеп ҡуяһы ғына ҡалды. Коммерсант эшлекле һөйләшеүҙәр алып барыуҙың рәтен-сиратын яҡшы белә ул.

- Ныҡ ҡына терәлгәнһеҙ икән көрсөккә, Степан Ермилович, - тип уфтанды Дағa. – Һеҙ, моғайын, Семен аҡсаны көрәкләп таба тип уйлайһығыҙҙыр әле. Ә мин Верхиға ҡайһы саҡта бер файҙаһыҙға барып ҡайтам. Ә күпме бензин китә! Етмәһә, унының ла квартал һайын ҡиммәтләнеп тора. Мин тире хаҡтарын төшөргәнем юҡ. Ә машина! Юлһыҙ ерҙән йөрөп нисек таралып төшмәй әле ул. Һиңә һөйләп тораһы түгел, үҙең юл йөрөгән кеше. Двигателде алмаштыраһы бар, етерлек сумма туплай алған юҡ. Йә резина пеләшләнә,йә радиатор аға, йә аккумулятор эшлектән сыға. Контора ремонт өсөн аҡса түләмәй. Һин хозрасчетта, тип кенә ҡуя.

- Семен Львович, уларын аңлайым да ул, минең аҡса алып торорлоҡ бүтән кешем юҡ. Ярҙам ит! Бар өмөт һиндә.Мин бер, уҙа китһә ике йыл эсендә процентары менән ҡайтарырмын.

Дағa бер аҙ өндәшмәйерәк торҙо ла атакаға күсте:

- Ермилыч, беләһең бит, һунар мәсьәләһендә мин яңы кеше. Биләмәм дә ярты яҡта. Бер үҙем шөрләйем. Иптәшкә арыу ғына эт кәрәк ине. Бына берәр йылға Маврыңды биреп торһаң, мин дә һинең йомошоңдо үтәргә тырышыр инем.

Степан башын аҫҡа эйҙе. Һаҡал баҫҡан йөҙөн ҡулы менән һыпырып ҡуйҙы.Эте бигерәк ғәзиз бит әле үҙенә.Ул уны шул тиклем ярата. Эте лә уға тоғролоҡ күрһәтеп кенә тора. Уны нисәмәрәт бәләнән ҡотҡарып алып ҡалғаны бар. Хәл юҡ, Дағаның шарттарына күнмәй сара ла юҡ.”Бер йылға ғына, тине бит, кире ҡайтарыр,”- тип күндерергә тырышты үҙен.

- Семен Львович, эт бит мылтыҡ та, машина ла түгел. Эт бик үҙенсәлекле йән эйәһе. Ул хужаһына эҫенә. Һиңә эйәләшерме икән һуң?

- Унының өсөн борсолма! Мин Маврҙың шәп икәнен яҡшы беләм. Уның менән берәр нисек килешербеҙ.

Степан йәнә уйға ҡалды.Һәр яҡлап үлсәп ҡараны. Аҡса һорап торорлоҡ бүтән кеше юҡ. Өндәшмәйерәк торғандан һуң ризалашты:

- Һинеңсә булһын. Тик тейешле сумманы ҡасанырак бирерһең икән?

- Бер аҙырағы үҙемдә бар. Ҡалғанын дуҫымдан алып торормон. Уға барып әйләнәйек тә Верхиға китербеҙ.

Егерме өсөнсө глава

**Хыянат. Ҡасыу**

Автолавка Степандарҙың өйө тапҡырына килеп туҡтап, унан Дағa килеп төшкәс, Маврҙың эсе ҡайышып киткән кеүек булды. Эт бәлә килерен һиҙенде. Ялтас башлы, йөҙөнән йылмайыу китмәгән, иҫке күк халат кейгән һәм тәмһеҙ одеколон еҫе сығарған был кешене Мавр электән дә өнәп бөтмәй ине. Йүгерек күҙҙәренән һалҡынлыҡ бәреп торған кеүек. Маврҙы хужаһының ҡиәфәте лә борсоуға һалды. Бөкөрәйә биреп киткән, йөҙө лә элекке кеүек ышаныслы түгел.”Ни булды? Ярҙам кәрәкмәйме?”- тигән һымаҡ ҡойроғон болғап һырпаланып маташты уға Мавр.

Степан күҙен йәшереп өйгә инә һалып китеү яғын ҡараны. Ҡыҙыл папка тотоп килеп сыҡты. Мавр папканы таный, күргәҙмәләргә шуны алып бара торғайнылыр.

“Ҡурҡыныс юҡ, тимәк, берәр ергә барабыҙҙыр”,-тип уйланы эт.

Хужаһы папканы Ялтас башҡа тотторҙо һәм улар гөрләп сәскә атып ултырған сирен ҡыуағы янындағы өҫтәл артына барып ултырҙы. Башта нимәлер яҙҙылар, шунан оҙаҡ итеп төҫлө ҡағыҙҙарҙы һананылар. Ялтас баш был ҡағыҙҙар өсөн, моғайын, бик күп тәмле нәмәләр бирер, Маврға тәмле генә борсаҡтар әләгер.

Мавр түҙемһеҙлек менән күстәнәс көтә башланы. Ҡағыҙҙары күп ине, күстәнәс тә мул булырға тейеш. Әммә хужа ҡағыҙҙарҙы өйгә алып инеп китте. Кире сыҡҡас, Маврҙы ҡосаҡлап алды, муйынынан, арҡаһынан һыпырҙы. Танауынан үпте.

- Маврик, ғәфү ит, бүтәнсә юл юҡ, - тип шыбырланы ҡолағына.Шунан аяғүрә баҫты ла этен өҫтәл артында ултырған Ялтас баш янына алып килде.

- Хәҙер,Мавр, ул һинең хужаң, ҡара уны, тыңла! - тип бойорҙо.

Мавр уны сит кешегә тапшырыуҙарына төшөндө һәм ырылдап ебәрҙе, артҡа тартылды. “Риза түгелмен!”- тиеүе шул ине эттең.Хужаһы кире уйлар, ҡарарынан баш тартыр, тип өмөтләнде. Мавр уға тоғро хеҙмәт итте лә баһа!

- Ҡара-ҡара! Аңлай!- тип мығырланы Даға.

- Ҡарышма сәле, Мавр! - тип өгөтләне этен Степан. Ә тауышы ҡалтырап сыҡты.- Бар, Мавр, бар! Хәҙер ул һинең хужаң!

Мавр, тоғролоғона барып, хужаһының талабын үтәргә кәрәклекте аңланы.Ул Степандың аяғына һырпаланып, яурыны менән ышҡына башланы. “Теләк булмаһа ла буйһонам,”- тигәнде аңлата ине был.

Һунарсы этен йәнә усы менән иркәләп алды һәм муйынындағы бауын Дағаға тотторҙо. Шунан ҡапҡа яғына этә биреп тә ҡуйҙы.

Семен Львович, этте үҙенә эйәләштерер өсөн, арҡаһынан һыпырырға итеп ҡарағайны, Маврҙың уҫал ҡарашын күреп, тыйылды.

- Тешләшмәҫме икән?- тип һорай һалды Степандан.

- Мөнәсәбәтең нисек булыр бит, - тип һыҙланыулы йылмайҙы һунарсы. – Рәнйетә күрмә. Эт – тоғро хайуан. Рәнйетһәң, гонаһлы булырһың.

- Борсолма! Аңлашырбыҙ! – тип вәғәҙә итте Даға һәм ипләп кенә эттең арҡаһына ҡағылып ҡуйҙы. Маврға был оҡшаманы, ләкин түҙҙе, ҡаршылыҡ күрһәтмәне.

- Мин намордник алғайным. Шуны кейҙерәйем.

- Кейҙер, әйҙә.

Эттең муйынындағы ҡулсаға тоташтырылған бауҙы усына йомарлап, Семен Львович Маврҙы машинаһы янына алып китте. Эт ҡарышманы. Ҡапҡанан сыҡҡас артына боролоп ҡараны: бәлки хужаһы кире уйлар, янына саҡырып алыр. Тик хужаһы ихатала юҡ ине инде.

Даға этте машинаһының кабинаһына ултыртып алды ла ауылдан сығып та китте. Һунар биләмәһенә ингеһе килде. Ҡышлау өйөнөң ҡыйығын рәтләйһе бар.

Машинаһын, ғәҙәтенсә, юлда ҡалдырып (ул юлдан Степан менән Дағанан башҡа йөрөгән кеше юҡ, тиерлек), ризыҡ һалынған рюкзагын арҡаһына артмаҡланы, төргәкле рубироидты яурынына һалды һәм Маврҙы етәкләп ҡышлау өйөнә табан ыңғайланы.

Шишмә аша сығып барғанда ауып ятҡан уҫаҡ аҫтынан төлкө һикереп килеп сыҡты. Мавр йәнлек артынан ташланды һәм Дағаның ҡулындағы бау тартылып, ул йөҙ түбән йығылып китте.

Саҡ килеп тороп, өҫтәндәге бысраҡты ҡаҡҡыланы ла Маврға ҡарап уҫал янап ҡуҙы: "Үлтерәм бит, кәнтәй!" Былдай һүҙҙәрҙе Маврҙың ишеткәне юҡ, әммә уҫал итеп әйтелеүенә ҡарағанда, яҡшы һүҙ түгеллеген аңлап алды, хатта елкәһендәге йөндәре үрә торҙо. Хәлдең ҡырҡыу булыуы асыҡ ине.

- Нимәгә таһраяһың! Шәп булғас, һөйрә йөктө!

Дағa рюкзагынан бау килтереп сығарҙы, уны икегә бөкләне, бер осон рулондарға бәйләне, икенсе осон эттең муйыны, шунан аяҡтары аша үткәрҙе. Нарта тартыуға өйрәтелгән эт һуҡмаҡ буйлатып ҡара "бүрәнә"не һөйрәп алып китте. Йөгө ара-тирә ағас ботаҡтарына эләгеп китә, Дағa уны рәтләп ебәрә килә. Бер һарҡыуҙа рубироид ылымыҡланған һыу соҡорона төшөп китте, уны тартып сығарам тип көсәнгән эттең муйынындағы бау өҙөлөп сыҡты. Дағаға һыу эсенә төшөргә, рубироидты һөйрәп сығарырға, бауҙы киренән эт муйынына тағырға тура килде.

Бысыранып бөттө. Асыуынан эткә тибеп ебәрҙе. Тегеһе тешен ыржайтып, ырылдап ҡуйҙы, Семен Львовичтың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Был хәл уны сығырынан сығарҙы. Эттең муйынындағы бауҙы ҡайын ағасына бәйләне лә йыуан ғына сыбыҡ ҡырҡып алып, Маврҙы туҡмарға кереште. Бер һуҡҡанында эттең иң ауыртҡан ере-танауына эләктерҙе һәм Мавр, ауыртыныуҙан, сыйнап ебәрҙе.

Ә Дағa уны дөмбәҫләне лә дөмбәҫләне.

- Аҡшайма миңә! Аҡшайма! –тип аҡырҙы үҙе төкрөктәрен сәсә-сәсә.

Эт, әгәр буйһонмаһа, Ялтас баш уны үлтергәнсе лә туҡмар ул, тип ҡурҡышынан, башын аҫҡа эйеп, сыйнап ҡуйҙы.

- Ана шулай!- тип тынысланды яңы хужа. Торараҡ өҫтәп ҡуйҙы.- Атла артабан. Күп ҡалманы!

Өйө янына килеп еткәс, этте пихта ағасына бәйләне һәм алдына ливер колбасаһын ташланы һәм эшкә тотондо. Ишеген нығытты,лапаҫының дүрт бағанаһын, сысҡандар менеп йөрөмәһен өсөн, йоҡа тимер менән көпләне. Ҡыйығының ағас ауыуҙан йыртылған еренә рубироид түшәне, мейес торбаһын балсыҡ менән һылап сыҡты. Эшен тамамлағас бутҡа бешереп ашаны, бер сеүәтә бутҡаны ағас төбөндә ятҡан этенә алып сыҡты. Тегеһе бутҡаға боролоп та ҡараманы, колбасаға ла теймәгән.

Иртәнсәген ҡалаға ҡайтып киттеләр.Соҡорланып бөткән юлдан машина һелкетеп алып бара, Маврҙың күңеле болғанды, саҡ-саҡ ҡоҫмай түҙеп барҙы. Бара торғас машина юлы тигеҙләнде, эт тә тыныслана төштө.

Ағаслы һыртҡа еткәс ҡала тотош асылып китте.Ҡала еҫе, машина тауыштары Маврға таныш. Ул бында хужаһы менән килгәне бар.

Уны эт ояһына түгел, ихатаның ситендәге таҙа һарайға яптылар. Иҙәненә кейеҙ түшәлгән, ишек төбөнә ике кәстрүл ҡуйылған. Бер кәстрүлдә итле аш, икенсеһендә –һыу.Бер нисә һөйәк тә бар. Маврҙы бындай йомартлыҡ ғәжәпләндерҙе. Теге Ялтас баш та үҙгәреп китте. Һарайға ингән һайын, наҙлы ғына итеп, нимәлер мығырлай. Уның телен Мавр аңламай, тауышына өйрәнмәгән. Был яңы тормош Мавр өсөн сәйер һәм аңлайышһыҙ.

Дағаның үҙгәреүенең сәбәбе ябай ине. Мавр үҙен ситтән күрә белһә, ҡиәфәтенә үҙе лә һоҡланыр ине. Даға уны һунарҙан бигерәк аталандырыу маҡсатында алғайны. Нәҫеле данлыҡлы, туғыҙ миҙалының дүртәүһе- алтын. Регион күргәҙмәләрендә ул ҙур килем килтерәсәк. Уны кәнтәйҙәренә ҡушырға теләүселәр күп буласаҡ.

Биш көн тирәһе эткә яҡшы мөнәсәбәт күрһәттеләр, тамағы ла һыйлы булды. Ул арала Семен Львовичтың ихатаһы ҡапҡаһына ялтырап торған машина килеп туҡтаны һәм унан ирле-ҡатынлы кешеләр килеп сыҡты. Даға Маврға намордник кейҙерҙе һәм ҡунаҡтар янына алып китте.

Мавр уға ҡарышмай ғына эйәреп барған арала тирә яғына күҙ һалды: ҡапҡа ябыҡ, ҡойма бейек түгел, урман эргәлә генә. Аҡһыл-һоро кәнтәйгә лә, уның янында торған кешеләргә лә бик иғтибар итмәне.

Кәнтәй эттең хужалары арлан Маврҙы иғтибарлап ҡарап сыҡты. Әллә ниндәй еҫ сығып торған ир Дағаға этенең ауыҙын асып күрһәтеүҙе һораны. Тегеһе, эттең арҡаһынан һыпыра-һыпыра, наморднигын ысҡындырҙы. Мавр унан нимә талап иткәндәрен шунда уҡ аңланы һәм ап-аҡ сәләмәт тештәрен ыржайтып күрһәтеп алды.Һәммәһе лә, бигерәк тә Семен Львович ҡәнәғәт булдылар.

- Аҡыллы!- тип маҡтаны ул Маврҙы, йөҙө йылмайыулы.- Танауы еҫте сос һиҙә. Теләһә нимәңде эҙләп таба. Бына күрерһегеҙ.

Даға эттән асҡыстарын еҫкәтте лә, ун биш метр самаһы алыҫлыҡҡа ырғатты, шунан эттең башына ҡулъяулыған һалып, бойороҡ бирҙе:

- Эҙлә!

Мавр уңайлы мәл етеүен аңғарып алды. Ул үҙен рәнйеткән яңы хужаһы янына яҡын килде лә, артҡы аяғын күтәреп, тегенең салбарына сәперҙе лә ебәрҙе.

- Вәт шаян!- тип көлөп ебәргән булды көтөлмәгән хәлдән аҙап ҡалған Семен Львович.

Эт аптырашып баҫып торған ҡунаҡтар янынан ғорур ғына атлап үтте лә бер ынтылышта ҡойма аша һикереп сыҡты ла китте.

“Ашығырға, ашығырға кәрәк! Тиҙҙән ул  урман эсенә инеп китәсәк, ә урманда йәшеренер урын етерлек”.

Урманға барып ингәс Мавр ауып ятҡан ағастар, төпһәләр аша һикерә-һикерә, ҡыуаҡтарҙы уратып-уратып сапты ла сапты. Юлға килеп сыҡты. Ә был юл уға таныш. Был юлдан ул хужаһы менән үткәне  бар, күптән түгел генә Ялтас баш менән ошонан үттеләр. Шатлыҡ кисергән эт юл ситләп йүгерҙе лә йүгерҙе. Бер заман арттан килгән машина тауышы ишетелде. Ялтас башмы икан? Мавр йәһәт кенә ҡыуаҡ араһына сума һалды. Шул үҙе! Машина артабан елдерҙе.

“ Тимәк, ауылға ҡайтыуҙан фәтеүә юҡ.Ялтас  баш  уны  эҙләп Верхиға китеп  баралыр. Ярар улайһа. Уларҙың  бит урманда  өйҙәре бар. Ялтас баш ул өйҙөң ҡайҙалығын белмәй. Шунда йәшәрмен. Өйҙө ҡарауылларммын. Бер саҡ хужа ла килер ул өйгә һәм Маврҙың уға тоғро һәйбәт ҡарауылсы булыуын күреп, уға ышаныслы дуҫ булыуын аңлар һәм теге Ялтас башҡа тотторопп ебәрмәҫ,”- тип уйланы эт.

Юлдың саңы ултығанын көтөп торҙо ла юл ситләтеп артабан йүгерҙе. Бына таныш йылға сылтырап ағып ята. Күперҙе сығып, уңға боролһаң, ағас сығарған иҫке юл буласаҡ. Ысынлап та! Хәтере яңлышмай ул Маврҙың!

Арлан үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ине: йәберләүсенең балағына  сперепп үсен дә алды, ҡасып та китте! Бында еткәс инде, бер аҙ хәл алырға ла мөмкин.

Егерме дүртенсе глава

**Тып-Тып менән дуҫлыҡ**

Йәйгеһен таң иртә  ата. Таң һыҙылыу менән Мавр юлын дауам итте. Шырлыҡтарҙы үтеп сыҡҡас , тау армыттары  башланды. Тауҙарҙың арғы осондараҡ Ялтас баштың өңө булырға тейеш. Унан арыраҡ булыуың хәйерле. Хужаның өйөнә урабыраҡ булһа ла урман аша барырға кәрәк.Еңел генә йүгерә бирҙе һәм тәғәйен урынға барып етеүен һиҙмәй ҙә ҡалды. Бында бөтә нәмә лә таныш. Ялбыр кедрҙар аҫтына йәшел  генә ягель мүге түшәлгән, көртмәле япраҡтары ялтыраша. Ямғырҙар сылатыуҙан ҡарайған өй яҡын ғына. Яр аҫтында  шишмә йыуып төшөргән  һорғолт ҡырсын дуғаланып ята.

Мавр ҡышҡыһын тупһа аҫтына йәшергән елекле һөйәген иҫенә төшөрҙө. Ышыҡта һыйланасағын уйлап, кәйефе күтәрелде.

Ни үкенес, һөйәген сысҡандар кимереп бөткән, ятып ял итә торған мөйөшөнә сүп-сар өйөлгән, үрмәксе ауҙары тартылған. Бөтә нәмә лә күңелһеҙ һәм ҡотһоҙ төҫкә ингән. Шатландырырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Киреһенсә, эс бошорғос күренеш кенә ҡаршыланы Маврҙы.Көн һайын әҙер

ризыҡ биргәндәренә, йыуындырып тарағандарына, йәрәхәттәрен майлағандарына өйрәнгән эт нисек кисерһен һуң быңдай уңайһыҙлыҡтарҙы? Хәҙер ризыҡ хәстәрләү уның үҙ өҫтөнә төшәсәк бит. Хужаһына ҡуша һунар иткәндә ул йәнлектәрҙе еҫенән танырға, эләктергәс хужаһының килеп еткәнен көтөргә өйрәнгәйне, ә бына табышты үлтерергә хужаһы рөхсәт итмәҫ булды. Киреһенсә, фотомылтыҡ менән төшөрөп ала ла, этен табышы эргәһенән ҡыуалап ебәрә ине.

Асығыуын баҫыр өсөн ягель мүген сәйнәп ҡараны. Тәмһеҙ, әммә асығыу бер аҙ баҫылды. Тупһаға ятып ойоп алды. Төшөндә тәмле генә елекле һөйәк күрҙе. Еҫкәп ҡараһа, росомаха еҫе килә, имеш. Уянып китһә, росоиаха еҫенең көслөрәк тә беленеүен төшөндө. Ошо тиргә яҡын микән ни? Ул росомаханың ҡарашын да шәйләгәндәй итте. Ысынлап та! Ана ҡыуаҡ араһынан ҡап-ҡара мәрйен кеүек күҙҙәре зыйлап күренеп ҡалды, уның боролоп китеп барған тауышы ишетелде.

Был һаҫыҡ йән эйәһе менән бәйләнгеһе килмәне эттең. Уның менән элегерәк осрашыуҙарын онотҡаны юҡ әле. “Китеп барыуы яҡшы булды,”- тип шатланып ҡуйҙы ул һәм йылға буйына төшөп китте. Һыу эсеп алды ла, ҡырсын өҫтөнә һуҙылып ятты, бында, исмаһам, серекәй әҙерәк. Шул саҡ ҡолағына ҡырсын шығырлағаны сағылып китте. Эт һағайҙы. Ҡарағат ҡыуаҡтары араһынан ипһеҙ генә ҡара шәүлә күренде. Мавр ҡаушай төштө: росомаха туп-тура уға табан килә ята.

“Ярар улайһа, алышырға тура килер, уны ҡышлау өйгә яҡын юлатырға ярамай,”- тигән уй үтте башынан.

Росомаха иһә шым ғына атлай, агрессия билдәләре һиҙелмәй. Маврға ул осрашыуҙарына шат кеүек күренде. Ҡарашы таныш кеүек. Хужаһы менән икүләп барып күреп йөрөгән росомаха көсөктәренең береһенә оҡшаған. Тып-Тып микән әллә? Эйе шул! Тап үҙе!

Тып-Тып иһә алдында балалалыҡ дуҫы Амур баҫып торғанына икеләнмәй ине. Бик һаҡ баҫып тора. Ҡыш көнө уға мускус һиптереп киткәнен онотмаған, күрәһең.

Торараҡ эт тә ҡойроғон болғап ҡуйҙы. Тып-Тып шатлығынан бер нисә тапҡыр башы аша тәкмәс атып алды. Мавр ҙа уның был тәкмәс атыуҙарын иҫенә төшөрҙө һәм иҫке танышының ҡаршыһына табан атланы. Шунда ғына Тып-Тып еҫенән эттең Амур түгел, Мавр икәнлеген таныны.

Шул көндән һуң эт менән росомаха парлашып йөрөр булып китте. Табышты ла икәүләшеп ҡыуалау уңайлыраҡ. Бигерәк тә ҡуян тотоу яйлы. Үҙҙәренең сценарийы барлыҡҡа килде. Мавр түңәрәк яһап йүгергән ҡуянды ҡыуалап бара-бара ла йәшеренеп көтөп торған росомаха тирәһенә ҡыҫырыҡлай. Тегеһе ҡуяндың өҫтөнә ҡапыл һикереп йығып та һала. Тора-бара Мавр росомаханан төрлө һунар алымдарына өйрәнде һәм оҫталыҡта киң тәпәйле дуҫынан ҡалышмаҫ булып китте.

Маврҙың берҙән-бер өйрәнә алмағаны – төнгө һунар. Был тәңгәлдә Мавр төндән ҡурҡыуы, айҙы күрә алмауы сәбәпле мәмерйәлә баҙлаған усаҡ янына йылышҡан һәм азатлыҡтан үҙ теләге менән ваз кисеп, кешегә хеҙмәт итергә ризалашҡан тәүге Эттең балаһы булып ҡалғайны.

Маврҙың хужаһын иҫләмәгән көнө булманы. “Бәлки йүгереп кенә ауылға барып килергәлер?”- тип яҫҡынып та ҡуйғыланы. Хужаға еткерерлек яңылыҡтары ла етерлек. Тып-Тып менән икәүләшеп урман өйөн һаҡлауҙарын да белдерер ине.

Ни рәүешле аңлатыры уны борсомай. Ул хаҡта бик уйламай ҙа. Тик шуныһы ғына уға асыҡ: хужаһы уны, ул хужаһын аңлаған телдә аңлашасаҡтар.

Ауылға ҡайта торған юлды ул яҡшы белә. Йыл һайын әллә нисәмә тапҡыр үтеп йөрөгән юл ул. Тик урман өйөн ҡарауһыҙ ҡалдырып китергә генә ҡурҡа.

Йәй урталарында ул түҙмәне, Верхиға табан юлланырға булды.Әммә ишеккә йоҙаҡ эленгән булып сыҡты, хужаның еҫе сыҡмай, күптән бында булмаған, күрәһең. Ҡурҡыныс юҡ! Ҡар яуғас хужа үҙе урман өйөнә килеп сыға ул.Эт кире урманға сығып китте.

Степандың Даға менән тиҙерәк иҫәпләшер өсөн һыйырын, үгеҙен һатып госпромхоздың умарталығына күсеп киткәнен эт ҡайҙан белһен инде. Еләк-емеш, сәтләүек өлгөрмәгән әле, умарталыҡта уның үҙ умарталары бар, шунда эшләп торорға ҡарар иткәйне. Ҡатыны менән ҡыҙы ҡалаға киткәйнеләр. Машаға институтка инер алдынан курстарҙа уҡып алырға кәрәк ине.

Егерме бишенсе глава

**Яңы һунар сезоны**

Һалҡындар төшөү менән тайгаға кешеләр килеп тулды. Йәнә атыу тауыштары яңғрай, эттәр өрә. Ҡар йоҡа саҡта һунарсылар йәйәүләп йөрөнө, көрттәр тәрәнәйгәс камусланған киң саңғыларына баҫтылар. Шунан бирле аҡ түшәктәрҙе бүйма йәки унта эҙҙәре тишкеләмәй, саңғы эҙҙәре киҫәк-киҫәктәргә бесә.

Даға Верхиға пенсия, почта, бүтән кәрәк-яраҡ тейәп килеп сыҡҡайны. Юлға ғәҙәтенсә бишендә түгел, ике көнгә алдараҡ сыҡты. Бер юлы һунар биләмәһенә инеп ҡапҡандар, арбауыстар ҡуйып сығырға ниәтләне. Ҡар ултырып өлгөргән. ГАЗ-66 ыңғай ғына бара.

Төшән һуң Дағаның машинаһы ҡышлау өйөнә бара торған һуҡмаҡ башында тора ине инде. Һиҙелер-һиҙелмәҫ тауыштар сығарып ваҡ ҡына боҙло ҡар яуа. Ҡарҙың аҡ селтәре өҫтөндә ҡуян, мышы эҙҙәре ярылып ята. Ауылдан алыҫ булыуы сәбәпле, уның ҡулына төшкән биләмәлә күптән

инде һунар иткән кеше булмаған.Урман йәнлектәре был тирәнең һил булыуын һиҙемләп, ошонда күсенеп төпләнгән. Өйөнә етмәҫ борон уҡ ике сел атып алды. Үҙе лә бешереп ашар, алдатҡыс итеп тә урынлаштырыр.

Өйҙөң ҡото киткән. Күк еҫе сығыбыраҡ тора. Ай тирәһе килгәне юҡ шул. Мейесенә утын тултырып туҙ менән ҡабыҙып ебәрҙе. Һәғәт тигәндә мейес эсе дөрләп янып та китте. Тимер мейестең ҡабырғалары ҡыҙарҙы. Ут булғас ни, өй эсенә лә ҡот инеп китте. Түшәмдәге ҡар бәҫе иреп аҡты. Ҡалған ваҡытын Даға ҡапҡандар ҡороп үткәрҙе.

Кискәрәк ҡышлаҡ өй төҫөнә инде. Стеналар ҙа, түшәм дә кипкән. Өҫтәлгә кәртүф, салоға ҡыҙҙырылған сел ҡунаҡланы.

Тәмләп ашап, сәй эсеп алғас, Семен Львович кәрәсин лампаһын һүндерҙе һәм йоҡо ҡапсығын кейеп йоҡларға ятты. Мейес ауыҙының ябылып бөтмәгән еренән ҡуҙҙар баҙраша. Бер нисә киҫәү ялпылдап янып ята әле.Тышта ел һыҙғыра, ә ҡышлаҡта йылы...

Иртәнсәк ул яҡшы ғына туҡланып алды ла, рюкзагына үҙе менән алып килгән емләү итен, ҡапҡандар тултырҙы, сало, икмәк, термос һалып алды һәм һуҡмаҡ һуғырға юланды. Йылға тупһаһынан түбәндәрәк урын ҡутырлап туңғайны.Даға талдарға тотона-тотона ярҙан шыуып төштө һәм һаҡ-һаҡ атлап боҙ өҫтөнән китте. Аңғарып бөтә алмай ғына барҙы ул, әллә боҙ һелкенеп ҡуя, әллә уға шулай тойола ғына. Аяҡ аҫтынан йән-яҡҡа уҡтар атылып киткәндәй ҙә булды. Таяғы менән туҡылдатып ҡараһа, боҙ ныҡ булып сыҡты.

Арғы яҡҡа барып сыҡҡас, күҙенә кеш эҙҙәренең күплеге салынды. был уның күңелен күтәреп, илһамландырып ебәрҙе һәм ул көнө буйы тәғәйен һуҡмаҡ буйлатып арбауыс емдәрен урынлаштырып, ҡапҡандарын ҡороп, уларҙың өҫтөн ҡаплап йөрөнө.

* * *

Табыш юллап урман ҡыҙырған Тып-Тып менән Мавр оҙон юл үтеп, яңы ғына һалынған парлы саңғы эҙенә килеп юлыҡты.Мавр еҫкәнеп алды һәм еҫтең уны йәй көнө туҡмаған Ялтас баштыҡы икәнен таныны. Тып-Тып иһә уны яралаған Түңәрәк йөҙлөнөкө икәненә төшөндө. Еҫ уның һаман онотолмаған рәнйешен ҡуҙғытып ебәрҙе.

Ике дуҫ саңғы эҙенең ҡайҙан башланғанын самаланы һәм Дағаның өйө торған яҡҡа боролдо. Килә торғас ҡар ҡыуышында тәмле еҫ сығарған ит киҫәген тап иттеләр. Тып-Тып ындай ҡыуышта яткан иттең янына барыу хәүефһеҙ түгеллеген үҙ елкәһендә татығанын онотмағайны әле. Янында тешләшә торған яман ауыҙ яталыр, моғайын. Мавр иһә ҡурҡып торманы, тешенә ағас ботағы эләктерҙе лә ҡыуыш яғына ыңғайланы.

Артабан эт таяғын ҡар эсенә тығып ҡарай-ҡарай ит янына яҡынланы һәм бер заман ҡар ҡалҡынып китте лә тимер тауышы зыңлағаны ишетелде.

Тып-Тып һиҫкәнеүенән артҡа һикерҙе. Ә дуҫы тәпәйе менән иткә тотонғайны инде, ә ит янында ботаҡ тешләгән тимер ауыҙ ята.

Тып-Тыптың иҫе китте. Мавр иһә тып-тыныс. Был хәйләнең йәнәһе лә нимәһе бар ул тиклем? Уның хужаһы ла тимер ауыҙҙарҙы ана шулай тар-мар итә торғайны бит. Икенсе ҡыуыш өңөрөн дә Мавр шул рәүешле азат итте һәм дуҫының алдына ит килтереп һалды. Үҙе шатлығынан ҡойроғон үргә күтәреп, балдаҡлап һелкетеп ҡуйҙы.

Тамаҡтары туйған дуҫтар юлын дауам итте. Һуҡмаҡтар буйлап теҙелеп киткән арбауыстарҙы байтаҡ ҡыҙырҙы улар, артабан табыштарын запаслау хәстәрен күрҙеләр, үҙҙәре генә белгән ергә ташып йәшереп ҡуйҙылар. Был байтаҡ ваҡыттарын алды һәм үҙҙәрен рәнйеткән әҙәмдең өйөнә барып етә алманылар, ярты юлда туҡталып ҡунырға булдылар.

Икенсе көндө Даға йәнә бер һуҡмағы буйлатып ҡапҡандар ҡороп , арбауыс ем һалып сыҡты һәм өсөнсө көнөнә иртәнсәк ауыл яғына юлланды. Еңел табышҡа өйрәнеп алған Мавр хәҙер һәр бер арбауыс янына барып та тормай башланы, ит мулыраҡ ҡыуыштарҙы һайлар булды. Эттең һәләтенән илһамланған Тып-Тып, унан күрмәксе, тимер ауыҙҙарҙы үҙе лә “юҡ” итергә өйрәнеп алды.

- У-р-р-ра! Килеп сыҡты бит! - тип шатланды ул яңы һөнәр үҙләштереүенә шатланып.

Сираттағы ҡапҡанды ауыҙлыҡларға маташҡанда ҡолағына ҡыштырлау тауышы салынды. Росомаха бағана кеүек үрә тора һалды.

- Фии! Ҡурҡыныс юҡ икән!

Ағас башындағы тейен ҡарағай тубырсығын әрсеп ултыра. Берәү генә түгел икән, икәүҙәр...Тундарын ап-аҡҡа алмаштырып алғандар, ҡолаҡтары ҡарпайышҡан, ҡойроҡтары бәрхәт кеүек йомшаҡ. Матурҡайҙар.

Үр эйәренә күтәрелгәндә бер йәнлектең йәшен кеүек атылғанын күреп ҡалдылар. Тып-Тып шунда уҡ таный һалды- кеш! Уның тәпәйе ҡапҡанға ҡапҡан, ә ҡапҡан ҡайын ағасына бәйләнгән бауға тоташтырылған. Росомаханы күргән кеш ҡатып ҡалды. Ҡарашында ярлыҡау һораған өмөт сағылды. Уларҙың янына Мавр ҙа килеп еткәс, кеш ҡар эсенә сумды. Алыҫ китә алманы ла ул, ҡапҡандың бауы ебәрмәй ине бит! Тып-Тып менән Мавр ите ашалған ҡыуыш янына барып торманы.

Бер нисә көн эсендә был ике дуҫ алдатҡыс емле ҡыуыштарҙың һәммәһенең дә тиерлек ҡапҡанының ауыҙын яптырып сыҡты. Ундағы арбауыс иттең бер өлөшө менән туҡландылар, бер өлөшөн, ситкә ташып, йәшереп ҡуйҙылар.

Был уңышлы һунарҙарынын һуң дуҫтар бер осор айырылышып торҙо. Мавр хужаһының ҡышлау өйөнә юлланды. Ҡар яуҙы бит, тимәк, тиҙҙән

хужаһы бында киләсәк. Ә сабырһыҙ Тып-Тып тау үркәсәтәрен ҡыҙырырға булды.

Тау –ҡаяларҙы ҡыҙырыуын-ҡыҙырҙы ул, әммә бүтән һунарсылырҙың арбауыслы һуҡмаҡтарына күҙ һалыуҙан да баш тартманы. Арбағыс ем тирәһенә килә лә оҙаҡ ҡына әйләнеп йөрөй, уралып-сурала, еҫкәнә. Был тирәлә кеше юҡлығына инанғас ҡына ҡапҡандың тимер тештәрен яптырып, хәүефһеҙлеккә өлгәшә. Ул шул саҡлым тәмле тамаҡҡа әйләнде, хатта ҡоштарҙы тотоп ашамаҫ булып китте. Ҡоштарҙың ни... Ҡаурый-йөндәре ауыҙ тирәләй йәбешеп ҡалыусан да баһа!

Ҡапҡанға ҡапҡан кеш, шәшкеләрҙе Тып-Тып үҙе соҡоп яһаған баҙҙарға йәшереп, өҫтөн тапап нығытыр, сыбыҡ-сабыҡ өйөп ҡуйыр булды. Шулай итә лә тамғалап та ҡуя.Бер нисә ергә, һеләүһендәрҙе һемәйтеү өсөн, алдатҡыс баҙ яһаны. Был хаҡта Тып-Тып яҡшы белә. Үҙ күҙе менән күргәне булды.Алышып киткәйнеләр. Кәүҙәһенең ҙурлығы яғынан һеләүһен эрерәк булыуға ҡарамаҫтан, үтә лә сәмсел йәнлек,әммә алышта ал бирмәҫ росомаханан еңелеүен танырға мәжбүр булғайны.

* * *

Тоҙаҡлы һуҡмағын барлап йөрөгән Даға һис аңлай алмай йонсоно: ниндәй шайтан алғыры хәл был? Арбауыс ем юҡҡа сыҡҡан, ваҡ-төйәктәре генә урынында, ҡапҡандарҙың ауыҙы ябыҡ, ә уларға бер генә йәнлек тә ҡапмаған.Йомолған тимер ауыҙҙарҙан тик ағас ботаҡтары ғына һерәйеп тора. Ә тирә яҡта росомаха эҙҙәре тулып ята. Хәйер, йәнә бер эҙҙәр күренә. Бүренекенә оҡшаған. Тәжрибәһеҙ һунарсы уларҙың ниндәй йәнлектеке икәнен аныҡ ҡына билдәләй алманы. Бөтә был күргәндәре Семен Львовичты уйға һалды. Тәжрибәле һунарсыларҙан ишеткәне булды: биләмәңә росомаха эйәләнеме, һунар уңышынан төңөл.

Таланған һунар һуҡмағын барлап йөрөгәндә ул болан кәүҙәһенә барып юлыҡты. Болан ятҡан тирә тулы росомаха эҙҙәре.Түшкә яртылаш кимерелгән.

“Вәт, мәсекәй! Туя беләме был йыртҡыс? - тип йәне көйҙө Даағаның. – Болан түшкәһе янына ҡапҡан һалып китергә кәрәк!”

Һунарсы түшкә янындағы ҡарҙы соҡоп, тирә яғын тапап нығытты һәм соҡорға ҡапҡан ҡорҙо. Уны бер сантиметр тирәһе ҡар менән ҡапланы, үҙенең эҙҙәренә лә ҡар һипте.Ә росомаханың эҙенә ҡағылмаҫҡа тырышты.

Тып-Тыптың хәтере яҡшы ул. Үҙе һалған һуҡмаҡ янындағы үҙгәрештәрҙе тиҙ шәйләне. Болан түшкәһе янына икенсе яҡлап яҡынланы, тамағы туйғас, һалған эҙҙәренә генә баҫып кире китеп барҙы.

Даға икенсе көндө көнө буйы тау һырттарына һалған оҙон һуҡмағы буйлап йөрөп сыҡты. Ҡышлағына күтәренке кәйеф менән ҡайтып инде. Бер ҡапҡанынан кеш ысҡындырып алды бит. Иртәнсәген тамаҡ ялғап алды

ла болан түшкәһе ятҡан ергә ашыҡты. Төп дошманы ҡапманымы икән? Эләккәндер ул. Даға үҙе менән ҙур рюкзагын алды.

Түшкә янына еткәс, тирә яғын ентекле күҙәтеп сыҡты. Ҡуйы тиреле януар ятмаймы янында? Юҡ шул. Яңы эҙҙәр етерлек, килеп киткән, тимәк. Ҡапмаған! Был хәйләкәр түшкәнең ҡапҡан һалынмаған яғын кимереп киткән. Килеүемде һиҙмәй ҡалмаһын тинеме икән, тамға һалып, ярау иткән етмәһә!

“Я Рабби!- тип уфтанды һунарсы. – Тимер еҫен һиҙҙеме икән ни?” Лукъян уға ҡапҡанды ҡорор алдынан шишмә һыуында сайҡатып туңдырырға кәңәш иткәйне. Тимерҙе боҙ ҡаплаһа, еҫе сыҡмай икән. Шулай итеп ҡарамай булмаҫ!

Ҡышлағына ҡайтҡас, Даға ҡалған ҡапҡандарын һыуға манып туңдырып алды.Болан янына бер юлы алты ҡапҡан ҡорорға булды. Икәүһен росомаханың һуҡмағына, ҡалғандарын түшкә тирәләй ҡороп сыҡты.

Тып-Тып икенсе төнгә генә асыҡты һәм болан түшкәһе янына китте. Тирә яғын барлап сыҡты. Уның һуҡмағына ике ҡапҡан һалынған.Тып-Тып уларҙың икеһенә лә таяҡ ҡаптырып ҡуйҙы. Туйғансы һыйланып алды. Һунарсынан да хәйләкәрерәк булыуына шатланып, болан ботон кимереп айырырға һәм икенсе ергәрәк алып барып йәшерергә ҡарар итте.

Әле бер, әле икенсе яғынан кимерҙе ул ботто. Һәм ҡапыл үргә һикереп китте лә ергә ҡоланы. Кемдер артҡы тәпәйенән эләктергән кеүек булды. Эләккән шул: тимер ауыҙ тешләп алған артҡы тәпәйен. Ысҡынырға ниәтләгән Тып-Тып тегеләй тартылды, былай һикергеләне һәм алғы тәпәйе менән дә ҡапҡан ауыҙына барып ҡапты.

Ярай әле тимер кеүек тырнаҡтары ғына ҡыҫылған. Көсәнеп тарта торғас, ул алғы тәпәйен һурып алыуға өлгәште. Ә артҡы тәпәйен ҡыҫтырған ҡапҡан яҫы табанынан өҫтәрәкке ерҙән ҡармаған, бушатып ебәрерлек тә, аяҡты тартып алырлыҡ та түгел. Тып-Тыптың башы менән ҡарға сумып борһаланыуҙары ла, тимер сынйырҙы сәйнәп маташыуы ла юҡҡа ғына булды, бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Оҙон-оҙаҡ айҡаша торғас, хәлдән тайҙы. Ҡыбырлай ҙа алмаҫлыҡ хәлгә етте. Өшөмәҫ өсөн ҡарҙы соҡоп ҡыуыш әтмәләне һәм шуның эсенә инеп йомарланып ятты.

## Егерме алтынсы глава

## **Бәхетле Тып-Тып**

Иртәнсәк Даға ҡапҡандары янына төшөнкө кәйеф менән юлланды. Әгәр теге оятһыҙ януар бөгөн дә унан хәйләкәрерәк булыуын иҫбатлаһа, һунар менән булашыуҙан баш тартырға тура килер. Ни мәғәнә

былайтып айҡашыуҙан? Һуңғы ике аҙна эсендә бер бәләкәйерәк кеш ала алды, шул ғына.Ул ғына тире ҡапҡандарға киткән сығымды ла ҡапларлыҡ түгел. Эйе, һунарҙың арбағыс түменән арыныу ҡыйын инде. Йәй көнө лә, Верхиға тауар килтергән һайын, ошо урман өйөнә һуғылмай китмәй торғайны бит. Өйөн рәтләштереп, ҡышлыҡ утын әҙерләп, һунар һуҡмаҡтарын таҙартып йөрөүҙән ләззәт таба ине. Ә әле ни... Торғаны бер ҡараҡ булып сыҡты бит анау росомаха.

Болан ятҡан тирәләге ҡарҙың ныҡлы тапалғанын күреп, Даға шатланып китте. Эләккән бит теге! Ул аҙымын шәбәйтеп атлай башланы.

Түшкә тирәләй тапалып ҡатҡан ҡарҙың бер тирәһендә суҡайып өйөлгән урын шәйләнә. Тимер сынйыр шул өйөм тирәһенә һуҙылған. “Хәйләкәр берәү! Һинән дә хәйләкәрерәктәр бар ул!”

Шатлыҡтан ҡалтыранған ҡулдары менән ҡар ҡыуышын соҡой башланы һәм өшөгән, ләкин туңмаған росомаханы һөйрәп сығарҙы. Ҡапҡанды ҡайырып, тәпәйен азат итте. Шунан табышын һалып алыр өсөн рюкзагының ауыҙын киңәйтте.Шул саҡ, ҡар өҫтөндә һушһыҙ ятҡан йыртҡыс һикереп торҙо ла, йәшен тиҙлеге менән яр түбәненә табан һыпыртты. Шаҡ ҡатҡан һунарсы мылтығын төҙәп өлгөргәнсе күҙҙән дә юғалып ҡуйҙы.

* * *

Ауыртыныуҙан, ҡурҡыуынан йонсоған Тып-Тып уның башына яҫҡынған һунарсының билмәһенән алыҫ юларға теләне. Маврҙы эҙләп тапты һәм бер осор улар икәүләшеп һунар итте.Әммә эскә йәшерелгән рәнйеше, үс алыу теләге тынғылыҡ бирмәй ине.Тора –бара ул , ҡыйыулығын йыйып, разведка яһарға булды.Эт тә уға эйәрҙе. Ҡар ҡалын урындарҙа улар һунарсы һалған һуҡмаҡтар буйлап хәрәкәт итте.

Түңәрәк йөҙ-Ялтас баштың өйө уларҙы ап-аҡ булып боҙ тартылған тәҙрәләре менән ҡаршыланы. Өй хужаһының бында юҡлығына инанғас, Тып-Тып ишек янына килде. Оҙон тырнаҡтарын ишек ярығына тығып тартҡайны, ишек асылып китте. Танауына тиҫтәләгән еҫ килеп бәрелде. Береһе Тып-Тып өсөн бигерәк тә насар тәьҫир итә. Уны рәнйетеүсенеке. Өй эсе тыштан ҡарағандан иркенерәк икән. Кәштәләргә тимер банкалар ҡуйылған, өрләккә эсе туп-тулы ҡапсыҡтар эленгән, стеналағы ҡаҙауҙарға – кейем-һалым. Киң таҡта һикенең өҫтөнә тиреләр түшәлгән.

Тып-Тып йән асыуы менән тире тунға , аҙаҡ матсалағы тоҡтар өҫтөнә ташланды, уларҙы тырнағы менән ярып ебәргәйне ваҡ ҡына таштар, ап-аҡ туҙан түгелеп китте. Аҡ туҙан танауына тулып ҡысыта башланы. Тоҡтарҙы армы-тормо итеп бөткәс, күҙенә нимә салынһа, шуны туҙҙырырға тотондо.

Кәштәләге банкаларҙы һыпырып төшөрҙө. Иҙәнгә һибелгән бер аҡ нәмәне ялап ҡарағайны, тәмһеҙ, әсе булып сыҡты. Ни өсөндөр ажарланып өҫтәлде кимерергә тотондо һәм уның бер ҡырыйын һындырып сығарҙы. Ә Мавр тәмләп-тәмләп иҙәнгә түгелгән һәм Тып-Тыпҡа оҡшамаған кристалл бөртөктәрен яланы.Росомаха өй эсенә һаҫыҡ мускус тамсыларын тамыҙып сыҡты ла тәпәйе менән һуғып, тәҙрә быялаһын ватып ташланы.

Пыраң-заран килтерелгән өй эсен йәнә бер күҙҙән үткәреп сыҡҡан Тып-Тып, ҡойроғон арҡаһы өҫтөнә һуҙып һалды.” Шәп булды!” тигәнде аңлата ине уның был ҡылығы. Мавр ҙа, ҡойроғон болғап, яуап бирҙе: “Ысынлап та! Шәп иттек!”

* * *

Урман өйөнә етәрәк Даға өҫ- башын ҡаҡҡыланы, саңғыһын систе, шунан ғына өйөнөң ишеге асыҡ тороуға иғтибар итте.

Өйөнөң эсендәге бола уның һарыуын ҡайнатып ебәрҙе. Баҫҡынсыны эттән алып эткә һалды, ҡарғанды, әгәр уның ҡарғышы төшөр булһа, росомаха нәҫеле тотош ҡырылып бөтөргә тейеш ине. Иғтибарлыраҡ ҡараһа, иҙәнгә һибелгән он өҫтөндәге эҙҙәң бүренекенә оҡшаған булыуын абайланы. Тимәк, росомаха бында бер үҙе генә ҡотормаған, эргәһендә бүре лә булған. Улай тиһәң...Бүре менән росомаханың дуҫлығы – тупға яҙмаған нәмә.

Һунарсының башына бер уй сиртеп үтте: “Маврмы икән әллә? Ә эт росомаха менән ҡайҙан табышҡан һәм дуҫлаша алған һуң?Был росомаха

теге Пуля аҫырап үҫтергән көсөкмө икән әллә? Шул булһа, үтә әрһеҙ һәм уҫал ҡыланыуы ғәжәп түгел”.

Был ваҡиғанан һуң Даға ике яуыз хаҡында йыш уйланды. Нисек башына етергә был икәүҙең? Эте лә юҡ, атыу мәргәнлеге лә самалы. Ҡапҡандарҙы нисек кенә эшкәртмә, яйын табып зарарһыҙландыралар, ҡапҡас икәс тә ҡулдан ысҡынып һыпырталар. Берәр бик ышаныслы сара табырға кәрәк.

Туҙҙырылған өйөн унан-бынан рәткә килтерҙе лә Верхиға барырға булды Даға.Ҡапҡандарын барлап сығыуҙы ла кәрәккә һанаманы. Фәтеүәһе булмаҫ, бер йән эйәһен дә ҡаптыра алғаны юҡ бит.

Сауҙа эштәрен тамамланы ла тәжрибәле һунарсыларҙың өйөнә ингеләп сыҡты, берәрһе яҡшы кәңәш бирмәҫме? Берәүҙе лә өйөндә тап итмәне. Бер Ермил ҡарт ҡына тайгала түгел икән.

Ҡарт автолавка хужаһын әллә ни шатланып ҡаршы алманы, әммә өҫтәл артына саҡырып ултыртты.Ҡарсығы самауар ҡайнатҡан арала берәр рюка төшөрөп ҡуйҙылар. Ҡарт яҙылып киткәндәй булды һәм

Дағa уға үҙенең башына төшкән бәлә хаҡында һөйләп бирҙе. Росомаханың бер үҙе генә түгел, бер эт менән ҡушарлап алғанлығын ғына әйтеп торманы.

- Эйе...Хәлең шәптән түгел икән шул. Росомаха үтә хәйләкәр йыртҡыс ул. Миңә лә этлеге тейгәне булды, - тип һөйләнде Ермил ҡарт һәм шыма биреп торҙо. “Кәңәш бирергәме был сауҙагәргә, юҡмы?”- тип уйлана ине буғай. Шулай ҙа йәнә телгә килде:

- Ул яуыздан ҡотолоуҙың берҙән-бер юлы – стрихнин ағыуын ҡулланыу. Ә ул тыйылған ағыу. Табып булмай. Хатта Степан да таба алманы.Шуны ҡулыңа төшөрһәң, росомаханан ҡотолдоң, тигән һүҙ.

- Файҙаһы ғына тейһен, табам мин уны! Беҙҙең төрлө ҡалалар, конторалар менән бәйләнешебеҙ бар. Берәр ерҙән табылмай булмаç, табылыр.Ә нисек ҡулланырға һуң?

- Уныһы ҡыйын түгел. Бер ҡабып йоторлоҡ ит киçәге алаһың, уртаһын теләһең һәм стрихнин таблеткаһын төпкәрәк тығып ҡуяһың. Тик ҡулыңды яҡшылап йыуырға онотма! Һуғышҡа саҡлым минең ағайым шуның менән ағыуланып ҡуйҙы.Өс көн ҡоçоп ятты, саҡ-саҡ кеше булып китте. Онотоп торам: арбауыс емеңдең өçтөнә, ҡоштар ҡағылмаһын өсөн, бер нисә ҡауырһын һалып ҡуй.

...Байтаҡ хитланды Дағa, әммә ҡулына төшөрҙө теге стрихнинды. Тегеләрҙән үс алыу теләге уны шул уҡ көндө тайгаға алып китте. Алыçтағы һунар һуҡмағына юлланды, росомаха эҙҙәре етерлек ине унда. Арбауыстарын теҙеп һалды ла, өс көн буйына ҡышлағынан сыҡмай ултырҙы. Өркөтөрмен тип ҡурҡты.

Тик хәйләһе яртылаш ҡына моратына еткәйне. Стрихнинлы ит киçәген Мавр ашаған булып сыҡты. Тып-Тыпты иһә иттән килгән һиҙелер-һиҙелмәç ят еç шикләндерҙе. Дуçының холҡондағы сәйер күренеш уның хаҡлы булыуында инандырҙы. Эт башта шундай йәлләүес итеп шыңшыны, шунан тәне тартыша, өҙлөкһөҙ ҡоçа башланы.Эсенең ауыртыуы саҡ ҡына туҡтаһа, Маврҙың күҙенә әллә нимәләр күренә башлай.

Хужамды аралайым тип айыуҙың осаһына барып йәбешкән имеш. Уңышлы һунарҙан һуң бүтән эттәр менән берлектә усаҡ янына йыйылышҡандар ҙа ялҡын телдәренең матур итеп ялпылдауын кинәнеп күҙәтәләр, имеш. Хужаһы уның үҙен айбарланған айыу тырнағынан ҡотҡарып ала, имеш. Арып-талып, үҙҙәренән риза ҡиәфәттә ҡайтып барған кеүектәр...Шул саҡ ҡолағына хужаһының тауышы яғылып китте. Бында ғына, яҡын... Эт уның ҡаршыһына ташланды һәм ҡараңғы упҡын эсенә тәгәрәп төшөп китте...

Тып-Тып Маврҙың ни сәбәптән вафат булыуын аңламаны, ләкин быны теге сәйер еҫле ит арҡаһында килеп сығыуын төшөнгәндәй булды.

* * *

Һунарсылар сезонды тамамлап, һуңғы ҡапҡандарын, арбауыстар ҡуйылған ҡыуыштарын йыйыштырып алды.Бәғзеләре табышын һөйрәтмәләргә тейәп, ауыл яғына ҡайтып та китте.

Кешеләрҙән сыҡҡан еҫтәр таралып, уларҙың оҙон тәпәйҙәренән ҡалған эҙҙәрҙән дә тик ҡар еҫе генә сыҡҡан ваҡыттар еткәс, Тып-Тып бүтән һунарсыларҙың да ҡышлаҡ өйҙәренә һуғылғылай башланы. Эсенә инә лә йән асыуы менән күҙенә нимә эләкһә, шуны сәйнәп, өҙгөсләп, туҙҙырып сығып китә.

Һиҙенә: уның был яуыҙлыҡтарының бер аҙағы буласаҡ, уның үҙенән дә үс алырға, башына етергә тырышасаҡтар. Шуға ла ул һуңғы арла бик шиксел булып китте, һағыраҡ ҡыланырға тырышты.Аҙым һайын еҫкәнеп уға ҡаршы ҡоролған мәкерҙән ҡотолоу юлдарын эҙләне. Ысынында иһә был тирәләрҙән арыраҡ булырға кәрәк, тигән уйға килде. Дуҫы һәләк булды, бында уға ни ҡалған? Ҡылаһын – ҡылды, туҙҙырҙы, ҡыйратып сыҡты.

Ҡар ҙа ireп аҡты. Ә Тып-Тып һаман да был яҡты ҡыҙыра бирҙе. Ҡалһынмы икән әллә? Бында бөтә нәмә лә таныш! Ашарға етерлек. Кешеләр тайганан сығып бөттө, ниңә ашығырға?

Егерме етенсе глава

**Яңы биләмә**

Янғын булып үткән ярайһы киң арауыҡта ҡурай еләге өлгөрҙө. Емештәре шул тиклем мул, хатта ботаҡтар ергә мәйешеп ултыра.Татлы тамаҡ Тып-Тып шул тирәгә эйәләшеп алды. Бер шулай һыйланып ҡына йөрөй ине, ҡолағына кешеләр һөйләшкән тауыштар ярылып китте. Артҡы тәпәйҙәренә баҫып үрелеп ҡараһа, бер өйөр ике аяҡлылар килә ята, эттәрен эйәртеп алғандар. Улар нәҡ Тып-Тып еләк ашаған яҡҡа ыңғайлаған. Тып-Тып икеләнмәй: уны эҙләп киләләр.

Ҡаса һалырға кәрәк!

Ә ҡайһы яҡҡа һуң? Тып-Тып зәңгәрләнеп ятҡан алыҫ яҡта осло ҡаялы тауҙар барлығын белә, ул тирәлә кеше аяғы һиҙелгәне юҡ.

Ике көн буйы бара торғас, ағын һыуҙар айырсаһына килеп етте. Текә тау битен ҡыҫҡа ғына үләндәр ҡаплаған. Үргә табан йыш тапалған һуҡмаҡ һалынған. Һуҡмаҡты әллә нисәмә йылдар буйы айыуҙар тапап шымартып бөткән. Урыны-урыны менән уларҙың ятып торған ерҙәре бар,

тупраҡҡа, үләндәргә йөндәре һарылып ҡалған.Ботаҡтарҙы кимергәнлектәре күренә. Түбәндәрәк кедр ағастары үҫеп ултыра. Сибек кенә ҡайындар ташлы тупраҡҡа тамырҙары менән йәбешкән. Ышығыраҡ урындарҙа елдәргә һуғылып кәкерәйешкән тәпәшәк кенә япраҡлы ағастар ҙа осрай.

Алыҫ булмаған таш ҡая яғынан ялбыр тәпәйле һар ҡошоноң еҫе килә. Тып-Тып суҡраҡ таштар аша үргә үрләне һәм сыбыҡ-сабыҡтан ҡоролған ояға тап булды. Уның тирә яғында кимереүсе йәнлектәрҙең һөйәк-һаяғы, йөндәре туҙышып ята. Ашҡаҙаны ҡайнатмаған ҡалдыҡтарҙы себештәр төкөрөп ташлаған күрәһең. Ояла берәү ҙә күренмәй. Себештәр ҡанат нығытҡандыр.

Был үрҙән өс армыт күренә, уларҙы өсәүгә меңәр йылдар буйы ағып ятҡан һыуҙар айырғандыр.Армыттар өҫтөндә бөркөттәр ҡанат ҡаға. Тау үркәстәре араһындағы үҙәндәрҙең береһендә күл ялтыраған кеүек. Уның янына төшәр алдынан һаҡ йыртҡыс тирә яғын йәнә бер тапҡыр иғтибарлап барлап сыҡты.Кеше-фәлән барлығы тойолмай, бүтән йән эйәләре уны борсомай. Тып-тып шылып торған ҡырсынға ултырып түбән шыуып китте.

Күл юлында бик боронғо пихта үҫеп ултыра.Аҫтағы ботаҡтарына үрмәксе ауҙары тартылған, Тып-Тып уларҙың моронона һарылғандарын алғы тәпәйе менән һыпырып ташланы.

Бына күл үҙе. Уның өҫтөндә аҡсарлаҡтар сарғайлап ҡысҡырыша. Бейек үләндәр араһында ҡаҙҙар үҙ-ара хәбәрләшә. Тып-Тып аҙымын һирәгәйтте. Ҡаҙҙарға ташланырғамы?

Тәжрибәһенән белә: был ҡоштарҙы көндөҙ эләктереүе ҡыйын, әйләнәләге еҫтәргә иғтибар итә-итә артабан китеү яғын ҡараны. Бер аҙҙан ел уға росомаханың башын әйләндергес үтә лә тәмле еҫ еҫкәтеп үтте. Бал еҫ ине ул. Ҡайһы тирәлә һуң был тәмлекәс? Анау ҡарт ҡарағайҙан килә икән был албырғатҡыс тәм.

Ул йәһәт кенә ағасҡа үрмәләне. Шымарып, ялтырап бөткән бәләкәй генә өңөр эсенән бал ҡорттары инеп-сығып йөрөй. Өңөр эсендәге тәмле еҫ түҙеп торғоһоҙ арбай. Тып-Тып бер усы менән ағас ҡайырыһына йәбеште, ә икенсе тәпәйе менән өңөр ауыҙын киңәйтергә тотондо.Бер аҙ киңәйткәс, тештәре менән кимереүгә күсте. Бал ҡорттарының асыуланышыуына, сағып алыуына ла ҡарамай, кимерҙе лә кимерҙе. Тегеләр ҙә әрһеҙ булып сыҡты, эсен, тиреһе йоҡағыраҡ урынын табып, ҡаяуҙарын батыралар.

Ҡулы һыйырлыҡ соҡоғас, Тып-Тып балы һығылып торған балауыҙҙарҙы һындырып алып ашарға тотондо. Балауыҙға йәбешкән бал ҡорттары менән ҡуша һоғонғанда танауына ҡаҙалған ҡаяуҙарҙың

ауырттырыуынанмы, балдың тәменәнме, ырылдап-ырылдап ебәргеләй ине.

Ашап туйғас, күл буйына төштө. Татлы ризыҡтан һуң һыу эскеһе килә. Һыуһыны ҡанғас, көнө буйы йылынған яҫы шыма таш өҫтөнә һуҙылып ятты. Күңеле күтәренке ине Тып-Тыптың. Яңы урынынан ҡәнәғәт ҡалды.

Егерме һигеҙенсе глава

**Бәхетле йәш ғаилә**

Йылдың уҙғаны ла һиҙелмәй ҡалды.Сираттағы йәй йылы, ризыҡҡа мул килде.Ҡуйы үләндәр Тып-Тыптың эҙҙәрен дә, үҙен дә йәшереп тота. Был һунарҙы күпкә еңеләйтте.Тыныс йәшәү, тамағы туҡ булыу арҡаһында ул көрәйеп, һимереп китте. Тиреһенең йөндәре ялтырап, ҡабырға тирәләре ҡарға ҡанатылай булып, ҡара төҫкә инде.

Бындай хәлдә ул мөхәббәт хаҡында уйлана башланы. Үҙенең нәҫелдәше янында наҙланғыһы, иркәләнгеһе килә. Уҙған йылда бер тапҡыр ғаилә ҡорғайны ул. Росомахалар ике йәш тулыу менән парлашыуға һәләтле була бит. Ул ғаиләһенең балаларын күтәрешкәндән һуң айырылыштылар.

Быйыл үрҙәр, таштар өҫтөндә мөхәббәт тамғалары ҡалдыра-ҡалдыра оҙон юлдар үтте Тып-Тып.Үҙәндәрҙе ҡыҙырҙы, тирә яҡ армыттарға үрмәләне, теге саҡ парлашҡан росомаханы осратманы. Әммә һырт тирәһендә икенсе бер нәҫелдәшенең эҙенә барып юлыҡты. Уның эҙҙәре шул хәтлем татлы, ылыҡтырғыс булып тойолдо Тып-Тыпҡа, ул хатта тулҡынланыуынан йыш-йыш тын ала башланы.

Аҙымдары, һикерәңләүенә ҡарағанда бик йәш росомаха булғанға оҡшай. Танауын алға һона биреберәк эҙ буйлап китте ул. Бына һейҙек билдәһен һалып киткән. Уны еҫкәп алған Тып-Тыптың башы әйләнеп китте, тәне буйлап татлы тулҡындар йүгереште. Шул еүеш тамға еҫенә ҡойонғоһо килде.Тып-Тып Һейҙек табының өҫтөнә ятып борғослана-борғослана ышҡынды, шунан бар донъяһын онотоп һикереп торҙо ла алға табан атылды.

Инә росомаханы ҡыуып еткәс, һоҡланыуынан ҡатып ҡалды. Күҙҙәре һуң, күҙҙәре! Шундайын да матур, яғымлылар.Тунының алтынһыу билбауы бар.Арлан инә росомаханы әйләнеп йөрөп ҡарарға, күҙләргә тотондо. Тегеһе быға иғтибар ҙа итмәй.

Бер аҙ тын алыбыраҡ торғандан һуң Тып-Тып йәнә үҙен таныҡҡыһы килде. Йүгереп барған ыңғай һауаға һикерҙе һәм шунда тәгәрмәс кеүек әйләнеп китте. Ергә баҫҡас, күҙе төшкән росомахаға өмөтлө күҙҙәре менән текәлде. Тегеһе, тағы ла әллә ниҙәр көткән һәм өмөттәре аңланмағандай булып, вайымһыҙ ғына ары китеп барҙы.

Кавалер ҡойроғон болғай-болғай унын артынан эйәрҙе.

Яҡынырак килэйем тиһә, росомаха ырылдарға тотона.

Тып- Тып ниәте бойомға ашмауға бик бошондо, әммә үҙенә иш табыу өмөтөн юғалтманы.

Көнөнә тиҫтәләгән саҡрым юл үтеп, эҙләнеп йөрөй торғас, ел уға йәнә ҡөҙерле еҫтәр еҫкәтеп үтеп китте. Шул еҫ килгән яҡҡа барып сыҡһа, йәш ярымлыҡ балаһын эйәрткән росомаха йөрөп ята.

Инәһе Тып-Тыпҡа бик яғымлы мөнәсәбәт күрһәтте. Ниәтенең етди икәнлеген белдерергә теләгән Тып-Тып унын янында үҙен һөйкөмлө итеп күрһәтергә тырышты.Унын һәләтен ҡабул иттеләр.Инә росомаха уға бик яҡын килеп еҫкәп ҡараны. Йәш росомаха ла шулай итергә маташҡайны, әсәһе уны ыржайып тыйып ҡуйҙы.

Танышып алғас йәнлектәр артҡы тәпәйҙәрендә үрә тороп, ҡап-ҡара танауҙары менән ышҡыныштылар, "үбештеләр". Төнөн бергәләп һунар итеүҙең уңышлы тамамланыуы был икәүҙең союзын йәнә лә эҫендереп ебәрҙе.

Иш табыу менән инә росомаха ҡыҙынан һыуына төштө. Яҡынлатмаҫҡа тырышты. Ике көн үтте тигәндә яныдарынан бөтөнләй ҡыуалап ебәрҙе. Аҙна тирәһе үткәс, Тып-Типтың үҙенә әхирәтенә хоҡуғын иҫбатлап, үҙе кеүек арлан менән алышырға тура килде. Ҡолағы йыртыҡ, моронондағы яра эҙҙәренә ҡарағанда көндәше һуғыш суҡмары булырға оҡшағайны.

Ул Тып-Тып янына ҡыйыу ғына килеп баҫты ла ҡаҙыҡ тештәрен ыржайтып ырылдарға кереште.Текләшеп киттеләр.Парлашҡандарҙың арһына килеп ҡыҫылыусы арлан росомаха Тып-Тыптың ҡарашындағы эске ныҡлығын тоҫмалламай ҡалманы, биреште һәм мығырлай-мығырлай ситкә тайпылырға мәжбүр булды. Ә Тып-Тып менән Наҙлыҡай мөхәббәт уйындары уйнап, бер-береһен иркәләп рәхәт сигеүен дауам итте.

Тайга йәнлектәре, ҡош-ҡорт өсөн йәй иң күңелле ваҡыт. Көндәр йылы, ризыҡ етерлек. Урман эстәрендә бер-бер артлы ер еләге, айыу балаңы,ҡара көртмәле, ҡыҙыл бөрлөгән, күк көртмәле бешеп өлгөрөп кенә тора.Тайганың мул бәрәкәте ҡор, сел,һуйыр себештәрен туйындырыуға ла етә.Терегөмөш кеүек йылғыр тейен, әлғәнйәктәр ҡышҡылыҡ өсөн запас туплай.

Йәй урталарында айыу, кеш кеүек йыртҡыстар ҙа вегетариан ризығына күсә. Беҙҙең парҙар ҙа шулар араһында. Уларҙың менюһына татлы, һутлы еләктәр, кедр сәтләүеге өҫтәлде. Улар иң бейек кедр ағастарына үрмәләргә лә йыбанманы, сөнки иң эре емле тубырсыҡтар нәҡ юғарыла бәүелешеп тора.Росомахалар уларҙы ергә өҙөп ташлай,

үрҙән төшөп тубырсыҡтарҙы бер урынға өйә һәм ҡушарлап ултырып алып, тештәре менән әрсеп емен ашай.

Бер саҡ улар йығып һалған ҡоралай янына бүре өйөрө килеп сыҡты.Был икәү улар менән алышырға ла әҙерләнгәйне, тегеләре танауҙарын сирып ары китеп барҙы. Был осор һәммә йән эйәһе туҡ шул.

* * *

Көҙ яйлап ҡына килеп инде тайгаға.

Төньяҡтан көтөү-көтөү ҡара болоттар ағылды, һалҡын ямғырҙар һибәләне. Тәүҙә ялҡау ғына яуған кеүек инеләр, торараҡ ҡойма яуындар башланды. Росомахалар шыршы ботаҡтары аҫтында йәшеренеп ятырға мәжбүр булды.Һыу тотош шаршау кеүек һибелә, яҡындағы ағастарҙың шәүләһе лә танылырлыҡ түгел.Иҫәпһеҙ-һанһыҙ тамсылар тыпылдашып тама ла йылғалар хасил итә.Тайга йәнлектәре шымтайышып ҡалған. Кедр сәпсектәре менән ҡарғаларға тиклем тауыш сығармай.

Көн йонсоуы оҙаҡҡа һуҙылды. Өс көн буйы туҡтауһыҙ яуған ямғырҙан тотош тайга лыс һыу булды, һыу хатта ағас ҡайыры араларына ла тулышты.Росомахалар ныҡ өшөнө.Тундары лысма һыу булыуҙан, бөтөнләй үк өшөмәҫ өсөн шыршы тамыры тирәһен соҡоп, шул ҡыуышҡа инеп ятты. Асығыуы сәбәпле өңөнән сыҡҡан Тып-Тыпты тайга һалҡыны менән ҡаршыланы. Яуын туҡтаған, ә ылыҫлы ағастарҙың энәләре быяла бирсәткәләр кейеп алған.

Һалҡын ел һыҙғыра. Ел ыңғайына айыу еҫе сағылып китте.Тып-Тып ул уҫлаптай һөмһөҙҙәр менән бәйләнмәҫкә тырыша. Ә уларҙан ҡалған ризыҡтан баш тартҡаны юҡ.

Айыу еҫе күл яғынан килә.

Росомаха һаҡ ҡына шул яҡҡа ыңғайланы . Туңып ҡатҡан япраҡтар өҫтөндә аяҡ эҙҙәре бар.Бер нисә урында туңған ҡан тамсылары ялтырай. Бәй, ана, айыу үҙе ерҙә ята.Ауыҙы асыҡ, аҙау тештәре тырпайып күренә. Аяҡтарын боҙ ҡаплаған. Артҡы аяғында оло-ғара ҡапҡан.Танауынан боҙлауыҡ сосорап тора. Йән биргән, бисара!

Ағас кеүек ҡаты, тарамышлы, ҡарт һутһыҙ итте ашап туйғас, Тып-Тып айыу түшкәһе янына Наҙлыҡайҙы ла эйәртеп алып килде. Туйынып алғас, түшкәнән алыҫ булмаған ергә урынлаштылар. Ҡырау иртәнсәк ағас ботаҡтарын, үләндәрҙе аҡҡа буяп сыға. Зөмрәт йәшел ҡарағайҙар, алтынланған япраҡлы ағастар тәбиғәткә ифрат матур төҫ бирә. Яҡындағы убаларҙы һырып алған ҡайындар ҙа алтынға ҡойоношоп ултыра. Уларҙың яңыраҡ ҡына йәп-йәшел булыуына ышанырлыҡ та түгел. Тик байрамдың ваҡыты ҡыҫҡа була. Ағастар көн һайын затлы

кейемдәрен сисеп, яланғаслана барҙы.Ергә түгелгән япраҡтар ер өҫтөнә биҙәкле келәмдәр түшәгән төҫлө.

Быйыл көҙ тейендәр йәйге күрмәлекһеҙ тундарын йәһәт кенә ҡышҡы тунына алыштырҙы. Был иһә тиҙҙән һалҡындар башланырына ишара.Шулай булды ла. Урман бер нисә көн эсендә тотош яланғасланып ҡалды һәм яҙҙы көтөп ойоуға сумды.Яңыраҡ ҡына ҡараңғы булған урындар яҡтырҙы.

Хәҙер бында аҫтан елдергән елдәр хужа.Улар япраҡтарҙы осорорға, берәр ергә илтеп өйөргә, соҡор-саҡырҙарға тултырырға тотондо.Ҡороған ағастар ел ыңғайына бәүелешеп йәлләүес ыңғрашып ҡуя. Тып-Тып урман тауыштарын тыңларға ярата.

Егерме туғыҙынсы глава

**Ҡыш**

Ҡыш башы үҙе һыуыҡ, үҙ ҡарһыҙ килде.Аҡһыл ҡояштың нурҙары йылытмай. Һыуыҡ тотош тәнде ҡурып алып бара.Ағас ботаҡтары, һыуыҡтан бешеләнеп, шартлап һына башланы. Ҡар юрғанын ябынып өлгөрмәгән ер ярғыслана. Һалҡын иһә шул ярыҡтар эсенә барып инеп, ағас тамырҙарын да зәғифләй, тупраҡ эсенә сумып ҡыш сығырға ниәтләгән бөжәктәргә лә көн юҡ.

Һыуыҡ, шул тиклем һыуыҡ. Ағас баштарында ултырған селдәр бер бер аяғын, бер икенсе аяғын ҡанаттары араһына тығып йылынырға тырыша. Ҡоштарҙың тәпәйе, тире ыштан кейҙерелгән кеүек, ҡуйы мамыҡ менән ҡапланған. Был ҡар өҫтөндө батып китмәҫкә лә ярҙам итә.

Тамаҡ туйҙырыу мәсьәләһе ҡыйынлашҡандан-ҡыйынлаша бара. Росомахалар көҙҙән йыйыштырып ҡуйған запасы менән туҡлана ине, улары ла тамамланды. Тып-Тып һирәк ағаслы урмандағы ҡыҙыл көрмәтле ботаҡтарына ағуналар, һуйыр һарығанын күргәйне.Бәлки улар әле лә шундалыр?

Булмай сыҡты. Йоҡа ҡар аҫтында бер генә өңөр ҙә күренмәй. Еләктәр ҙә юҡ.

Ҡыш уртаһы росомахалар өсөн ризыҡҡа иң наҡыҫ ваҡыт. Запас бөткән, ҡуяндар ҡар йоҡаҡ ерҙән йылғыр йүгереп ҡаса, тоттормай. Йәй туғайып алған боландарҙың да көсө етерлек. Тибенеп мүк менән туҡлана алалар. Ҡар бурап китһә әллә ҡайҙа бара алмаҫтар ине лә. Ә әлегә парлы ғаилә ҡалдыҡ-боҫтоҡ менән ҡәнәғәтләнергә мәжбүр. Ит эләкмәй, тиерлек, күбеһенсә һөйәк – һаяҡ. Унысының да иң тәмле ере – елеге йәшерен урында. Ярай ҙа тештәре ныҡлы.

Ҡар яуып, оҙайлы бурандар булып үткәс, хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрә төштө. Яҫы тәпәйле росомахаларҙың ваҡыты етте.Бурандар тыныу

менән Тып-Тып ҡайырҙарында мүктәре һәленеп торған пихта урманына табан ыңғайланы. Унда артҡы аяҡтары оҙонораҡ булыу сәбәпле бөкөрөрәк ҡиәфәтле, иҫ киткес һағышлы ҡарашлы ҡабарға боланы йәшәй. Тып-Тып уны бер нисә тапҡыр ҡыуалап ҡараны инде, эләктерә алғаны юҡ. Тапалған һуҡмаҡ буйлап елдереп ҡаса ла ҡотола.Хәҙер ул һуҡмаҡ юҡ, үтә шәп йүгерә алыуы икеле.

Тып-Тып йәйге һуҡмаҡтар киҫешкән урынды барып тапты һәм ҡабарғаны ҡарауылларға булды. Ҙур мамыҡ йомғағының уға табан осоп килеүен шәйләгән болан, нәҙек тояҡтары менән ҡарға бата-бата ҡаялар яғына ташланды. Тып-Тып уны ҡыуалап китте. Һикерекләгәндә ҡағылған ағас ботаҡтарынан ҡарҙар ҡойолоп ҡалды. Бер нисә минуттан ҡанға буялып бөткән һунарсы табышын Наҙлыҡайы янына алып китеп бара ине инде. Хәҙер инде улар икеһе лә асыҡмаясаҡ.

Ҡыштың биле һыныр ваҡыт та етеп килә. Әммә һалҡындар бирешерлек түгел әле. Ҡояштың да төҫөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе һәм яҙ сәләмдәрен килтерәсәген белдереп, яғымлылана төштө. Яҙҙың яҡынлашыуы яҡшы хәбәр. Наҙлы тиҙҙән көсөкләргә йыйына. Көндәрҙең береһендә ул Тып-Тыпты ҡар ҡаплаған ышыҡ мәмерйә тирәһенә алып китте. Бер аҙ япраҡ, бер аҙ сыбыҡ-сабыҡ түшәлгән таштар өҫтөндә бушанырға әҙерләнде Наҙлы.

Утыҙынсы глава

**Сабыйҙар**

Наҙлы төнөн бушанды. Өс матур ғына көсөк тапты ул.Бәхетле әсә сабыйҙарын башынан алып ҡойроғона тиклем ялап таҙарындырҙы. Тәүге осор көсөктәр йөнһөҙ ине. Тәндәре яланғас, тәпәйҙәрендә генә йөн ишараты беленә.

Сабыйҙар әсәһенең ҡорһағынан айырылмай, йә имә, йә морондарын төртөп йоҡлай.Хәҙер тамаҡ яғын ҡайғыртыу тик Тып-Тыптың ғына өҫтөндә.Болан үләкһәләре осраштыра ла, йәш ит артынан йүгерекләргә тура килә. Һунарға ул таҙарынып сығырға тырыша. Ҡарҙа ятып аунап әсе еҫенән ҡотолорға маташа.

Елһеҙ, һибәләп кенә ҡар яуған көндәрҙә уның һунары яҡшыраҡ уңа.Бигерәк тә ҡар бөртөктәре эре, үҙҙәре яй һибәләгәндә һәйбәт, яҡтылыҡ кәмей. Танауы еҫкә сос Тып-Тып табышын еҫенән таный.

Көндәрҙең береһендә Тып-Тып янғындан һуң үҫеп сыҡҡан ағаслыҡҡа килде. Ағаслыҡ шишмә ярына барып терәлә ине. Ҡарҙы еҫкәй торғас, ул һорғолт таптарға юлыҡты. Мышы эҙҙәре!

Бейек ағаслы урманда йөрөгән саҡтарында ағас ботаҡтарына буйҙары етмәү сәбәпле асығышҡан мышылар был тәпәшәк ағаслы ергә кисә генә килеп ингәйне. Улар ылыҫ тубырсыҡтарын, ҡарама ботаҡтарын

кимерергә тотондо.Ҡайһы бер бөрөлә ботаҡтарҙы эйештереп ике бото араһына ҡыҫтыралар ҙа кинәнеп тамаҡ туйҙыралар.

Аслыҡтан миктәгән йәнлектәр бер урындан икенсе туҡлыҡлыраҡ ағастар тирәһенә күсенер алдынан ятып-ятып ял итеп алалар. Арыҡ арҡалары ҡалтырашып тора. Уларҙың сараһыҙ һәм көсһөҙ булыуын һиҙенгән Тып-Тып берәрһенең өҫтөнә һикерергә ниәтләне.Бына бит, балалаған әсә өсөн кәрәкле йәш ит яҡында ғына йөрөй.

Росомаханың килә ятҡанын һиҙеп ҡалған мышылар бер ергә өймәкләште. Тәрән ҡарға батып баҫҡан мөгөҙлө үгеҙҙәр үҙҙәренең иң шәп ҡоралы тояҡтарын эшкә егерлек түгел ине. Тып-Тып саҡ ҡына ситтәрәк торған ныҡ ябыҡ быҙау тирәһенә яҡынлашты.Йәшен тиҙлеге менән арҡаһына һикерҙе һәм тимер кеүек тештәрен ҡорбанының елкәһенә батырҙы. Үгеҙ быҙау уны һелкеп төшөрөргә маташып ҡараны, башын , кәүҙәһен борғосланы, әммә һөҙөмтәһе булманы...

Үгеҙҙең йән биреүен аңлағас, росомаха тантаналы ырылдау өндәрен сығарып алды һәм, өйөрөлөшөп торған көтөүҙең күҙ алдында ҡорбанының итен сәйнәп тә тормай һоғонорға кереште. Шунан ҙур ғына киҫәк итте умырып өҙөп алып, ғаиләһе янына ашыҡты.

Наҙлы менән балалары һыйынған мәмерйә тунеле буйлап ул ырылдай-ырылдай атланы. Тегеләре уның тауышын ишетеп йәнләнешеп китте. Теше лә сығып өлгөрмәгән көсөктәр итте еҫкәй-еҫкәй ялай башланы, умырып ашай алмайҙар ине әле. Уның ҡарауы әсәләре күстәнәсте бер ултырыуҙа һыпыртып та ҡуйҙы.

Егерме көн тигәндә көсөктәрҙең кәбәге асылды, әммә зәңгәрһыу яҫмағы асылмағайны әле.

Ҡыш нисек кенә ҡарышмаһын, йоҡоһонан уянған ҡояштың йылы нурҙары тайгаға йәнә яҙ килтерҙе. Йылы ямғырҙар тейәп алған болоттар күрттәрҙе, ҡар өйөмдәрен “ашап” та ҡуйҙы. Көндәр ултырып, йылытып ебәрҙе. Наҙлы апрель елдәре тау итәктрен, үрҙәрҙе киптереп сыҡты. Ҡарҙан әрселгән ерҙәрҙә зәңгәр умырзыялар баш күтәрҙе. Улар тирәһендә һағыҙаҡтар гөжөлдәшә башланы. Ағастар ҙа йәнләнешә төштө. Аҡһыл йәшел селтәр шәлдәренә төрөндө, ҡайындар татлы “йәш”тәрен һарҡытты, ҡарағай ботаҡтары осона алһыу-көрән шәмдәр ҡунаҡланы.

Урманды йоҡоһонан уятырға теләгәндәй, тумыртҡа туҡылдай. Ул, бахырҙарҙы тәбиғәт һөйкөмлө тауыштан мәхрүм иткән, шуның өсөндөр-ме, ата тумыртҡалар инә тумыртҡаны сыраланған ағасты сиртеп, шуны тауышландырып әүрәтә.

Әлегә нығынып бөтмәгән көсөктәрен Наҙлы иреккә эйәртеп алып сыҡты.Яҡтылыҡ ныҡ аптыратты көсөктәрҙе, күҙҙәре сағылышып китте.

“Иркен икән дә донъя! Төçтәре матур! Күккә йылы, наҙлы шар эленгән, ул шундай йылы!”- тип уйлағандыр, моғайын, көсөктәр.

Улар таштарҙы, кедр төбөндә шытҡан йәш үçентеләрҙе еçкәп ҡараны. Әсәләре ылыç сайырын өҙөп ҡабып сәйнәргә тотондо, көсөктәр ҙә уға эйәрҙе.

Тыштан бер-береһенә оҡшаш булһа ла көсөктәрҙең холҡо төрлө-төрлө ине. Өлкәне тыныс, яйыраҡ, күберәк ятырға ярата.Кесерәк һеңлеләре, киреһенсә, хәрәкәтсән. Тамаҡтары туйһа көрмәкләшеп китәләр, ҡыуышып уйнайҙар, тәкмәс аталар,шундай йылғырҙар, һөйәкһеҙ йомғаҡ кеүектәр.

Уларҙың тапаныуҙары, тәгәрләүҙәре арҡаһында өң ауыҙы шымарып бөткән. Ағаларын да хәрәкәт иттереү маҡсатынан, уның йә ҡолағын тешләп, йә ҡойроғона ҡағылып шаяралар. Ә тегеһе ихлас итеп танауын сирып ҡына ҡуя.Һирәк-һаяҡ асыуланып ырылдай.

* * *

Тамаҡ яғын ҡайғыртҡан арала Тып-Тып сабыйҙарына тәрбиә биреп тә өлгөрә. Ул көсөктәрен шым ғына йөрөргә, ерҙән шыуышырға, боçоп ятып уңайлы мәлде көтөргә һәм табышҡа йәшен тиҙлеге һәм теүәллек менән ташланырға өйрәтә.Һабаҡтар көн һайын алып барыла, сөнки көҙгә саҡлым көсөктәр үҙ тамаҡтарын үҙҙәре туйҙырыуға әҙер булырға тейештәр.

Бик талапсан уҡытыусы ул Тып-Тып.Сәбәләнеп сарылдауға иғтибар итмәйенсә, тыңламай маташыусыға тәпәйе менән әләктереп алырға, ырылдап шелтәләргә генә тора. Шелтәләнеүсе ҡурҡышынан ергә һыйына һала.Бындай саралар ғына ярҙам итмәһә, көсөктө маңлай йөнөнән әләктереп күтәреп, ныҡлы ғына һелкеткеләп тә ала. Балаларына уны тыңлауҙан, өйрәткәндәрен ҡабатлау һәм үҙләштерергә тырышыуҙан башҡа сара ҡалмай. Улар аталарының һәр ымын, һәр ҡарашын аңлап тора.

Һунар итергә өйрәткәндә ул практик “дәрестәр” ҡулланды. Табышын көсөктәре янына тере көйө алып килә лә һәммәһен дә янына йыя.Был мәсьәләлә иң йылдамы - ағалары. Ул йәнлеккә беренсе булып ташлана һәм тегеһе йән биргәнсе әүһәләй. Бер саҡ аталары ағуна ҡанатын килтереп һалды. Өлкәне тере булмаған табышҡа илтифат итмәне. Һеңлеләре иһә ҡауырһындарға ҡарап тулҡынланыу кисерҙе. Шунда уҡ ергә яттылар ҙа ҡош янына шыуышып килә башланылар. Тәпәйҙәрен ергә терәп алып ағуна ҡанатын икеһе ике яҡҡа тартҡылырға кереште. Ағас башындағы ҡарғаның ҡарҡылдаған тауышы ишетелгәс, шымып ҡалдылар. Аталары баш сайҡағандай итте: “Нишләп шул ҡарғанан ҡурҡаһығыҙ! Хәүефе юҡ!”- тимәксе ине буғай. Һабаҡ

артабан да дауам итер ине, ямғыр һибәләй башланы һәм Наҙлы балаларын ышыҡҡа алып инеү хәстәрен күрҙе.

... Йәшен һуғып яралаған ҡарағай башынан тамсы тамған тауышҡа оҡшаған өндәр сығып ҡалды. Тып-Тып ҡолағын ҡарпайтты. Минут тирәһе ваҡытҡа тынлыҡ урынлашты һәм тыпылдаған тауыш йәнә ҡабатланды. Таныш өндәр: шығырлау, йышыу, игәү тауыштары сыға. Һуйыр!

Эләктерә алһаң, бер өс көнлөк ризыҡ инде ул!

Әтәс һоро-көрөн ҡанаттарын һәлендереп түбәндәге генә ботаҡҡа ҡунаҡлаған да донъяһын онотоп мөхәббәт хаттары туҡылдата.Башта тел сартлатып торҙо, шунан тәтелдәргә тотондо һәм яңғырауыҡлы сутылдауға күсте. Йырҙарын ул өс-дүрт секундлыҡ игәү тауыштары менән тамамланы.Быңдай илһамлы саҡтарында һуйыр бер кемде лә күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Ҡыҙыл ҡашлы, йәшел муйынлы ҡара башы һелкенеп тора, веер кеүек тырпайған ҡойроғо дерелдәп, тауыштар сығара.

Тып-Тып ерҙән шыуышып, ағас янына яҡын уҡ килеп етте. Ауып ятҡан түмәргә баҫып, һуйырҙың өҫтөнә ырғырға ғына иткәйне, түбәндән генә ҡытҡылдай-ҡытҡылдай ерән төҫтәге инә һуйыр осп үтте. Росомаха боҫа бирҙе. Инә һуйыр, йырлап ултырған әтәскә иғтибар итмәй генә, күрше ҡарағйаға барып ҡунды һәм йәш тубырсыҡ бөрөләрен сүпләргә тотондо.

Тып-Тып тынысланды. Әтәстең йәнә башын күтәреп үргә текләүе булды, Тып-Тып уға табан атылды. Талпынған ыңғай еүеш бүрәнә өҫтөндәге аяҡтары тайып китте һәм ул һуйырҙың аҡлы-ҡаралы ҡойроғонан ғына эләктерә алды.Һуйыр иһә оҙон ҡанаттары менән ҡағынып, юғарыға осто, уңышһыҙлыҡтан йәне көйгән росомахаға икенсе табыш эҙләүҙән башҡа сара ҡалманы.

Ул арала урман тынлығын ҡауышыу ләззәтенән башын юғалтҡан ағуналарҙың шарҡылдау тауышы телеп ебәргәндәй булды.Былар бер ағастан икенсеһенә осоп ҡуна-ҡуна күҙҙәре төшкән тауыҡтар алдында

шәплектрен күрһәтеп ҡытҡылдаша. Был юлы Тып-Тып яҙлыҡманы. Ике ағуна бер һуйыр хәтлек була ул. Бер ағунаны ул үҙе ашаны, икенсеһен өңөнә алып китте.

Май аҙағында росомаха ғаиләһе үҙәнгә төштө. Йылға яры буйындағы ағастар йәшәргән, урмандан ҡош тауыштары ишетелеп тора.

Көсөктәр үҫеп, нығынып китте. Өс ай тигәндә улар тышҡы ҡиәфәте менән ата-әсәһенән айырылырлыҡ түгел ине.Бары ауырлыҡ яғынан ғына ҡалышалар: ата-әсәһе уларҙан дүрт тапҡырға тиерлек ауырыраҡ. Уңышлы һунарҙан һуң тамаҡ туйҙырып алғас та уйынға һалышып китәләр. Тәкмәс аталар, өсәүләшеп көрмәкләшәләр.

Йәйҙең йылы оҙон көндәре мәшәҡәтһеҙ ағылды ла ағылды. Ғаилә ғәҙәттә ҡарағай тамыры аҫтынан ағып сыҡҡан шишмә янында ял итергә ярата. Серекәй, ләпәкәйҙәр ҙә бында аҙыраҡ, эҫе көндә - һалҡынса. Шишмә ауыҙы янындағы яҫы ташта йыландар йомарланып ятып йылына.Росомахаларҙың яҡынлашыуы була, йыландар ыҫылдашып төрлөһө-төрлө яҡҡа шыуышып ҡаса башлай. Росомахаларҙың йыландарҙа эше юҡ. Ризыҡ былай ҙа етерлек.

Июль тирәләрендә, еләктәр бешкәс, рсосомахалар янғындан һуң саҡ үҫеп килгән йәш ағаслы урманға күсенде. Тәүге булып айыу баланы өлгөрҙө. Тәпәш кенә көрән ботаҡлы ҡыуаҡтар тулы ҡарағусҡыл-күк емештәр ялтыраша, япраҡтары ла күренмәй. Шуларҙы ашап алғас, росомахалар ергә һуҙылышып ята һәм тегеләй ҙә, былай ҙа борғоланып ҡояшта ҡыҙына.Рәхәтлектән ҡойроҡтарын болғап ҡуялар.

Сентябрь башында көтөлмәгәндә ҡар яуып ебәрҙе. Япраҡ ташламаған ағастарҙың ботаҡтары, ауырлыҡты күтәрә алмай, ҡайырылып киткеләне һәм ҡыуыштар хасил итте.Йәш көсөктәр ҡарҙы күреп шатланыша ине. Улар ҡарҙа борҫалана, тундарын таҙартырға тотондо. Эйешкән ботаҡтарға үрмәләп, түбәнгә шыуып төшөп уйнай. Уларға һалҡын ҡарҙың табандарын ҡытыҡлауы ла ҡыҙыҡ кеүек күренә. Әсәләре сырылдап орошҡанға тиклем пыр туҙалар.

Һыуыҡтар төшөү менән Тып-Тып ғаиләһен ҡалдырып, яңғыҙы ғына ҡыҙырыныуға бирелде. Армыттар, шишмә буйҙарында һемтәңләне, тамаҡ ялғарлыҡ бер нәмә лә осратманы. Ялҡау ҡыймылдаған ағуналарға ғына риза булырға тура килде.Ике аяҡлылырҙың һуҡмаҡтары, улар ҡыуыштарҙа ҡалдырған ризыҡ иҫенә төштө.Был еңел табыш уға тынғылыҡ бирмәй ине.

## 111 бүлек

## Ҡ айтыу

*Януарҙарҙы юҡ итеү – кешегә унын үҙен киләсәктә нимә көтөрөнә ишара ул.*

*Бернгард Гржимек*

Утыҙ беренсе глава

### Әсирлек

Сираттағы килеүендә даға Степанға һунар идаралығының бандеролен алып килде.

- Степан Ермилович, бурысығыҙҙы түләп бөтмәнегеҙ, һуңлатҡан өсөн проценттары өҫтәлә бара бит, - тип иҫкәртергә лә онотманы.

- Беләм мин, беләм. Түләрмен. Һин дә Маврҙы кире ҡайтарырға тейешлегеңде онотма, - тип яуапланы Степан

- Әйттем дә баһа, ҡасты ул минән. Шунда уҡ ҡасты.

- Уныһы һинең проблема.Миңә ҡайтманы.Һинән дә проценттар алаһы бар.

Даға нимәлер тип яуап бирергә итте лә кире уйланы һәм ашығып сығып китте.

Степан бандерольды асып ҡараны. Бер нисә төргәк иҫәп-хисап бланктары һәм берәр росомаха аулап алып, ҡалаға килтереүҙе һораған хат ебәргәндәр. Айырым ҡумтаға йәнлекте йоҡлата торған капсула һәм уны файҙаланыу ҡулланмаһын һалғандар. Йәнә идаралыҡҡа уның исеменә мотоцикл килеүен иҫкәрткәндәр.

Яҡшы хәбәрҙәр!

Күңеле күтәрелгән охотовед тайгаға сығырға әҙерләнде. Ир-аттарҙан һуңғы тапҡыр росомаха эҙҙәрен ҡайһы тирәлә күреүҙәрен һорашты һәм уның Башлы Шәкәр артылышында булыуына төшөндө.

Артылышта росомаха эҙҙәре ысынлап күп булып сыҡты. Өс амбар рәтләне, икәүһенә һуйыр ҡанаттарын һалды, береһенә йәш болан итен ҡуйҙы. Шуныһына ике капсула йоҡо дарыуы ҡушты.Амбарҙар араһына ла арбауыс ташланы.Үҙе шыршы ботаҡтарын түшәп, тиренән тегелгән йоҡо ҡапсығын кейеп әрәмә араһына боҫто.

Росомаха шул уҡ төндә килеп тә сыҡты.Охотовед уның ем тирәһендәге ҡарға таяҡ тыҡҡыслап ҡарағанын аңланы, әммә емгә теймәгән, кире киткән. Степан уның һунарсыларҙың һуҡмағындағы арбауыстар менән һыйланып, өйҙәренә барып бола ҡуптарып йөрөгән росомха икәнлегенә инанды.

“ Ә нишләп кире китеп барҙы һуң әле ул? Нимәне оҡшатманы? Ҡапҡандың булмауы шикләндерҙеме икән ни? Хәҙер кире боролоп килере икеле”.

Яҡтырғас, Степан ҡыуыштан йоҡо дарыулы арбауысты кире алды ла икенсе урынға юлланды. Ул унда ла росомаха эҙҙәрен тап иткәйне. Яңы ҡоролмалар ҡороп, ҡыуыш янына ҡапҡан һалды.

Икенсе төн буйы ҡарауыллауының да фәтеүәһе булманы.Арбауысты әллә йәнә лә күсерергәме, тип тә уйланы, әммә өсөнсө төнөндә уға уңыш йылмайҙы.

Итле амбар янына яҡын барыр алдынан росомаха байтаҡ ҡына түңәрәк яһап әйләнеп йөрөнө. Яҡынлай-яҡынлай барып еҫкәнде.Ботаҡ

һындырып алды, уны тимер ауыҙға ҡаптырғас, итте әләктереп тә алды. Ашаны ла һикерәңләп артабан китеп барҙы.

Егерме минут тирәһе көтөп торғас, Степан был йәнлектең аҡыллы хәйләһенә хайран ҡалып, уның эҙе буйлап ыңғайланы. Икенсе ҡыуыштағы итте лә ашап ҡуйған росомаха үҙән яғына юл тотто. Һикереүе ҡыҫҡара бара.Дүрт йөҙ метр тирәһе ара үткәс, Степан йығылған ағас өҫтөндә ятҡан росомаха янына барып сыҡты. Һунарсыны күргәс, ул ҡалҡынды, бер нисә аҙым атлауы булды йәнә ауып китте. Степан уның тәрән йоҡоға талыуын көтә биреп торҙо һәм тегеһе ҡуҙғалмай башлағас, янына килде. Росомаха уны һиҙмәне лә.

Степан был көрәйгән, һөйкөмләнгән, һылыуланған януарҙың Тып-Тып икәнен, түшендә аҡ тамғаһы булмаһа, һис танымаҫ ине.

Дағаның маҙаһын бына кем ҡороҡҡан икән! Бына һиңә Тып-Тып! Тайганың үс алыусыһы! Робин Гуд!

Януар уянмаҫ элек һунарсы уның тәпәйҙәрен сырмарға ашыҡты.Артҡыларын алғыларына ҡуша бәйләне.Башына беше туҡыманан тегелгән тоҡ кейҙерҙе. Ҡар өҫтөнә шыршы ботаҡтарын түшәп, росомаханы шунда һалды ла арыраҡ ҡалдырып киткән әйберҙәрен алырға тип йүгерҙе. Ашыҡты, сөнки препараттың көсө бөтөүе ихтимал.

Хәрәкәтләнмәгән йыртҡыс тиҙ генә өшөп бара, шуға ла уны йоҡо ҡапсығына һалды һәм таҡырыраҡ юл һайлап, ҡышлаҡ өйөнә табан ашыҡты.

Уянып киткән Тып-Тып үҙенең ҡайҙалығын, нимә булыуын аңлай алмай аптыраны. Ҡараңғы, йомшаҡ ҡына бәрелеп хәрәкәт итә. Шунан уны кемдер күтәреп алды һәм ниндәйҙер ҡаты нәмә өҫтөнә ауҙарҙы. Башындағы тоғо шыуып төштө һәм күҙе яҡтылыҡтан сағылды.Төтөн еҫе сыҡҡан бүрәнә өйҙә ята.Өй уға таныш. Улар Мавр менән икәүләшеп ошо өйҙө һаҡланы бит.Маврҙың хужаһы ла бында, рсосомаханы күҙәтә.

“Этен мин үлтергән тип уйлайҙыр. Шуның өсөн үс алғыһы киләлер. Мавр насар ит ашап ҡына харап булды бит. Быны уға нисек аңлатырға һуң?”

Тып-Тып аяғүрә баҫмаҡсы булды. Шул рәүешле дуҫтана мөнәсәбәтен белдерерлек хәрәкәттәр менән, үҙенең ғәйепһеҙ булыуын аңлатырға теләне.Тик ныҡлы тышауы ҡуҙғалырға бирмәне.Ул ҡотолорға теләп тегеләй ҙә былай ҙа борғоланырға кереште. Көсәргәнеүҙән көҙән йыйырған кеүек тартыша башланы. Степанды был хафаландырманы. Әсир төшкән бүтән януарҙарҙың да тетрәнеүҙән шундай хәлгә төшөүен ул белә. Тартышыуы һирәгәйә төштө һәм януар тынысланды. Степан росомаханың янына килде һәм ҡаршыһына ултырҙы.

- Тып-Тып, ҡурҡма! Мин һиңә яуызлыҡ ҡылмам. Таныйһыңмы мине? – һунарсы януарҙың арҡаһынан һыпырҙы.

Тып-Тып йәнә кешегә эттең һәләк булыуында уның ғәйебе юҡ икәнен белдерергә маташты. Степан да быны аңлағандай булды, тик үҙенсә юраны:

- Беҙ, Тып-Тып һинең менән дуҫтар, тик мин һине ирекке ебәрә алмайым. Зоопаркка барырһың. Унда һине ас итмәҫтәр. Һиңә бында ҡалырға ярамай. Этлегең күп булған. Иртәме-һуңмы, һине барыбер үлтерерҙәр ине. Ә зоопарк һинең өсөн ҡотолоу урыны.

Януар тыныслана төштө. Степанға ул уны аңлаған кеүек тойолдо.

Ҡышлау өйөндә ҡундылар ҙа иртәгәһенә ауылға юлландылар. Степан Тып-Тыпты тимер ситлеккә ултыртты һәм Дағa килә торған 5 декабрҙе көтә башланы. Степандың Дағаға бик инәлгеһе килмәй ҙә ул, бүтән юл юҡ, януарҙы ҡалаға илтеп тапшырырға кәрәк.Йәнә шул аласағын таптырып мыжыр инде мыжыуға.Мавр хаҡында ла ҡабатлап һүҙ ҡуйыртҡыһы килмәй.

Был юлды Тып-Тып ғүмерлеккә иҫендә ҡалдырҙы. Соҡор-саҡырлы юл шул тиклем һелкетә, етмәһә, машинаның газ еҫе уҡшытып алып бара. Тимер ситлеккә бәрелеп-һуғылып барыуҙан ҡабырғалары ауыртып бөттө.

Ҡалала Степан һунар идаралығы хеҙмәткәре менән осрашты һәм улар икәүләшеп росомаханы аэропорттың багаж бүлегенә тапшырҙылар. Хушлашыр алдынан һунарсы януарға боролоп ҡараны.

- Бәхил бул, Тып-Тып! Яңы урының ҡот-бәрәкәтле булһын!

Үҙҙәренең ярайһы ғәҙәти булмаған көсөргәнешле шарттарҙа йәнә осрашаҡтары хаҡында Степан белмәй ине әле.

Утыҙ икенсе глава

## Әсирлек

Зоопаркта Тып-Тыпты айырым бүлмәләге тимер ситлеккә урынлаштырҙар. Көнө буйы янына күк халатлы кешеләр килеп йөрөнө һәм һоҡланып ҡарар булдылар:

- Матурҡай!

- Тиреһен күр! Ҡуйы, ялтырап тора!

- Беҙҙә быңдай росомаханың булғаны юҡ ине әле!

Ике аҙналыҡ ялҡытҡыс карантиндан һуң, вер账ринария врачы күҙәтеүе аҫтында Тып-Тыпты иркен вольерға күсерҙеләр. Тимер ситлеккә

яҙыу элделәр: “Росомаха. Һуҫарлылар ғаиләһенең иң эре януары. 4 йәштә. Исеме- Платон”.

Тып-Тыптың уң яғында ла, һул яғында ла бүтән тайга йәнлектәре ултыртылған ситлектәр теҙелешеп киткән. Тар ситлектән азат ителеп иркен вольерға килеп эләккәс, Тып-Тып майҙандағы тәбиғи таштар, ағастар өйөмөн ҡарап сыҡты. Сығып ысҡыныр урын эҙләп, стенаға ташланды. Ҡастың ти, ҡасмай ҙа ни! Селтәрле тимер стена ҡамауында ҡалған.Ул тимер иләкте теше менән сәйнәп маташты. Бер тешенең эмале сайралды, шул ғына булды.

Ул селтәрле стена буйлап үргә үрмәләп тә ҡараны, баш өҫтө лә ҡамаулы икән.Тырнаҡтарын батырып ерҙе соҡорға кереште, тик ни бары бетон иҙәнгә генә барып төртөлдө.Был тар биләмәнән ҡотолоу юлдары юҡ икәнен аңлаған Тып-Тып төшөнкөлөккә бирелде.Алдына ҡуйылған ит киҫәген ашап ҡуйҙы ла ағас өңгә инеп ятты.

Төн мәшәҡәтһеҙ үтте.Иртәнсәк ығы-зығы башланды. Вольерҙар араһына төрлө ҡиәфәттәге ике аяҡлылар килеп тулды. Уларҙан Тып-Тып бығаса бер тапҡыр тап итмәгән еҫтәр килә. Кешеләр уның ситлеге тирәһендә өймәкләшә. Башта бығa борсолғайны, торараҡ иғтибар итмәҫ булды.Берәрһе ныҡлы ғына йәнен көйҙөрһә, ырылдап ризаһыҙлығын белдерҙе һәм өңөнә йәшенеү яғын ҡараны.Берҙән-бер генә ике аяҡлы кеше оҡшай ине Тып-Тыпҡа. Был күк комбинизон кейгән аҡ һаҡаллы кеше уға ризыҡ килтерә, вольерҙарҙы йыйыштыра.

Унан уң яҡтараҡ инә бүре көн итә.Ул яҙмышына күптән күнгән. Үҙенә таш ташлауҙарына ла иҫе китмәй. Иртәнән кискә тиклем тәпәйен башы аҫтына һалып һуҙылып ята ла килгән-киткән кешеләрҙе күҙенән үткәрә.Кис еттеме, тирә-яҡҡа шом һалып, йәлләүес итеп олорға тотона. Икенсе вольерҙарҙа йәнлелек. Алтын төҫөндәге шәшкеләр айырым ситлектәргә урынлаштырылған, уларҙан алыҫ түгел үҙ мәртәбәһен белгән һауалы кештәр йыбырлаша.

Таң атыуға “Платон!Платон!” тигән тауыш ишетелгәс, Тып-Тып ағас ояһының ерен соҡоп яһап алған өңөнән килеп сыға. Оҙон буйлы, битен аҡ йөн баҫҡан кеше уға арбаһынан алып ит бирә һәм һөйләшеп тора.Уның һөйләгәнен Тып-Тып аңламай, ләкин тауышындағы иркә ноталар уға бәхетле бала сағын иҫкә төшөрә.

Бер саҡ Аҡ һаҡал вольерға тимер шар алып килде.Тып-Тып уны шунда уҡ тәгәрләтергә тотондо. Шунан уны осло тырнаҡтарына эләктереп күтәреп алды һәм түшенә ҡыҫты ла шул көйө башы аша тәкмәс атып китте.Шуны әллә нисәмә тапҡыр ҡабатлап ҡуйҙы. Үҙенең яңы һөнәренә үҙ шатланған Тып-Тыптың күҙҙәре ялтырап китте. Был үҙенә лә, ризыҡ ташыусы кешегә лә оҡшаны һәм ул уны ихлас йылмайып күҙәтеп торҙо.

- Вәт беҙҙең Платоша оҫта! Цирк артисымы ни! Ә һин ашыҡма, ашыҡма!- тип һөйләнде Аҡ һаҡал. – Росомахаларҙы яуыз йыртҡыс тигән булалар, ана бит, бала-саға кеүек ҡыуана, уйнай!

Туҡлыҡлы ашау, иркенлек, вольерҙың уңайлыҡтары яҡшы булһа ла берәҙәк тормошҡа өйрәнгән Тып-Тып барыбер ирек, азатлыҡ хаҡында хыялланды.Күҙен йомһа, урман аралары, йылғыр шишмәләр, уңышлы һунар, иркә, наҙлы әхирәте иҫенә төшә.Был хәтирәләр йәнен өйкәй һәм азатлыҡҡа сығыу хыялын көсәйтә.

Ҡояшлы оҙон көндәр башланды, вольер тирәһенә бәләкәй буйлы ике аяҡлылар эркелешә башланы.Уларҙың ҡысҡырышыуы, гөж килеүе йәнлектәрҙең маҙаһына тейҙе. Тып-Тып та тынысһыҙлана төштө. Күп ваҡытын өңөнә ҡасып үткәрер булды.

Ә бер көндө зоопарк йәнлектәренә ризыҡ бирмәнеләр.Эңер төштө, ә уларҙы ҡараусыларҙың береһе лә күренмәне. Режимлы туҡланыуға күнеккән януарҙар ырылдаша, сыйылдаша, тимер селтәрле стенаға ташлана башланы.

Зоопарк тирәһендә иртәгәһенә генә ризыҡ тәме һиҙелде. Аяҡ, тәгәрмәс тауыштары ишетелде. Ике кеше килеп күренде, араларында Аҡ һаҡал юҡ.Арбаға ике мискә өйрә,һыу фләге, бер йәшник ит тейәгәндәр. Уларҙы кешеләр һөйләшә-һөйләшә таратып йөрөнө.Арбаны этеп йөрөгән берәү Тып-Тыпҡа оҡшаманы. Күҙе балыҡты ҡы кеүек, ирене йоҡа ғына, ауыҙын салшайтып йылмая. Бигерәк тә еҫе тәмһеҙ, насар кеше икәнен һиҙҙереп тора. Росомахаға ит киҫәге ташланылар ҙа кешеләр ары киттеләр.

Иртәгәһенә Балыҡ Күҙ йәнлектәр янына бер үҙе генә килде.Тып-Тыптың янына еткәс, ҡысҡырып уҡып ҡуйҙы:”Росомаха...Платон”.Ҡапҡа янына йәнә бер бәләкәйерәк хәрефле яҙыу эленгәйне: “Ингәндә-сыҡҡанда ишекте бикләп йөрөргә”.

Балыҡ Күҙ Тып-Тыпҡа теклəп ҡарап торҙо:

- Платоон – һинән тегеп була яҡшы шаапон! – тип ҡуйҙы һәм көлөп ебәрҙе. Рифмалай йәнәһе берәү!

Тып-Тып шар тәгәрләтеүен белде.

- Йә нисек, туған, бушлай килеп торған ризыҡты ашап йәшәү күңеллеме? Уйнап тик йөрөйһөң, эйеме?

Уйынсаҡ, йыуаш кеүек күренгән “айыу балаһы” янына ингәндә Балыҡ Күҙ ҡапҡаны йоҙаҡлап торманы, ябып ҡына ҡуйҙы ла вольер эсен йыйыштыра башланы. Шул саҡ һоро төҫтәге йәшен ҡапҡа ярығына атылды һәм оҙон-оҙон итеп һикергеләп, вольер аралары буйлап һыпыртты.

Утыҙ өсөнсө глава

**Азатлыҡ!**

Урамға атылып сыҡҡан Тып-Тып осаһын юғары күтәреп елдереүен белде, уның хатта тәпәйҙәре ергә лә теймәгән кеүек ине. Кешеләрҙең ҡысҡырышыуы, тегенән дә, бынан да геүләп килеп сыҡҡан машиналарҙың геүелдәүе араһынан елдерҙе лә елдерҙе росомаха.Юлында осраусылар ҡурҡышып ситкә тайпылышты. Күҙе янып торған Тып-Тып ысынлап та ҡот осҡос ҡиәфәттә ине. Ҡыҙыл ут янған бағана янында тәгәрмәсле өй саҡ-саҡ Тып-Тып өҫтөнә килеп менмәне.(Түңәрәк йөҙлөнөң шундай өйө бар. Уныһын хәтерләй Тып-Тып).Тып-Тып ҡурҡыуға ҡалды.Был ҡырмыҫҡа иләүе кеүек гөжөлдәп торған урындан ул сығып китә алмаясаҡ. Берәр ышыҡҡа йәшенергә лә төндө көтөргә тура килер.

Төнгө һиллек урынлашты.Сығып тайырға кәрәк был мәшхәр араһынан.Ҡыйыулығын туплап, фонарҙәр яҡтыһына килеп сыҡты росомаха һәм тәбиғи инстинкты уны үҙенең биләмәһе йәйрәгән төнъяҡ-көнсығышҡа табан йүнәлергә әйҙәне.

Таңға табан күп күҙле таш йорттар артта ҡалды, уларҙы тәпәшәгерәк өйҙәр алыштырҙы. Ә улар артында урман кәүҙәләнде. Тиҙерәк шунда барып етһә, урман уны йәшерер ул! Ап-аҡ зифа һынлы ҡайындар араһына барып ингәс, Тып-Тып атлауға күсте.Саф һауаны һулай-һулай тәбиғи шарттар әйләнәһенә н рәхәт сигә ине януар. Юлында сөрөкләнгән төпһәләр, бейек-бейек абаға үләндәре осраны.Тып-Тып өсөн бындай ҡаршылыҡтар нимә ул!? Иң мөһиме - ул азат! Шатлығынан оҙон үләндәргә сырмала-сырмала тәкмәс атҡылап алды.

Ниәтләгән йүнәлешенән атлағанда ла ул һәр шытырлау, һәр өнгә ҡолаҡ һала барҙы.Шырлыҡ, ҡыуаҡтар аша үткәндә аяғүрә баҫып ян-яғын байҡаштырҙы: ҡыуып килеүсе юҡмы икән? Хәүеф юҡлығына инанғас, дүрт аяғына баҫып юлын дауам итте.

Әсирлектә уҙғарған ваҡыт эсендә росомаха оҙон араларҙы үтеү һәләтен юғалта яҙғайны.Шуға ла йөрәге, ситлегенән сығырҙай булып, дөпөлдәп китте.Арыны. Ял итеп алырға кәрәк. Ул урман эсендәге бер асыҡ ергә инеп, ергә һуҙылып ятты һәм урман еҫтәренән сихәтләнеп, күҙҙәрен йомдо.

Ял итеп алғас, ҡыуып тоторҙарынан, йәнә ҡоршауҙар араһына бикләрҙәренән ҡурҡып, ҡасаҡ тағы ла шәберәк йүгереп китте.Ҡоштар яҙ етеү менән тыуған яҡтары төнъяҡҡа тартылған кеүек, Тып-Тып та үҙе донъяға килгән урындарға табан ашыҡты.

Тәүге азат көн тамамланып килә. Эңерҙе ҡараңғы ҡуйы төн алмаштырҙы, ә Тып-Тып йүгерҙе лә йүгерҙе. Ҡала йорттарының уттары күптән артта ҡалды. Ҡыуаҡтар артында һүрән генә яҡтылыҡ шәйләнде. Тып-Тып бала сағын үткәргән урынға оҡшаған өйҙәрҙең шәүләһе күренеп ҡалды.

“Былдай өйҙәр янында эттәр була торған, урап үтер кәрәк”, -тип уйланы росомаха.

...Тып-Тып ҡаланан ҡасыуын ҡасып китте лә ул, ә тамаҡты бит алдап булмай, асығыу үҙен һиҙҙерҙе. Үләндәр, емеш-еләк менән туҡланып алғайны ла , ашҡаҙаны ит талап итә. Әмәлгә күрә, яр аҫтынан ике һуна өйрәге ысҡынып осто һәм һыу өҫтөндә дүңгәләкле ике эҙ ҡалдырып йөҙөп китте. Өйрәктәрҙең береһе яралы буғай, ҡалыша башланы.Әммә тәжрибәле һунарсы уға күҙ ҙә һалып торманы.Яр аҫтындағы ояла һуна себештәренә һәм йоморҡаларға барып юлыҡты. Иртәнге ашы ла, төшкөлөгө лә ана шул табышы булды.

Ҡондоҙҙар ялтыратып бөткән һуҡмаҡ аша сығып барғанда, росомаханың күҙе тумалаҡ ҡына мискәгә оҡшаған йәнлеккә төштө. Ул бойоғоп ҡына тирә яғын күҙәтеп баҫып тора. Яйлап ҡына хәрәкәт иткәнендә яр башындағы суп-сар тирәһендә соҡоноп ала. Ҡыҫҡа моронло ялбыр эткә оҡшаған. “Кәүҙәһе минеке хәтлем, ярар, тырышҡанда ауҙарып булыр,-“ тип уйланы Тып-Тып.

Ҡолағына саҡ-саҡ ишетелгән ҡыштырлау тауышы сағылып китте.Ул ҡолағын ҡарпайтты. Теге ялбыр йән эйәһе шул арала юҡ та булды. Урман төпкөлөндә ниндәйҙер шәүләләр күренеп ҡалды.Бейек үләндәр, ҡуйы ҡыуаҡтар араһынан бер көтөү эт килеп сыҡты. Сылбыр булып теҙелештеләр ҙә уны уратып алдылыр.Уға текләгәндәр ҙә шым ғына баҫып тик торалар, ә киәфәттәре усал икәнлектәрен күрһәтеп тора.

Ҡасыуҙан фәтеүә юҡ, ҡыуалап тотасаҡтар.Мускус та йәл, сөнки юл оҙон, кәрәге тейеүе бар. Тып-Тып артҡараҡ сигенде лә елп итеп ағас башына менеп китте һәм иң йыуан ботаҡ өҫтөнә һуҙылып ятты. Тегеләр ағас төбөнә килеп ултырҙы.Хәлдән тайҙырып йөҙәтергә булдылар ахыры.

Тауҙар артынан лимон киҫәгенә оҡшаған ай тәгәрәп килеп сыҡты.Эттәр тынғыһыҙлана башланы, һикерешеп тороп, әйләнеп ҡарай-ҡарай саптырыша башланы. Улар артынан бүреләр йүгерешеп үтте.Бүреләр росомаханың еҫен һиҙһәләр ҙә туҡтап торманылар, ул һаҫыҡ менән бәйләнеүҙән, бәйләнмәүең артыҡ. Тиҙҙән урман эсендә йән әҙгәс сыйылдауҙар яңғырап китте.

Тып-Тып түбәндәге еҫтәргә, тауыштарға ҡолаҡ һалып ағас башында оҙаҡ ятты.Ҡурҡыныс юҡлығына инанғас ҡына, үләнгә һикереп

төштө. Үлән өҫтөндәге ниндәйҙер нөктәләрҙең берсә балҡып, берсә һүнеп китеүе Тып-Тыпҡа ғәжәп күренде. Үҙенең тыуған яғында ул бындай мөғжизәне осратҡаны юҡ ине әле.Үләндәрҙе айырып- айырып текләп, ҡуңғыҙҙарға ҡыҙыҡһынып ҡарап торҙо.

Азатлыҡтың өсөнсө көнө!

Көсөн үтә ныҡ сарыф итмәү маҡсатынан, Тып-Тып урман йәнлектәре һалған әҙер һуҡмаҡтарҙан хәрәкәт итергә тырышты.Ҡояш байыр алдынан йылға буйынан шапылдаған тауыш ишетелде. Мөһабәт ағас төбөндә ниндәйҙер таныш түгел йәнлек соҡоноп маташа. Кәүҙәһе өскил, тиреһе һоро, шыма түгел.Ҡолағы оҙон Оҙонса морононда түңәрәк тәңкә бар. Аҙау тештәре алға сығып тора. Ҡабан. Мороно менән ағас аҫтындағы тупраҡты "һөрә". Ҡойроғон болғай-болғай нимәлер соҡоп та сығара.

Ауып ятҡан ағас аҫтынан йәнә локаторға оҡшаған ике ҡолаҡ күренде, шунан өлкән инә ҡабан – көтөү башлығы үҙе килеп сыҡты. Ул Тып-Тыпҡа күҙ һалып алды. Оҡшатманы.Нимәлер белдерегә теләгәндәй, хорхолдап ҡуйҙы.Уның артынса нәҙек кенә ҡойроҡло сыйылдаҡ сусҡа бәрәстәре күренде.

Тора-торғас, күп балалы инә сусҡа шып туҡтаны һәм ҡойроғон флаг кеүек күтәреп ҡуйҙы, шунан һорау билдәһе кеүек бөкләне. Тынлыҡтан мышырлау тауышы ишетелде. Сусҡа, соҡоноуынан арынып һаүа һулай .Шунан хырхылдап ҡуйҙы һәм яр түбәненә табан елдерҙе. Тотош ғаиләһе уның артынан эйәрҙе. Бәрәстәренең ҡайһы береһе буйлы-буйлы, ҡайһы берҙәре – ҡара.

Тып-Тып уларҙың ҡайҙа, ни өсөн ашығыуын тикшереп торманы. Бер аҙ шөрләй төштө һәм һыпыртыу яғын ҡараны.

Урман тамамланды, өҫтөн томан ҡаплаған һаҙлыҡтар башланды.Ҡайҙа ҡарама түмгәктәр, батҡаҡ, һыу. Бындайҙы Тып-Типтың күп күргәне булды. Ҡайһы берҙәренең ағасы юҡ, тутыҡ төҫөндәге һыу эсенә түмгәктәр теҙелешкән. Икенселәренең өҫтө тигеҙ, болондағы кеүек зөмрәт үҫентеләр менән ҡапланған, унда-һанда яңғыҙ, ҡыҫҡа буйлы ҡайындар үҫеп ултыра.Урман йәнлектәре бындай урынды урап үтә. Түмгәктәр буйлап яҫы табанлы росомахалар ғына йөрөй ала. Һаҙлыҡтарҙың иң әшәкеһе - мүк менән ҡапланғанылыр. Һыуы һаҫыҡ, эсе тулы ағас тамырҙары. Тик бындай һаҙлыҡтарҙа хатта росомахаларға ла һаҡ булырға кәрәк, көтөлмәгән ҡамауға эләгеүең бар.

Тып-Тып түмгәктәр буйлап һикерә-һикерә бейегерәк убаға барып етергә яҫҡынды. Ылымыҡлы һаҙлыҡтың ҡайһы бер урындарын Тып-Тып талдарҙы эйештереп, шуларға тотоноп үтте. Бында ашарлыҡ нәмә табыуы икеле, ә ҡарыны ит һорай, шуға ла Тып-Тып тиҙерәк ҡороға баҫырға тырыша.

Һис көтмәгәндә ҡуйы талдар араһынан шәп кенә ағып ятҡан йылға хасил булды. Эсе тулы балыҡ! Улар һыу өҫтөнән баштарын күтәреп, мыжғып торған серекәйҙәрҙе эләктерәләр. Балыҡ көтөүен өркөтмәҫлек уңайлы урын эҙләне Тып-Тып.Хәҙер, яйын табып, балыҡтарҙы эләктерергә тырышасаҡ. Шул арала томан эсендә нимәнеңдер ҡыбырлағаны һиҙелеп ҡалды. Мөгөҙө тарбаҡланған йәш мышы икән.

Ул, серекәйҙәрҙән ҡасып йәшеренгән һыу ятыуынан күтәрелеп, тирә яғына ҡарана-ҡарана атлап бара.Еңелсә ел, томан араһындағы мышы әкиәт һүрәтендәге кеүек матур. Үгеҙ танауына тулған серекәйҙәр, ләпәктәрҙән, күгәүен ҡаршлауыҡтарынан ҡотолорға теләп, йүткереп, сөскөрөп ҡуя.

Мышы тиҙҙән росомаха янына килеп етәсәк. Тып-Тыптың һунарсылыҡ ҡомары уянып китте: эләктерә алырмы? Йәш булһа ла тиреһе ҡалын, муйынындағы һеңеренә ҡаҙалыуы еңел булмаҫ.

Мышы бына ғына. Яп-яҡын. Тып-Тыпҡа ул хәҙер бигерәк тә мөһабәт булып күренә. Әммә аслыҡ үҙенекен итә. Аслыҡ йән эйәһен уйламаған ҡылыҡтарға этәрә.Ел ҡаршы. Мышы росомаханың еҫен һиҙмәй.Тып-Тып, мышы уға яҡынлашыу менән, өҫтөнә ырғып та өлгөрҙө.Муйынына ташланмаҡсы иткәйне, килеп сыҡманы. Арҡаһы буйлап муйынына табан шыуышты һәм көслө тештәрен тиреһенә батырып , ажар йыртҡыслыҡ ҡомары менән тиреһен өҙгөләргә кереште.

Ауыртыныуҙан һәм ҡурҡышынан аңын юғалтыр хәлгә еткән мышы һаҙлыҡ буйлап йүгереп китте.Өҫтөндәге дошманын һелкетеп ташларға маташты. Ләкин Тып-Тыптың оҙон тырнаҡтары төпкә батырылғайны. Мышы ауыҙынан күбектәр сығарып оҙаҡ йүгерҙе, әммә росомаха уның муйын һеңерен сәйнәп өҙөп ебәргәс, ҡатып бөтмәгән мөгөҙлө башы күкрәгенә ауҙы, аҙаҡ ул үҙе лә ҡуйы талдар араһына йығылды.

Һыйланып алды ла ергә һуҙылып ятты росомаха. Ял итеп алғас, йәнә ашанырға булып китһә, мышы ҡыбырлап ҡуйған кеүек булды.Тып-Тып һағая төштө һәм башын күтәрҙе. Шул саҡ мышының алғы тояғы, ҡабырғаһы аҫтынан һуҙылып сыҡты ла уның танауына ныҡ ҡына тондорҙо ла ҡуйҙы.Көтөлмәгән туҡмаҡтан шаңҡыған Тып-Тып сикәһен саҡ-саҡ ҡайырып аса алды.Алғы тештәренең яртыһы ҡойолоп төштө.Ул теле менән ҡалған тештәрен барлап сыҡты. Ярай әле, ҡаҙыҡ тештәре имен икән.Танауынан эркелгән ҡан шунда уҡ ҡата башланы һәм росомаха ауыҙы менән генә тын ала алды Йылғаға төшөп моронон һыуға тыҡты.Сөскөрә-сөскөрә танауын таҙартып алды һәм табышы янына кире килде.Нисек кенә аҙапланмаһын, ауыртҡан ауыҙы менән бер генә киҫәк ит тә умырып ала алманы. Ә ашағыһы килә ине.Тирә яғына ҡаранды. Һаҙлыҡ артындағы убала ағуналар булырға тейеш. Шул тирәне тикшерергә кәрәк.Уларҙың ите йомшаҡ, боландыҡы кеүек түгел

Юлы уңды, ағуналар бар булып сыкты.Тамаҡланып алды ла һаҡ-һаҡ баҫып ағастар араһына инде. Урмандың төҫө үҙгәрә барҙы. Яқты ғына япраҡлы урман ҡараңғы ылыҫлыға алышынды. Бындай ҡарурманда үлән, ҡыуаҡ-фәлән осратырмын, тимә. Аяҡ аҫты тулы мүк, йығылған серек ағастар, сөрөккә әүерелгән төпһәләр.Өнһөҙ, океан кеүек икһеҙ-сикһеҙ, ҡырыҫ тәбиғәтле тайга! Олондарына ҡуйы мүк ултырған, ҡара-йәшел ҡуйы энәле ботаҡтар һәленешеп торған урманда биш метрҙан да арыраҡ ер күренмәй.Ара-тирә янып күмерләнгән ағастарҙың ҡара һөлдәләре генә осрай. Ярай ҙа, йәнлектәрҙең эске компасы бар, юғиһә, бындай шырлыҡтарҙа йылдар буйы аҙашып йөрөргә мөмкин.

* * *

Тып-Тып, ике аяҡлыларға осрамаҫ өсөн, башлыса төндәрен хәрәкәт итте.Таң алдынан берәр ышыҡ ер һайлап ялға туҡтаны, йоҡоһо ла һаҡ булды. Эңер төшөү менән, нимә тап итһә шуның менән туҡланып, юлын дауам итте.

Юлында йылғалар осрау уны ҡурҡытмай, һыу эсенә инә лә, ишкәк кеүек яҫы тәпәйҙәре менән ишеп, арғы яҡҡа йөҙә лә сыға.Ике тапҡыр киң, шәп ағымлы йылғаларға тап булды. Уларҙы аша сыҡҡанда, нисек кенә тырышмаһын, ағымға ҡаршы тора алмай яфаланды, ағын уны ике саҡрым тирәһе үҙенең ыңғайына ағыҙып алып китте.

Ылымыҡлы ҡомло ярҙарҙа айыу эҙҙәре осраштырып торҙо. Бөгөн иһә тайыш табандар ғаиләһен осратты.Йылға ярының еләҫ бөгөлөндә ял итәләр.Инә айыу ергә ятҡан да күкрәген, эсен ҡояшта ҡыҙҙыра.Алғы тәпәйҙәрен һуҙып һалған.Балаларының береһе ана шул аяғы буйлап әсәһенең эсенә менеп китте һәм түшәк кеүек йомшаҡҡа ятты. Тиҙҙән янына туғаны килем менде һәм улар икәүләшеп әсәләренең ҡорһағында борһаланырға кереште. Инәләре иһә ҡалын тауыш сығарып ырылдап ҡуя, әммә тауышында ҡәнәғәтлек өндәре лә бар. Ел алып килгән ят еҫ инә айыуҙы һиҫкәндереп ебәрҙе. Тып-Тыпты күреп, асыулы ырылдап ҡуйҙы һәм тегеһе был тирәнән һыпыртыу яғын күрҙе.

Сыуаҡ, йылы көндәрҙе йәшенле яуындар алыштырғыланы. Бер саҡ ҙур кедр ағасын йәшен атып, уныһы янып киткәнде күргән Тып-Тып йәшендән ҡурҡыр булды. Йәшенләй башланымы, ул ерҙе соҡоп, шунда инә һалып ятыу яғын ҡарай.

Йәшенле ямғыр алдынан,ғәҙәттә, ел сыға. Ул ағастарҙың ялбыр кәпәстрен тегеләй ҙә былай ҙа сайҡай, ергә ел һындырған ботаҡтар ҡойолоша, олондар шығырлығын сыға. Ҡайһы берҙәре шартлап ярылып киткеләй. Ҡайһы бер ағастар тамыры- ние менән ерҙән аҡтарылып, тотошлай ауып йығыла. Ундай көслө ел оҙаҡҡа бармай, ләкин байтаҡ ҡыйралыш башҡарып өлгөрә.

Ел йыуашая төшөү менән һауанан ямғыр эркелә. Тайга өҫтөнән күҙ сағылырлыҡ йәшен уттары йүгерешә, ҡурҡыныс итеп шартлап китә. Яуындар ҡай саҡта шундай көслө була, бик үк ҙур булмаған йылғалар буръяҡланып таша, кәрәгәләр ағыҙа башлай, ҡомло ярҙар тамсылар бәрелеүҙән ҡайнап торғандай була.Яуынды ҡай саҡта боҙлауыҡ алмаштыра. Улары үләндәрҙе, ағас япраҡтарын тишкеләй, таштарға бәрелеп сәсрәп китә.

Утыҙ дүртенсе глава

## Оҙайлы ҡайтыу юлы

Ялбыр йыртҡыс икһеҙ-сикһеҙ тайга буйлап егермënсе көн бара инде. Аҙымдары, тәү осорҙағы кеүек үк, етеҙ, тигеҙ. Туп-тура тиерлек һуҙылып ятҡан эҙҙәренә ҡараһаң, уның ҡайҙа табан барыуын үҙе тоҫмаллауын аңларға була. Йөҙәрләгән саҡрымдар артта ҡалды.Уны алда нимәләр көткәнен, үҙе донъяға килгән тауҙарҙың ҡайҙалығын Тып-Тып белмәй. Ул ни бары биләмәһенең саҡырыуын ғына һиҙенә. Юлайҡан йәнлек эҙҙәренә төшөп тә хәрәкәт итә. Бының яҡшы яғы бар, ундай һуҡмаҡтарҙа ҡуяндар, боландар осрап ҡына тора.

Үҙәндәрҙең береһендә танауына төтөн еҫе бәрелде. Ҡыҙыҡ күреп, юлынан боролоп, күҙәтергә булды. Шәп ағымлы йылғаның ҡырсынлы ярында төтөн сығарыусы торомбаш быҫҡый. Уның янында ике аяҡлының йөнһеҙ, һарғайған үлән төҫөндәге өйө тора. Арыраҡ тубығынан һыуға ингән кеше кәритәһенә ҡырсын һөҙөп ала ла һыу сайпылдырып, тегеләй ҙә былай ҙа һелкетә. Тып-Тып уны оҙаҡ ҡына күҙәтте. Шул арала кеше хәрәкәттәрен ҡабатланы ла ҡабатланы. Тып-Тып быны һис аңлай алмай йөҙәне. Ниндәй мәғәнә бар һуң уның был ҡыланышында? Ул кәритәгә тултырылған ҡырсынды иләгән кешене йәлләп ҡуйҙы.

* * *

Сәйәхәттең ике айы тамамланды. Тигеҙлектәге һөмһөрө ҡойолоп ойоған мүкле ҡара урмандарҙы шәм кеүек һерәйешкән төҙ ҡарағайлы ҡалҡыулыҡтар алыштырҙы.

Ҡараңғы төшөүгә урман эсенән эре мөгөҙлө мышыларҙың баҡырышыуы ишетелә башланы. Үгеҙҙәр үҙҙәренә йәр эҙләй торған ваҡыт еткәйне. Уларҙың мөңрәүе унан да, бынан да яңғрап тора һәм урман аралары буйлап тарала. Бер мышы Тып-Тыпҡа яҡын ғына ерҙә мөңрәп ебәрҙе. Тиҙҙән тояҡ туҡылдауы, өҙөк-өҙөк тын алыу, тояҡ аҫтында сытырлап һынған сыбыҡ тауыштары ишетелде. Сәтләүек ағастары араһынан тайганың көрән ҙур умрау һөйәкле, күҙенә ҡан һауған, киң күкрәкле, осло осалы мөһабәт йәнлектәре пәйҙә булды. Үгеҙҙәр бер-береһенең мөгөҙөнән эләктереп, тояҡтары менән ергә ҡаҙалып, алыҫ булмаған ерҙән уларҙы күҙәткән инә мышының йөрәген яулау хоҡуғы өсөн алышырға тотондо. Тып-Тып был тамашаны оҙаҡ

күҙәтә алманы, ел ыңғайына килеп еткән ҡылый күҙҙең еҫен шәйләп алды...

...Төн күтәрелеп килгән ҡояштың нурҙарынан бирешеп, артҡа шыуышты.Ҡояш бер-бер артлы йондоҙҙарҙы һүндереп сыҡты,тау баштарындағы ҡара шаршауҙы һыпырып төшөрҙө, шунан һөҙәктәрҙе , үҙәндәрҙе яҡтыртып ебәрҙе.Кедр сәпсектәре уянырға саҡырып шыҡырлашырға тотондо. Ергә соҡолған өңдәренән килеп сыҡҡан әлғәнйәктәр йүгерешә, ерҙә үҫкән еләктәрҙе сүпләр өсөн, ағас баштарынан селдәр һикерешеп килеп төштө.Тайга йоҡоһонан уяна. Тып-Тып иһә ҡытыршы теле менән яланып, ярты ҡуянды ашап ҡуйғанда ҡанланған моронон таҙартты һәм йылдар буйы өҙөлөп төшөп ергә өйөлгән йомшаҡ ылыҫ энәләре өҫтөнә ятып йоҡларға әҙерләнде

Киләһе көндәге юлы күңелле күренешкә тап итте. Ҡарағай олондары араһынан тау армыттары күренде. Офоҡ һыҙығын тараҡландырған таш ҡаяларҙың осло тештәре росомахаға илһам өҫтәне. Тимәк, уның төйәге яҡынлаша. Тауҙарҙы ярата ул. Эре-эре таштарҙың тәгәрәшеп ятыуы ла, кедр ағастары үҫеп ултырған йәшел япмалар ҙа уға ғәзиз. Һалҡын таштар араһындағы соҡор-саҡырҙарға һырпаланып тулаған томанды ла диҡҡәт менән күҙәтеп торғаны бар. Тауға барып төртөлгән үҙән тора-бара тарлауыҡҡа әүерелде.

Уң яҡтағы һөҙәк буйлап китте Тып-тып, тау лабиринтының түбәнә табан йүнәлде. Ҡаялы тарлауыҡ баҫҡыс-баҫҡыс булып үргә үрләне. Үрләгән һайын һыуыҡыраҡ була башланы һәм урыны-урыны менән ҡар ятыуҙары осраны. Ә иң юғарыла борсаҡлы ҡарҙар тулап ята. Төнъяҡтараҡ бейек тә, осло ла, бүтән түбәләрҙән ныҡ айырылып һерәйгән ап-аҡ түбә төҫмөрләнә.

Тауҙы аша төшкән Тып-Тып йәнә йәйгә килеп сыҡты.Бында шундай һил, үҫентеләрҙең ниндәйе генә юҡ. Ағуналар эркелешеп йөрөй. Был ҡарағай урманы Тып-Тыптың күңеленә хуш килде һәм ул бында бер аҙға ҡалырға ниәтләне.

Тау үрендәге Һәр яклап та ышыҡ тигеҙлектә туҡталды.Тауға кедр урманы терәлеп тора. Ағас ботаҡтарына суҡ-суҡ булып сәтләүекле тубырсыҡтар эленгән. Нәҡ шулар бында көн итеүсе йәнлектәрҙең тамағын туҡ итә лә инде.

Утыҙ бишенсе глава

**Айыу**

Көндәр һыуыҡҡа тартты. Төняъҡ еле ҡош туплауҙарын йылы яҡҡа ҡыуалай, ә айыуҙар ышығыраҡ ер эҙләп урман ҡыҙыра.Ҡар һарыған урман эсендә ҡыш сығырға әҙерләнәләр.Мөһабәт януарҙарҙың һәр береһе ышыҡты айырым эҙләй. Юлдарында кедр тубырсыҡтарының

әрселгән ҡабығы ғына ятып ҡала. Ҡышҡы йоҡоға талыр алдынан айыуҙар ҡорһаҡтарын тултырып алыу ярауын күрә.

Тып-Тып ҡыштан ҡурҡмай. Ризыҡ бында етерлек. Һалҡын көндәрҙең береһендә ағуналар менән туҡланып алды ла һалҡын һыулы шишмәгә табан йүнәлде. Аяҡ аҫтында кибеп ҡатҡан япраҡтар, яңы ғына тартылған боҙ шығырлай. Иртә әле, әммә һибәләп кенә яуған йәш ҡар донъяны яҡтырта.Аҡ себендәр ергә көнө буйы һибәләнә. Кискә табан тайга аҡ юрғанға бөркәнде. Ҡапыл күтәрелгән ел ҡарҙарҙы осороп йөрөтә, соҡор-саҡырҙарға тау таштары араһына тултыра.Ҡуяндар менән ағуналар йәйге кейемдәрен алыштырып өлгөрмгәнлектән, уларға һунар итеү ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Шундай уңышлы һунарҙарының береһенән һуң Тып-Тып үҙенең күҙәтеү пункты – ҡая өҫтөнә менеп ятты. Таш өҫтөндәге ҡарҙы һыпырып төшөрҙө лә йомарланып ятты. Ағас ботаҡтары һынған тауышҡа уянып китте. Үҙәндән ябыҡ ҡына айыу китеп бара.Тиреһе дегәнәктәр, сайыр йәбешеп уҡмашып бөткән. Тороп-тороп ял итеп алыуына ҡарағанда, тайыш табандың йә бик ҡарт, йә сәләмәтһеҙ икәнлеге тоҫмаллана.

Тып-Тып януарҙың йәшәрлеге ҡалмағанын шунда уҡ аңланы. Ләкин, тамағы туҡ булыу сәбәпле, уны эҙәрлекләргә йыбанды. Иртәгәһенә, ҡорһағы асҡанды шәйләгәс кенә, тегенең эҙенән ҡыуа төштө. Ятып ял иткәндә ҡарҙа ҡалған эҙҙәренә ҡарағанда, айыуҙың ныҡ ябыҡ булыуы күренеп тора.

Тимәк, Тып-Тып тау хәтлем ризыҡлы буласаҡ. Барған һайын ятып алған урындары йышыраҡ күренә. Бер урында ҡарҙа һоро йөндәре лә йәбешеп ҡалған, оҙаҡ ятҡан, күрәһең. Айыу эҙҙәре тоҙло һыу яғына тартылған. Ул һыу бик ныҡ һалҡындарҙа ла туңмай. Тояҡлы мал-тыуар унда һыулауға төшөп йөрөй.

Унда ҡар аҙырыҡ булып сыҡты. Эҙ ыҙаны юҡ, табан һалған соҡорҙар ғына күренә. Соҡоҙар ҡанлы, күрәһең, айыуҙың табандары яралы һәм ҡаны һарҡып тора. Шишмәгә етәрәк, айыу эҙҙәре бүренеке менән ҡатнашып киткән. Тып-Тыптың аңлауынса бүреләр айыуҙы уратып алып һөжүм иткән.Ҡарҙағы ҡанға бүре йөндәре лә, айыуҙыҡы ла йәбешеп ҡалған.Һалҡын ел уларҙы боҙ стаканына әүерелдереп тә өлгөргән. Айыу нисектер бүреләр ҡамауынан ысҡынған булһа кәрәк. Йәнә йөҙ метр тирәһе алпан-толпан атлап барған. Эҙҙәр яр буйында юғалған. Ә яр аҫтынан айыуҙың ап-аҡ һөйәктәре генә сурайышып тора. Бүреләр уны мул ғына кимергән. Һөлдәһе янында уҫлаптай йыртҡыстың башы ғына ята.

Тып-Тып тирә яғын уратып йөрөп тикшереп сыҡты һәм бүреләрҙең юҡлығына ышанғас, айыу һөлдәһе янына кире килде. Ул өс аҙна буйы айыу менән туҡланды. Итен, башын ғына түгел, тимерҙәй тештәре менән өҙгөсләп, онтап, һөйәк эсендәге елеген, һөйәктәрҙең үҙен дә

ҡорһағына тултырҙы. Айыу еҫенә был тирәгә ҡарт бүреп килеп сыҡты. Ҡарашы уҫал, яңғыҙ януар икәне һиҙелеп тора. Ул килгәндә Тып-Тып алыҫ булмаған урында ял итеп ята ине. Тамағы туҡ булғас, бүре менән алышып торманы.Бүре ҡалдыҡ-боҫтоҡ һөйәктәрҙе кимереп маташты, әммә ҡарт тештәре үтмәне булһа кәрәк. Ҡарға һеңеп ятҡан ҡанды ғына яланы ла ары китеп барҙы. Айыу түшкәһендә бер ҡабым да ашарлыҡ нәмә ҡалмағас, Тып-Тып та был тирәнән китеү яғын ҡараны.

* * *

Ҡыштың иң һалҡын урталары етте. Алмас ынйылар тағып алған ағастар шығырлығын сыға, ярылып та киткеләй.Бындай көндәрҙә йәнлектәр өңдәренән сыҡмаҫҡа тырыша. Тик ҡарға ғына артынан дымҡыл эҙ ҡалдырып тайга өҫтөндә ҡанат ҡағына. Берәр йән эйәһен тап итһә, аптырауҙан " Ҡаарр!" тип ҡарҡылдап ҡуя.

Тып-Тып та ҡар эсенә соҡоп ингән өңөндә ятты. Әммә өсөнсө көнөнә ҡорһағы асығыу уны өңөнән сығырға мәжбүр итте. Төндө көтмәне, көндөҙ сыҡты. Ҡояш һыуыҡты саҡ ҡына булһа ла һындыра.

Һыуыҡтың үткер тырнаҡтары шунда уҡ танауынан эләктереп тә алды. Күҙенән йәштәре субырлап китте. Башы, ут эсенә ингәнме ни, сайралырҙай булып ауырта башланы.

Тығыҙ һалҡын һауала бер ниндәй ҙә еҫ-маҙар һиҙелмәй. Бар өмөт күҙҙә генә. Ҡар өҫтөндәге эҙҙәрҙе ҡараштырҙы, яңылары юҡ, иҫкеләре генә туңып ята. Танауын туңдырмаҫ өсөн Тып-Тып ара-тирә уны ҡултыҡ аҫтына тығып йылытып ала. Йөнлө табаны ла берешә лә китә, уларын сиратлап әсенә терәп йылытырға тура килә.

Ағастар арһынан сәйер туҡылдау ишетелеп ҡалды. Кемдер таяҡ менән ағасты туҡмаған кеүек. Һарҡыуғараҡ төшһә, һыңар мөгөҙө генә ҡалған мышы, шуны ҡайын ағасына бәргесләп һындырырға маташа. Һыңар мөгөҙ бер яҡҡа ауыштырып алып барғанға, ул унан, күрәһең, ҡотолмаҡсы була.

Тып-Тыптың өҫтөнә кедр тубырсығының әрсендеһе ҡойолоп төштө. Тейенме икән ни? Юҡ икән. Шыршы турғайҙары. Улар Тып-Тыпҡа ҡойроғон да тоттормай ул.Яр һөҙәгенә еткәс, ул йомарланды һәм түбәнгә тәгәрләп төшөп китте. Ҡағынып алды һәм ҡар ҡаплаған яр буйлап китте.Таш козырек аҫтынан бәрелгән дым иғтибарын йәлеп итте.Эсендә нимә бар икән? Айыу өңө түгелме? Еҫкәнеп ҡараһа, еҫе сыҡмай.

Тар ғына ауыҙҙан шыуышып эскә ингәйне, башы энәле шаршауға төртөлдө, өҫтөнә ниндәйҙер һалҡын нәмә лә һибелде.Күҙе ҡараңғыға өйрәнә биргәс, тәпәшәк кенә мәмерйәгә килеп инеүен аңланы.Стеналары ҡытыршы, таштары суҡайышып тора. Бында күпкә йылыраҡ. Тып-Тып мәмерйәне тикшереп сығырға булды. Таштарға баҫа-

баҫа иркенерәк залға килеп инде.Бында ел өрөп торғаны һиҙелә. Ел гә ҡаршы атлап китте.Әллә ниндәй бик наҙлы тауыштар ишетелә. Көмөш сүкеш менән һандалға һуҡҡан кеүектәр: дин-дин-дин. Арыраҡ атлаған һайын деңкелдәү тауышы нығыраҡ ишетелде, ҡарңғылыҡ та тарала барҙы. Ниндәйҙер боролошҡа етте, шунда боролғайны, бейегерәк тишекетән бер көлтә зәңәр яҡтылыҡ ағыла. Тишектең тирә яғына һарылған ҡар иреп, бәләкәй генә күл өҫтөнә тыпылдап тамып тора. Күл ярында ниндәйҙер йәнлектәрҙең эре-эре һөйәктәре бар. Ас сәйәхәтсе кимереп ҡарағайны ла таш тәмен генә тойоп, туҡтаны. Үрҙәрәк нимәлер ҡыштырланы. Башын күтәреп ҡараһа, түбәлә ниндәйҙер ҡара тумалаҡтар аҫылынып тороуына иғтибар итте.. Ярғанаттар мәмерйә түбәһенә йәбешеп баш түбән аҫылынышып тора. Үҙҙәре шул тиклем күп, йөҙәрләп барҙыр, меңәрләп булмаһа әле. Тып-Тып юғарыға үрмәләне һәм шуларҙың береһен өҙөп алып ауыҙына ҡапты. Ите ташҡа үлсәйем генә лә, үҙе былай тәмле.Росомаха шатлығынан һикерәңләп ҡуйҙы. Хәҙер тамаҡ өсөн ҡайғырмаһаң да була. Етмәһә бында йылы, һыуы етерлек.Хөрриәт!

Утыҙ алтынсы глава

**Артылыш**

Ғәҙәттән тыш һалҡын ҡышты Тып-Тып мәмерйәлә ярғанаттар менән туҡланып уҙғарып ебәрҙе. Һалҡын һындырғас, тыш яҡҡа ла һунарға сығып йөрөнө, сөнки буй етерлек ерҙәге ярғанаттар кәмегәйне инде. Тау башындағы тигеҙлектә яҙ еҫтәре һиҙелә.Тәүге йылы нурҙар ҡағылған ағас олондары иркен тын алғандай. Ерҙән былтырғы япраҡтарҙың күк еҫе, мүк еҫтәре бөркөлә. Яланғас ағастар тирәһендә ағуналар ҡыуанышып сырылдаша, улаға сәпсектәр сырҡылдауы ҡушылып китә.

Ҡар иреп бөтөп, ер кибеү менән росомаха тыуған яҡтарына юлын дауам итте. Тау армыттары юғарылығынан конусҡа оҡшаған яланғас ҡаялар, Төп Арҡа күренә биреп тора.Улар төнъяҡҡа табан һуҙылып, томандар эсенә инеп юғала. Ҡаяларҙың йыйырсыҡҡа ошаған ярыҡтарында иреп аҡмаған ҡарҙар төҫмөрләнә. Был тиклем дә мәғрүрлеккә Тып-Тып хайран ҡалып ҡарап торҙо. Бер көн тигәндә йыртҡыс һыуҙар бүленгән ергә барып етте. Был тирәнән һөҙәгерәк үрҙәр, офоҡтарға барып тоташҡан йәшел урмандар, улар араһындағы зәңгәр күлдәр ус аяһындағы кеүек күренеп тора. Урмандарға ҡараһаң, шул сикһеҙ йәшел диңгеҙҙең арьяғында бүтән бер нәмә лә юҡ кеүек күренә. Ә бит урман артында йәнә тауҙар булырға тейеш. Тып-Тып ана шул тауҙарҙы эҙләп килә ята ла баһа.

Баш осонда төнъяҡҡа китеп барған торналарҙың күкрәк тауышы ишетелде. Көҙгөһөн хушлашыу тауыштары бигерәк һағышлы ине, әле шатлыҡ өндәрен таратып талпыналар.

Үтер юлы аҙыраҡ, барыр ере яҡыныраҡ булғанын төҫмөрләгән Тып-Тып һикерә-һикерә түбәнләп китте. Бара-бара ла артҡы аяҡтарына баҫып тирә яғына күҙ һала. Юлды самалар өсөн генә түгел, кешеләрҙе шәйләмәй ҡалмаҫ өсөн. Уларҙың был тирәлә булыуы бик ихтимал. Тигеҙлеккә еттем тигәндә генә ҡая киҫкен ҡырҡылып киткәндәй булды. Яҡында ғына ағып килгән йылға түбәнгә табан тамсылар сәсрәтеп шарлап тәгәрәп китә. Шарлауыҡ ергә барып төшкән ерҙән алыҫ түгел урында теҙелешеп баҫҡан өйҙәр күренә. Уларҙы тимер сымлы бағаналар уратып алған. Тып-Тыптың бындай урынды күргәне бар, тик улар буш, кешеләрһеҙ ине, ә бында эттәр, кешеләр йыбырлашып йөрөй. Бәләһенән баш аяҡ, тип уйланы Тып-Тып һәм был тирәне урап үтергә булды.

Утыҙ етенсе глава

## Йыртҡыс тунаусылар

Артабан тайга эсендә ғәҙәти булмаған киң юлдар, төпһәләр һерәйешкән асыҡ урындар осрай башланы. Үҫеп ултырған ағастарҙа ла балта эҙҙәр бар.Тып-Тыпты был күренеш хафаға һалды. Ул йәне-тәне менән бәлә һағалағанын тоя ине. Ҡолағына гөрөлдәү тауышы яғылып китте. Түңәрәк йөҙлөнөң тимер өйө шундай тауыш сығара ине бит.

Тып-Тып тауыш килгән тирәне урап үтергә булды.Тауыш ишетелмәй башланы. Дөрөҫөрәге, тайгала тынлыҡ булмай тиерлек. Ағас япраҡтары ҡыштырлаша, ҡоштар сутылдай, тумыртка туҡылдығын сыға. Был тауыштарға Тып-Тып өйрәнгән, уларға бик иғтибар итеп бармай.

Әйләнә-тирәне ентекле күҙәтеп алыу маҡсатынан, Тып-Тып ағас башына үрмәләргә булды. Ут сығара торған таяҡ тотоп алған кешеләр төркөмө һырт буйлап китеп бара. Урман эсенән бик ҙур булмаған боландар көтөүе килеп сыҡты. Кешеләр, уларҙы күреп булһа кәрәк, туҡталып ҡалды. Атыу тауыштары яңғраны. Алдараҡ килгән болан ауып китте, ҡалғандары төрлөһө төрлө яҡҡа һибелеште. Мөгөҙлө боландың йүгереүенән уның яралы икәнен аңланы Тып-Тып. Ике аяҡлыларҙың береһе уны ҡыуалай төштө лә кире боролдо.

Кешеләрҙең холҡон белә Тып-Тып. Улар боланды тунарға тотондо. Моғайын эс-ҡарынын ташлап китерҙәр, миңә эләгер тип өмөтләнде. Килеп сыҡманы. Йәнлек тунаусылар болан түшкәһен тулағайым күтәреп алып китте. Ағас башынан төшөп, ҡан һарҡып ҡалған үләндәрҙе яланы ла, ҡорһағын былай ғына алдай алмаҫын аңлап, яралы боланды ҡыуаларға ҡарар итте.

Бер саҡрым тирәһе юлынан бара торғас, уны сылтырап ятҡан шишмә тирәһендә тап итте. Боландың башы ҡолағына саҡлым батып, һыу эсендә ята. Һыу эсергә маташҡандыр, күрәһең. Ҡорһағы

һыйҙырырлыҡ күләмдә ит һоғоноп алғас, росомаха ял итеп тә торманы, кешеләр булған ерҙән һыпыртыу яғын ҡараны.

Утыҙ һигеҙенсе глава

## Тыуған ерҙә

Офоҡ ситтәрен күкһел таш тештәр киҫкеләгән ергә барып еткәс, Тып-Тыптың шатлығының сиге булманы. Был уның тыуған яҡтары!Тау үркәстәре уртаһында ап-аҡ көмбәҙ ялтырап ултыра, аҫтараҡ өҫтәлгә оҡшаған тигеҙлектәр.

Һуңғы саҡрымдарын ул , ял да итмәй, йүгереп үтте.Тәүге тау баҫҡысы өҫтөнә үрмәләп еткәс кенә кедр ағасының йөнтәҫ ботаҡтары аҫтындағы күләгәгә инеп ятты. Һауаға ылыҫ еҫе таралған. Һулауы рәхәт. Тау армыттары бер-бер артлы теҙелешеп киткән дә, уларҙың иге-сиге лә юҡ кеүек күренә. Асылда был тауҙар әллә ни алыҫҡа бармай ул, һикһән саҡрым тирәһе араууҡҡа ғына һуҙылған.

Тып-Тыпҡа бында бөтә нәмә лә таныш. Алдында үҙ биләмәһе йәйрәп ята. Ул ошонда Наҙлыны тап иткәйне...Уны хәҙер табып булырмы икән? Был һорау уның тотош йән-тәнен биләп алды. Ағастан-ағасҡа һикереп ҡарға ниҙер ҡарҡылдай. Танышын осратып сәләм биреүе микән ни?

Әхирәтен осратыу ниәтенән Тып-Тып элек икәүләшеп ял иткән мәмерйә яғына ыңғайланы. Бына таныш саф һалҡын һыулы шишмә ағып ята. Уның һыуы үтә һалҡын ҡыштарҙа ла яр ситләп кенә туңыусан. Мәмерйәгә инә торған урын ошо тирәлә булырға тейеш. Ысынлап та бына ғына бит!

Мәмерйәнең эсе ҡоро.Тып-Тып таш иҙәнгә түшәлгән мүкте, япраҡтарҙы, сыбыҡ-сабыҡты еҫкәп сыҡты. Элекке таныш та ҡәҙерле лә еҫтәр таралып уҡ бөтмәгән дә, яңылары юҡ шул.Һалҡынса таш иҙәнгә һуҙылып ятып, күҙҙәрен йомдо Тып-Тып.Күптән булып үткән һәм онотола төшкән ваҡиғалар күҙ алдына килеп баҫты.Киң Маңлайлы менән икеһенең ике аяҡлылар янында бәхетле йәшәүҙәре,урманға китеп үҙаллы тормош ҡағиҙәләрен үҙләштереүе, Амурҙың уны ҡотҡарып алыуы, Мавр менән парлашып Түңәрәк йөҙләгә зыян итеүҙәре, Наҙлы менән балалар үҫтереүҙәре иҫенә төштө.

“Наҙлыны осратырға ине ул!”

Ул күңеленә ятҡан орғасы росомаханы һағыныуынан тулҡынланыу кисерҙе. Тып-Тыптың бит аталандырыр ваҡыты ла килеп еткән.Биләмәһен нис аҡлым ғына арҡыры- буй буйламаһын, ситкәрәк сығып урман-тауҙар ҡыҙырмаһын, Наҙлының еҫе лә, эҙе лә сағылманы. Ҡайҙа олаҡкан һуң ул? Ҡайҙа юлланған? Белеп ҡара! Тап, ана!

Парлы саҡтарындағы мәмерйә эҫе көндәрҙә һалҡынса була, серекәй, ләпәкәйҙәр инеп тулмай, Тып-Тып уны шуға ла йәшәү урыны тип һайланы. Көнө буйы шунда ял итә, йоҡлай, эңер төшөү менән һунарға сығып китә. Дөрөҫөрәге, һунарға түгел, тамаҡ туйҙырырға. Йәй көнө һунарҙың бик кәрәге юҡ. Һутлы тамырҙар, емеш-еләк, бал, йомортҡалар, ҡоштар, кимереүсе йәнлектәр етерлек.

Сәйер, бер осор Тып-Тыптың ике аяҡлыларҙы күргеһе килеп китте. Ауыр кәүҙәле хужабикәһе, йомарт күңелле Пуля төшөнә инә. Уларҙың янында бигерәк күңелле йәшәгән икән Тып-Тып.Быңдай төштәре күңелен болоҡһота росомаханың .Тик ауыл яғына барырға тәүәкәл итә генә алмай.

Утыҙ туғыыҙынсы глава

## Браконьерҙар

Көҙ баштарында Дағa ауылға ваҡ-төйәк кәрәк-яраҡ менән бергә ҡар өҫтөнән йөрөй торған “Буран” машинаһын тейәп килде һәм һунарсыларға тәҡдим итте. Сөнки Дағa ишетеп белә: уларҙың ҡайһы береһе браконьерлыҡ менән шөғөлләнә.”Ышаныслы” һунарсылар уның тәҡдименән баш тартманы. Килешеү буйынса улар йыл һайын ике йөҙ килограмм ҡыҙыл көртмәле, мүк еләге, һикһән сел, егерме ҡор, унар һуйыр, иң мөһиме тонна ярым ит тапшырырға тейеш.Охотовед тауыш күтәрмәһен өсөн иттең ниндәй булырға тейешлеген килешеүҙә күрһәтмәнеләр. Ошо шарттарҙы үтәп бөткәс, “Буран” һунарсының ҡулына күсә.

Икенсе килгәнендә Дағa йәнә ике “Буран” һәм ике мискә бензин тейәп килеп төштө. Арыуҙы белмәҫ техниканы ҡулына төшөргән һунарсылар хәҙер теләһә ниндәй януарҙы еңел ҡыуалап эләктерә алыуға өлгәште. Ҡарҙың яуыуын ғына көтәһе ҡалды. Уныһы ла оҙаҡ көттөрмәне, һунар сезоны асылған 15 октябрь көнөндә ябалаҡлап яуып та ебәрҙе. Ике гусеницалы һәм боролош ҡоролмалы саңғыһы булған “Буран”дар тайга шырлыҡтарында еңел йөрөй, ваҡ ағастарҙы мороно менән йығып үтә ала.

Ҡар өҫтөнән йөрөүсе машинаның таҫма эҙҙәрен элек инеп тә сығып булмаған шырлыҡтарҙа ла күрергә мөмкин ине. Машинаның саңғы эҙҙәренә йәнәш ҡото осоп елдергән януар эҙҙәре лә ярылып ята. Һуңғы сиктә ҡан эҙҙәрен күрергә мөмкин.

Һунарҙың иң уңышлы урыны – янғындан яланғасланған асыҡ яландар. Үтеп сыҡҡыһыҙ ҡуйы урманлы тайга ла “Буран”лы һунарсылар өсөн мәшәҡәт тыуҙырмай. Еңел табыштан башы әйләнгән һунарсы браконьерҙар , күберәк табыш алыу маҡсатында, мотобысҡылар менән юлдарҙы таҙартып, йөрөр юлдарҙы иркенәйтергә лә йыбанманы.

Дағаның ит тапшырыу мөмкинлеге яҡшы яҡҡа ҡырҡа үҙгәрҙе. Ул бәхет тойғолары кисерҙе. “Буран” дар һатып алыуға тотонған аҡсаһы бер сезон эсендә генә лә үҙен аҡланы. Ә машиналарҙы арендаға алыусы нәфселе арендаторҙар уғата ла шат ине: ҡулдарында уңыш яуҙырыусы техника бар.Степандың йәнлек аулау нормаһынан тайпылмаҫҡа саҡырыуҙары берәүҙе лә тыя алманы: милиция Верхи ауылынан алыҫ,ә охотовед иһә...Ул ни ризаһыҙлыҡ белдерер инде. Һөйләнер-һөйләнер ҙә туктар, уның да бит был ауылда ғүмер итәһе бар.

Степан Ермилович өсөн бындай бәйлһеҙлекте кисереү еңел түгел ине.Ул тайғаның ярлылана барыуын күреп һыҙланды.Әммә донъя баш түбән түңкәрелеүгә бара: яуызлыҡтың тантана иткән сағы! Ирҙәр бәйҙән ысҡынған эт сүрәтенә ингәйне. Табыш, табыш артынан ҡыуалай ине улар. Был мәғәнәһеҙ һәм аяуһыҙ яҫҡыныуҙың сиге юҡ кеүек күренә.

Тайга етемһерәп ҡалды. Элекке кеүек теге йәки был ҡыуаҡ аҫтынан ҡуян йәки һуйыр килеп сығыр тип өмөтләнеүҙәр юҡҡа сыҡты. Һунарсыны шатландырыр ваҡиғалар артта ҡалды.

Ҡырҡынсы глава

**Наҙлы**

Яҡын тирәләге тайга ике йыл эсендә бушап ҡалды. Нисәләр саҡрым үтһәң дә ҡар өҫтөндә тәпәйе һәм ҡойроғо ҡалдырған сысҡан эҙенән башҡа эҙҙәр осратмаҫһың. Януарҙарҙың тик хәйләкәрерәктәре генә тере ҡала алды. Ҡайһы бер йәнлектәр “Буран”дар үтә алмаҫлыҡ текә ҡаяларға һыйынды, бәғзеләре был тирәләрҙән ҡасып китеү яғын ҡараны.

Тып-Тып иһә, тамаҡ ялғау маҡсатынынан, етемһерәгән үҙәндәрҙе оҙаҡ ҡыҙырҙы. Йөрөй торғас, күңелен йәнләндергес еҫте тойомланы. Был татлы һәм албырғатҡыс еҫте ул әле онотмағайны.Наҙлының еҫе сыға. Тиҙҙән ул уның эҙҙәрен дә тап итте. Эҙҙәр ашыҡмай ғына ағас араларын ҡыҙыра ине. Шатлығынан Тып-Тыптың тыны быуыла биреп ҡуйҙы. Тора –бара Наҙлының эҙҙәре тигеҙ, аҙымдары оҙонораҡ булып китте. Ә ҡайҙа ашыҡты икән Наҙлы? Тып-Тып эҙҙе юллап алға ынтылды.Уның әхирәте менән осрашҡыһы килә ине.

Тиҙҙән әхирәтенең эҙҙәре һикереүгә әүерелде. Кемдер ҡурҡыттымы икән? Уның эҙҙәренә йәнәш таҫма кеүек юл һуҙылған. Тып-Тыптың аңлауынса, бындай юлды, машинаға атланған ике аяҡлылар һала.

Тып-Тыптың танауна төтөн еҫе килеп бәрелде.

Наҙлы йылға тамағына табан йүгергән. Яҫы таҫма ла артынан ҡалмаған. Тып-Тып түңәрәкләнеп тапалған урынға килеп төртөлдө.

Түңәрәктең эсе тулы ҡан тамсылары. Наҙлының эҙҙәре лә ошо урында өҙөлгән.

Был күренеш Тып-Тыпты ныҡ тетрәндерҙе. Ул әхирәтенең башына еткән кешенең боғаҙын сәйнәп өҙөргә лә әҙер ине. Дөрөҫ, тимер убырҙы ул ҡыуып та етә алмаҫын, ҡаршылыҡ та күрһәтә алмаҫын яҡшы аңлай.Артабаныраҡҡы ҡырҡындыла ла өс боландың эс-ҡарыны, баштары ғына ятып ҡалған.Тимәк, аяуһыҙ машина ни саҡлым теләһә, шул саҡлым йәнлек ҡырырға һәләтле. Наҙлы хәленә төшмәйем тиһәң, был тирәләрҙән тайырға кәрәк. Ҡайҙа китеп олағырға һуң? "Төнъяҡҡа!"-тип ҡарар итте Тып-Тып. Әммә ҡапыл ғына ташлай алманы биләмәһен. Тыуған ерҙәрҙәрҙән айырылыу ҡыйын шул. Етмәһә,ҡояш аяҡ аҫтындағы ҡарҙы буҡкаға әүерелдерҙе, ике аяҡлылар тайганы ташлап китә башланы.

Ирегән ҡар аҫтынан һалҡындарҙа һәләк булған үләкһәләр табылыр тигән өмөтө лә аҡланманы. Был ҡыш эсендә тайга етемһерәп ҡалғайны шул.

Тып-Тыптың тәмле генә йәш ҡуян итен ашағыһы килә.Тау араларында һаҡланған ҡарҙа ҡуян эҙҙәрен осратыу ҡыйын түгел.Боҙланып ҡатҡан ҡар өҫтөндә ҡуян тәпәйенең тырнаҡ эҙҙәре генә күренә. Тып-Тып Ворчалка йылғаһы ярында ҡарама ағасының ауып ятҡанын күргәйне. Ҡуяндар шул ағастың ҡайырыһын кимерергә ярата ул. Әммә ҡарама тирәһендә бер ниндәй ҙә эҙҙәр юҡ. Сысҡандар менән генә мөрхәтһенергә тура килде. Ярай әле, улары йүгерешеп йөрөй.

Тып-Тыптың төшөнә болан көтөүҙәре, ағуна түшкәләре инер булды.Ошондай йөҙәткес төштәр, бушап ҡалған тайгалағы аслыҡ Тып-Тыпты бүтән ерҙәргә китергә мәжбүр итте.

Ҡырҡ беренсе глава

**Төнъяҡта**

Тып-Тып тау һыртынан урыны-урыны менән тарбаҡланып аҡҡан киң йылға буйына төштө һәм елдәр һалҡын етәкләп алып килгән тарафҡа юлланды.Тигеҙлек өҫтөндә ҡом өйөмдәре, шарға оҡшаған ягель мүге келәмдәре осрай. Ҡояш ҡыҙҙырғанда был шарҙар тәпәшәк һәм йоҡаҡ ҡына күгек күренә, өҫтөнә баҫтыниһәң сытырлап таралып китә. Ә еүеш, күләгәле ерҙәрҙәге ягель икенсе төрлө. Өҫтөнә баҫҡанда йәмшәйеп төшә лә аяғыңды алһаң, элекке формаһына ҡайта.

Һаҙлыҡтар өҫтөн ағас тамырҙары, үлән күгек үҫентеләр, ҡыуаҡтар ҡаплап алған. Был йәшел бәрхәт күгек келәмде йыртып күлдәр ялтырап китә. Күл тирәләрендә һыу ҡоштары йыбырлаша. Кистәрен уларҙың ҡаңғылдашыуы һауаға күтәрелә һәм күктәр һелкенеп ҡуйғандай була. Был ҡаңғылдашҡан хор эсенән өйрәктәр менән ҡаҙҙар , көйөлдө

тауыштары ишетелә. Ҡоштарҙы был тирәгә емдең күплеге һәм хәйләкәр төлкөләрҙең килеп етә алмауы ылыҡтыра.

Тып-Тыптың тәпәйҙәре яҫы, һаҙлыҡ буйлап йөрөү ҡыйын түгел. Ул инәләрен баҫып ултырған ояларынан ҡурҡытып ҡыуалай ҙа ояларғы йомортҡаларҙы тырнағы менән тишә һәм рәхәтләнеп эсен һемерә. Уға бигерәк тә эре-эре ҡаҙ йомортҡалары оҡшай.Йомортҡа ҡабыҡтары шул көйө ваҡланмай ятып ҡала. Тып-Тып уларҙы ояларына кире һалып ҡуя. Ә хәйләһеҙ инә ҡаҙҙар буш йомортҡаларҙы баҫыуын дауам итә.

Шундай күлдәрҙең береһенең ярын ҡыҙырғанда Тып-Тып киң генә яй ағышлы ятыуға барып юлыҡты. Ағас һынған тауыштар ишетелә. Росомаха артҡы аяҡтарына баҫып, күҙәтергә булды. Йылға аша ҡырағай боландар йөҙөп сығып бара. Күмәктәр. Мөгөҙҙәре бер-береһенә ҡағылып, сытырлап китә.

Ярға һикерешеп сыҡҡан боландар өҫтәрендәге һыуҙан һелкенешеп арынды ла аяҡ аҫтындағы үҫентеләрҙе семсергә тотондо. Ҡыҫҡа ғына ҡайын, тал, ҡыҙыл көртмәле уларҙың яратҡан ризығы. Бигерәк тә туҡлыҡлы ягель мүген кинәнеп ашайҙар.

Тып-Тып болан көтөүенең артабанырак күсенеүен көтөп тоҙо ла йылғаны йөҙөп ҡаршылағы ярға килеп сыҡты. Боландарҙың эҙе буйлап ике росомаха ғаиләһе хәрәкәт итеүен танып алды. Ул баштараҡ быларҙы ситтән күҙәтте. Росомахаларҙың ыңғай мөнәсәбәтен тойомлау менән, уларҙың ғаиләһенә барып ҡушылды.

Боландарға улар хәйләкәрлек менән һунар итте. Көтөү артынан киләләр-киләләр ҙә тегеләр ергә ятып көйшәнә башлағас, йәшеренеп ятып, ҡайһыһының көсһөҙөрәк булыуын күҙәтәләр, бер нисә тиҫтә метр тирәһе ҡыуалап баралар ҙа ҡыуып етерлек булмаһа, туҡтап ҡалалар. Ә инде ҡорбан үтә етеҙ булмаһа, өҫтөнә һикерәләр һәм аяҡтан йығалар. Ҡайһы берҙәрен ҡыуалап йөрөүҙең дә кәрәге булмай, бер һикереүҙә ауҙарып ҡуялар.

Боландарҙың береһе үҙен баҫтырып килеүселәргә табан ҡырҡа ғына боролдо ла алғы тояҡтары менән һауаны типкесләй башланы. Боландың былдай ҡыйыулығы росомахаларҙы таң ҡалдырҙы һәм уны эҙәрлекләүҙең файҙаһы юҡ икәнгә төшөндөрҙө.

Ғаилә эсендә Тып-Тып иң көслөһө һәм иң йылғыры ине. Ул боландың елкәһенән тешләп, ергә ауҙара ла ҡорбанын тегеләй ҙә былай ҙа бәргесләй башлай. Ә бит болан унан өс-дүрт тапҡырға ауырыраҡ.

Ит күп тип тормай росомахалар,табышының һөйәктәрен дә онтаҡлап ашап ҡуя. Мөгөҙҙө онтауы иң ҡыйыны, ләкин ул да ерҙә ятып ҡалмай. Мөгөҙ онтағы росомахаларҙың иң яратҡан ризығы ул.

Ҡай саҡта росомахалар ташланырға йыйынған боланды йылғаның йәки күлдең яҡынлығы ҡотҡарып ҡалыр булды.Бер осор росомахалар ҡорбаны артынан һыуға ташланып та маташты, әммә ҙур кәүҙәле, оҙон тояҡлы болан росомахаға һыу эсендә көйөнсә лә тибеп ебәреүгә һәләтле булыуы арҡаһында, быларҙың эҙәрлекләүенән ҡотолоп ҡала ине.Быны аңлаған росомахалар һыуға һикергән боландар артынан ҡыуалауҙан баш тартырға мәжбүр булды.

Һунар оҫтаһы Тып-Тып һунар итеүҙең яңы ысулын уйлап тапты. Болан көтөүе янына килә лә арҡаһына ауып киткән була.Ауыр тын алып, тегеләй ҙә былай ҙа аунаҡларға керешә, йәнәһе лә ҡорошҡаҡ тартышыуы кисерә, көҙән йыйыра йәнәһе лә. Боландар, семсенеүенән туҡтап, йыртҡыстың сәйер ҡыланышын күҙәтә башлай.Шул саҡта бүтән росомахалар көтөүгә яҡын килә һәм берәр боланды ауҙарып та һала.

Эҫе көндәрҙә был хәйлә уңышҡа өлгәшмәй.Серекәй, күгәүен һөжүм иткән осорҙа тамаша ҡайғыһы булмай. Боландар алғы һәм артҡы аяҡтары менән ҡорһағын, ҡабырғаларын һуҡҡылап, йәбешкәктәрҙән ҡотолоу юлын эҙләй.Ҡай саҡта тәндәрен дерелдәтеп һелкенеп ҡуя, шул рәүешле ҡанэскестәрҙән арынырға тырыша.

Тундрала росомахаларға йорт боландары ла осраштыра. Росомахалар уларға ҡағылмау яғын ҡарай. Ҡағиҙә булараҡ, улар янында сарғайлап өргән эттәр һәм уларҙың хужалары була.Тайгала ризыҡ былай ҙа етрлек, йорт боландарынан ары тороуың хәйерле.

Арктика ҡояшы алыҫ армыттар артынан килеп сығып, ҡапыл юғары күтәрелә башлағас, росомахалар икенсе төрлө һунарға күсте.Оҙонса буйлы ҡаҙҙарҙы ауларға тотондо.Яр буйына теҙелешеп баҫалар ҙа ҡаҙҙарҙы тундра эсенә ҡыҫырыҡлайҙар, башта яҡындараҡҡыларына ташланалар, аҙаҡ карлик ҡайындар араһына ҡасҡандарын ҡыуалап тоталар.

Йәй аҙаҡтарында тундрала кимереүселәрҙең һаны күбәйеп китте.Тып-Тып үлән ашап һимергән лиммингтарға һунар итте.

Ризыҡтың мулығынан росомахаларҙың эстәре кәпәйешеп, муйыл кеүек күҙҙәре ялтырашып китте. Тып-Тыпты парлашҡыһы килеү тәкәте ҡыҫтап алып барыу сәбәпле, ул росомахалар ғаиләһенең бер орғасыһы менән мөнәсәбәткә инмәй түҙмәне. Әммә уныһы аҡылһыҙ булып сыҡты. Сираттағы һунар ваҡытында үҙенең һәләтһеҙлеген таныҡкас, Тып-Тып унан һыуынды.

Росомахалар йәй буйы ашанып һимергән песецтарҙан да баш тартманы. Дөрөҫ, Тып-Тып был “эттәрҙе” бөтөнләй хөрмәт итмәй ул, тик эләктерә ҡалһа, тәмләп һоғонмай ҡуймай.

Көҙ башында, серекәйҙәр туйы тамамланғас, тояҡлыларҙың көтөүҙәре тайгаға табан юлланды, сөнки асыҡ ерҙең ҡарын, елдәр тыңҡыслап ҡатырып ҡуя, тибенеп туйыныу мөмкинлеге юғала. Тып-Тып был тирәнән китергә теләмәне. Ҡайҙа ашығырға, был яҡта ризыҡ етерлек, ике аяҡлылар күренмәй. Ул эркелешеп ситкә китеп барған боландарға ла, улар артынан эйәргән росомахаларға ла ғәжәпһенеп ҡарап ҡалды.

Бер көндө һауала геүелдәү тауышы ишетелде, болоттар арһынан бик ҙур йәшел ҡош килеп сыҡты. Тундра өҫтөндә әйләнгеләне лә боландар көтөүе тирәһендә аҫылынып торҙо. Тып-Тып ут сығарған таяҡтарҙың шартылдауын ишетте. Көтөү икегә бүленде һәм паникаға бирелеп төрлө яҡҡа туҙышып китте. Бер нисә болан ерҙә ятып ҡалды. Росомахалар кирегә табан һыпыртыу яғын ҡараны. Ҙур ҡош ҡырҡа боролош яһаны ла былар артынан ҡыуалай төштө. Йәнә шартлау тауыштары яңғрап китте.

Тып-Тып әхирәтенең орсоҡ кеүек әйләнеүен, ә уның атаһының улән араһына сумып, аҙаҡ соҡорға ауып китеүен күҙәтеп торҙо. Гөрөлдәгән ҡош ергә ҡунаҡланы, уның эсенән ике аяҡлылыр һикерешеп төштө. Росомахаларҙың кәүҙәһен йыйып алды һәм йығылышҡан боландар яғына табан атлап китте. Улар артынан эйәргән булһа, үҙен дә шул уҡ яҙмыш көтөүен аңлаған Тып-Тып тетрәнеп ҡуйҙы.

Көндәр ҡыҫҡара, күләгәләр оҙоная барҙы.

Һалҡын тулҡындар тайганы үтәнән-үтә һыҙырып сыҡҡандан һуң тундра өҫтөнә ҡарҙар яуырға тотондо. Иртәнсәген һауаға күтәрелгән ҡояш көнсығыштан көнбайышҡа табан ашығыс тәгәрләп, һалҡындарҙан ҡасҡан кеүек, артылыштар аръяғына төшөп йәшеренер булды.

Торараҡ ҡояштың һуңғы нурҙары һибелеп торҙо ла, тайгаға ҡараңғылыҡ түшәлде. Йәнә ике көн буйы, ҡояш үҙе күренмәһә лә, офоҡ тирәһе бер ни тиклем яҡтырып торҙо әле һәм өсөнсө көнөнә тайга өс аҙналыҡ ҡараңғыға сумды.

Тормош тарайғандай, ҡар аҫтына, көрттәр эсенә сумғандай булды. Кем нисек булдыра, шулай йәшәү сараһын эҙләне. Ҡараңғы донъя түҙеп торғоһоҙ һалҡынлыҡ эсенә сумды.Хатта өкөнөң өкөһө ап-аҡ шар формаһына ингәйне.

Тып-Тып һалҡындан ҡарға соҡоған өңөнә йәшенеп йылынырға тырышты. Поляр төнө уға бик үк ҡамасау итмәй. Ул бит электән ҡараңғы саҡта һунар итеп өйрәнгән.Әммә тормош геүләп торған урындар хәҙер үләт һуҡҡандай тынып ҡалған. Йәйҙән йәшереп ҡуйған запастар ғына ҡотҡара Тып-Тыпты. Ярай әле, мөмкинлек барҙа тырышып ҡалған.

Бер осор һауа бер ни тиклем асылғандай булды. Йондоҙ күстәре теҙелешкән күк көмбәҙендә яҡты таҫма һыҙылып китте. Күктең иңенә һуҙылған һәм ҡыйыуһыҙ ғына ҡалтырап торған таҫма тере йән эйәһеләй тын алған кеүек тә күренде. Таҫма бер аҙ йәшел төҫкә лә инеп киткеләне, шунан юҡ булды һәм ер өҫтөндә сыҙап торғоһоҙ ел ҡупты. Тып-Тыпҡа йәнә ҡар өңөнә инеп боҫоуҙан башҡа сара ҡалманы.

Ҡырҡ икенсе глава

## Авария

Яҙын да, йәйен дә асыҡманы Тып-Тып. Әммә ҡышҡа табан тынғыһыҙлыҡ солғап алды. Тундра күңелһеҙлеге менән эсен бошора башланы. Ятраҡан тауҙары, тайгаһын һағынды.Уға уның тыуған ерҙәренән дә бай, матурыраҡ ерҙәр юҡ кеүек тойола башланы. Дөрөҫ, унда ҡулына утлы таяҡ тотоп алған ике аяҡлылар мыжғып тора ул, тик Тып-Тып та уларҙың холоҡ-фиғелен яҡшы белә лә баһа.Уларҙың ҡапҡаны, хәйләләренән ҡотола алыр әле. Тик ул тыуған яҡтарынан уны аслыҡ ҡыуып ебәргәнен онотоп ебәргәйне.

Уны тыуған яҡтарына йәнә бер сәбәп тартты. Тундрала ике аяҡлылар менән ярышыу сәме етешмәй ине. Биләмәһендә ул кешеләр ни саҡлым ҡапҡан, хәйлә ҡормаһын, ни саҡлым ҡыуалап эҙәрлекләмәһен, һәммәһенән дә ҡотолоу юлын таба алғаны өсөн ғорурлана ине.Бындай алыштар, нисек кенә үлемесле булмаһын, уның өсөн уйын, мауыҡтырғыс ваҡиға булды.

Көндәр йәнә лә әсе һыуыҡтар алып килгәс, ул һағыныуына түҙә алманы, ҡайтыу юлына ыңғайланы.

Юлын еңеләйтер өсөн , таҫма булып һуҙылған йылға боҙо буйлап хәрәкәт итте.Бының кире яҡтары ла бар ине, ҡаршылыҡтарға осрамай, турана-тура елдергән ел ҡайһы бер ерҙәрҙә үтә ҡоторонop китә һәм юлға ҡар көрттәре өйөп ташлай, йылғаның ярҙары, аҡҡан юлы ҡайҙа икәнен дә аңғармай ҡалырға мөмкин.

Тып-Тып йылғаға арҡыры ятҡан ҡытыршы боҙҙарҙы шәйләберәк йүгерҙе лә йүгерҙе. Ярға тик тамаҡ туйҙырыр һәм берәр ышыҡта серем итер өсөн генә сығыр булды.Аҡ ағуна, ҡар аҫтынан күҙҙәре генә мызлап күренгән ҡанаттары ҡара биҙәкле ағуналар менән туҡланды.

Биләмәһенә барып етер ара берме-икеме үр аша төшөрлөк кенә ҡалғас, Тып-Тып ҡуян тоторға булды.Өс яҡтан да япраҡлы ағастар менән ҡамалған үҙәндә ағуна эҙҙәре лә, аҡ ҡуян эҙҙәре лә сыбарланып ята.Ул яланды күҙәтерлек урынға йәшенде һәм табышын һағалай башланы. Аҡ ҡуян оҙаҡ көттөрмәне.

Һикереүе булды, аҡ ҡуян йылғыр ғына ялтанып өлгөрҙө. Тып-Тып осло ағас ботағына барып төштө һәм ағас табанына үтәнән-үтә килеп

ҡаҙалды. Тып-Тып ҡыҙыулыҡ менән аҡ ҡуянды ҡыуаларға ынтылғайны, тәпәйендә һерәйеп торған ботаҡ баҫырға ла бирмәй, ауырттыра башланы. Ҡарға ултырып алып, ботаҡты теше менән һурып алыуҙан башҡа сара ҡалманы. Ауыртыу кәмей төштө. Ә аҡ ҡуян шул арала алыҫ китеп өлгөргәйне инде, уны ҡыуалауҙан фәтеүә сыҡмаясаҡ.

Росомаха яраһын ялап бөтәштерергә маташты, шунан ағуна булһа ла эләктерергә ниәтләне һәм, көтмәгәндә, һеләүһен эҙҙәренә күҙе төштө лә уның юлы буйлап китергә булды. Һеләүһендең табышының ҡалдыҡ-боҫтоғо эләмәҫме? Бер саҡрым тирәһе юл үткәс, һеләүһен үҙе күренде. Янында ашап бөтмәгән аҡ ҡуян ята. Сыбар бесәй Тып-Тыпты күреү менән ыҫылдарға, ҡолағын ҡайсыларға кереште. Торған һайын уҫалыраҡ ырылдай башланы. Шул саҡ һауала гөрөлдәү тауышы ишетелде. Ул тора-бара көсәйә төштө. Теге саҡта боландар көтөүен, росомахалар ғаиләһен ҡырған ҙур йәшел ҡош та ошоноң кеүек дөрөлдәй ине бит.

Тып-Тып һағайҙы. Күҙҙәрен күккә төбәне һәм, текләберәк ҡараһа, ҡара болоттар араһынан ҡурҡыныс ҡарсыға килеп сыҡты. Шул тиклем ҙур. Ҡош ерҙәгеләрҙе абайлап алды буғай, йәһәт кенә түбәнләй башланы. Росомаха тирәһендә аҫылынып ҡалғандай булды, ҡар бураны күтәрелде. Гөрөлдәгән тауышынан росомаханың ҡолағы тоноп китте. Былдай саҡта тик йүгереп ҡасып ҡына ҡотолоп булғанын аңлаған Тып-Тып башы менән ҡарға сумды һәм ҡар аҫтынан шыуышырға тотонды.

Теге ҙур ҡоштоң ишеге асылыуын, унан килеп сыҡҡан әҙәмдең бесәйгә карабин тоҫҡауын, унан ут атылып сығыуҙан һеләүһендең башы аша тәкмәс атып китеүен һәм, аҙаҡ килеп, ҡарға һуҙылып ятыуын Тып-Тып күрмәне. Уның ҡарауы, гөрөлдәү йәнә көсәйҙе, ер дерелдәп ҡуйҙы һәм бер аҙҙан ҡурҡыныс тынлыҡ урынлашты.

Тып-Тып ярты сәғәт тирәһе, ҡыбырларға ла ҡурҡып, ҡар аҫтында ята бирҙе. Танауы янындағы тынынан ирегән ҡар тын алырға ҡамасауламай. Тынлыҡты боҙоусы һиҙелмгәс, ҡыуышынан башын сығарҙы. Теге ҡурҡыныс ҡош яҡында ғына ята. Йәшел арҡаһынан ҡанаттары һуҙылып төшкән. Ҡорһағы аҫтынан төтөн сыға. Һеләүһендең үле кәүҙәһе, бер кеше ҡар өҫтөндә яталар.

Шығырлаған тауыш ишетелде, ҡоштоң ҡабырғаһындағы тишек киңәйҙе һәм унан ике аяҡлы килеп сыҡты. Тып-Тып ҡыуышына сумды һәм ҡолағын ҡарпайтты. Тышта шаҡылдау, шытырлау тауыштары ишетелде. Шуны тыңлай торғас, росомаха ойоп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

* * *

Вертолет ауып төшкәс Степан Ермилович тере ҡалғанына ышанмай торҙо. Башы бәрелгән, тын алырға бирмәүенә ҡарағанда, ҡаббырғаһы һынған булһа кәрәк. Ултығыска ҡайыш менән бәйләнеп ултырыуы ҡотҡарғандыр.Элек ул шул ҡайышҡа гел ҡул һелтәп ҡарай торғайны. Был юлы, Трофимдың биләмәһенән күтәрелеп киткәндә,бәлә килерен белгән кеүек, ҡайышты кәүҙәһе аша тарттырып эләктереп ҡуйғайны.

“Фәрештәләр генә һаҡлағандыр!”- тип уйланы Степан күҙҙәрен һауаға төбәп.Стенаға тотона-тотона пилоттың кабинаһының ишеген асты.Командир ҡанға буялған приборҙар таҡтаһына башын терәп ята.

- Иван Петрович, нисекһең?

Яуап ишетелмәне.Һаҡлыҡ менән генә пилоттың башын күтәреп ҡараны һәм һалҡын күҙҙәрен күреп, тертләп китте. Пульсын ҡапшаны. Пульсы юҡ. Вафат. Икенсе пилот тышта ҡар өҫтөндә ята. Вертолет ергә бәрелгәндә ишек асылып китеп, тышҡа сығып осҡайны, пропеллер һуғып һәләк иткән.

Башы геүелдәп китте Степандың. Нимә уйларға ла белмәне.

“Ҡайҙандыр ярҙам көтөүҙең фәтеүәһе юҡ. Бөтә тайгаға берҙән-бер вертолеттары бар ине, уныһы ла ҡолап төштө...Верхиға саҡлым иллеләп саҡрым барҙыр. Һунарсы өйҙәре ауылдан яҡыныраҡ. Өс көн эсендә барып етеп булыр. Тик икенсе пилотты нисек кәрәк вертолет эсенә индереп һалырға кәрәк бит...”

Кабина тәҙрәләре ватыҡ булыу сәбәпле, һунарсы мәйеттәрҙең кәүҙәһен ҡош-ҡорт теймәһен өсөн, зыян теймәгән салонға индереп һалды.Сумкаларҙы тикшереп сыҡты. Әллә ни ыратҡан нәмә табылманы. Дүрт кәртүф пирәжкеһенән башҡа ризыҡ юҡ.Уның ҡарауы, һунарсылар тапшырған болан, ҡош ите башыңдан ашырлыҡ. Туң иттең йомшаҡ ерен балта менән ҡырҡып алып, рюкзагына һалып алды.

- Нишләп кенә йоҡо ҡапсығым менән саңғымды һалып алманым икән, - тип ыуаланды үҙе. – Үҙемә йөкмәргә түгел ине бит инде.

Йыйыштырып, йыйынып алғылағансы ҡояш байыуға тартты.

Вертолеттың ишеген асып ергә төшәйем тиһә, ер йөҙәп киткәндәй булды. Бер яҡынайған, бер алыҫайған төҫлө.

- Вәт һиңә! Мейе сайҡалған ахыры!

Аяғын ҡайҙа терәргә лә белмәй аптырап торҙо. Тапалған ҡар өҫтө бер аҙға ғына йөҙәүҙән туҡтағас, аяғына баҫты. Ҡорос трос менән ишекте фюзеляжға беркеткәс, көнъяҡҡа табан тайпаңлап атлап китте. Аяҡтары буйһонмай. Тораҡ бер аҙ ҡыҙып киткәндәй

булды.Ауыртыныуҙары ла баҫыла төшкән кеүек, ә эсен бесәйҙәр тырнаған һымаҡ. Ике пилоттың да һәләк булыуында үҙен ғәйепле кеүек күрә.

Иллюминаторҙан һеләүһен менән росомаханың икеһен бергә күргәс, шатлығының сиге булманы: тимәк, йәнлектәр был яҡтарға әйләнеп ҡайта башлаған! Ул командирға ҡысҡырып өндәште һәм бармағы менән тәҙрәгә төртөп күрһәтте.Уныһы йылмайып ебәрҙе, ҡапыл юғарыға күтәрелә башланы һәм икенсе пилотҡа был күренеште фотоға төшөрөргә кәңәш итте.Тегеһе ишекте асты ла карабиндан ата башланы. Командир уға боролоп ҡарап ниҙер ҡысҡырҙы, шул саҡ вертолет һелкенеп ҡуйҙы һәм түбәнгә табан кәйелде лә китте...

Ҡырҡ өсөнсө глава

**Ауыр юл**

Тып-Тып ауыр тын алған, ҡар шығырлаған тауышҡа уянып китте. Аяҡ тауышы яҡынлап килә! Уның ҡайҙалығын күрҙеләрме икән ни? Уфф... Артабан киттеләр.Росомаха һаҡ ҡына башын сығарып ҡараны. Тышта яңы эҙтәр барлыҡҡа килгән. Кеше эҙтәренең береһе Тып-Тыпҡа таныш кеүек. Ҡайҙа осратҡайны һуң әле?

Ә-ә-ә! Ошондай эҙ сығарған ике аяҡлы уны баласағында арҡаһынан һыйлай торғайны ла баһа! Аҙаҡ эләктереп алып тар йәшниккә ултыртты һәм ҡырмыҫҡа иләүе кеүек мыжғышҡан кешеләр араһына алып барып олаҡтырҙы.Һаҡ булыуың хәйерле. Унан теләһә нимә көтөргә мөмкин.

Аяҡ тауыштары тыныуға бер сәғәт самаһы ваҡыт үткәс кенә ҡыуышынан сыҡты Тып-Тып. Әйләнә тирә тынлыҡҡа сумған, хатта ҡар бөртөктренең ергә төшкәне лә ишетелгән кеүек. Тимер ҡош тирәһенән төтөн эҫе килмәй. Уның янында кеше аяғы эҙҙәре бар. Ул кеше ҡайын ботағынан таяҡ ҡырҡып алған.Тып-Тып уның эҙенән барырға булды.

Тиҙҙән ҡыуып та етте. Таяҡҡа таянған да яйлап ҡына китеп бара. Ут сығара торған таяҡ түгел, ҡайындан ҡырҡып алған таяҡ.Тып-Тып һаҡ-һаҡ ҡына алғараҡ табан йүгерҙе. Ысынлап та таныш кеше микән? Шул икән. Йөҙөн ҡуйы йөн ҡаплаған танышы.

...Степан ағасҡа һөйәлеп тынын тигеҙләне. Һынған ҡабырғаһы иркен тын алырға бирмәй.Тәрәнерәк һулауы була, әсетеп сәнсеп ебәрә, маңлайына тир бәреп сыға.Етмәһә, аяҡ баҫҡан ер сайҡалып киткеләй. Бер-ике көн тыныс ҡына ятып торорға ине лә бит, артабан атларға кәрәк шул.Шәберәк атлай алһа, бигерәк яҡшы булыр ине лә.Көсө самалы.

Ял итеп торғанында охотовед бөгөнгө хәл-ваҡиғаларҙы йәнә уйынан кисерҙе.

“Анау мүк еләге шарабын нимәгә эсергә кәрәк ине. Тайганан әйләнеп ҡайтҡас, кискеһен эсерҙәр ине әле. Ахмаҡ аҡылы төштән һуң!”

Тайгала йәнлектәр ҡалмағанын белә тороп, браконьерлыҡты туҡтатыу маҡсатынан милицияға, үрҙәге түрәләргә мөрәжәғәт итеүҙәренең файҙаһы булманы.Былтыр өлкәнең ер комитетында госпромхозға Баш Арҡанан һунар биләмәһе биреүҙәрен һәм шуны ете шәхси һунарсыға беркетеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итте. Верхиға иң яҡын һунар биләмәһе 180 саҡрым алыҫлыҡта ята.Йәйәү йөрөрлөк түгел. Авиаотряд командиры яҡташтарына бер вертолет бүлеп, изгелек эшләгәйне. Командирҙың ҡатынына өс кеш тиреһе бүләк итергә вәғәҙә итте Степан Ермилович.”Буран” менән тайга ҡыҙырып байтаҡ йәнлекте ҡырып сыҡҡан һунарсылар һәм закуп агенты менән килешеүҙе өҙҙө.Иң мөһиме Дағаны потребсоюздағы эшенән бушаттырҙы, хәҙер ауылға автолавка менән Макарычтың улы килеп йөрөй.

Ауыл кешеләре тәүге рейстан үк закуп хаҡтарының икенсе булыуын аңғарҙы.Баҡһаң, Даға уларҙы гел алдаған, тапшырған продукцияны утыҙ процентҡа кәм хаҡҡа йыйып йөрөгән икән.Халыҡтың ныҡ асыуы килде, бынан ары ҡулдарына аҡсаның мулыраҡ тейеренә шатланып бер булды. “Буран” машинаһы хәҙер тик Лукъянда ғына тороп ҡалды.Уның да һунар биләмәһен тартып алдылар. Хәҙер ул бал әсетеп эсеп ала ла “Буран”ына атланып күл өҫтөнән елдереп йырлап йөрөй: “Врагу не сдается наш гордый “Варяг”, пощады никто не желает”.

Был юлы Степан яңы биләмәләрҙе вертолетта йөрөп сығып, һунарсыларҙың табышын йыйып, аҙыҡ-түлек, сезон аҙағынаса етерлек боеприпас таратып сыҡҡайны. Һуңғы туҡталышта Трофим мүк еләгенән ҡойолған настойка тәҡдим итте. Берәр көрөшкә һалып ҡуйҙылар ҙа күңелсәкләнгәс йәнә берәрҙе ебәрҙеләр.

- Һәйбәт һинең был өйөңдә, Трофим! Шундай матурлыҡ! Бер- ике аҙна ошонда йәшәп ал ине ул, - тип тәьҫирләнеп тә,уфтанып та алды икенсе пилот.

Һунарсы ла йәнләнеп китте:

- Тороғоҙ бер аҙыраҡ! Һунар итербеҙ. Гөжләшеп ултырырбыҙ, настойка етерлек, - тип өгөтләне.

- Әйткәнеңә рәхмәт! Ҡуҙғалырға кәрәк. Һуңғыһын тотайыҡ та...

“Һуңғыһы булып та ҡуйҙы шул...”- тип уфтанды Степан һәм артабан атлап китте.

Ҡар ҡаплаған һаҙлыҡ ҡышын да туңмай ята.Аҫтан берәрһе усаҡ яғып торамы ни.Атлаған һайын аяҡ аҫты лысҡылдап тора. Табанына ҡар йәбешеүҙән унталары ауырайҙы. Атлау ҡыйынлашты.”Яҡыныраҡ өй

янына барып етергә көсө етерме?” Ә ул ҡышлау өйөндә мейес имен, ризыҡ бармы икән?

Хафаланыуы буштан түгел ине шул. Йәнлектәр ҡырылып бөткәндән бирле байтаҡ һунарсылар биләмәләрен ташлап ҡуйғайны. Элегерәк һәр өйҙә тимер мейес, ярылған утын булыр, өрләктә киптерелгән икмәк, ярма эленеп торор ине.Хәҙер иһә шырпы ла табылмауы ихтимал.

“Петрҙың өйөнә барып сығыр кәрәк ине. Ул бынан алыҫ булмаҫҡа тейеш. Хужалыҡлы ҡарт. Донъяһы бөтөндөр. Кибенермен, сәй эсеп алырмын, ятып ял итермен,”- тип хыялланды охотовед.

Ҡыштың ҡыҫҡа көнө кискә ауышты. Һаҙлыҡтың урыны-урыны менән ҡорораҡ ере тумпайып тора, тәпәшәк булһа ла ылыҫ ағастары үҫеп ултыра. Шундай бер урында ҡунырға булды Степан. Итегенә ҡатҡан боҙҙо ҡырып төшөрҙө.Ҡоро утын йыйып алды. Полиэтилен ҡапсыҡҡа урап һалып алған шырпыһын сығарҙы. Нисәне һыҙмаһын, киҫкен иҫкән ел шырпыһын һүндереп тик тора. Елдең бер аҙ тынғанын көтөргә тура килде.Һәм бына усағы дөрләп тә китте. Тирә яҡ иһә күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғылыҡҡа сумды. Ел ыңғайына елпелдәгән усаҡ телдәре, төлкө ҡойроғо кеүек, тегеләй ҙә, былай ҙа борғоланып, үргә үрләй. Кейем өҫтөнән дым күтәрелә.

Бер аҙ йылынып алғас, Степан Ермилович унталарын сисеп ойоҡбаштарын киптерергә элде.Итеген алыҫыраҡ тотоп киптерҙе, тиреһен яндырып ебәреүҙән ҡурҡты. Аяғын ҡорошҡаҡ тотоп алып китте.Унан ҡотолоу өсөн балтырҙарын оҙаҡ итеп ыуалап ултырҙы.

Ҡоро утын тиҙ генә яна ла бөтә, Степанға төнө буйы утын йыйып йөрөргә тура килде. Уныһын эҙләп алыҫҡараҡ барырға тура килә. Усаҡҡа йә түше, йә арҡаһы менән боролоп йылынып ҡараһа ла, йоҡлап китә алманы.Арҡаһын йылтҡан арала түше, түшен йылытһа – арҡаһы өшөп алып китә.

Таң атыуын ыҙанан ҡотолған кеүек көтөп алды.Төн көс өҫтәмәгәйне, киреһенсә, хәле насарайған. Болан итен телгеләп тамаҡ ялғап алғас, Степан йәнә һаҙлыҡҡа бата-бата юлын дауам итте. Үрерәк бер ергә барып еткәс, емеше бауланып торған гөлйөмөш ҡыуағын тап итте. Уларҙы тороп ҡалған ике пирожогына ҡушып ашап алды.Ҡояш күренде һәм юлсы уның нурҙарынан иҙрәп, рюкзагын баш аҫтына һалып ергә ятты.Тамағы туйып, бер аҙ йылынып алыуҙан тәне ойоп, серемгә сумды.

Өҫтөнән ҡанат елпеп осоп үтеп, яҡындағы ағасҡа ҡунаҡлаған аҡ ҡанатлы арлан бөркөтөн ул күрмәне. Ҡанаттарын йыйып ултырған йыртҡыс бөркөт хәрәкәтһеҙ ятҡан кешенән күҙен дә алмай ине. Ҡанаттары сабырһыҙланып һелкенеп ҡуя, осло суҡышы ла табыш көҫәп

бер асыла, бер ябыла. Кеше тере түгел тип аңлаған арлан шатлығынан саңҡылдап ҡуйҙы. Степан тауышҡа уянып китһә, янында оло-ғара ҡош ултыра.

- Ҡара һин уны!- тип ҡысҡырҙы Степан һәм таяғын һелтәп ебәрҙе.- Хәҙер бына, көт!

Йыртҡыс ҡош һары күҙҙәрен асыулы ялтыратып алды ла теләр-теләмәҫ кенә ситкә тайпылды.Степан аяғүрә баҫырға ашыҡты. Күҙ алды ҡараңғыланып китте. Таяғына терәлеп кенә сак-саҡ аумай ҡалды.Бер ни тиклем рәтләнә биргәс, еүеш ҡарҙың туңған борсаҡтары өҫтөнән артабан атлап китте.Кискә саҡлым ете саҡрым тирәһе юл үткәндер. Офоҡ тирәһендә бала сағынан таныш Башлы Шәкәр армыттарының шәүләһе тоҫмалланды.

Ҡороға баҫып усаҡ өсөн ҡар көрәп алырға тип рюкзагына үреләйем тиһә, уны бая баш аҫтына һалып йоҡлауын, шунда онотоп ҡалдырыуын иҫенә төшөрҙө. Ярай әле шырпыһы кеҫәһендә булып сыҡты.Шырпыһы ла еүешләнгән. Тоҡанмай ыҙаланы. Көс-хәл менән усаҡ тергеҙеп ебәрә алды.

Ҡара төтөндө ярып ялҡын үрләне . Алтын осҡондар сәсрәтеп яна. Степан кибенеп алды. Ҡар кирбестәре соҡоп ышыҡ бураны. Шуға терәлгәс ҡабырғаның ауыртыуы бик ыҙаламаны.

Иртәнсәгенә асығыу ныҡ һиҙҙерә башланы. Кеҫәне соҡоуҙан ни файҙа, унан буш кәнфит ҡағыҙы ғына килеп сыҡты.Ҡатыны биреп ебәргәйне. “Мишка на севере”. Рюкзакта ит бар ҙа бит, унда боролоп барырлыҡ көс юҡ шул. Башы әйләнеүҙе, ҡоҫҡоһо килеүҙе саҡ-саҡ еңеп, Степан алда һерәйешкән тау үркәстәренә табан китте. Ауыр атланы. Торараҡ мускулдары яҙыла биреп китте китеүен.

- Саңғым булһамы!- тип өҙгөләнде үҙе. – Ни саҡлым еңелерәк була ине.Былай килеп сығырын кем уйлаған инде!

Төшкә табан тамам хәлдән тайыуын аңланы. Әммә арҡаһынан ҡыуалаған әсе ел, ниндәйҙер аңһыҙ буйһонғанлыҡ уға биленән ҡарға бата-бата алға атларға ҡуша ине. Бара торғас, ҡар өҫтөнән йөрөй торған ағас табан эшләп алырға кәрәклегенә төшөндө. Шунһыҙ был көрттәрҙе ярып барыу, барлы-юҡлы көстө нык ала.

Шыйығыраҡ тал сыбыҡтарын ҡырҡып алып түңәрәтеп үреп сыҡты. Ҡайышын өс таҫма итеп телеп ташланы. Икәүһе менән тал табандарын аяғына сырманы, берәүһе менән салбарын быуып ҡуйҙы. Ҡарға батмағас, атлау еңелләште.

“Шуны аллданыраҡ эшләп алһам була ине бит инде, - тип үҙен әрләп алды. – Ибәтәй юғала башланы. Ҡартайыу микән?”

Болот араһынан ҡояш нуры күренде. Йылыраҡ булып китте. Ял иткеһе килде. Ҡырын ятып йәнә уйҙарына бирелде.Ә улар төрлө ваҡиғалар сылбырын тәртипһеҙ рәүештә теҙә лә теҙә.

Бына ул мотоциклы һыуға ҡолап төшкәс, һыу эсенән әйберҙәрен йыйып йөрөй...Ҡартатаһы тотторған үҙенән дә ҙур мылтыҡтан атып маташа. ..Гел ҡыя ата. Күл өҫтөндә уйнаған өйрәк, ҡаҙҙарҙың тамашаһын ҡыҙыҡһынып күҙәтә... Россомаха балаларын ашатам тип бирсәткә бармағынан һурғыс әтмәләй...

Күҙ ҡабаҡтары көс еткеһеҙ була башланы. Юлаусы йоҡоға сумғанын абайламай ҙа ҡалды. Кемдер һалдат туҡымаһынан тегелгән бушлатын тырнаған кеүек булғанға уянып китте. Күҙен асһа, берәү ҙә юҡ. Ҡар яуып тора "Ҡуҙғал, ҡуҙғал! Атла!"- тип кемдер берәү мейеһен сүкей.

Степан тороп баҫты. Бәләкәйҙән ятлаған доғаларының береһен уҡый-уҡый, ауыртҡан аяғына көс төшмәһен өсөн таяғына таянып алға китте. Томанланып бөткән күҙенә унан алдараҡ ҡыймылдаған ниндәйҙер ҡара тап салынып ҡалды.Башта ул быға иғтибар итмәгәйне. Ул алға атлаған һайын ҡара тап та шыла бара. Шуныһы ҡыҙыҡ, Верхи яғына табан хәрәкәт итә. Бәлки асығыуҙан күҙенә күренәлер? Усы менән күҙен ыуалап алды.Теге ҡара тап юғалманы. Степан туҡтаһа, ул да туҡтай.

"Нимә булыр? Бүреме икән әллә? Уның һуңғы сәғәттәрен көтәме? Ауыл этеме икән? Шул яҡҡа ыңғайлай бит. Юҡтыр, ауыл эттәре Степанды таный ул, яҡын килер ине. Әллә ҡырағайлашҡан эт микән?"

Серле оҙата килеүсене ҡыуып етеү маҡсатынан Степан үтә ҙур ҡыйынлыҡ менән аҙымдарын йышайта төштө. Бер сәғәт үтте. Аралар яҡынлашмай. Шул арала ел болоттарҙы офоҡ артына ҡыуалап төшөрҙө. Был үҙгәреш юлсыны шатландырманы, төнъяҡтан иҫкән ел һыуыҡ эйәртеп алып килә ул. Тиҙҙән яҡаһына, һаҡалына боҙло бәҫ ултырҙы. Төнөн туңып ятмаҫ өсөн яраҡлы урын эҙләргә кәрәк ине. Утынды ла күп кенә итеп йыйып ҡуйырға кәрәк. Әрәмәлә туҡталды. Бында ышыҡ. Усаҡ өсөн өс ағарып кипкән ҡоро ағасты йыға алды. Икәүһен аҫҡа, өсөнсөһөн уларҙың өҫтөнә һалып усаҡ тоҡандырҙы.Улар ныҡлап янып киткәс, йылынған Степан бер нисә сәғәт бер ни белмәй йоҡлап алды.

"Туңып барам!" - ана шундай уҡ кеүек уйынан уянып китте һунарсы.

Ағастар янып бөткән тиерлек.Ирегән ерҙәге үләндәр, кипкән япраҡтар быҫҡып ятһа ла ут телдәре күкһел-көрән генә булып ялпылдай.Бер торомбаш, һуңғы сәғәттәрҙәге агония кеүек, шартлап тарҡалып китте. Быҫҡып торған төтөндән генә бер ни тиклем йылы килгәндәй.Степан үҙенең туңыр сиккә етеп өшөүен аңланы һәм аяғына

баҫырға маташты.Ҡулының барлығы һиҙелә, ә бына аяҡтары бөтөнләй иҫ белмәй.

“Усаҡты тергеҙер кәрәк, юғиһә, туңасаҡмын!”

Ҙур тырышлыҡ менән ҡалдыҡ-боҫтоҡ сытырҙы усаҡҡа ташлап, өрөргә кереште. Ут көсәйә биргәс, янып бөтмәй һүнгән ботаҡтарҙы ла өҫтәп ебәрҙе.Эйелә биреп унталарын сисеп алды. Ап-аҡ мәрмәр кеүек ҡатҡан аяҡ бармаҡтары ҡыбырламай. Ҡаны йөрөп китһен өсөн Степан уларҙы ҡар менән ыуаларға кереште. Биш минуттан бармаҡтары үҙәккә үтерлек булып сәнсә башланы. Ыуалаған һайын ауыртыуы көсәйә генә бара. Тиҙҙән ул түҙеп торғоһоҙ һыҙланыуҙан донъяны яңғыратып ҡысҡырып ебәрҙе.

- А-а-а-а! Атларбыҙ әле! Ат л-а-а-рбы-ы-ҙ!А-а-а!

Алһыуланған бармаҡтарын ныҡлап ҡоротоп, йылынырға элгән ойоҡбаштарын кейҙе.Ҡар өҫтөнән йөрөй торған тал табанын рәтләп кейҙе лә артабан атлап китте.Бара торғас, күҙенә әллә нимә булыуын һиҙемләне. Бөтә нәмә лә тоноҡ, йөҙөп йөрөгән кеүек күренә башланы. Төҫтәрҙе лә айыра алмай. Етмәһә, башы сатнап бара. Алдан барған ҡара тап юғалды, әммә уны кемдеңдер күҙәткән кеүек тойғо ташламаны. Тирә яғын ҡараштырһа, бер нәмә лә күренмәй.Күҙәтә кеүек бит кемдер, күҙәтә кеүек! Степан интуитив рәүештә һиҙә бит!

“Үлемем эҙәрлекләйме икән ни? Ана күләгәһе ағастар араһынан ялп итеп ҡалды.Сәғәте һуҡҡанын көтөп йөрөйме? Эләктерә алмаҫһың, хәшәрәт!”

Ваҡыты-ваҡыты менән ҡолағына әллә нимәләр ишетелә башланы. Йә эттәр өргән, кешеләр һөйләшкән, йә ҡыңғрау һуҡҡан тауыштар сағылып китә. Ул инде үҙенең ҡайҙа һәм ни өсөн китеп барғанын да аңламай.Мейеһен бер генә уй сүкей: туҡтамаҫҡа! Туҡтама! Атла!

Тау сылбырҙары асығыраҡ төҫмөрләнгәндәй булды.Степанға был урындар таныш. Бынан биш саҡрым тирәһе алыҫлыҡта атаһының ҡышлау өйө бар.

-- Нисек яҙлыҡтым икән һуң юлдан? Петрҙың өйөнә тоҫмаллап киткәйнем бит! Я Рабби! Көс әйләһәң ине!- тип ялбарҙы юлаусы.

Ҡайғырмаҫлыҡ та түгел ине шул. Был тирәнән ауылға тиклем байтаҡҡа алыҫыраҡ. Етмәһә, ике артылышҡа менеп төшәһе бар.Бейек тә түгел улар, тик көсө аҙ бит Степандың.

Йәнә әсе ел сығып китте. Йә бер, йә икенсе яҡтан килеп һуғылып тәнде өтөп алып бара. Тигеҙерәк ерҙәрҙә бигерәк көсәнеп ҡотора, аяҡтан йығырлыҡ итеп бәрелә.Боҙло рашҡыһы күҙгә, ауыҙға

тула. Һәр аҙымы ауырлыҡ менән бирелә Степанға. Әммә ул, алдынан барған ҡара тап әйҙәүенә эйәргәндәй, артабан атлай ҙа атлай. Бөтөнләй хәлдән тайһа, йән бирергә йыйынған януар кеүек, ағасҡа терәлә һәм күҙҙәрен йома. Терәлеп тик тороу шул тиклем рәхәт! Ана шулай тик тор ине ул!. Тик ярамай шул, хәрәкәтһеҙ ҡалдыңмы – үлереңде көт тә тор.

Шулай бер тапҡыр ял итеп алғандан һуң, күҙен асып ҡараһа, аяғы аҫтында ағуна ята.Йылы ғына әле. Охотовед был бүләкте үҙенсәләп ҡабул итте: урман эйәһенең эшелер! Һунарсыларҙың сәйер күренештәргә тап булыуы сер түгел.

Ул ағунаның тиреһен йөнө-ние менән һыҙырып ташланы ла күкрәк итен умырып ашай башланы. Көс инеп кикәндәй булды. Аҙымдары ла еңеләйҙе.

Эңер төштө. Ә ҡышлау өй күренмәй әле. Оҙатып барыусы ла юҡ булды.Степан аптыранып ҡалды. Ул үҙенең ҡайҙалығын, ҡайҙа китеп барыуын аңларлыҡ хәлдә түгел ине.Ул арала төн тотош ҡараңғыланды.

“Йәнә усаҡ янында ҡунырға тура килер,”- тип уфтанды Степан.

Ҡыйынлыҡ менән бер нисә ҡороған ағасты ауҙарып һуңғы ике шырпыһының береһе менән усаҡ ҡабыҙҙы. Ҡарағайҙар бында киң ботаҡлы. Ул шуларҙан үҙенә йомшаҡ ҡына түшәк йүнәтте.Түшәккә ятыуы булды, упҡынға тәгәрәгән кеүек , йоҡлап та китте. Усаҡ та янып бөтөп быҫҡый башланы. Юлаусы уяна алманы. Кемдер арҡаһынан һелкеткән кеүек булғанға уянып китһә, берәү ҙә юҡ.

Һүрелеп барған усаҡҡа утын өҫтәне лә урынына кире ятты.Таңға табан йәнә лә нығыраҡ һыуытып ебәрҙе. Степан усаҡты тағы ла тергеҙеп ебәрергә иткәйне, ҡулы ла, аяғы ла буйһонманы, утыны ла юҡ самаһында ине инде.

“Тамам! Юл тамамланды!”- тигән уй һыҙылып үтте башынан һәм күҙҙәрен йомдо.Күҙ алдынан ҡатынының, ҡыҙының һыны йөҙөп үткән кеүек күренде.

- Минһеҙ нишләр икән улар! Ҙур ҡайғы булыр бит минең үлемем... Бирешергә ярамай!

Ул ҡалҡынырға маташып ҡабырғаһына боролдо, тырышып-тырмашып эсенә ятты. Туңған аяҡтарын ҡорһағы тирәһенә тартып тубыҡланырға маташты. Таяғын һәрмәп алып таянды һәм аяғына баҫты.

Аҙым яһар алдынан өшөүенән ҡалтыранып, сайҡала-саҡала баҫып торҙо. Уны танырлыҡ та түгел ине.Күҙҙәре эскә батҡан, һыуыҡтан

ҡарайған йөҙөндәге маңлай, сикә тиреләре һәленеп төшкән. Теше шаҡылдауҙан һаҡалы дер - дер ҡалтырап тора.

“Ҡайһы яҡҡа табан барырға һуң? Ә-ә-ә... Ана юлдашы, юл күрһәтеүсеһенең күләгәһе шәйләнә. Уның артынан эйәрергә кәрәк!”- тип үҙен дәртләндерҙе Степан. Бер-ике аҙым атлағас та ағас табанын кеймәгәнлеге иҫенә төштө. Береһен шыршы ботағы аҫтынан табып алды, икенсеһенең ҡайышы ғына ята, үҙе янып бөткән.Йоҡо аралаш аяғы менән усаҡҡа табан эткән дә ҡуйғандыр күрәһең.

Тауҙағы ҡар ҡалын да йомшаҡ та. Батып киткән аяҡты һурып алыр өсөн дә көс кәрәк. Степан бер нисә шыршы ботағын һындырып алып шуларҙан табан яһаны һәм ҡалған ҡайыш менән унталарына беркетте. Йәтеш яҫы табан килеп сыҡты, атлауҙы еңеләйтте.Әммә тиҙҙән был рәүешле хәрәкәт итеүҙән башына ҡан һауғандай булды һәм ул сатнап ауыртырға тотондо. Ҡолағындағы тауыштар көсәйҙе, күҙен ап-аҡ яҫмаҡ ҡаплап алды һәм ара-тирә ҡара дүңгәләктәр, осҡондар күренә башланы.Әллә ҡайҙан осоп киләләр ҙә төрлө төҫлө йомғаҡҡа әүереләләр, берсә таралып, берсә ойошоп китәләр.

Ҡапыл бөтә нәмә лә ҡараңғылыҡҡа сумды.Степан ни бары уға яҡын ағастарҙың шәүләһен генә төҫмәрләй алды. Йәйғор төҫөндәге дүңгәләктәр шәберәк әйләнергә тотондо һәм юлсы аңын юғалтты.

Ҡырҡ дүртенсе глава

**Һабаҡ**

- Ермилыч!..Ермилыч! Ишетәһеңме мине?

Туңып йәбешкән күҙ ҡабағын саҡ ҡайырып асҡан Степан нимәлер мығырлап ҡына ҡуйҙы.

Көслө ҡуллы кеше уның башын күтәрҙе һәм иренենә эҫе сәйле көрөшкә терәне. Уны бер нисә тапҡыр йотоп ҡуйғас, ҡарашына мәғәнә ингәндәй булды. Күҙҙәрен асыбыраҡ ҡараһа, янында Лукъян тубыҡланып ултыра, яҡында ғына “Буран” машинаһы тора. Әйләнәлә сикһеҙ тайга.

“Эҙләгәндәр! Тапҡандар!”- тигән уй килә һалды Степандың башына. Башы йәнә шаулай башланы, ҡыңғырауҙар зыңлашырға тотондо һәм ул яңынан аңын юғалтты. Тәүлек үткәс кенә аңына килә алды Степан. Өйөндә ята. Өй эсе йылы.Самауар төтөнөнөң еҫе килә, яңы ғына бешерелгән сәй, тәҙрә төбөндә ултырған яран гөлдәренең еҫе бар.Оҙаҡ йылдар буйы сабырлыҡ һәм тырышлыҡ менән ҡорған ғаиләһе, ҡәҙерле донъяһына ҡайтарып һалғандар.

Ҡатыны битенә, ҡул-аяҡтарына һаҡлыҡ менән генә ҡаҙ майы һөртә-һөртә вертолет әйләнеп ҡайтмағас, авиаотряд командирының тәжрибәле һунарсыларҙы алып саңғылы “аннушка” менән эҙләргә

сығыуын һөйләне. Вертолеттың ауып ятҡан урынын икенсе көнөнә генә тапҡандар.Тотош йөктө лә, мәйеттәрҙе лә бер үк рейс менән алып сыҡҡандар.Эҙҙәреңә ҡарап, һинең Верхи яғына китәнлегеңде сырамытҡандар.Ирҙәр, саңғы кейеп алып ҡаршыһына сыҡҡан. Ә Лукъян өсөнсө көнөнә генә машинаһын ремонтлап сығып китә алған.Степанды Лукъян табып алған да инде. Сергий атаҡай, фельдшер килеп киткән.Саҡ ҡына һуңлаһалар туңыуҙан йөрәге туҡтар ине, тигән.

Степандың хәле арыуланғанын ишетеп, Сергий атаҡай кискә табан йәнә килеп етә һалды.Уның ҡатынынан:

- Ни хәлдә? – тип һорағанын ишетеп ятты Степан.

- Раббыға шөкөр, аңында.

Уның артынса уҡ күрше ир-ат килеп инде.Шатлыҡтарын йәшерә алмай, Степандың яурынына ҡағылып-ҡағылып алалар:

- Тереһең бит!

- Рәхмәт, егеттәр! Ҙур-ҙур рәхмәт!- тип шыбырланы Степан. – Ә һеҙгә, Лукъян Митрофанович, айырыуса рәхмәтлемен!

- Һин минән дә бигерәк росомахаға рәхмәт әйт.Тып-Тыпҡа.Мин уны күкрәгендәге аҡ һыҙатынан шунда уҡ таныным.Һинең яныңа ул алып килде лә инде. Тегеләйсә ни, табырһың-тапмай ҙа ! Тайга эсендәге кеше ни, кәбәндәге энә ни! Етмәһә, өҫтөңдә ҡар бурап киткән.Тотош тайга ап-аҡ. Ә Тып-Тып уғата ла аҡыллы януар булып сыҡты. Дөрөҫөн әйткәндә, күҙемә күренгәс, атып алырға ла ҡул ҡысығайны. Мылтығымды алмағанмын. Кәрәге булмаҫ, тигәйнем. Тайга етемһерәне, йәнлек-фәлән осратырмын тимә. Ә Тып-Тып минән ҡурҡырға кәрәкмәгәнде шунда уҡ аңлап алды.Йүгерә лә миңә боролоп ҡарай, бара-бара ла борола, эйәр артымдан, тигән һымаҡ. Эйәрергә тура килде. Бер асығыраҡ ерҙә туҡтап ҡалды. Ҡарҙы соҡоно-соҡоно ла ситкә тайпылды.Мин “Буран”дан һикереп төштөм дә соҡонған еренә килдем.Ҡараһам, ҡар аҫтынан бушлатыңдың итәк осо күренеп тора.Бына шундай ҡыҙыҡ тарих, ҡустым!

- Фантастика! Мин бит үҙем дә уны күрә килдем, күрә килдем.Нимә икәнен генә аңламаным . Иң аҙаҡтан ул әллә ҡайҙа табан йүгереп китте лә юҡ булды. Тып-Тып булған икән дә. Йоморо баш! Әле ҡайҙа икән?

- Һине соҡоп алғанды ҡарап торҙо ла ары китте. Тауҙар яғына. Боролоп та ҡараманы. Нимәгәлер үпкәләгән кеүек ине.

- Үпкәләттек шул беҙ уны, бик нык рәнйеттек, - тип шыбырланы Степан һәм күҙҙәре моңһоуланып китте.

2015 йыл, Өфө

Руссанан башҡортсаға **Тамара Ғәниева** тәржемәһе

**Камил Йыһаншин**

## Хикәйәләр

## Ялбыр

( хикәйә)

Илле ете йәштә булыуына ҡарамаҫтан, егеттәрсә ирәбе Федор Дементьевич, ауылдаштары ҡушҡан ҡушаматы менән әйткәндә Тәпәй, яңы ғына таҡтанан ҡағылған киң тупһала аяҡтарына ныҡ баҫып, кейәүге һалған яңы өйҙөң ырып биҙәлгән тәҙрә наличниктарына ҡарап тора.

Ишек асылып китте һәм унан көлөшә-көлөшә атаһына оҡшап торған йыуантаҡ ҡыҙы Наталья менән мыҡты кәүҙәле кейәүе килеп сыҡты.

- Атай, көйрәтмә инде, етер, өшөйһөң бит, өйгә ин, - тип өндәште ҡыҙы.

- Ҡайтырға ваҡыт миңә, Натаха, - тип яуап бирҙе Тәпәй һәм, болоттар арһына ҡыҫылған ҡояшҡа ҡарай-ҡарай, яй ғына тупһа баҫҡыстарынан әлегә бик үк йыйнаҡ булмаған ихатаға төштө.

- Ялбыр!- тип этен саҡырып алды һәм һыуыҡтан аяғын бер тегеләй, бер былай баҫып түҙемһеҙләнгән Ҡолаһына табан атланы. Атының осаһынан ҡағып ҡуйҙы, дилбегәһен рәтләне, саналағы бесәнде күпертте һәм толобона төрөнөп, брезент ябып ҡуйылған бер тоҡ онона терәлеп ултырып алды.

- Иҫән-һау тороғоҙ! Ҡунаҡҡа килеп сығығыҙ! - тип ҡысҡырҙы ҡуҙғалып киткәс.

Ялбыр яллы ҙур кәүҙәле кәнтәй тегеләй борғоланып, былай борғоланып йөрөгән еренән аттың артынан елдерҙе һәм торараҡ тигеҙ генә сабып барған аттың алдына барып та сыҡты. Ҡасабаны, ҡуйы итеп ултыртылған ҡарағай ағаслығын үтеп, япраҡлы ағастарҙан торған урман тирәһенә еттеләр.Ҡояш тырпайышҡан ағас баштары артына инеп сумды. Ҡараңғы төштө.

“ Август айында өй ҡотларға килмәйенсә яҡшы иткәнмен. Уның ҡарауы, әле бер юлы ике ҡуян ҡойроғо тотолдо. Йәштәр менән дә күрештем, итемде лә һаттым. Ярай әле, башым йоморо,”- тип үҙен үҙе маҡтап ҡуйҙы Тәпәй һаҡалын һыпыра-һыпыра.

Юл тау һарҡыуына төшөп китте һәм йылға үҙәне тирәһенән кәкерсәкләнеп юрғаланы. Ҡар ҡатҡан ерҙәрҙән һелкенә-һелкенә шыуған сана сәңгелдәк кеүек еңелсә генә бәүелтә. Тәпәй ҡулынан дилбегәһен ысҡындырмай ғына һуҙыла биреп ултырҙы һәм күңеленән табышын һанарға, уны нимәгә тотонорға икәнлеге тураһындағы уйҙарға бирелде.

Аҡса таба белмәгән кешеләрҙе ул яратмай.”Эт ялҡауы йә буш ҡыуыҡ,-“ тип кенә ҡуя ундайҙар хаҡында. “Кейәү ҙә инде, - тип иҫенә төшөрҙө Тәпәй,- быраулау мастеры берәү! Цемент алып бирергә ҡулынан килмәй.Йәнәһе лә ҡулы бармай. Тьфу!”- тип төкөрөп ҡуйҙы.

Уйҙарын Ҡоланың тынысһыҙланып бышҡырыуы бүлдерҙе.

Айғыр ҡолағын ҡайсылап, танауын сирып йәнә бышҡырып ҡуйҙы.Алдараҡ йүгергән Ялбыр сана тирәһенәрәк һыйынды. Тәпәй башын борғосланы һәм юл ситләп нимәләрҙеңдер хәрәкәт итеүен күреп ҡалды.Тоноҡ ҡына күләгәләр һис ҡурҡыуһыҙ , ынтылышлы итеп йүгерешеп китеп бара. Бүреләр ҙә баһа!

Бармаҡтары сәнсеп һыҙлап, эсе ҡайышып китте Тәпәйҙең.

- На-на! Алға, алға! - тип ҡыуаланы, былай ҙа саптырыуға һалышҡан атының арҡаһын сыбыртҡылап. Аты ел ыңғайына ялдарын елберләтеп ҡушаяҡлап елдерергә тотондо. Ҡараңғылыҡтан ағастар йүгерешеп килеп сыға ла шунда уҡ артҡа шыуыша.Сана аҫтынан ҡар бураны ғына күтәрелеп ҡала.

Бүреләр ҡараңғы эсенә инеп сумған кеүек булды. Юл да, йылға ла оҙон һәм бейек һыртты урап үтә ине.Был тирәне яҡшы белгән бүреләр өйөрө башлығы өйөрөн Ҡола саптырып китеп барған сана юлына килтереп төшөрҙө.

Тәпәй атын һаман ҡыуалай бирҙе һәм нимә эшләргә икән, тигән план ҡорорға маташты. Бүреләр уларҙы былай ғына ташлап китмәгәндер бит инде. Алда ырғаҡҡа оҡшаш боролош бар. Үлеме шул ырғаҡҡа йәшенмәгәнме икән әле? Кире боролор инең, ҡасаба алыҫ ҡалды.

- Бәлки ысҡынып булыр,- тип тынысландырҙы үҙен һәм дилбегәне һыңар ҡулында тотоп, икенсе ҡулына бесән аҫтында ятҡан балтаһын һәрмәп тотоп алды.

Ат ҡапыл үрәпсеп китте һәм ҡарҙы туҙҙырып ситкә ҡайырылды, бүре өйөрө быларҙың алдына килеп сыҡҡайны. Уҫлаптай өйөр башы шунда уҡ Ҡоланың муйынына ырғыны.Йыртҡыс һикергән ыңғай түше менән тәртәгә бәрелеп кире ҡолап китмәһә, аттың үңәсен сәйнәп өҙөп өлгөрә ине. Шаңҡып ҡалған Тәпәй аңына килеп, бер тоҡ ондо күтәрә һалып өйөрҙөң өҫтөнә ырғытып ебәрҙе.

Ҙур ғына он тулы тоҡ ергә барып төшөп тә өлгөрмәне, бүреләр уны ярып ебәрҙе һәм һауаға он бураны күтәрелде. Тәпәй шул арала санаһын тигеҙләй һалып та өлгөрҙө.

- Әйҙә!Әйҙә! - тип аҡырҙы үҙе атын сыбыртҡы менән яра-яра. Ҡурҡышынан һәм ауыртыныуҙан аңын юғалтыр сиккә еткән айғыр табан

аҫтынан ҡар йомарлмадары осора-осора күҙенә аҡ-ҡара күренмәй елдереп китте. Хатта алдан саптырған Ялбырҙы ла ҡыуып үтте.

“Ҡотолорбоҙ бәлки,-“ тигән өмөт осҡонланды Тәпәйҙең аңында.

Сана тегеләй ҙә былай ҙа һуғылып ҡыйшайып-ҡыйшайып китә. Боролоштарҙа дилбегәле кеше саҡ-саҡ ҡолап төшмәй, уны тиҙлек тегеләй ҙә, былай ҙа ҡаҡҡылай. Ә ас өйөр йән фарманға арттарынан йомолоп йүгерә бирә. Федор Дементьевичтың һәр күҙәнәге был яуыздарҙың яҡынлығын тойоп, дер ҡалтырай. Ана, өйөр башы тешен шаҡылдаптып килә торғас сана артынан йүгергән Ялбырға ташланырға итте, тегеһе тиҙлеген арттырмаҡсы булды һәм хәлдән тайыуын аңлап, санаға һикерҙе.

Бүреләр юл буйынса һуҙылып, арттарынан еңел генә ҡыуалай, әлһерәгән атты ҡыуып етерҙәренә шикләнмәгән кеүектәр. Тәпәйгә уларҙың тын алғаны ла ишетелеп тора. Тиҙҙән улар табыштарын өҙөп – йыртып йылы ҡанын һемерәсәктәр, ит һоғонасаҡтар. Тәпәй өҫтөндәге толобон һыпырып сисеп быларҙың өҫтөнә ырғытып ебәрҙе. Йыртҡыстар толоп өҫтөнә ташланды һәм бының алдаҡ икәненә төшөнә һалып сана артынан ҡыуалауын дауам итте.Хәҙер улар элеккенән нығыраҡ асыулы һәм ажар ине.

Федор Дементьевич улар алдына бейәләйҙәрен, шарфын, бүреген ташлай барҙы. Бер алданған бүреләр быларға иғтибар итмәй башланы. Еңеү, табыш алыу сәменә бирелгән бүреләр ҡыҙғайны, ана етерҙән, бына уңышҡа өлгәшерҙән илһамланып, елдерә лә елдерә.Хәлдән тайҙырғыс был ҡыуышыуҙың аҙағы алыҫ түгел кеүек тойола уларға.

Ҡото алынған Федор Дементьевич та аҡылынан яҙыр сиккә етеп бер Ҡолаһын сыбыртҡылап бойороҡ бирә, берсә артына боролоп балтаһын һелтәй:”Тураҡлайым! Тураҡлайым һәммәгеҙҙе лә!” тип ҡысҡырына.

Араларында тик секундтар ғына йүгерешә. Тиҙҙән башлыҡ уның ҡулынан әләктерәсәк, ә ҡалғандары тере килеш өҙгәләй башлаясаҡ.

Ир алаң-йолан ҡаранып алды. Аяғына Ялбыры һыйынған.Тәпәйҙең башына гонаһлы уй килеп бәрелде: этте ҡорбан итергә! Тегеләр бит тере ҡан көҫәй! Ул этенә тибеп ебәрҙе. Тегеһе аяҡтарын тарбайтып йәбешеп, тәгәрәмәй ҡалды.Ҡиәфәтендә ниндәйҙер аңламау, ғәжәпләнеү һыҙаттары бар.

- Төш сананан!- Этенә йәнә тибеп ебәргән ыңғай Тәпәйҙең тауышында көҙгө әтәс ноталары ишетелеп китте. Ялбыр тәгәрләп китте, әммә эт таҫыллығы менән сананың артҡы кәзәнкәһенә йәбешеп өлгөрҙө.Ә бүреләрҙең ҡалышырға уйында ла юҡ. Хужа арҡаһы менән сана моронона терәлеп, йән көскә этен тибеп ебәрҙе, тегеһе кәзәнкәлә

тәрән тырнаҡ эҙҙәре ҡалдырып осоп китте һәм һауала, йомарланған килеш әйләнеп, өйөр эсенә барып төштө. Тиҙҙән ырылдаған, сыйылдаған тауыштар ишетелде.

“Ҡотолдоҡ буғай,”- тип уйланы Тәпәй ҡалтыраныуын һаман да тыя алмай. Эттең шелтәле, рәнйешле ҡарашы күҙ алдынан китмәй торҙо.

Сана кәкерсәкле юл буйлап елдерҙе лә елдерҙе. Тиҙҙән ауыл уттары күренде. Хәлдән тайған Ҡола аҙымдарын аҡрынайта төштө. Шунда ғына ярым яланғас Тәпәй тәненең өшөп ҡалтыраныуын тоя башланы. Бесән араһына инеп ятып, өҫтөнә брезент япты һәм артта ҡала барған урманға текәлде.Ҡурҡыуы яйлап ҡына юғала барған кеүек булды. Әммә кисергәндәре күҙ алдына баҫып, иҫенә төшөп, тотош тәнен зымбырлатып ҡуя.

Ауыл осона ингәс атын үҙ яйына ҡуйҙы. “Шәп шулай ҙа минең Ҡола, берәү булһа, анау тиклем ҡыуышыуҙы күтәрә алмаҫ ине,"- тип ҡыуанды.

Буш, шөҡәтһеҙ һәм күңелһеҙ урамды үтеп, үҙенең ҡоймалары буялған ыҫпай өйөнә етәрәк, күңеле йомшарып китте Тәпәйҙең: “Үҙ донъямды бүтән күрә алмауым да мөмкин ине бит...”

Өйөнөң тәҙрәләренең ҡапҡастары ябылған. Ут янмай.

“Йоҡлап ята. Уның ни, ниндәй хәсрәте булһын,”- тип ҡатынына йәне көйҙө. Санаһынан төшөп, ҡапҡаһын асып инде һәм аяғы менән тибеп, өй ишеген туҡылдатты.

Эстән ҡыштырлау, шәп-шәп атлаған аяҡ тауышы ишетелде. Ишектең келәһе сылтырланы һәм асылып китте.Тәпәй, ябыҡ ҡына кәүҙәле ҡатынына күҙ ҙә һалып тормай, соланға үтте һәм включателгә баҫты.Яҡтырманы.

- Лампочкаһы янған, Федя, - тип аңлатты ҡатыны. Тәпәй мығырлап ҡуйҙы һәм өйгә инеп, ситса шаршау тартылған түр яҡҡа уҙҙы.

- Былай тиҙ ҡайтырһың тип уйламағайным, иртәгә ҡайтырһың тип көттөм, - тип аҡланды хужабикә.

- Өҫтәл рәтлә, өшөттө, - тип бойорҙо ире, ултырғыс тартып алып өҫтәл янына килеп ултырҙы. – Эй, шайтаның, Ҡола урамда ҡалды бит.- Шунан башына иҫке кәпәсен кейеп тышҡа сығып китте.

Атын туғарып йылы һарайға индерҙе, ҡалтырап торған арҡаһына септә япты һәм алдына бер ҡосаҡ тәмле еҫле бесән килтереп һалды.

- Аша! Ҡотҡарып алып ҡалғаныңа рәхмәт, - тип һөйләнде Федор Дементьевич, атының ялынан һыпырмаҡсы булды. Ҡола, ни өсөндөр, һыйпатырға теләмәне, башын борҙо.

- Нишләп улайтаһың әле һин? Улайтма, Ҡолаҡай! Ялбыр булмаһа, беҙ ҙә бөткәйнек бит! Мин һине ҡотҡарып алып ҡалдым бит! Ҡотҡарып! - тип шыбырланы ул атына, аҡланған кеүек итеп. Ҡола ауыр һулай-һулай ситкә боролоуын белде.

“Һәләк булмаç инекме икән әллә? – тигән уй килде күңеленә.- Берәрһенә балта менән тондорһам, бүтәндәре ҡурҡып ҡасмаç инеме икән? Сабылған иптәшенә алданмаçтар инеме?”

Ошо уйҙарынан Федор Дементьевич бөтөнләй күңелһеҙләнде. Тора торғас йәнә аңына килде: “ Хәҙер уйла-уйлама, эш эшләнде...Нимәһенә ҡайғыраһы...Ҡарар дөрөç булды,”- тип йыуатты үҙен.

Эт ояһы янынан үтеп барғанда сынйырға ҡағылды, унынһын эс

бошорғос итеп зыңғырлап ҡуйҙы. Ауыр уйҙарын еңеп, өйөнә табан атлап китте.

Ҡатыны өçтәл әҙерләгән. Ире алғы яҡта йыуынып алды ла йылы мейескә арҡа терәп, өçтәл янына килеп ултырҙы.

- Нисек йөрөп ҡайттың, Федя? Балаларҙы күрҙеңме?

- Күрҙем. Һау-сәләмәттәр. Өйҙәре килеп тороп ҙур, бөтә уңайлыҡтары бар. Газ яғып йылыталар. Берәр аҙнаға килеп китмәкселәр.Хужалыҡта ярҙам итербеҙ, тип вәғәҙә бирҙеләр.

- Уларҙың үҙ мәшәҡәте лә күптер, - тип ҡуйҙы хужабикә ҡыйыр-ҡыймаç ҡына.

- Мәшәҡәттәре булһа ни, өлгөрөрҙәр әле.

- Итте һатҡанһыңдыр?

- Һатмай ни! Ит һиңә шалҡан түгел, йәбешеп ятып алып бөттөләр. - Тәпәй кеçәһендәге аҡсаларын һыпырып ҡуйҙы, бүләк алғаны иçенә төшөп, уны килтереп сығарҙы.

- Быныһы һиңә, - тип бисәһенә сәскәле яулыҡ һондо.

- Рәхмәт инде, Федя! Рәхмәт инде! Матур, килешеп тора!

- Ярар, күп һөйләнәһең дә китһең, - Тәпәй ҡатынының һүҙен ҡырыç ҡына бүлдерҙе .

Яулығын көҙгө янына барып ябынып ҡараған ҡатыны йәнә йәнләнеп китте. Йөҙөнә йылмайыу сыҡты. Өçтәлде йыйыштыра башланы.

- Ялбырға сығарып бирәйем, - тип ит һөйәктәрен бер һауытҡа һалып алды.

Тәпәйҙең тыны ҡыҫылып ҡуйҙы.

- Бар, ят! Ҡолаға һыу эсерәһе бар, һөйәктәрҙе үҙем алып сығырмын.

Сеүәтәне тотоп, саф һауға килеп сыҡты. Көйрәтеп алды. Атын һуғарҙы. Йәнә көйрәтеп торҙо. Үҙен нисек кенә аҡларға, килеп тыуған хәлдә Ялбырҙы ҡорбан итеүенең дөрөҫ булыуында ышандырырға тырышмаһын, этенең һәләкәте йөрәгенә ҡаҙалған шырау кеүек ә сеттереп тик тора.

Түшәктә лә йоҡлап китә алмай борғоланып сыҡты. Эте ҡар өйөрмәһе эсенә йомарланып оса һәм ас ҡоторонған өйөр эсенә барып инә. Йомарланып оса һәм...

Тыштан аңлашылмаған ауыр һулау тауышы килгән кеүек. Ҡолаҡ һалып ята торғас, ойоп киткән. Төшөндә йәнә бүре өйөрө ҡамауына барып эләгә һәм улар уны быны-быны өҙгөсләп ташламаҡсы булып ҡыҫырыҡлай. Үлем ишараһы булып, башы геүләй башлай.

- А-а-а... –тип тыпырсынып ҡуйҙы Тәпәй.

- Федя, нимә булды? Ауырыйһыңмы әллә? – тип яурынынан һелкетте ҡатыны.

Федор Дементьевич ҡапыл уянып , ҡатынына текләп торҙо. Ҡайҙа ята әле ул? Ҡаранып алғас, өйөндә икәнлегенә төшөндө.

- Йә инде, - тип еңел һулап ҡуйҙы.

- Нишләптер ҡысҡырҙың, Федя. Бер-бер хәл булдымы әллә?- тип өҙгөләнде ҡатыны.

- Асығып ҡайтып, итте күберәк ашап ташланым ахыры. Уҡшыта. Ашҡаҙан эшкәртеп бөтә алмай күрәһең...Йоҡла...

Ҡатыны иренең сал төшкән тыңлауһыҙ сәстәренән һыпырҙы. Бәләкәй генә ҡулын иренең башына һалған көйө йоҡлап китте. Тәпәйҙең йоҡоһо ҡасты. Уйҙарын нисек кенә икенсе яҡҡа борорға тырышмаһын, улары ҡабат-ҡабат Ялбыр яғына борола ла ҡайта.

Уны көсөк кенә көйө өйөнә алып ҡайтҡанын хәтерләне. Ихата хужаһы булырлыҡ көслө, тоғро эткә әүерелгәне күҙ алдына килә.Уны эштән ҡайтҡанда шатлығынан һикергеләй-һикергеләй алсаҡ ҡаршы алғаны, хужаһының һәр бойороғон үтәргә әҙер тороуы иҫенә төшә.

Таңға тиклем тынyслана алманы Федор Дементьевич. Һаҡ ҡына урынынан тороп кейенде лә ихатаһына сыҡты.

Тупһаға сығып баҫыуы булды, күҙ алдында тештәрен йыртҡыстарса ыржайтҡан, битенең тиреһе һыҙырылған, ҡолағы йыртылып һәленеп төшкән ялбыр өрәк пәйҙә булды.

- Һинме был, Ялбыр? Ысынмы был?Юҡтыр ҙа инде...

Тәпәй юғалып ҡалды һәм артҡа табан тартылды, аяғы тайып, йығылып китте.

Башы эсендә йәнә үлем тауышы геүелдәй башланы...

Руссанан башҡортсаға **Тамара Ғәниева**

тәржемәһе.

**Өйөр**

( хикәйә)

Июль кистәренең береһендә бүре өйөрө тынғыһыҙланып урман эсендә разведчиктарының сигналын көтә ине.Улар өҫтөндә болот хәтлем яуыз серекәйҙәр зырылдап өйөрөлә. Бүреләр, уларҙан ҡотолоу эҙләп, башын шыршы ботағы энәләре, үлән араһына тығып, ҡарай, башын сайҡай.

Көньяҡ убалар яғынан олоу тауышы ишетелде. Олоуҙың һуңғы ноталары "табыш еҫен тоям" тигәнде аңлатып өҙөлөп-өҙөлөп китмәй. Тиҙҙән тайга өҫтөндә йәнә һағышлы олоу тауышы яңғыраны. Кәйефе күтәрелгән өйөр уға "Ишеттек, көт!" тип яуап биреп, төрлөсә өндәр сығарҙы.

Күҙенән бигерәк танауы менән "күреүсе" бүреләр, сылбыр булып теҙелеп, һәр еҫкә иғтибар итә-итә тауыш килгән яҡҡа табан йүгерҙе.Ауып ятҡан ағастар һәм соҡор-саҡырҙар аша еңел генә һикереп йүгергән бүреләр теләһә ниндәй яңы саҡырыуға, туҡталырға йә ҡапыл ташланырға булһынмы, әҙер ине.

Өйөр башында иң мөһабәт кәүҙәле һәм иң көслө бүре – Бабай бара. Уның бүтәндәрҙән айырылып тороуын көслө һырты, киң күкрәге, сал ингән ҡабырға йөнө үк күрһәтә.

Тәүҙәрәк һәүетемсә генә йүгереүсе бүреләр, ит еҫе яҡынлауҙы тойоу менән сабыуға күсте. Урмандың ҡалынлығы улар өсөн ҡамасау түгел, ҡойроҡтары ярҙамында теләһә ниндәй шырлыҡ, кәртәләрҙе еңел үтә алалар.

Ҡаялар һөҙәгендә йоҡомһораған көмөрө танаулы мышы, бүреләр олоуын ишетеү менән һикереп торҙо ла торған урынында тапанырға тотондо. Ҡараңғылыҡта ялтырап киткән күп һанлы осҡондарҙы шәйләп алды һәм алыштан ҡотола алмаясағына төшөндө. Осаһы менән ҡаяға терәлеп баҫты һәм көслө мөгөҙҙәрен һуғышҡа әҙерләп, башын эйҙе.

Тәжрибәле бүреләр мышыны ярым түңәрәк яһап уратып алды. Артабанғы хәрәкәттәр ғәҙәтләнелгән сценарий менән барырға тейеш: өйөр башлығы ҡорбанының боғаҙынан алыу ҡурҡынысы яһап ҡаршыһына баҫа, ә ҡалған бүреләр ҡабырғанан ташлана һәм мышының артҡы аяғының һеңерен сәйнәп өҙә. Әммә йүгереүҙән тотош булмышы ҡыҙып алған һәм ҡан көҫәүҙән тулҡынланған өйөр башлығы хата ебәрҙе: үгеҙҙең өҫтөнә ҡапыл барып ташланды һәм мышы уның күкрәген ярғансы тибеп тә ебәрҙе. Уның ҡарауы ҡабырғанан ташланған бүреләр юғалып ҡалманы, йәшен тиҙлегендә аяҡтан яҙҙырып өлгөрҙө һәм мышы ергә сүгәләп тә төштө. Өйөр башының күптәнге көндәше Ҡыйыу, тегеһенең хатаһынан файҙалана һалып, мышының боғаҙына барып йәбеште, мышы тояҡтары менән тибенеүҙән туҡтағансыға тиклем ысҡындырманы, шунан тау хәтлем йәнлектең арҡаһына үрләп менде. Күҙ ҡырыйы менән генә Бабайға күҙ һалыуы етте, уның инде йәшәрлеге ҡалмағанына төшөндө. Ҡыйыуҙың сәғәте лә һуҡты! Бынан кире өйөр башында ул торасаҡ. Ул ҡиәфәтенә лә шул шатлығын сығарырға онотманы.

Ҡыйыу характерлы, көслө Ҡыйыу Бабайҙы алыштырырға хаҡлы ине. Ул хатта ҡыуалап барған ҡорбаны йүгергәндә, тере килеш итен умырып алғаны бар.Өйөрҙәге нәҫелдәштәрен ойоштороу, буйһондороу һәләте лә юҡ түгел.

Өйөрҙөң яңы хужаһы Бабай индергән ғәҙеллек ҡағиҙәләренә төкөрөп ҡараны. “Нимә теләһәм, шул минеңсә буласаҡ,”- тигән үҙ ихтиярын алға һөрҙө. Өйөргә Ҡыйыуға буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы. Ҡыйыу власынан ләззәт таба, рәхәтлек кисерә ине.

Өйөрҙөң уға буйһоноуының сәбәбе лә юҡ түгел.Ул хужа булған тәүге йылдарҙа өйөр туҡ булды. Үҙәндә боландар етерлек , көн һайын тиерлек береһен боғаҙлар булдылар. Бындай иркенлек Ҡыйыуҙың баһаһын арттыра төштө, ул үҙ тирәһенә ҡуштандарҙы эйәләтте һәм өйөрҙөң эсендә йәнә бер бәләкәй төркөм барлыҡҡа килде.

Власть тойғоһо, өҫтөнлөк ләззәте өйөр башлығын деспот дәрәжәһенә еткерҙе. Ҡорбан артынан телен һәлендереп рядовой бүреләр ҡыуалауын талап итте, ә үҙе һәм эйәрсәндәре ҡорбан ҡолатылып, йылы ҡаны дымланып аға башлаҒас ҡына йәшеренгән урынынан килеп сығыр булды, тәүҙәрәк ҡорбанды йығып һалыусыларҙың ауыҙынан талап алыр булдылар, торараҡ тегеләр табышты йыҡҡас, үҙ ихтияры менән ситкә китеп,ризыҡ янына яҡын

килер өсөн сират еткәнен көтөп ултырырға ғәҙәтләнде. Ҡай саҡта, ҡыуалаған януар еңел генә ауҙарырлыҡ булһа, Ҡыйыу үҙе лә, ярандары ла, тән яҙыу, ҡыҙыҡ өсөн, һунарға ҡушыла.

Тамаҡтары туҡ булғас, бүреләрҙең йөнө ялтырашып китте, ай яҡтыһында көмөш төҫкә инә. Йоморо баш Ҡыйыуҙың етәкселегендәге һәр һунар уңыш ҡаҙана, сөнки уның ысулдары үтә лә аяуһыҙлығы менән айырыла. Бындай ысулдарҙың еңел табыш килтереүенә күнеккән бүреләр, ғәҙәти ҡағиҙәләрҙән баш тартып, Ҡыйыу кеүек аяуһыҙ булыуҙы үҙләштерә башланы.

Варлаамовка ауылының һунарсылары ла йыш ҡына урманда ашап бөтөлмәгән, кимереп кенә ташланған быҙауҙар осрата башланы. Бер көндө бүреләр талап үлтергән айыу балаһын тап иттеләр. Балаһының мәйете янында ҡайғынан башын эйеп хәсрәтләнгән инә айыу ултыра.Башын бер былай, бер тегеләй сайҡай, бисара. Шыңшып ҡуя. Кешеләр күңеленән бүреләрҙе әрләп ҡуйҙы.

Өйөр Үҙәндә үҙен хужаларса тотто, ауыл тирәһенә яҡын килергә лә тартынманылар, йорт боландары, ҡурҡышынан йорттар тирәһенә һыйынырға тырышты.

Ауылдың йорт боландары ауылды уратып алған ҡойма тирәһендә ята ине. Йоҡлап китергә лә өлгөрмәнеләр, араларындағы үгеҙ болан бышҡырырға кереште. Ҡурҡышҡан боландар урындарынан һикерешеп тороп, бер-береһенә һыйыныштылар. Береһе тик торғандан көсөнеп тороп һауаны типкесләй башланы. Боландар ҡараңғылыҡҡа теклəп-теклəп ҡараһалар ҙа һис ниндәй ҡурҡыныс барлығы һиҙелмәне. Шул ваҡытта мөгөҙлө болан үрә һикереп китте һәм ергә ауып үлән өҫтөндә тәгәрләй башланы. Һауаға үлем еҫе таралды.

Һоро мәлғүндәр ян-яҡлап урман эсенән берәм-берәм килеп сығып, былар өҫтөнә ташланды Боландар араһында буталыш китте, берәм-берәм боғаҙланып, тәгәрәшеп киттеләр. Ун минут тирәһе генә ваҡыт эсендә бер генә тере болан да ҡалманы. Эттәр өрөүенән уянып йүгерешеп килеп сыҡҡан ир-ат хайран булды: тотош көтөү ҡыйралып ята.

Иртәнсәген ҡанға буялған үләндәрҙе, һәләк булған боландарҙы күреп ғәм халыҡ аптырашта ҡалды.

- Был бүреләр һынындағы пәрейҙең генә ҡыялҡыһы, уға ауыҙлыҡ кейҙерергә ваҡыт, - тип һөйләнде ауылдың старостаһы.

Колода фамилиялы бер һунарсы бүре өйөрөнөң ҡыланыштарын бөгөнгө хәлгә тиклем үк ентекле күҙәтеп йөрөгәйне һәм уларҙың башлыҡтарының үтә лә йәнһеҙ, аяуһыҙ йыртҡыс булыуына төшөнгәйне. Нәҡ өйөр башлығын аңдып эләктереп юҡ иткәндә, ҡалғандары өсөн

һабаҡ булыр ине, тип уйлағаны ла булды. Ул бүре эҙҙәре буйлап күп йөрөп ҡараны, әммә йоморо башлы хәйләкәр өйөр башы һәр ваҡыт хәүеф килерен алдан һиҙҙе һәм гел берәр ергә боҫоп ҡалыр булды.

Ҡыйыу иһә үҙе лә һунарсыны йыш күҙәтте. Колода был хаҡта белә ине, хатта бер нисә тапҡыр уларҙың ҡараштары осрашты. Әммә һунарсы мылтығын төҙәп маташҡан арала бүре юҡ була ла ҡуя.

Ҡанэскес йыртҡыс өйөрҙөң ҡыланыштары һунарсының һарыуын ҡайнатты һәм ул быларҙан ҡотолоу планын ҡорған төркөмгә ҙур теләк менән барып ҡушылды.

Һунарсылар башта урман араларын ҡыҙырып, бүреләрҙең ҡайһы тирәләрәк йыш булыуы хаҡында мәғлүмәт йыйҙы һәм төрлө урындарға таралышып аңдырға булды.

Колода менән ҡустыһы Матвейға бер яғында япраҡлы ағастар, икенсе ярында кедр ағастары үҫкән шишмә тирәһе эләкте. Улар кедр энәләре менән ыуынып, ҡыуаҡлыҡ араһына барып ултырҙы.Баш осонан ғына өкө осоп үтте, боландар һыулауға төштө, тауыш сығарып мышнай-мышнай бурһыҡ тауға үрләп бара.Бүреләрҙең эҙе лә юҡ. Ә улар ошо тирәлә генә бит ул, засадаларҙы урап үтеп, урман ҡыҙыралар.

Төн урталарында Колода үҙенә кемдеңдер текләп тороуын һиҙгәндәй булды, әммә ҡараңғылыҡ эсенән уны күҙәткән Ҡыйыуҙың үҙен барыбер күрә алманы.Бүре уны байтаҡтан бирле эҙәрлекләгән һунарсыға текләп торҙо-торҙо ла өйөрөн тау араларына эйәртеп алып китте.

Артабанғы аңдыуҙар ҙа һөҙөмтә бирмәне.Үҙатҡыстар ҡороп ҡаранылар. Уныһы бер бүрене генә үтәләй тишеп ауҙарған. Дөрөҫөрәге, ул уҡ ҡаҙалғас, тәүҙә байтаҡ ара йүгереп барған әле, теше менән уҡты тартып сығарырға маташҡан. Уның кәүҙәһен һунарсылар ҡарғалар ҡарҡылдаған тауыштан барып тапты. Тиреһен тунап торманылар, килеп тороп һаҫыҡ еҫ килә.

- Яңы ғына боғаҙлаған ит ашап йәшәйҙәр, ә еҫтәре һаҫыҡ, - тип аптыраны Матвей.

- Иблис ярандары бит! Шуға ла һаҫыҡ,- тип аңлатты ҡартыраҡ һунарсыларҙың береһе.

Бер бүреләренең һәләкәтенән һуң өйөр, һыуға батҡан кеүек, юҡ булды. Уларҙы онота башлаған ауыл кешеләре бер нисә айҙан йәнә ҡурҡыныс күренешкә хайран ҡалды. Әллә нисәмә боланды йығып киткәндәр, ҡайһы берҙәрен ҡабып та ҡарамағандар. Һунарсылар йәнә ҡамауға сыҡты һәм йәнә уңышҡа өлгәшә алманы.Ҡыйыу алдағыларынан һабаҡ алғайны инде, ниндәйҙер йыртҡыслыҡ аңы менән ҡамауҙарҙы урап үтә лә китә.

Башының йоморо икәнлеге көтөлмәгән, уйламаған ерҙә асыҡлана торҙо. Ул, мәҫәлән, бүреләргә ҡаҙалырға яратҡан урман бөрсәләренән ҡотолоу юлын уйлап тапты.

Бер заман йылға аша йөҙөп сығып барһа, теге йөҙәрләгән ҡанэскес хәшәрәттәрҙең һыуҙан ҡасып танауы янына йыйылғанын шәйләне. Ҡыйыу ярға сыҡты ла тешенә ағас ботағы тешләп һыуға кире инде, бөрсәләрҙең ағас ҡайырыһына күсенешеүен көтөп кенә барҙы ла, ағасты тешенән ысҡындырҙы ла ебәрҙе...

Ҡыш көнө бүреләр боландарҙы эҙләп, тирә яҡтағы тау араларын ҡыҙырып сыҡты, һис эҙҙәренә төшә алманылар, осратҡанда тегеләре сослоҡ менән быларҙы абайлап алалар ҙа, елдереп ҡасалар ҙа китәләр. Аяҡтары оҙон, ҡарҙан йүгереү улар өсөн бер ни түгел. Яҙғы ҡаты ҡар булһа бүреләр ҙә шәп йүгерер ине лә.

Ҡыйыуҙың эске инстинкты йәнә бер асышҡа этәрҙе. Боландар бүреләрҙе еҫенән танып, ҡасып ҡотола икән. Шуға ла ул һунар алдынан оҙаҡ итеп ҡарҙа борҫаланып таҙарыныр, шунан боландар ярау иткән ерҙә аунап алыр булды. Унан күрмәксе өйөрҙөң бүтән ағзалары ла шулай итте һәм был ябай процедура уларға боландар янына яҡын барып аңдыу мөмөкинлеген бирҙе.Шул рәүешле яңыраҡ бер йәш, бер ҡарт боланды ауҙарып һыйландылар һәм ял итергә яттылар. Нәк шул ваҡыт өйөр янына һунарсылар яҡынланы. Тамағы туҡ бүреләрҙең ҡасыу тиҙлеге бик шәп түгел ине, шунан файҙаланып, Колода берәүһен атып та йыҡты, ҡалғандары ҡоҫоп, ҡорһаҡтарын бушата башланы һәм артабан еңел һәм шәп йүгереүгә күсте. Колода йәнә атып ебәрҙе һәм пуля барып тейгән йыртҡыс кирегә боролдо, тештәрен ыржайтып уларҙы эҙәрлекләүселәрҙең ҡаршыһына килә башланы.Ҡалғандары артабан йүгерҙе һәм тау мәмерйәһенә барып тулды. Ә ул мәмерйәгә кешеләр аяҡ баҫмай, ен ояһы шунда, тип ышана.

Өйөрҙөң холоҡ-фиғелен ныҡлап өйрәнеп алған Колода уларҙың башлығының ысынлап та ен ботағы икәнлегенә инана барҙы.Раббы бар ҡылмағандыр, ул булһа был йыртҡысҡа ғәмһеҙлек, ошондай ҙа яуыҙлыҡ һәм таҫыллыҡ бүләк итеп тормаҫ ине.

Ҡыйыу ҙа тик йөрөмәй ул.Ул да Колоданың ниндәй һунарсы булыуын яҡшы белә. Асылда Ҡыйыу күҙенә текләгән кеше лә, йәнлек тә уның ҡарашын күтәрә алмай, ә был! Был ҡурҡмай,күҙенән осҡондар һибелеп киткәндәй.Ҡыйыуҙың асыуын ҡабарта һунарсының ҡыйыулығы, шул уҡ ваҡытта уның менән осрашҡыһы , көс һынашҡыһы килеү теләге лә юҡ түгел.

Туранан-тура алышҡа тәүәкәллеге етеп үк бөтмәгән Ҡыйыу, үҙенең унан өҫтөнөрәк икәнлеген танытыу маҡсатынан, Колоданың ҡулға эйәләштерелгән дуҫы- һеләүһененең башына етергә ҡарар итте.Колода

яралы һеләүһенде бала ғына сағында урмандан табып өйөнә алып ҡайтҡайны.Хәҙер ул үҫте һәм Һунарсының тоғро дуҫына әүерелде. Бүреләр Һунарсының был йылғыр бесәйенә күптән теш ҡайрай.Тик эләктерә генә алмай, сөнки һеләүһен урманға китеп , шунда төнәргә ҡалған сағында ла ағас башына менеп ятып йоҡлай.Ныҡ һиҙгер. Әммә ҡулайлы ваҡыт килеп сыҡты.

Аҙымдарының үҙгәреүенә ҡарап, бүреләр Уҫалдың (Колода һеләүһененә шундай исем ҡушҡайны) яралы икәнлегенә төшөндө.Шулай булып сыҡты ла.Тау һөҙәгендә осраны, сатанлап атлай.Бынан файҙаланмау йүләрлек булыр ине, өйөр башы менән уның яҡын ярандары һеләүһенде ҡыуаларға төштө. Уҫал тау һыртына табан йүгерҙе. Ауырлыҡ менән йүгерә, хатта эләгеп тәгәрәп тә китте.Баҫтырып килеүселәр уны эләктереп алырҙарына шикләнмәне, тиҙлеген арттыра бирҙе, ә бесәй һикереп торҙо ла тар ғына тау ярығына йомолдо. Ә ул тирәлә ҡулына күҫәк тотҡан Колода засадала тора ине.Тауҙың сигенән упҡын башлана. Колода һеләүһенен үткәреп ебәрҙе лә боролоштан килеп сыҡҡан бүреләрҙе күҫәге менән берәм-берәм упҡынға һуҡты ла төшөрҙө.

Һунарсының планы һеләүһен дуҫы арҡаһында тормошҡа ашты. Дуҫына ярҙам итә алыуына ғорурланған һеләүһен Колода янына килеп һырпаланырға тотондо. Ә упҡын соҡоронда таштарға бәрелеп ҡанға туҙышҡан бүреләр ята ине. Әммә был тарихтың иң ғәжәп яғы шунда ине: Ҡыйыу, ниндәйҙер эске һиҙемләүе менән хәүеф барлығын самалап, тау аҫтында тороп ҡалғайны.Шатлыҡтан балҡып торған Колоданы, иҫән-имен һеләүһендең тауҙан төшөүен ул күҙәтеп торҙо, улар алыҫлашҡас, үргә үрләп, упҡын төбөнә күҙ һалды. Тоғро ярандары ҡан эсендә ята.

Ярандарынан яҙыу Ҡыйыуҙы тетрәндерҙе. Ялан ситендә ял итеп ятҡан өйөрө янына ул икенсе көнөндә генә әйләнеп килде. Бүреләр төрлөһө-төрлө ҡиәфәткә инеп, йоҡлап ята.Ҡыйыу килеп еткәс, ҡайһы берҙәре ғәҙәттәренсә һикереп тора һалды, әммә ҡараштарында ҡәҙимге тоғролоҡ юҡ кеүек күренде Ҡыйыуға. Бәғзеләре хатта шелтәләп текләгән кеүек. Ул юҡлыҡтан файҙаланып, өйөр эсендәге власты Киң Маңлайлы бүре ҡулына алғайны инде. Ҡыйыуҙың янында ярандары ла юҡлыҡты күргән яңы башлыҡ ҡыйыуланып китте.

- Алышабыҙмы? Мин әҙер?- тигәнде аңлата ине Киң Маңлайҙың ҡиәфәте.

Ҡыйыу был самозванецты урынына ултыртырға тейешлеген аңлай.Әммә һуңғы йылдарҙағы байрамса йәшәүе, һунар сәмен, йылғырлығын, көс-ҡеүәтенән яҙҙырғайны инде.Әммә власты көрәшһеҙ тапшырғыһы килмәне.

Башын эйеберәк ҡырын һалып алған Киң Маңлай башлыҡтың һәр хәрәкәтен күҙҙән ысҡындырмай күҙәтте.Ауыҙын ярым асып алыуы ла уның еңелергә йыйынмауы хаҡында һөйләй.Ҡаны ҡыҙған Ҡыйыу уның өҫтөнә ташланды. Көрәшселәр тештәрен ыржайтып бер-береһенең ҡаршыһына баҫты.Өйөр иғтибар менән быларҙы күҙәтә.

Ап-аҡ аҙау тештәрен күрһәттеләр, елкә йөндәре үрә торҙо, танауҙары гармошка кеүек йыйырылды, ҡурҡыныс итеп олоп күрһәттеләр, әммә әлегә икеһенең береһе лә урынынан ҡуҙғалманы. Киң Маңлай артҡараҡ тайшанды һәм Ҡыйыу уның өҫтөнә ырғып та өлгөрҙө.Шуны ғына көткән Киң Маңлай уңғараҡ тартылды ла көслө тәпәйҙәре менән Ҡыйыуҙы һуғып йыҡты, ажарланып өҫтөнә менеп ултырҙы һәм йән асыуы менән елкәһенә ҡаҙалып һелкетергә тотондо.

Ҡыйыу ысҡынып китте һәм башы менән ҡайын ағасына барып бәрелде лә ҡапыл шырлыҡ эсенә һикерҙе, шунан ҡаса башланы. Быға тиклем уның бер ҡасан да шул ҡәҙәрлем кәмһетелгәне булмағайны.

Өйөрҙөң урман өҫтөнә йәйелгән еҫе күптән инде артта ҡалды, ә Ҡыйыу йүгерҙе лә йүгерҙе. Ауыҙы ҡарайып күренгән мәмерйә янына барып етте.Был Үҙәндең сиге, бында бер ваҡытта ла кеше аяғы баҫҡаны юҡ.

Тора-бара Ҡыйыу өйөрҙән ҡыуылыу ғәрлегенә күнде һәм яңғыҙы, бирюк булып йәшәп китергә мәжбүр булды. Ҡайһы саҡта күңелен түҙеп торғоһоҙ һағыш биләне, әммә ул хәсрәтен тышҡа сығарып олоуҙан да тыйылды.Бындай саҡтарҙа һуҙылып ята ла моронон муккә терәп шыңшый.

Шулай бер саҡ Үҙән буйлап боландар эҙәрлекләгән бүре өйөрө Ҡыйыуҙы тап итте.Бүреләр уға иғтибар ҙа итмәгәнгә һалышты. Хатта элекке әхирәте лә моронон бороп үтеп киткән булды.Ҡыйыу ғәрлегенән тештәрен шығырлатырға тотондо һәм бер тешенең эмале аҡтарылып төштө.Ғүмере буйы өҫтөнлөккә йөҙ тотҡан бүре өсөн бындай һалҡынлыҡ эс бошорғос хәсрәт ине. Әммә ни ҡылһын, түҙергә кәрәк.Бабайҙың әхирәте иҫенә төштө. Ул бит хужаһынан бер тотам ҡалмай торғайны, Бабай һәләк булғас та тәпәйе менән ҡосаҡлап оҙаҡ ҡына янында ятты.

Тыҫыллығын юғалтҡан Ҡыйыу ваҡ-төйәк менән туҡланырға мәжбүр булды. Хәбәр тоҡсайы ҡарғаның тауышына ҡолаҡ һалырға әүәҫләнде, ул һәр ваҡыт ҡалдыҡ-боҫтоҡ ризыҡ ятҡан тирәнең ҡайҙалығын аңдып ҡына йөрөй ҙә урман тултырып яр һала.Ҡыйыу ана шул ҡалдыҡ-боҫтоҡҡа ла риза ине хәҙер.

Бер ваҡыт еҫләнгән ит һоғоноп саҡ үлмәй ҡалды. Рәткә ингәс, үләкһә тирәһенә яҡын да юламаҫ булды, шунда уҡ уҡшыта башлай.Ғәйрәте самалы булыу сәбәпле йәнлекте сәғәттәр, хатта

тәүлектәр буйы ҡарауылларға өйрәнде. Табышының артынан йөрөй ҙә йөрөй,ял итергә лә, тамағын туйҙырырға ла бирмәй, тегеһе тамам хәлдән тайғас ҡына бөтөнләй яҡын бара, ҡорбаны ҡурҡышынан һәм арыуҙан ҡыбырлай ҙа алмаҫлыҡ хәлгә килә.Ә Ҡыйыуға шул ғына кәрәк тә инде, ҡорбанына ташлана һала.

Йәй көнө ул ярайһы нығынып алды һәм ҡыш яҡынлашып килгән осорҙа һис кенә лә ас йөрөмәне тиерлек.

Ҡыйыу урман араһында серем итә ине. Ҡолағына ҡырсын шығырлаған, һыу сайпылған тауыштар сағылып китте.Башын күтәрһә, быуаҙ болан йылға аша сығып бара.Ҡыйыу дәртләнеп китте.Хәҙер дым күтәрелгән болан итен һоғонасаҡ.

Инә болан йылға аша сығып, яр буйында өҫтөндәге һыуҙы ағыҙыр өсөн туҡтап ҡалғас та бүре уның өҫтөнә һикерҙе һәм елкәһенә тештәрен батырып та өлгөрҙө. Көтөлмәгән хәлдән шаҡ ҡатҡан һыйыр, эсендәге ҡәҙерле йән эйәһен яҡлау маҡсатынан, ергә ауып китте һәм бүре ҡаҙалған арҡаһында аунарға кереште. Бүре уның аҫтынан саҡ һурылып сығып, йылға яғына шыуышты. Ә тетрәнеү кисергән һыйыр урман яғына ыңғайланы.

...Кешеләрҙе үләндәр менән дауалаусы атаһы Колоданан кәрәкле үләндәр йыйып килтереүен һорағайны.Ул тамырҙарын имгәтмәй генә үләндәр йыя башланы. Ҡапыл таныш ҡарашҡа барып юлыҡҡандай булды. Ҡыйыумы әллә? Ул аяғүрә баҫты һәм йылға ярының аҫтына күҙ төбәне.Йөнө ойошҡан, күрмәлекһеҙ генә бүрегә күҙе төштө. Һыңар күҙе йомоҡ. Ә береһе уның Ҡыйыуҙыҡы икәнен һөйләп тора.

- Бына был осрашыу! Һин әле тере икәнһең дә!- тип ҡысҡырып ебәрҙе Колода.

Кеше тауышы бүрене ҡурҡыуға һалды, ҡолаҡтарын ялына ҡыҫты һәм башы менән ҡырсын эсенә инеп китергә маташты.Ҡарашында ҡурҡыу,сараһыҙлыҡ, хәсрәт һыҙаттары сағылды. Тештәрен ыржайтырлыҡ та көсө ҡалмағайны.Күҙҙәре йәшкәҙәне. Әллә үҙен йәлләй, әллә данлыҡһыҙ үлемен аңлауҙан иламһырай ине бүре.

Һунарсы уға йәлләп ҡарап торҙо. Ҡыйыу уға текләүҙән туҡтап, ҡарашын йәшерҙе. Улар бер-береһен яҡшы аңланы. Колодаың ҡарашындағы йәлләү тойғоһон кинәнес, үс алыу тантанаһы алыштырҙы. Ҡыйыу быны ла шәйләмәй ҡалманы һәм һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә шыңшып ебәрҙе.

- Илама-илама! Ҡылған яуызлыҡтарыңдың язаһы был! – Колода ярҙан һикереп төштө лә Ҡыйыуҙың эргәһенә табан китте. Тегеһе йомарланды, ҡойроғон болғап алды.

- Ҡурҡма, - тип тыйҙы уны Колода. – Йығылғанды түпәләй торған ғәҙәтем юҡ.

Колода бүрегә яҡын уҡ килеп , уға табан эйелде.Ҡарашы быяла кеүек. Йән биргән.

Атаһы ҡушҡан үләндәрҙе йыйып бөткәс, Колода ауылына ҡайтты һәм атаһына теге аяуһыҙ өйөр башлығының үлеп ятыуы хаҡында һөйләне.

- Кешеләрҙең яҙмышы ла шундай, - тип ҡуйҙы атаһы. – Ҡылғандары өсөн ҡасан да булһа яуап тотасаҡ.

Руссанан башҡортсаға **Тамара Ғәниева**

тәржемәһе.